# Ағиҙел

Өфө,
июнь
2013

6(1082)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***,

Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева,Тәнзилә Сәлихова (корректорҙар),
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.06. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 230 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0077.13.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2013 (6,1082)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ


**Рәмил Йәнбәк.** Төнгө уйҙар. Шиғырҙар. ....................................5
**Зөфәр Вәлит.** Йәнгә өндәшеү. Шиғырҙар. ................................14
**Ҡаһим Әүхәтов.** Ошо ерҙән донъя башлана. Шиғырҙар. ..........21


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР


**Мансаф Ғиләжев.** Ҡәнзәфәр таштары. Роман. Аҙағы. ..................27
**Рәйсә Кәримова.** Етем. Хикәйә. ...............................................133


БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ


**Әхмәт Мәхмүтов.** Тәүге роман авторы
*(Ғәйнан Хәйриҙең тыуыуына – 110 йыл).* .......................................143
**Зәки Әлибаев.**Тыуған ергә тоғролоҡ
*(Ғаян Лоҡмановтың тыуыуына – 90 йыл)* ..................................144
**Ғаян Лоҡманов.** Шатлыҡ. Хикәйә. ............................................146
**Фәниә Чанышева.** Бергә йәшәлгән йылдар...
*(Ғилемдар Рамазановтың тыуыуына – 90 йыл)* ............................148


ЗАМАН ҮӘ ЗАМАНДАШТАР


**Хәлил Барлыбаев.** Яҙмыш – һикәлтәле юл. Башы. .......................157
**Миләүшә Ҡолмөхәмәтова.** Китапҡа бағышланған ғүмер. ..........173


ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Рамиль Янбек, Зуфар Валит, К. Аухатов.** *Стихи.*

ПРОЗА

**М. Гилязев.** Камни Канзафара. *Роман. Окончание.*

**Р. Каримова.** Сирота. *Рассказ.*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**А. Махмутов.** Автор первого башкирского романа *(110 лет со дня рождения Гайнана Хайри).*

**З. Алибаев.** Верность родной земле *(90 лет со дня рождения Г. Лукманова).*

**Г. Лукманов.** *Ликование.* Рассказ с поля боя.

**Ф. Чанышева.** Годы, прожитые совместно *(90 лет со дня рождения Г. Рамазанова).*

СОВРЕМЕННОСТЬ И СОВРЕМЕННИКИ

**Х. Барлыбаев.** По ухабистым дорогам. Начало.

**М. Кульмухаметова.** Жизнь, посвященная книге.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Рәмил
ЙӘНБӘК

## Төнгө уйҙар

*Төнгө уйҙар көндөҙ юҡҡа сыға,
Уйҙар ғазапламай яҡтырғас.
Көндөҙ йәнем буп-буш.
Тәнем генә
Көн итергә мине саҡыра.*

*Яңғыҙ булыу хәҙер борсолдормай,
Һис берәүҙе көтмәй йөрәгем.
Тормош, хәйер, миңә мохтаж түгел,
Берәйһенә бармы кәрәгем?*

*Төндәр тағы хафаларға һалыр,
Яҡты көндәр әйҙәр тормошҡа —
Әммә мине түгел.
Ғүмер юрап,
Моңланмасы, кәкүк, юҡ-бушҡа.*

*Һис үҙгәрмәҫ донъя мин юҡлыҡтан,
Уның өсөн мин — бер саң-туҙан.
Ерҙе ябып, ҡараңғылыҡ төшә,
Ни арала яҡты көн уҙған...*

---

*Рәмил Йәнбәк (1952) Күгәрсен районының Дауыт-Ҡайып ауылынан. БДУ-ны тамамлағандан һуң республика матбуғатында эшләне, әле — «Ағиҙел» журналының баш мөхәррир урынбаҫары. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, тиҫтәгә яҡын шиғри йыйынтыҡ авторы.*

## *Мөъжизәле өмөт*

*Мөъжизәләр булмай был тормошта —*
*Ошо аксиома хәтерҙә.*
*Ә шулай ҙа осмот ҡына өмөт*
*Ымһындырып ҡуя хәҙер ҙә.*

*Барҙыр һымаҡ мөъжизәле донъя:*
*Һәммә халыҡ унда бәхетле;*
*Мал бцлмәйҙәр, ер-һыу яуламайҙар,*
*Өҫтөн кцреп ҡанлы тәхетте.*

*Йә, исмаһам, яңъыҙ бер утрауҙа*
*Юҡмы икән тип-тиң кешеләр?*
*Әгәр булһа, ҡабул итмәҫтәрме —*
*Аҙ тцгел бит беҙҙең ишеләр?!*

*Аҙ тцгел бит ерҙә, беҙҙең ише,*
*Кцҙе тонмаъандар алтынъа.*
*Тылсым тыуыр ине, ул кешеләр*
*Бер-беренә ҡабат тартылһа.*

*Беләм, былар яңы хыял тцгел,*
*Был һуҡмаҡ та кцптән ташланъан.*
*Әммә ерҙә усаҡ — тәуоҫкандан,*
*Тормош тәцхыялдан башланъан.*

## *Ватан-әсә*

*Аҡ биләцҙәргә биләгәс*
*Ҡәҙерле әсәм минең,*
*Бәхет теләргә улына*
*Әллә онотҡан, тимен.*

*Юҡ, әсәм онотмаъандыр,*
*Алланан һораъандыр.*
*Ник, улайһа, бәхетем юҡ —*
*Шайтан оронмаъандыр?*

*Ватан-әсә, тип һөйләйбеҙ,*
*Эйе, ул беҙгә ъәзиз.*
*Беҙҙе бәхетле итергә*
*Ҡамасау ниндәй хәсис?*

*Йә, Хоҙайым, ъәфц ҡылсы*
*Гонаһлы мин-бәндәңде:*
*Илгә сараһыҙ һцҙ аттым,*
*Телгә алдым әсәмде.*

*Балаларыңды, илгенәм,*
*Бөтәһен тиң, ишең ит.*
*Беҙ һине изге әсәбеҙ*
*Күреп һөйөр кеше бит.*

## Ҡисер мине

*Ҡисер мине, йәштән һөйгән*
*Һәм ҡауышалмаҫ йәрем:*
*Нисә йылдар ашаһынан*
*Һаман тынысһыҙ йәнем.*

*Һаман йөрәгем лепелдәй,*
*Төштә һине күрһәм дә;*
*Үткәндәргә һәм йәшлеккә*
*Юл юҡлығын белһәм дә.*

*Юл юҡлығы йөрәгеңә*
*Һаман әрнетә мине.*
*Иҫке яраны ҡабатлап*
*Ник ҡуҙғатырға инде.*

*Хәйер, яра тик минеке,*
*Һинең яраң — бүтәндән.*
*Беҙ икебеҙ ҙә яралы*
*Һәм һағышлы — үткәндән.*

*Ҡисер мине, мәңге һөйөр*
*Һәм онотолмаҫ йәрем:*
*Яраларҙы ямар өсөн*
*Нишләп һуң көрәшмәнем?!*

*Көрәшмәнек: мин дә, һин дә,*
*Ә көрәш кәрәк ине.*
*Ҙур мөхәббәт өҫтөн итә*
*Һөйгәнде,*
*Көрәшкәнде.*

***

*Мыйығыма салдар төштө,*
*Сәсемә төшмәһә лә.*
*Ғүмер емешем өлгөрҙө,*
*Алланып бешмәһә лә.*

*Гел ҡояшлы булманы көн*
*Яҙмышым теҙмәһендә.*
*Боҙло ямғыр, үтлы йәшен*
*Мөхәббәт көмбәҙендә*

*Күп туңдырҙы, күп яндырҙы,*
*Батырҙы даръяһына.*
*Һөйөү карабым һуъылды*
*Был ярҙан ар ярына.*

*Ҡышҡы селлә боҙъа төрҙө,*
*Йәйгеһе, һай, сарсатты.*
*Ҡыуанысы, ъазаптары*
*Алмаш-тилмәш ҡаҡшатты.*

*Ғүмер емешем — аъаста,*
*Алланып бешмәһә лә.*
*Мыйыъымды салдар баҫты,*
*Сәскә бик төшмәһә лә.*

*Алланып бешмәһә лә,*
*Хәҙергә*
*Өҙөлөп төшмәһә лә.*

## Заманам менән хушлашыу

*Яңы быуат,*
*Миңә генә түгел,*
*Күсенәбеҙ яңы осоръа.*
*Ҡотолъоһоҙ хәлдән юҡ ҡотолоу*
*Һәм мөмкин дә түгел ҡасыръа.*

*Электронлы һәм*
*Атомлы заман...*
*Компьютерҙар...*
*Осоу йыһанъа.*
*Ғәжәп булмаҫ, бер саҡ Ҡояшта ла*
*Башланһалар фәнни һынауҙар.*

*Интернет — ул заман мөъжизәһе,*
*Бәйләй кешеләрҙе, аңдарҙы.*
*Кеше оҙаҡламай телдән генә*
*Ҡуша белмәҫ һанъа һандарҙы.*

*Барыһы ла дөрөҫ,*
*Һәммәһе хаҡ.*
*Минең генә күңел хафала:*
*Асыш, яңылыҡтар артҡан һайын,*
*Һаман иҫтән сыҡмаҫ,*
*төшкә инеп,*
*Үҙ заманым мине яфалар.*

*Һәм әрнетер мине уҙғандарым:*
*Бала саҡта менгән һорҡа атым,*
*Һис сығармай ситкә яманатын,*
*Саған саңғыларҙа шыуғандарым.*

*Еҙнәләрҙән бәке алған сағым,*
*Еңгә ҡулъяулығын һалған сағым,*
*Тиҫтеремә кеҙем төшкәндәре,*
*Йөрәгемдең леп-леп типкәндәре*
*Шулай уҡ та ҡалыр микән иҫке булып,*
*Тарихтағы ямаулыҡтан киҫке булып?..*

*Көйәнтәләп һыуға бармаҫ ҡыҙҙар,*
*Ат эсермәҫ был саҡ егеттәр.*
*Ҡапҡа һаҡлап, көтөп ымлы ҡараш*
*Интекмәҫтәр беҙҙең кеүек тә.*

*Яҙып хаттар, биреп изге анттар*
*Оҙатмаҫтыр ҡыҙҙар әрмегә.*
*Бер йыл нимә?*
*Бер йыл был дәүерҙә*
*Әҙҙәрҙән дә, хатта, әҙ генә.*

*Бөтәһе лә бик йәл.*
*Бик йәл миңә*
*Айға ҡарап һөйләү сереңде,*
*Бесән сабып хәлһеҙ йығылғанда*
*Тын алышын тыңлау ереңдең.*

*Йәш быуындар беҙҙең кеүек булмаҫ:*
*Көнләшмәҫтәр иҫкән елдәрҙән.*
*Һәр хәбәрҙе компьютерға теркәп,*
*Беҙҙәрҙе*
*Тинтәккә*
*Тиңләрҙәр.*

*Хуш, заманым!*
*Йөрәк, һандырама.*
*Беҙ кҫәбеҙ артҡа,*
*Тарихҡа.*
*Хужа Дәүер, ниҙәр кисерһәң дә,*
*Үткәндәрҙе һанла.*
*Ҡаныҡма.*

## Яҙмышыма яҙғаны

*Яҙмышыма минең һис үпкәм юҡ,*
*Күрһәтте ул төрлө-төрлөһөн.*
*Ҡай саҡында яҡшы көйө — насар,*
*Насар көйө яҡшы йөрөнөм.*

*Йомарт булды зарға, һағыштарға,*
*Мыҫҡал ғына һондо шатлыҡты.*
*Байтаҡ көнөм сыҡты ҡыҫыр булып,*
*Хыялдарым ташҡа ҡаҡлыҡты.*

*Яҙмыш күктәрҙә бит яҙыла, тиҙәр,*
*Ник уныңса ғына барманым?*
*Шуға микән бәхет һирәк тейҙе,*
*Оло һөйөү миңә яҙманы.*

*Ҡараштарҙан һөйөү эҙләмәйем,*
*Төңөлгәнмен шуға өмөттән.*
*Күкрәктәге йөрәк-былбылым да,*
*Моңло-зарлы һайрап,*
*Өҙлөккән.*

*Һис үпкәм юҡ шуға яҙмышыма:*
*Ул йөрөтә микән?*
*Мин яҙам?!*
*Ә шулай ҙа иртә һайын үҙем*
*Үткәндәрҙе уйлап уянам.*

## Донъя үҙгәрҙе...

*Әүәл бүтәнсәрәк ине*
*Бынау донъя тигәне.*
*Ул бит шаулап, гөрләп торҙо —*
*Көн дә, төн дә тимәне.*

*Ҡатын, ай-һай, ҡырҡыу ине,*
*Көн аралаш тиргәне:*
*Йә аҡсаны аҙ апҡайттым,*
*Йә йоҡларға бирмәнем.*

*Дуҫ-иштәрҙән, туғандарҙан*
*Ишегем ябылманы:*
*Йомош-фәләне булғандар*
*Һәм ысын һағынғаны.*

*Дошмандар булды суртандай:*
*Йоҡларға бирмәнеләр,*
*Мыҫҡыл менән, кенә менән*
*Йәнемде игәнеләр.*

*Ай, сибәр ине ҡыҙ-ҡырҡын:*
*Күҙләмәй ҵалманым,*
*Үтә иртә өйләнгәнде*
*Аҙым һайын аңланым.*

*Һыра-фәлән, ҡатыраҕы —*
*Сирҙәргә дауа ине.*
*Хәҙер баҫымды күтәрә —*
*Донъяны аңла инде.*

*Ярай әле, еңгәгеҙ, тим,*
*Холоҡҡа бик ипләнде.*
*Икебеҙҙең пенсияны*
*Еткерергә өйрәнде.*

*Ғәмһеҙләнде хәҙер дуҫ-иш,*
*Ә дошман йыуашайҙы.*
*Күҙҙәрендә нур булмаған*
*Ҡатын-ҡыҙҙар йышайҙы.*

*Ошолайтып көңгөр-ҡаңғыр,*
*Шөкөр, йәшәп ятабыҙ.*
*Йөрәктәр йәп-йәш көйөнә*
*Етмеште ваҡлатабыҙ.*

## ***Аҡыл ултырғанда***

*— Ҡырҡ йәш тулғас аҡыл ултырасаҡ*
*Шап иттереп, үҙең һиҙерһең, —*
*Тигән инем тормош юлдашыма, —*
*Аҡылымдан хатта биҙерһең.*

*Ҡырҡ биштә лә ултырманы аҡыл,*
*Ҡатын миңә ҡулын һелтәне.*
*Белмәй ине:*
*Тап иллелә миңә*
*Аҡыл килер саҡтың етәрен.*

*Алты тиҫтәм тулыр-тулмаҫ саҡта*
*Ҡыҙған баштан уны йыуаттым:*
*— Бөгөн төндә аҡыл шап иттереп*
*Ултырасаҡ, — тиеп шымарттым.*

— Шағирҙар һуң аҡыл аламы ни,
Улар үҙе аҡыл тарата, —
Тиеп хәҙер минең хәләл ефет
Дуҫ-иштәрҙе юрый алдата.

Төшөнмәйем һаман:
Был донъяла
Аҡыл ысынлап та кәрәкме?
Йәшәй бирәм,
Бешеләнә барам
Тыңлап бары, тыңлап
Йөрәкте.

## Бағыныу

Шом-хафанан йөрәк өңөлгәндә,
Йәшәүҙәрҙән тамам төңөлгәндә,
Тылсым тапҡым килә,
Шундай тылсым:
Ҡабат ялҡын ҡапһын күңелдәргә.
Йәшәүҙәрҙән тамам төңөлгәндә.

Зар-интизар килеп яҙмыштарҙан,
Ғажиз булып яңы яңылыштарҙан
Шыңшығанда эттәй,
Тылсым тапһам:
Араларлыҡ һары һағыштарҙан
Һәм һаҡларлыҡ яңы яңылыштарҙан.

Һыҙлағанда үҫке йәрәхәттәр,
Тәҡдиреңдән көтмәй мәрхәмәттәр,
Йолоп ҡалыр тылсым бирәү генә:
Йәшәү көсө — бары мөхәббәттә,
Бағынамын бары мөхәббәткә.

## Беҙ күрмәмеш булайыҡ

Йәш ҡыҙ менән йәп-йәш егет —
Әллә тәү күрешәләр —
Урам уртаһында тороп
Суп та суп үбешәләр.
Беҙ күрмәмеш булайыҡ,
Күҙҙе йомоп уҙайыҡ.

Ҡырын тейәп алған ир-ат
Кемдән үсен ҡандыра:
Һәр берәүҙе, ҡатлап-ҡатлап,
Олоһонан һалдыра.

*Беҙ кұрмәмеш булайыҡ,*
*Кұҙҙе йомоп уҙайыҡ.*

*Мәктәп ҡоймаһы буйынан*
*Бөркөлөп сыға төтөн.*
*Бала-саға төтәтеүсен*
*Ҡарап тороуы ситен.*
*Беҙ кұрмәмеш булайыҡ,*
*Кұҙҙе йомоп уҙайыҡ.*

*Ҡап-ҡара анау бәндәләр*
*Бер егеткә бәйләнә.*
*Ниңә икән килмешәктәр*
*Хужаларға әйләнә?*
*Беҙ кұрмәмеш булайыҡ,*
*Кұҙҙе йомоп уҙайыҡ.*

*Көндән-көн киләт бұҫкәрә,*
*Үҙәккә кұсә байлыҡ.*
*Элеккесә, ғәмһеҙ генә*
*Тибеҙ: байлыҡ — бер айлыҡ.*
*Беҙ кұрмәмеш булабыҙ,*
*Кұҙҙе йомоп торабыҙ.*

*Урмандар ауа аяуһыҙ,*
*Ауыл, эх, шиңә бара.*
*Ауылһыҙ — халыҡ тамырһыҙ:*
*Бик йыраҡ тұгел ара.*
*Беҙ кұрмәмеш булабыҙ,*
*Һаман өнһөҙ торабыҙ.*

*Сөсө һөйләп, әсе көлөп*
*Сәйәсәт ұткәрәләр:*
*Иң изгеһе — телебеҙгә*
*Балта бит кұтәрәләр.*
*Кұрмәмеш булайыҡмы,*
*Һаман тик торайыҡмы?*

*Алып-йолҡоп талаусылар*
*Хөрмәт ҡаҙана хәҙер.*
*Һәр береһе алтын өсөн*
*Илен һатырға әҙер.*
*Кұрмәмеш булайыҡмы,*
*Ҡол булып ҡуяйыҡмы?!*



**Зөфәр**
**ВӘЛИТ**

## *Йәнгә өндәшеү*

*Йәнем, беләм бер саҡ минең*
*Тәнем һинһеҙ үлерен.*
*Беләһеңме икән ҡасан*
*Уға әжәл килерен?*

*Беләһеңдер, тимен, сөнки*
*Һине «үлемһеҙ» тиҙәр.*
*Шулай булмаһа, ҡайҙарҙан*
*Тыуа үлемһеҙ көйҙәр?*

*Бәйләнешең барҙыр һинең*
*Бөйөк Аҡыл-Аң менән.*
*Юғиһә мин төнөн үлеп,*
*Тыумаҫ инем таң менән?*

*Өндәшмәйһең. Беҙ — бер йәндер*
*Бурандарҙы һайратҡан,*
*Тимәк, беҙҙе Илаһи көс*
*Ҡамил итеп яратҡан.*

*Зөфәр Вәлит (1949) Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуған. Мораҡ ауыл хужалығы училищеһын, Өфө урман хужалығы техникумын тамамлап, халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарында эшләй. Байтаҡ шиғри китаптар авторы, Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Тормошто беҙ балҡытһаҡ та,*
*Ялҡытһаҡ та — бергәбеҙ.*
*Икәү ҡорған донъябыҙҙы*
*Ят ҡулдарға бирмәбеҙ!*

*Беҙ беләбеҙ: был донъяла*
*Изге эштәр үлмәҫ ул...*
*Тәнгә әжәл килгәндә лә,*
*Беҙгә әжәл теймәҫ ул,*

## ***Һөйөү бер ни талап итмәй...***

Рәшиҙә М-ға

*I*

*Көтмәгәндә ғашиҡ булдым,*
*Әрнеүҙәрем ҡастылар.*
*Моңһоу ҡараштарың миңә*
*Яңы донъя астылар.*

*Бергә була алмағанды*
*Белгәс, үлеп терелдем,*
*Әрнеүҙәрҙе яңыртыусы*
*Йондоҙ булып күрендең.*

*Яҙмыш... тиһең, тик ул яҙмыш*
*Йәшәй беҙҙең күңелдә.*
*Хоҙай бәндәһе булһаҡ та,*
*Яҙмыш ҡоло түгел дә!*

*Ерҙә кеше генә түгел,*
*Кәкүктәр ҙә зарлана.*
*Хоҙай тегермәндәрендә*
*Яҙмыш бик шәп сарлана.*

*Һөйгәнеңде һөйөү өсөн*
*Ҡаратаһаң — шул еткән.*
*Һөйөү бер ни талап итмәй,*
*Яраталһаң — шул еткән!*

*2*

*Ғазраилға тап булғанда*
*Еңер өсөн үлемде,*
*Хәтеремдең иң түрenә*
*Ҡуйҙым һинең үҙеңде.*

*Бәхетһеҙлек ялмағанда*
*Һинән оят — көрәшәм.*
*Тыуған ерҙең мәңге һүнмәҫ*
*Рух көсөнә өндәшәм...*

*Һин минеке булмаһаң да,*
*Мин һинеке барыбер.*
*Хәтер һандығым ватылһа,*
*Ҡотоптағы боҙ ирер...*

*Мин бәхеткә юлыҡҡанда,*
*Һинһеҙ миңә юҡ ҡәҙер,*
*Һинең хәтер һандығыңа*
*Үҙем инергә әҙер!*

* * *

Любите нас, пока мы живы...
Галина Илюхина

*Яратығыҙ беҙҙе иҫән саҡта,*
*Тоғро саҡта ҡайнар ҡосаҡта.*
*Ғәжәпләнергә лә өлгөрмәҫбеҙ,*
*Торонбаштар һүнгәс усаҡта.*

*Яратыуым һине шундай көслө,*
*Һин үҙең дә уны белмәйһең.*
*Йөрәктәрҙең ҡушылыуҙарынан*
*Ғүмер генә арта, үлмәйһең.*

*Һинең мине ярата алмауыңды*
*Терпеләр ҙә белә урманда.*
*Мин, хыялый, һаман ниҙер көтәм*
*Кис ятһам да, иртән торһам да...*

## *Шиҙәле*

*Йөрәктәге татлы яра*
*Яңырҙы Шиҙәлелә.*
*Шуға йөрәк бейеп йөрөй*
*Шул шишмә көйҙәренә.*

*Шиҙәлелә, тигәйнеләр,*
*Һыуҙарҙың һалҡындары...*
*Ник йөрәгем баҫылманы,*
*Көсәйҙе ялҡындары?*

*Ҡаҙансының бер һылыуы*
*Ҡыуктәргә мине сөйҙө.*
*Йондоҙҙарға ла көйләйем*
*Шиҙәле һуҙған көйҙө.*

*Эй, Ҡаҙансы, шишмәләрең*
*Беҙ көйләгән көйҙәме?*
*Кемде һағынып йырлай икән*
*Рәшиҙәле Шиҙәле?*

## ***Мәңге йәшә, Күгәрсенем!***

*Уралымдың бәғер киҫәге һин, —*
*Ата-бабам ере Күгәрсен,*
*Һиндә мине һағыш йылыта ла,*
*Ярһыуҙарым булһа, һыуыта.*

*Ҡуйыныңда тәпәй атлағанмын,*
*Гонаһтарым һиндә фашланған,*
*Һине уйламаған көнөм юҡтыр.*
*Байлығым юҡ күҙгә ташланған.*

*Бар байлығым күңел түрҙәрендә,*
*Улары ла халыҡ телендә.*
*Һин булғанға, бер күгәрсен булып*
*Йәшәйем мин тыуған илемдә.*

*Яуыз уйҙар менән килгәндәргә*
*Бөркөттәрең тырнаҡ ҡайраһын.*
*Ҡыштарын да беҙҙе саҡырып тор,*
*Бурандарың моңло һайраһын.*

*Ҡайтһын һиңә ситтән ул-ҡыҙҙарың,*
*Яңғыраһын бишек йырҙары.*
*Ташҡындарҙа ҡырыҫ был тормоштоң*
*Ағып китһен ҡара һыуҙары...*

*Иңдәремдә ҡаурый ҡанаттарҙың*
*Сихри көсөн тойған саҡтарым.*
*Иҫтән сыҡмай һис тә... Мәңге йәшә,*
*Күгәрсенем — тыуған яҡтарым!*

## Рухи дистрофиктар заманы

*Рухи дистрофиктар заманында*
*Йәшәү — йәшәү түгел, зар икән.*
*Ул — тереләр ҡәберлегендәге*
*Ҡабартылып торған шар икән.*

*Был Рәсәйҙә берәй намыҫлыға*
*Булды микән йәшәү еңелдән?*
*Көн күргәндәр нисек таба икән*
*Рухи көстө йыртыҡ күңелдән?*

*Рух ул, бәлки, Аллаһ илсеһелер,*
*Тере йәнгә көс, сәм биреүсе?*
*Ҡайҙа һуң ул Аллаһ илселәре*
*Киләсәкте алдан күреүсе?!*

*Тереләр ҡәберлегендә арта*
*Рухи дистрофиктар, эй Алла!*
*Ебәр ергә фәрештәләреңде,*
*Тик уларҙан*
*Үҙең дә ҡалма!*

## Бер ҡайтырбыҙ, дуҫҡай...

...Ҡайтайыҡсы тыуған яғыбыҙға,
Күгәрсендәр көтә торғандыр...
Рәмил Йәнбәк

*Бөтәһе лә әле юғалмаған,*
*Юл һулышы әле йәндәрҙә.*
*Юлыбыҙҙың яҡты миҙгелдәрен*
*Юя алмаҫ киҫкен хәлдәр ҙә.*

*Үҙебеҙсә генә йырлаһаҡ та,*
*Йырланасаҡ йырҙар бергәләр.*
*Бөтәһен дә йырлап бөталмабыҙ,*
*Йырланаһы ҡалыр кемгәләр.*

*Күргән саҡта толпар атыбыҙҙың*
*Тыуған яҡҡа ҡайтып китеүен,*
*Беҙ һиҙәбеҙ унда ҡыңғыраулы*
*Һәм тышаулы аттар көтөүен...*

*Онотолоп ҡайғы-һағыштарҙан,*
*Күгәрсендәр менән осҡанда,*

Мәңгелектең талғын елдәрендә
Беҙ күрербеҙ Хоҙай ҡушҡанды.

Ауылыбыҙҙың асыҡ тәҙрәләре
Уйсан күҙҙәр менән ҡаршылар.
Оло Эйек менән Буҙйылғала
Юл бирерҙәр беҙгә шаршылар...

Күгәрсендәр рухы көтә беҙҙе!
Күгәрсенһеҙ мин дә ялыҡтым...
Беҙ ҡайтырбыҙ, дуҫҡай, тыуған яҡҡа
Илселәре булып халыҡтың.

## Был ерҙәргә килгән саҡта

Бөрйән, Белорет, Учалы —
Ағас өйлө, мунсалы...
«Әллә ғашиҡ булдыңмы?» — тип
Шаярма әле, ҡуйсәле.

Был яҡтарға килгән саҡта
Иркенәйә тындарым.
Матурлыҡҡа һоҡланыуҙан
Зыңлай күңел ҡылдарым.

Юҡтан ғына килмешәктәр
Йәбешмәгән был ергә.
Уларҙан һуң ҡалмаҫ, тимә,
Ҡайғы-һағыш ғүмергә...

Беҙ үҙебеҙ еребеҙҙең
Тейеш ҡотон һаҡларға.
Килгән-киткән килмешәктән
Тәбиғәтте яҡларға!

Шуның өсөн ҡанбабалар
Был ерҙәрҙе үҙ иткән,
Уралымдың бөркөттәрен
Илде һаҡлар күҙ иткән.

Улар илгә күҙ булыр ҙа,
Һаҡлаусыһы кем булыр?!
Яҡлаусыһыҙ башҡорт ере
Килмешәк менән тулыр.
Шунан инде... һуң булыр.

## Насип булһын

*Күпме йәштәр бәхет эҙләп*
*Сит яҡҡа сығып китә,*
*Ситтә тамыр йәйә-йәйә,*
*Ҡайтыуҙы өмөт итә...*
*Бер ҡайҙа ла беҙгә бәхет*
*Әҙерләп ҡуймағандар.*
*Әҙме ситтә тыуған ерен*
*Һағынып илағандар?*
*Тыуған яҡҡа саҡыралар*
*Яҙмыштың турғайҙары,*
*Һандуғаслы урмандары,*
*Кәкүкле туғайҙары...*
*Сит яҡтарҙа мүкләнергә*
*Кәрәк ни бысағыма?!*
*Насип булһын һыйыныуҙар*
*Тыуған ер ҡосағына.*

## Яҙмыш

*Хыянатты кисермәй ул яҙмыш, —*
*Ҡорбан алмайынса туҡтамай,*
*Кемдәр генә уға баш күтәрмәй,*
*Кемдәр генә бөгөлөп һыҡтамай...*

*Аҡыл ғына йәшәй яҙмыш менән*
*Дуҫ булып та, туған булып та,*
*Аҡылыңдан яҙһаң, юя алмаҫһың*
*Ғәйебеңде доға ҡылып та.*

*Аҡыл һата, тиеп уйламағыҙ,*
*Үҙем кисергәнде һөйләйем.*
*Хәҙер инде Хоҙай юлында мин,*
*Уның ғына көйөн көйләйем.*
*Күргәндәрҙе генә һөйләйем.*



**Ҡаһим**
**ӘҮХӘТОВ**

## *Ошо ерҙән донъя башлана*

*Әй, болондар, урман, ҡырҙарым!*
*Тәү ҡат һеҙгә аяҡ баҫҡанда*
*Күңелемә килгән шундай уй:*
*«Ошо ерҙән донъя башлана».*
*Һеҙҙең арттан ғына, тауҙарым,*
*Сыҡты ҡояш көлөп, йылмайып,*
*Тын инешем, һиндә тулған ай*
*Һыу ҡойондо төнөн моңайып.*
*Ошо ерҙә генә балҡыған*
*Сәскәләрҙең, тимен, көллөһө.*
*Тик ошонда ғына емелдәй*
*Йондоҙҙарҙың иң-иң серлеһе.*
*...Һабан һөрөп, бойҙай сәскәндә,*
*Тирләп-бешеп бесән сапҡанда*
*Ҡабатланы болон, баҫыуҙар:*
*«Ошо ерҙән донъя башлана».*
*Йөрөп сыҡтым ярты Ер шарын,*
*Диңгеҙҙәрен күрҙем, урманын.*
*Тик белмәйем һеҙҙең шикелле*
*Күңелемә яҡын ер барын.*

*Ҡаһим Әүхәтов (1932) — Тәтешле районы Күрҙем ауылынан. Алты шиғри йыйынтыҡ авторы.*

*Бишегемде тирбәткән ерем!*
*Минең өсөн һин бит баш ҡала.*
*Бәхәстәргә керәм: «Барыбер*
*Ошо ерҙән донъя башлана».*

## Игенсе

*Ҡырҙар буйлап атлап килһәң һин,*
*Туҡ башаҡтар елдә тирбәлә.*
*Был минутта юҡтыр һинән дә*
*Бәхетлерәк кеше тирәлә.*
*Шул башаҡтар — йөрәк хистәреңдең,*
*Тоҙло тирҙәреңдең емеше.*
*Ҡешелеккә икмәк йәшәү бирһә,*
*Һин икмәккә йәшәү биреүсе.*
*Бар нәмәнән өҫтөн, бөйөк күреп*
*Ололайҙар икән икмәкте,*
*(Хаҡлы уға икмәк!) тимәк, һин дә*
*Был хөрмәткә лайыҡ шул хәтле.*

## Ер кешеһе

*«Ер кешеһе» тип әйттеләр мине,*
*Әйтерһең, юҡ атым-исемем.*
*Үпкәләмәнем, юҡ, киреһенсә,*
*Тик ғорурлыҡ хисе кисерҙем.*
*Юғиһә бит шундайҙар ҙа булды*
*(Үҙем күреп беләм күптәрҙе):*
*Ниҙер эҙләп йондоҙҙарҙа осто,*
*Айҡанылар зәңгәр күктәрҙе.*
*Ә мин тыумышымдан ошо ерҙә,*
*Һөрҙөм ерҙе, сәстем, тырматтым.*
*Тоҙло тирем тамған ошо ерҙә*
*Бәхетемде таптым, йыр таптым.*
*Атлап ҡына сығыр йылғаны ла*
*Йырлы итеп тойҙом, хис иттем.*
*Ерҙе тишеп сыҡҡан һәр үләндең*
*Сихри моңон, тынын ишеттем.*
*Һайрар ҡошло ҡалын урмандарым,*
*Йәшел хәтфә болон, ҡырҙарым:*
*«Ҡабул ит тә тарат халыҡҡа», — тип*
*Бүләк итте миңә йырҙарын.*
*«Ер кешеһе» тип әйттеләр мине,*
*Шунан бөйөк исем-атым юҡ.*
*Ерҙә тыуҙым, үҫтем һәм йәшәнем,*
*Уны ҙурламаҫҡа хаҡым юҡ.*

## Кешеләр ҙә шулай...

*Күҙәткән бар, һынаған бар: бигерәк*
*Ҡыҙыҡ ҡына ҡоштар донъяһы.*
*Көн-төн оса әсә, ризыҡ таба,*
*Ә балалар ҡанат нығыта ла*
*Ташлап китә бер көн ояһын.*
*Миҫал өсөн ҡоштар исеменән*
*Былай ғына мин һүҙ ҡуҙғаттым.*
*Кешеләр ҙә шулай... Бер улымды*
*Алыҫ юлға бөгөн оҙаттым.*

## Хәмзә күршеһе

*Зарланмайса, һуҡранмайса ғына*
*Өс-дүрт эш башҡарһа бер кеше,*
*Беҙҙең яҡта былай тиҙәр уға:*
*«Һин, моғайын, Хәмзә күршеһе».*
*...Донъя бит ул, киң дә, ҙур ҙа бит ул,*
*Юлыҡтыра төрлө хәлдәргә.*
*Шундай саҡта: «Зинһар, ҡотҡар!» — тиеп*
*Йығылалар килеп Хәмзәгә.*
*Иртән күрһәң, сыбыртҡыһын һөйрәп,*
*Ҡырға көтөү ҡыуып бара ул.*
*Төнгөлөккә кемдер сирләп киткән,*
*Фермаларҙа Хәмзә ҡарауыл.*
*Тыңлай Хәмзә, етмәгәндән түгел,*
*Түгел һис тә тамаҡ ялына.*
*Тыңлай Хәмзә... Сөнки өйрәнмәгән*
*Кеше һүҙен кире ҡағырға.*
*Әгәр булһа: «Һин үҙең һуң кем?» — тип*
*Ҡабырғама минең төртөүсе,*
*Юҡ! Юҡ! Йәшермәйем, тегеләй ҙә,*
*Былай ҙа мин — Хәмзә күршеһе.*

* * *

*Шатлыҡтарым — мөлдөрәмә,*
*Тик әрһеҙҙән түгел алар.*
*Бик һаҡ ҡына ҡағылһаң да,*
*Сайпыла ла түгеләләр.*

* * *

*Барға һөйөнмәгән бәндәләр бар,*
*Бар бәндәләр юҡҡа көймәгән.*
*Миңә улар бәхетһеҙҙер кеүек,*
*Мәхрүм һымаҡ яҡты донъянан.*

## Танйыйҙарҙыр кеүек...

*Йәшел болон, йәшел әрәмәләр*
*Гүзәллеге булһа ауылдың,*
*Икһеҙ-сикһеҙ иген баҫыуҙары*
*Ғорурлығы, уның байлығы.*

*Улар менән хозурланып ҡына*
*Йәшәмәй шул ауыл кешеһе.*
*Болондарҙан — бесән, баҫыуҙарҙан*
*Икмәк алыу уның төп эше.*

*Еңел килмәй икмәк, ел-ямғырҙа*
*Аяҡ, ҡулдар бөтә ярылып.*
*Ҡайнар ҡояш төҫө, тупраҡ еҫе*
*Бит-йөҙҙәрҙә ҡала яғылып.*

*«Ауылдандыр һин...» тип әйтһәләр ҙә*
*Кәмһенмәйем. Шатлыҡ кисерәм.*
*Танйыйҙарҙыр кеүек улар мине*
*Ҡара тупраҡ, икмәк еҫенән.*

## Аяғөҫтө

*Ғүмерем буйы мин ҡыҙығып йөрөнөм*
*Рәхәтлектең ҡәҙерен белгәндәргә.*
*Әммә үҙем түҙеп яталманым*
*Йылы, яҡты, тыныс бүлмәләрҙә.*

*Аяҡтарға мең-мең рәхмәт булһын:*
*Мин уларҙа таптым таянысты.*
*Аяғөҫтө булды йоҡо-ялым,*
*Ашау-эсеү булды аяғөҫтө.*

*Аяғөҫтө уйланылды уйҙар,*
*Йырҙар тыуҙы хатта аяғөҫтө.*
*Аяҡтарҙан яҙһам, йырым тыныр,*
*Шуныһы ғына булыр аянысы.*

* * *

*Хәл белешкән һәр кешегә яуабым бер:*
*Йөрөйөм дә, йәшәйем дә шул бер көйө.*
*Ир халҡына һис хас түгел илау-һыҡтау,*
*Һыҙлатһа ла башты сәстең һәр бөртөгө.*

## Йөрәгендә шыта...

*Көпшәкләнеп кипкән ҡара тупраҡ*
*Мамыҡлана тырма артынан.*
*Ә сәскестә барған сәсеүсенең*
*Йөҙөндә нур — ҡояш балҡыған.*
*Һөйөнә ул: тигеҙ шытыр орлоҡ,*
*Йомшаҡ ерҙә ҡалғас күмелеп.*
*Ана шулай икмәк игенсенең*
*Йөрәгендә шыта иң элек.*
*Көн тыуҙымы — эше тыуа уның,*
*Юлы үтә ошо ҡыр аша.*
*Тулҡынлана иген, туҡ башаҡтар*
*Бер-беренә бәрелеп сыңлаша.*
*Һөйөнә ул уңыш булырына*
*Киләттәрҙең билен бөгөрлөк.*
*Ана шулай икмәк игенсенең*
*Йөрәгендә үҫә иң элек.*

## Һары япраҡтар

*Тәбиғәттә иләҫ-миләҫ ваҡыт,*
*Берсә ямғыр, берсә ҡар саҡтар.*
*Күбәләктәр осамы ни!? Ергә*
*Ҡойолалар һары япраҡтар.*
*Ергә төшөп етер-етмәҫ, елдәр*
*Мөгөҙөнә элеп ала ла,*
*Ошо япраҡтарҙы өйөрөлдөрөп*
*Ҡыуалайҙар ситкә, далаға.*
*Ә япраҡтар һаман тартышалар,*
*Ынтылалар ҡыуаҡ төбөнә.*
*Тартышалар; «Ҡалайыҡ, — тигәндәй,—*
*Тупраҡ булып ҡына был ерҙә».*
*Уларға ла бик тә ғәзиздер шул*
*Йәшәү биргән, ғүмер биргән ер.*
*Ошоларҙы күреп, тыуған ергә*
*Мөхәббәтем артты бермә-бер.*

* * *

*Ҡара тупраҡ — гүйә, ҡаймаҡ, аша*
*Икмәк телеменә һыла ла.*
*Ҡотороноп шунда үҫә орлоҡ,*
*Төшөп ҡалһа яңылыш ҡына ла.*

## Шатлыҡ килде

*Шатлыҡ килде, бер ҙурмә килде,*
*Көтмәгәндә килде өйөлөп.*
*Ҡайғы кеүек икән шатлыҡтар ҙа —*
*Саҡ-саҡ ҡалдым төшмәй бөгөлөп.*
*Йөрәк дулап, баш әйләнеп китте,*
*Һыялманы шатлыҡ эсемә.*
*Әл дә шул саҡ яңғыҙ түгеллегем,*
*Дуҫтар барлыҡ төштө иҫемә.*
*— Таратырға! — тинем, — бүрыҫҡа, тип,*
*Ҡағыҙ-фәлән яҙып тормабыҙ.*
*Бергә булһын, әйҙә, шатлыҡтар ҙа,*
*Уртаҡ булған кеүек нужабыҙ.*
*Улар менән төрлө-төрлө хәлдә*
*Күп йылдарым бергә йәшәлгән.*
*Һыналғанбыҙ, тимәк, кем әйтмешләй,*
*Ботлаған тоҙ бергә ашалған.*
*Ҡайғыларға тарып йөрөгәндә*
*Ҡалыуҙары була ишетеп,*
*Киләләр ҙә шатлыҡ бирә улар,*
*Бер кәрәкһә, ике-өс итеп.*

## Һәр бөртөгө булды бер бомба

*Аҡһа ла күп һыуҙар, уҙған һуғыш*
*Хаҡында йыш тора һүҙ сығып.*
*Еңеп ҡайтҡан ирҙәр менән бергә*
*Һөйләшәбеҙ беҙ ҙә ҡушылып.*
*Хаҡыбыҙ бар! Йәштәребеҙ ул саҡ*
*Булһа ла тиң туғыҙ, ундарҙа,*
*Ҙур еңеүҙә бар беҙҙең дә өлөш —*
*Беҙҙең фронт булды бураҙна!*
*Һабан һөрҙөк, сәстек, тырмаланыҡ,*
*Уңыштарын йыйҙыҡ күҙөндә.*
*Һабан тотҡалары һалған эҙҙәр*
*Ус төбөндә әле бөгөн дә.*
*Һуғыштыҡ беҙ, эйе, яу ҡайтарған*
*Ирҙәр менән булдыҡ бер юлда.*
*Дошмандарға беҙ иккән игендең*
*Һәр бөртөгө булды бер бомба.*

Мансаф
ҒИЛӘЖЕВ

# ҠӘНЗӘФӘР ТАШТАРЫ*

## РОМАН

***

Ҡәнзәфәр кейенде лә урамға сыҡты. Сатнама һыуыҡ. Һуңғы төндәрен һанаған ҡыйырсыҡ ай Көңгөр яғында балҡый ине. Шырт иткән тауыш та юҡ. Өй тәҙрәләрендә яҡты күренмәһә лә, күптәр йоҡламай, сөнки ауылға язалау отрядтарының бәреп инеү ҡурҡынысы бар. Ул сағында инде үлемде көт тә тор. Ҡәнзәфәрҙә лә йоҡо ҡайғыһы юҡ. Батырҡай менән әңгәмәләшергә, еңелеү сәбәптәрен бергәләшеп аңларға, артабан эште нисек ойоштороу хаҡында кәңәшләшергә тейеш ул. Ҡаршыға ике һыбайлы осраны. Командир ҙа, тегеләр ҙә бербереһенә һүҙ ҡушманы. Былар – һаҡта тороусылар. Һәр тейешле аулаҡ урында ҡарауыл ҡуйылған. Полковник Папав та йоҡлап ятмайҙыр, башында әллә ниндәй мәкер ҡайнайҙыр. Бәлки, ҡаланы оборонала ғына тотмайынса, һөжүмгә күсеүҙе планлаштыралыр?..

Батырҡай ҙа уяу ине. Ул хужаның шәмен яндырмау өсөн ҡараңғыла ултырған. Ҡапҡаны байтаҡ төйгәс кенә, үҙе сыҡты. Кем икәнлеген дә һорап тормай асты. Арттарынан һыуыҡ өйөрөлөп инмәһен өсөн, ишектән ашығып керҙеләр. Батырҡай өҫтәлдәге шәмде тоҡандырҙы. Яҡтылыҡ һүрән генә.

– Ҡунағың ас түгелме, бел? – тип һорап ҡуйҙы һәндерәлә ятҡан хужа ҡарлыҡҡан тауышы менән.

– Рәхмәт, Иван Иванович, бөтәһе лә һәйбәт, – тип яуапланы Ҡәнзәфәр.

– Ниндәй һәйбәт, ти, сигендегеҙ бит.

– Һуғышта бөтәһе лә була.

– Значимо. – Хужа башҡаса өндәшмәне.

Ике сардар байтаҡ ваҡыт өндәшмәй ултырҙы. Борсоулы уйҙары бер юҫыҡта ине, әлбиттә. Яуап ҡына юҡ.

– Нимә эшләргә тейешбеҙ? Нимә кәрәк? Ҡайҙа хата?

– Бөтәһен дә белһәм, һиңә килмәҫ тә инем, Батырҡай дуҫ. Нығытмаларҙы нисек емерергә? Бәлки, ҡапҡаларҙы асып, һөжүм яһарға һалдаттар сыҡһа, шунан файҙаланып, бәреп керергә кәрәктер, ә? Сая егеттәр төркөмөн әҙерләйек тә.

---

*Аҙағы. Башы 5-се һанда.*

– Ярамай. Кешеләрҙе һәләк кенә итербеҙ, тим… Берәй нисек эстәгеләрҙе ҡотортоп, властарға ҡаршы күтәрһәк икән.

– Аяғында баҫып торғандарҙың һәммәһен Әбей батшаға тоғро ҡалырға  ант иттергәндәр өс тапҡыр. «Башҡорттар ҡалаға инә ҡалһа, бөтәгеҙҙе лә тереләй утта яндырасаҡтар, ҡыҙҙырып ашаясаҡтар» тип ҡоттарын алып бөткәндәр. Йәй булһа, ҡасып-боҫоп та йөрөр инек. Шуны уйлайым: остазым Батырша бер ҙә юҡҡа ғына баш күтәреү өсөн май айын һайламағандыр. Аттар ҙа туҡ, кешеләргә өй ҙә, йылы кейем дә кәрәкмәй. Исмаһам, кәңәшләшергә Кинйә абыҙ ҙа юҡ. Зарубин килеп сыҡһа ла һәйбәт булыр ине. Ә ул үҙе ярҙам һорап ята Чесноковкаһында.

– Ундағы хәлдәр ҙә ямандыр. Ҡәнзәфәр, ни өсөн Ырымбурҙы ла, Өфөнө лә әлегә тиклем алып булмай? Инде Көңгөргә килеп төртөлдөк.

– Уйымса, ул ҡалаларға нығынырға юл ҡуйылды. Минеңсә, ҡалаларҙы, ҡәлғәләрҙе тыштан ғына түгел, эстән емереү юлдарын да табырға кәрәктер.

– Нисек?

– Халыҡты үҙебеҙгә ауҙарып. Байҙар, хәрбиҙәр хаҡында һүҙ бармай. Пушкаларҙы эштән сығарырға кәрәк. Белмәйем, уларҙы боҙопмы, дарыны еүешләпме… Иң ҡурҡынысы шулар. Күптәр уны Алла тарафынан ебәрелгән аждаһа итеп ҡабул ҡыла. Наҙанлыҡ ҙур, наҙанлыҡ. Шарттар, мөмкинселектәр булып, һуғыш ысулдарына өйрәнһәң, белгәндәреңде кешеләргә еткерһәң икән.

– Ҡорал, ҡорал юҡ, Ҡәнзәфәр.

– Ә бит барыбер еңергә кәрәк. Яңы батшаны тәхеткә ни тиклем тиҙерәк ултыртһаҡ, Рәсәй халыҡтарын шул тиклем йәһәтерәк бәләнән ҡотҡарасаҡбыҙ.

– Былар ҡоро һүҙҙәр.

– Әбди Усаға кире китеп хәрт эшләне. Төп көрәш бында бит.

– Халыҡты язалау отрядтарынан ҡурсалау өсөн юлланды. Тылында шундай башкиҫәрҙәр хөкөм һөргәндә бында иркенләп һуғышып буламы? Ул ҡәбәхәттәр теләһә ҡайһы ваҡытта арҡаға хәнйәр ҡаҙарға әҙер.

– Иртәнән һуңға, Батырҡай, Аллаһҡа тапшырып, тағын уҡталайыҡ.

– Иртәгә, тип әйт.

– Ун беренсе ғинуар иртәнән һуңға түгелме ни?

–Таң атырға күп ҡалмаған даһа.

– Улайһа, атакаға бер көн ҡала. Халыҡты, ҡоралдарын барлайыҡ. Бер үк сирфәлән тарала күрмәһен, тәүбә-тәүбә.

– Әллә Салауатты көтәбеҙме?

– Ул килгәс тә мәшәҡәттәр күп булыр. Беҙ Папавҡа ҡала оборонаһын нығытырға ирек бирергә тейеш түгелбеҙ…

Ғинуарҙың туң күгенә көнсығыштан һиҙелерлек  кенә яҡтылыҡ һирпелде. Әлбиттә, тәүгеләрҙән булып ихаталарға, урамға фетнәселәр сыҡты. Улар юлға ҡуҙғалмай тороп, ауыл халҡы тышҡа морон төртмәйәсәк. Яңы батша әмере буйынса, ҡатыны Екатеринаға ҡаршы күтәрелгән әҙәм балалары ауыл халҡының энәһенә лә теймәйәсәген һәр төштә ныҡ аңлаталар ине. Башлыҡтары был йәһәттән тәртип һаҡлауҙа ҡаты талап ҡуя, ти. Мародерлыҡ, башбаштаҡлыҡ һиҙелһә, ғәйеплене ҡамсы менән ярыу, хатта аҫып үлтереү ҡаралған, имеш. Шулай тейештер ҙә, сөнки улар ябай халыҡҡа ирек, ер-һыу, бирергә килгәндәр бит. Юҡһа, шул дөрөҫлөкмө: аҙашырлыҡ урман эсендә йәшәп, утынға, арҡан, еп ишергә йүкәгә мохтажлыҡ кисерәһең. Ә фетнәселәр, ваҡыттары бар икән, саналарын шыжлатып ихаталарға утынға ағас килтереп ауҙаралар. Аттарына ашатҡан һолонан тауыҡтарға ла өлөш  сыға…

Ҡәнзәфәр уйынса, төп иғтибарҙы ҡәлгә ҡапҡаларына йүнәлдереү фараз.  Драгундар ҡапҡанан сыға ҡалһа, мылтыҡтан, йәйәләрҙән  атырға. Ҡул һуғышынан

да тайпылырға ярамай. Тик тәүҙә нығытмаларға яҡын уҡ барып, ҡала халҡын башлыҡтарҙы, офицерҙарҙы тотоп бирергә, үҙҙәрен фетнәселәр яғына сығырға өндәп ҡысҡырырға кәрәк. Воеводаға яҙма рәүештә мөрәжәғәт итеү иһә яуапһыҙ ҡалды. Аңлашылып тора: Миллер был хаҡта үҙе генә белеп ҡалғандыр. Халыҡтан ғына түгел, хатта Папавтан йәшергәндер.

Ләкин һайлап алынған иң көр тауышлы урыҫтарҙың ҡала халҡына ҡысҡырыуын туп гөрһөлдәүҙәре ҡапланы. Папав бөгөн дә элекке тактикаһын ҡулланды: тәүҙә туптарын эшкә егеп, фетнәселәрҙе туҙҙырҙы, тик шунан һуң ғына ҡапҡаларҙан йәйәүле ғәскәрен сығарҙы. Уның һалдаттары сигенгән фетнәселәр артынан йүгермәне, ә мылтыҡтан ата-ата атланы. Уларҙың төп бурысы – баш күтәреүселәрҙе таратыу һәм үҙ ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуймау. Был хәкиҡәтте яҡшы беләләр, сөнки полигондарҙа уларға шулай кәрәклеген ҡат-ҡат туҡыныла. Отрядтарға бүлеп, бер-береһенә ҡапма-ҡаршы күпме «һуғыштырманылар». Ниндәйҙер генералдың: «Өйрәнгәндә ҡыйын икән, һуғышҡанда еңел булыр», – тигәнен йыш ҡабатланылар. Әле инде һуғышты үҙ күҙҙәре менән күреп торалар. Саҡ ҡына гөрһөлдәү ишетелдеме, ҡапҡанан сыҡҡан ғәскәрҙе күрҙеләрме, фетнәселәр торалар ҙа төрлө яҡҡа һибеләләр. Ә бит һан яғынан, хөкүмәт ғәскәрҙәре менән сағыштырғанда, саманан тыш күптәр үҙҙәре.

Папав көсөн һаҡлай, һалдаттарын файҙаһыҙға һәләкәткә юлыҡтырырға ашыҡмай. Ҡазандан өҫтәмә ғәскәр киләсәгенә лә ышана. Ярҙам өҫтәлһә, кавалерияһын да сығарырға сират етәсәк.

Ҡәнзәфәрҙәр был юлы, сигенеп, Кишерть ауылында туҡталды. Папавтың артабанғы пландарын белмәһә лә, подполковниктың ниндәйҙер хәсөт эшләренә шикләнмәй ине. Көңгөрҙөң баш һаҡлаусыһы фетнәселәрҙең һанын самалау өсөн ҡәлғә башняһына менеп күҙ һалды. Күҙ күреме ергә йолҡош бәндәләр таралған. Ҡорал тигәндәре көлкө килтерә – торғаны утын. Хәйләкәр, тәжрибәле офицерҙарҙың ҡаланан сығып, фетнәселәргә һөжүм итеүе бик мөмкин. Ниңә әле ҡасып-боҫоп оборонала ғына торорға, яланда ла һуғышырға оҫта бит әле ул.

Хәрби белеме булмаһа ла, Ҡәнзәфәрҙә һиҙемләү һәләте көслө ине. Ошо тиклем яуаплы бурыс башҡарғанда, йөҙәрләгән кешеләрҙең яҙмышы өсөн яуап биргәндә, килеп тыуған мәсьәләләрҙе сисеү өсөн ысулдар эҙләргә кәрәклекте яҡшы аңлай ине ул. Атаһы, әсәһе бушҡа ғына: «Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ», – тип ҡабатламағандарҙыр.

Юҡҡа шомланмаған. Эйе, ун бишенсе ғинуарҙа Папав командаһы ауылға үҙе башлап һөжүм итте. Ярай әле, ауылдан ситтә үк һаҡҡа ҡуйылған яугирҙар сабып ҡайтты:

– Ғәскәр килә! Тревога!

Ҡәнзәфәр һыбайлылары һә тигәнсе сафҡа баҫты.

– Ауылдан сығып, соҡорҙа ҡаршыларға! Дошманды тәрән ҡарға әйҙәргә тырышығыҙ! Был – тәүге бәрелеш. Күрһәтәйек үҙебеҙҙе. Батырҡай, һин урта өлөштәрәк бул. Арлы-бирле була ҡалһа, тотош етәкселекте өҫтөңә ал. Бисмилләһиррахмәнир-рәхим! – Ҡәнзәфәр күк юрғаһын ауыл осона, Көңгөргә бара торған юлға, борҙо. – Алға! – Ат тояҡтарынан ҡаты ҡар киҫәктәре осто. Кинйә абыҙ бүләк иткән ҡылысты ҡынынан тартып сығарҙы. – Алға-а!

Пруссияла һуғышҡанда командирҙарының: «Дошмандың сафтарын туҙҙырырға, төркөмләп бүлеп алырға йә флангтарҙан уратырға, шул сағында һуғышырға яйлыраҡ була. Дошман һалдаттарын, төркөмдәрен бер-береһенә ярҙамға килеүҙән мәхрүм итергә», – тигән аңлатыуҙарын хәтерләне.

Сафҡа теҙелеп, ашыҡмай ғына килгән Папав һыбайлылары яҡынлашҡанда, улар яғында ниндәйҙер командирҙың: «Пли! Руби! Вперед!» – тигән командаһы яңғыраны, һәм һыбайлылар, сафтарын боҙоп, фетнәселәргә ташланды.

– Дошман төркөмөн һулға, соҡорға ҡыҫырыҡларға! Бүлгеләп алырға, берәмләп ҡыйратығыҙ!

Ике яҡтың төркөмө шунда уҡ буталышты. Ғинуар һыуығын яңғыратып рус, башҡорт, татар, мари телдәрендә ҡысҡырыу, һүгенеү һүҙҙәре ишетелде. Һәр кемдә бер генә ынтылыш: дошманды үлтереү! Асыуҙан, нәфрәттән тонған күҙҙәргә тик уҫал йөҙҙәр, асылған ауыҙҙар, күтәрелгән, һелтәнгән ҡылыстар, киҫтәндәр, суҡмарҙар, балталар… ғына күренде. Ҡарға инеп сумған, ҡарҙан ҡотолорға ынтылған, кешнәгән хужаһыҙ аттар, аҡырып ергә ҡолаған яугирҙар, ҡыҙыл төҫкә инә барған ҡар күҙгә салынманы. Бөтә ынтылыш – кеше үлтереү. Кемдер иҫәбенә кемдер иҫән ҡалырға тейеш.

Ҡәнзәфәр башы осонда, кәүҙәһе өҫтөндә күтәрелгән ҡылыстар күрҙе, ләкин уларҙың береһе лә уға теймәне. Үҙе һелтәгән ҡылыс кемдәргәлер бәрелде. Ҡаҙалды ла, сөнки уны кемдәрҙеңдер күкрәгенән, эсенән бар көсөнә тартып сығарҙы. Башындағы бүреге осоп төшкәнен дә абайламаны. Юртағының ҡолағы өҙөлгәнен шәйләне, шул сәбәптәндер атының башына, ялына ҡан һибелгән. Кем өҙгән ат ҡолағын? Дошманмы, әллә һелтәнгәндә үҙеме? Кем белһен.

Аҡыллы, тыңлаусан ат. Стәрлетамаҡ пристаненән Петр Өсөнсө яғына ҡасҡанда алып киткәйне. Пугачев ҡушыуы буйынса Көңгөргә йүнәлгәс, ошо мәхлүк һыртында меҥ саҡрым тирәһе юл үтелгәндер. Бәйләргә онотһаң да ҡасып китмәй, арымай ҙа, ниндәй тиҙлектә барырға кәрәклеген ауыҙлығын тартыуҙан да аңлап тора. Өҫтәмә аты ла бар, әлбиттә, тик быға ышана, күберәк ваҡыты быны өҫтөндә, тегене ҡушғаһы әлегә ныҡлап һыналмаған. Йә яу ерендә ҡолап төшөрһөң дә, ташлап ҡасыр.

Өҫтөнлөк хөкүмәт ғәскәре яғында ине, сөнки улар, саналарға ултыртып, бер нисә туп та килтереп еткерергә өлгөргәндәр. Шуларҙың гөрһөлдәүе, килеп төшкән йәҙрәләренең шартлап ярылыуы бизмәндең ҡайһы яҡҡа тартылыуын хәл итте лә инде. Ҡәнзәфәр Иҫке Посад ауылы яғына ҡарай сигенергә бойорҙо.

Дошман ғәскәрҙәре фетнәселәрҙе ҡыуып барыуҙан ниңәлер баш тартты, туҡтап ҡалды.

Папав Көңгөр яғына ҡарай киткәс, Ҡәнзәфәр, бер төркөм кеше алып, яу булған яланға йүнәлде. Саналарға егелгән аттар ҙа алырға ҡушты.

Ҡан менән сыбарланған аҡ ҡар өҫтөндә егерменән ашыу мәйет аунай ине. Дошмандыҡы ҡайҙа? Уларҙың береһен генә лә үлтереп булмағанмы ни? Ә яралылар? Тимәк, Папавтыҡылар мәйеттәрен ҡалдырмаған, тимәк, яраланған фетнәселәрҙе лә үҙҙәре менән алып киткәндәр. Уларҙы ҡәлғә эсендәгеләргә күрһәтеп маҡтанырҙар, әлбиттә. Фетнәселәрҙән ун алты кеше әсирлеккә төшкән булып сыҡты. Икенсе көндө үк бисараларҙы ҡала майҙанында ҡабырғаларынан аҫҡандар.

Ярҙам, өҫтәлмә көс талап ителә, әлбиттә. Уны көткән арала һуңғы бәрелештәрҙе тикшерергә, хаталарҙы барларға, һөҙөмтәләрен халыҡҡа еткерергә, аңлатырға кәрәк.

Ҡәнзәфәр шулай уҡ документтарын тәртиптә тотоуға ла тейешле иғтибар итергә тырыша. Отрядындағы яугирҙар исемлегенә түбәндәге кешеләрҙе өҫтәп ҡуйҙы. Әлбиттә, командир булараҡ, башлап үҙен яҙҙы. Шунан ҡалғандарҙы: «Морат улы Ҡусҡай, Мәксүт улы Абдулбаҡый, Яугилде улы Хәмит, Исламғол улы Сәлим, Солтан улы Абдулла, Сәйетборхан улы Сәйфулла, Аҡай улы Аллағол, Урмакчи улы Иҫәнбул.

Керәшен Мазинский тирәһендәгеләрҙән:

Никита улы Прокофий, Фронка Пермяковтар, Иван улы Федор Кузнецов.

Чистополь, Ялансылар:

Иван улы Афанасий, Кузьма Силыч, Микита улы Ефим Завоялов.

Йөҙ башы Арыҫланға буйһонған беҙҙең ауыл кешеләре:

Йосоп улы Мөхтәсәр, Төймәт улы Мастаҡ, Сафар улы Мортаза, Тимербай улы Баттал, Күсем улы Ҡәҙермәт».

Ҡәнзәфәр булған бөтә ҡағыҙҙарын күндән тегелгән тоҡсайҙа һаҡлай. Берүк еүешләнә күрмәһен. Ул шулай уҡ Кинйә абыҙҙан: «Әгәр ҙә ныҡлы еңелеүгә дусар булына ҡалһа, документтарың дошман ҡулына эләгә күрмәһен. Һәр исем – яҙмыш. Ҡағыҙҙарыңды юҡ ит. Яндыра алмаһаң, һалдаттарыңдан сәйнәт», – тигән һүҙәрен дә хәтеренән сығармай.

***

Пугачевтың планы – ихтилалды мөмкин тиклем киңәйтеү, яңынан-яңы тарафтарҙы яулау. Урал, Себер, Волга, Кама аръяғы...

Башҡортостандың үҙәгендә – Чесноковкала тороп Иван Зарубин шул төбәктәге бөтә хәрби хәрәкәт менән етәкселек итергә тейеш.

Ырымбур тирәһендәге һуғыштарҙа тәүәккәллек, батырлыҡ күрһәткән, ике тапҡыр яраланырға ла өлгөргән ун туғыҙ йәшлек Салауатҡа Яңы батша Петр Федорович полковник дәрәжәһе биреп, ҡулына манифест тоттороп Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышына оҙатты. Әлеге полкында туҡһан биш кеше булһа, тыуған төйәгендә уларҙың һанын бер нисә йөҙгә, меңгә еткерергә тейеш.

Хушлашҡанда Пугачев: «Һинең кеүек сая, баштарын эшләтә белгән егеттәр күберәк булғанда беҙ тиҙерәк еңер инек», – тип ҡалды.

Яңы йылға тиклем Салауат Златоуст, Һатҡы заводтары тирәләрендә, әлбиттә, үҙенең һөйгән Йүрүҙән, Әй йылғалары буйында, һунар иткән ҡарурмандар шаулаған ауылдарҙа булып, көс туплап, Красноуфимск ҡәлғәһенә юлланды. Был саҡта уның ҡул аҫтында һигеҙ йөҙ яугир ине. Пугачев талабын иҫтә тотоп, командаһын тик атлы ғәскәр иҫәбенә тулыландырҙы. Сөнки Яңы батша йәйәүлеләрҙе мал көтөүенә тиңләй. «Толпа» ти.

Йәш полководецтың яугирҙары араһында ауыл крәҫтиәндәре генә түгел, заводтыҡылар ҙа бар ине. Әлбиттә, улар араһында төрлө милләт вәкилдәре күп. Иң мөһиме, үҙ-ара татыулыҡ, ихласлыҡ булырға тейеш. Шуны талап итте. Командалағы кешеләр ҙә тик уға ғына буйһонорға тейеш. Улай түгел икән, ғәскәр инәһеҙ умарта кеүек – уны һәләкәт көтә.

Салауаттың юлы – тура төньяҡҡа, ниәте – әле Көңгөр өсөн көрәшкән Ҡәнзәфәр Усаев, Батырҡай Иткинин һәм Уса тирәһендә хәрәкәт итеүсе Әбди Абдуловтар менән берләшеү...

Боғалыш, Ключики ауылдары һәм Красноуфимск. Көңгөргә еткәнсе был ҡәлғә менән хисаплашаһы бар.

Декабрҙең икенсе яртыһында отряды менән армияға килеп ҡушылған Илсеғол Этҡоловҡа Салауат тиҙ үк иғтибар итте. Батырлығынан, әлегәсә үҙ аллы хәрәкәт итеүенән ғәйре, тағын да бик мөһим яғы – ул Кущин волосы старшинаһы, йәғни әле бара ятҡан төбәк кешеһе. Шуға күрә уға авангард отрядына баш булыу йөкмәтелде.

Ҡәнзәфәр тарафынан Иргә, Ачит ҡәлғәләре алынғас, бигерәк тә бер полковник, бер майор, капитан Воинов йөҙ утыҙ һалдаты менән бергә фетнәселәргә әсир төшкәс, Красноуфимск түрәләре ҡурҡыштан телһеҙ ҡалды. Улар казактарҙы контролдә тоторға тырышты, Әбей батшаға иткән анттарын боҙмаҫҡа сыҡырҙы. Екатерина Икенсенең манифесын ҡат-ҡат уҡып ишеттерҙеләр. Казактарҙың күҙ ҡарашынан уҡ икеләнеү тойған ҡәлғә коменданты һәм воеводаһы поручик Никифор Бахматов ниндәй ҡарарға килергә лә белмәй ине. Әгәр ҙә Салауат ғәскәренә ҡаршылыҡ күрһәтә икән, уны Воинов яҙмышы көтә. Көңгөрҙең

ҡалын нығытмаларына йәшенгән Миллерҙың үҙ ҡайғыһы ҡайғы, ярҙамға һалдаттар түгел, сәләм һүҙе лә ебәрмәйәсәк.

Һуғыш мәсьәләләренән тыш, Ҡәнзәфәрҙең донъяуи мәшәҡәттәре лә баштан ашҡан. Ауыл, ҡәлғәләрҙең элекке етәкселәрен яңы кешеләр менән алмаштырыу сәбәпле, уларҙы һәр ҡайһыныһының ҡулына тейешле документ та тоттороға кәрәк. Хатта башҡа төрлө вазифаларҙы, эштәрҙе башҡарыусыны ла табып билдәләргә тура килә. Бындай осраҡта ул, әлбиттә, урындағы халыҡ менән кәңәшләшә ине.

Ғинуар уртаһында Көңгөр өйәҙе Путурин ауылына тирмәнсе билдәләргә тура килде. Бөтәһе лә закон нигеҙендә булһын. Суксун заводы старостаһы Федор Ивановты ҡуйыу хаҡында бойороҡ яҙҙы.

«Ғәли йәнәптәре император һәм бөйөк батша Петр Федорович ҡушыуы буйынса, Федор Ивановҡа Суксун заводы старостаһы итеп билдәләүем хаҡында билет бирелде.

Путурин ауылында Григорий улы Александр Демидов тарафынан төҙөлгән тирмән бар. Уны элеккесә тәртиптә тоторға, тип Фрол Воробьевҡа әмер бирелде. Тартылған он өсөн аҡсаны мәрхәмәтле Петр Федорович ҡаҙнаһына намыҫ менән яҙа барырға. Бүтән командалар һәм теләһә кем уға ҡыйырһытыу, йәбер күрһәтергә тейеш түгел.

Мин, старшина бурыстарын үтәүсе мулла Ҡәнзәфәр Усаев, ҡулымды ҡуйҙым.

1774 йыл, ғинуар».

Яҙыуындағы ҡара кипһен өсөн ҡағыҙҙы ситкә шыуҙырыуға, ишектән ниндәйҙер таныш түгел кеше килеп инде һәм ҡуйынынан төрөлгән ҡағыҙ сығарҙы.

Старшина Рахманғол Мостафин ебәргән сапҡын икән. Ул Осокин заводын алыуы хаҡында рапорт ебәргән. Бырма ауылын да алыуын белдергән. Көндәр насар булыу сәбәпле, әкрен йөрөлөүгә зарланған. Аллаһ ҡушһа, иртәгәләргә килеп етәсәгенә ышана.

Рахманғолдың хәбәре Ҡәнзәфәрҙең кәйефен күтәрә төштө. Сапҡынға тамағын туйҙырырға һәм атын ял иттерергә ҡушты.

Салауат иһә, көслө буранға ла ҡарап тормай, килеүен дауам итә. Боғалыш ауылына килеп ингән. Ә ғәскәре дүрт мең кешегә еткән, ти. Тимәк, иртәгә Ключикиҙа буласаҡ.

Красноуфимск казактары алтынсы ғинуарҙа, Крещенье байрамы көндө, Ключики ауылына фетнәселәр менән һөйләшеү өсөн делегат ебәрергә ҡарар итте.

Делегация менән Илсеғол осрашты. Ул казактар ҡулына указ һәм Красноуфимскиға килеүҙәре хаҡында белдереү ҡағыҙы тотторҙо. Уларҙың Петр Өсөнсөгә тоғро буласаҡтарына инандырыуын ишеткәс, араларынан береһен – сиркәү хеҙмәткәре Макар Папавты Салауатты күрергә, әле генә булып үткән һөйләшеүҙе уға еткәрергә ҡушты һәм ул Ҡотош тигән бәләкәй генә ауылда баш күтәреүселәрҙең етәксеһен күреп, красноуфимдарҙың ҡәлғәне үҙҙәре теләп, бер ниндәйҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә фетнәселәргә бирәсәктәрен белдерҙе.

Ун һигеҙенсе ғинуарҙа Салауат, Красноуфимск казактарын да ҡушып, Иҫке Посадҡа йүнәлде. Ауылдың буйынан-буйына ғәскәрен теҙеп, ҙур командирға әйләнеп барған Салауат дуҫын, Бердала әйткәнсә, энекәшен Ҡәнзәфәр ҡаршыланы.

Һөйләшер һүҙҙәре, уртаҡлашыр фекерҙәре тулып ята ине. Ырымбурҙың, Өфөнөң, әле килеп Көңгөрҙөң ҡамауҙа тотолоуына, ҡапҡаларын астыра алмауҙарына зарланһалар ҙа, ихтилалдың еңәсәгенә, батша тәхетенә Пугачевтың менеп ултырасағына улар ихлас ышана ине.

– Ҡала халҡына мөрәжәғәт итеп ҡараныҡ, тик яуап ҡына юҡ, тиһең инде, ә?! – Салауат яраһы бөтәшкән сикәһенә бармаҡтарын тейҙерҙе. Шул төш һәр саҡ ҡысытып тора төҫлө.

– Йәшерен рәүештә императорҙың манифесын да индерттек. Ныҕытмалар эргәһенә барып урыҫса: «Воеводаны тотоп бирегеҙ! Бөтәгеҙгә лә ирек!» – тип күп тапҡыр ҡысҡырып та ҡараныҡ. Бушҡа.

– Бөтөнләй үк буш булмаҫ, кемгәлер барыбер барып етә. Ул берәү икенсе берәүгә еткерә. Хәбәр шулай тарала. Ә беҙ былай итәйек: икебеҙҙең исемдән Көңгөр халҡына белдереү яҙайыҡ. Дөрөҫ, матур, ышандырырлыҡ, аңлайышлы һүҙҙәр уйлайыҡ, табайыҡ. Һинең матур яҙа белеүеңә Кинйә абыҙ таң ҡалған. Тормош тыныс булһа, Усаевты тик балалар ғына уҡытырға тотор инек, ти. Һин, хәҙрәт, белгәндәреңде яҙ, шунан бергә уҡып шымартырбыҙ. Белдереү хатыбыҙҙы Миллер иртәгә үк ҡулына алырға тейеш.

– Бөгөн үк яҙабыҙмы?

– Булырлыҡ эште иртәгә ҡалдырырға ярамай, ти атайым. Аллаға тапшырайыҡ.

Ҡәнзәфәр сепрәккә төрөлгән ҡара һауытын, ҡаурый ҡәләмен алды һәм шәм яҡтыһына яҡыныраҡ ултырҙы. Ҡағыҙға хәрефтәр төшөрөр алдынан Пугачев, Кинйә тарафынан ҡул тамғаһы сәпәлгән указдарҙағы, манифестарҙағы һүҙҙәрҙе хәтеренә төшөрөргә тырышты. Шуларға таянып, шуларҙан сығып эш итергә кәрәклеген дөрөҫ тип фаразланы. Оҙонораҡ килеп сыға ҡалһа, өлөштәргә бүлеү дөрөҫ булыр. «Ҡыҫҡа, тик аңлайышлы яҙығыҙ», – тип талап итә Пугачев. Үҙе яҙаһыҙа белмәһә лә, указдарын, манифестарын, бүтән документтарын әйтер алдынан башында ҡойоп ҡуя.

Мөрәжәғәттең төп йөкмәткеһе, әлбиттә – ҡаланы батша Петр Федорович ғәскәренә үҙ теләктәре менән биреү. Тәүге өлөштәрендә Рәсәй империяһының күп өлөшө Петр Өсөнсө ҡарамағында икәнлеге хәбәр ителә.

– Урындағы халыҡтың башын ҡаңғыртыу, хәрбиҙәрҙең ҡотон алыу өсөн, Өфө баш күтәреүселәр ҡулына күсте, тип яҙырға ла онотма. – Салауат усын уҫҡа һуҡты. – Шулай уҡ Себер юлындағы заводтарҙың беҙҙең яҡҡа сығыуы хаҡында ла әйт.

– Килешерме?

– Нисек инде «килешерме»? Нисәмә заводтарҙы, ауылдарҙы үҙең алғанһың бит. Һин Пруссиялағы һуғышта нисәмә йыл йөрөп ҡайтҡанһың, ундағы хәйләләргә иғтибар итмәнеңме ни? Ике ҡаршы яҡ та бер-береһен алдарға әүәҫ, тип һөйләштерә ине атай. «Хәйләһеҙ донъя – файҙаһыҙ»ҙы ла өҫтәп ебәр. Теге саҡта Кар тар-мар ителһә лә, үҙенә әллә күпме ялған еңеүҙәре хаҡында өҫтәп Ҡазанға рапорт артынан рапорт ебәргән. Красноуфимск ҡәлғәһе беҙҙе нисек ҡаршы алыуы хаҡында онота күрмә. Рустарҙың дини байрамы көндө Крещеньела башҡортто, татарҙы нисек ҙурлап ҡаршы алыуҙарын белдереү ҙә яҙыҡ булмаҫ.

Ҡәнзәфәр, быларҙан тыш: «Үҙ-ара һөйләшеүҙәр аңлашыуға килтерер. Көңгөрҙәр артиллерияны, ҡоралдарҙы, дарыны, байраҡтарҙы үҙ теләктәре менән тапшырыр, быға ышанабыҙ» – тигән һүҙҙәрҙе өҫтәне. Шулай уҡ Көңгөр хужаларының баш күтәреүселәргә ҡаршы хәрби хәрәкәттәр ойоштороуы ҙур ғәйепкә һаналыуы һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Ғәйепһеҙ әҙәм балаларының Кишерть ауылы эргәһендәге яуҙа һәләк булыуын, ҡан ҡойолоуын иҫкә төшөрҙө. «Әгәр эш штурмға барып етә икән, халыҡ ҡаланан сығырға тейеш. Юҡһа уларҙың ғүмере өсөн яуап биреү юҡ».

Салауат Юлаев һәм Ҡәнзәфәр Усаев ҡултамғаһы ҡуйылған белдереүҙе 19 ғинуарҙа Красноуфимскиҙың ике казагы Дупленский менән Дружинин Көңгөргә илтеп бирҙе.

Миллер, Иҫке Посадта торған баш күтәреүселәргә яуап бирәһе урынға, әлеге мөрәжәғәтте ашығыс рәүештә Ҡазан ҡалаһына – генерал Александр Бибиковҡа юлланы.

1773 йылдың декабрь аҙаҡтарында Һатҡы, Златоуст заводтары өсөн көрәштә батырлыҡтар күрһәткән Табын казагы Иван Кузнецов 19 ғинуарҙа Иҫке Посадҡа килеп төштө. Салауаттан һуң, уның эҙенән тигәндәй юлдарҙы үтеү уға артыҡ мәшәҡәттәр тыуҙырмай. Сөнки шундағы ауылдар, Красноуфимск фетнәселәр яғында инде инде. Уға Зарубин тарафынан «бөтә рус һәм азиат ғәскәрҙәренең юлбашсыһы» тигән юғары дәрәжә бирелгән икән.

Иван Степанович, юлда арығанлығына зарланып тормай, шунда уҡ Салауатты, Ҡәнзәфәрҙе үҙенә саҡырҙы ла тегеләргә башы менән генә ымлап ултырырға ҡушты. Аяҡтарына ҡыҫҡа ҡуныслы быймалар, күлдәге өҫтөнән камзул шикелле еңһеҙ тун кейгән. Ҡаштары төйөлгән, ирендәре ныҡ ябылған. Ул ишекле-түрле йөрөндө. Ҡунаҡтарына боролмай ғына:

– Яй, яй ҡыланғанһығыҙ, Усаев. Бәләкәй генә һәр ҡалала шул тиклем оҙаҡ торһаҡ... – тип һөйләнә, ризаһыҙлығын белдерә башланы.

– Һин килгәс, иртәгә үк алырбыҙ, Аллаһ бойорһа.

Ҡәнзәфәрҙең һүҙен оҡшатманы Кузнецов. Уның ҡаршыһына туҡтаны.

– Император юҡҡа полковник дәрәжәһен биргәнме һиңә. Ҡазанға һөжүмде тиҙләтеү өсөн бит. Ышанысты аҡларға кәрәк.

– Бер-беребеҙҙән ғәйеп эҙләп ултырмайыҡ. Бөгөн, иртәгә нимә эшләү хаҡында уйлашайыҡ.

– Күрәһеңме, Юлаев та күрһәтмәләр бирергә өйрәнеп бара. Красноуфимск аша үткәнһең икән, әллә һинең еңеүме? Ана, Көңгөр халҡына белдереү яҙҙым, тамғаларығыҙҙы ҡуйығыҙ. – Кузнецов өҫтәлдә ятҡан ҡағыҙға ымланы.

– Ә беҙ мөрәжәғәтебеҙҙе оҙаттыҡ инде. – Шулай ҙа Салауат ҡағыҙҙы үҙенәрәк тартты. Күҙ йөрөттө лә Ҡәнзәфәр алдына шыуҙырҙы.

Ҡәнзәфәр ҡағыҙға яҙылғандарҙы ике-өс ҡат уҡыны ла башын Кузнецовҡа күтәрҙе.

– Беҙ ҙә Петр Федорович яғына сығырға өгөтләнек. Ә ниңә, рус халҡын башҡорттар ҡыҫыуынан ҡурсалаясаҡбыҙ, тип яҙҙың?

– Бәй, заманында Көңгөрҙө башҡорттар талаған, нигеҙенә ҡәҙәр яндырған бит.

– Ҡәнзәфәр дөрөҫ әйтә. Бына беҙ – башҡорттар, татарҙар, мариҙар, сыуаштар йыйылып килдек тә, башҡорттарҙан яҡлаясаҡбыҙ, тип үҙебеҙ хаҡында һөрән һалайыҡмы?

Ҡәнзәфәр ҡағыҙҙы ҡулына алды.

– Йәки беҙ, рустарҙан ҡурсалаясаҡбыҙ, тиәйекме, һинеңсә? Әгәр ҙә милләттәрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуя башлайбыҙ икән, тарҡаласаҡбыҙ. Пугачев нимә ти? Ул үҙ-ара дуҫлыҡты нығытырға ҡуша. Зарубиндың ҡолағына был хаҡта киртеп ҡуйырға кәрәк.

– Тимәк, «Белдереү»гә ҡул ҡуймайһығыҙ?

– Беҙ һин киләһе көндөң иртәһендә үк «Увещевание»ны илтеп бирҙек. Хәйер, Көңгөр воеводаһының яуап биреренә өмөт юҡ.

– Аңлашылды. – Кузнецов Ҡәнзәфәр ҡулындағы ҡағыҙҙы тартып алды ла төрә башланы. – Барыбер тиҙ үк ебәрергә кәрәк. Яуап бирмәйҙәр икән, үҙҙәренә үпкәләһендәр. – Ҡаурый ҡәләмде ҡараға манып, ҡултамғаһын ҡуйҙы. – Улайһа, 23 ғинуар хаҡында һөйләшәйек. Дүрт көндән штурм! – Ишекте асып, кемгәлер ҡысҡырҙы. – Бынауы хатты Көңгөргә илтеп тапшырығыҙ. – Өҫтәл эргәһенә килде. – Яуап көтәбеҙме?

– Яуапҡа ышанып ятып булмаҫ. – Салауат тороп баҫты. – Штурмға барыбер ныҡлап әҙерләнергә кәрәк. Әгәр ҙә ҡала үҙе теләп бирелә икән, бик хуп.

– Быға ышанмайым. Шәхсән мин ҡала халҡына бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт иттем. Мәсьәлә һуғышһыҙ сиселмәйәсәк. – Ҡәнзәфәр ҙә тороп баҫты.

Кузнецов уйға ҡалды. Һөйләшеү быңдай төҫ алырын һис кенә лә көтмәгәйне. Ҡара һин уны башҡорт, мишәр нисек һөйләшә. Зарубин тыңлап торһа: «Һин нимә, һеләгәй, Себер юлына баш командир итеп ниңә ебәрҙем? Үҙ-ара тартҡылашырғамы?!» – тип екерер ине. Ниңәлер мейес яғына күҙ һалды. Әллә уға эҫерәк булып китте, еңһеҙ тунын һалып, урындыҡҡа ташланы. Күлдәгенең киң еңдәрен күтәрә төштө. Ҡаштары аҫтынан Салауатҡа, Ҡәнзәфәргә ҡарап алды. Ултырып, ҙур ҡулдарын өҫтәлгә һалды.

– Беҙҙең бөтәһе дүрт мең кеше бар. Штурмды нисек ойошторорға уйлайһығыҙ?

– Һин командир, һинең фекерҙе ишетке килә. – Ҡәнзәфәрҙең әлеге һүҙҙәре Кузнецовтың күңелен йомшарта төштө. Тимәк, унын кемлеген таныйҙар. Юҡһа, ул, баяғы һөйләшеү өҙөшөүгә килтереүе бар, тип шөрләгәйне. Кем әйтмешләй, азиаттар, йәғни башҡорттар яман үҙ һүҙле, тиҫкәре, тиҙ үпкәләүсән бәндәләрҙән һанала. Тик был хаҡта оҙон-оҙаҡ һүҙ көрәштерергә ваҡыт юҡ. Үҙ-ара мөнәсәбәтте ҡырҡыулаштырыуға, янъялға юл ҡуйылырға тейеш түгел. Әгәр ҙә ундай хәбәр, Аллаһ һаҡлаһын, Пугачевҡа барып етә ҡалһа, башыңдан һыйпамаҫ. Уға, үҙе әйтмешләй, брат та, сват та юҡ.

– Беҙ хәҙер ғәләмәт көслө, – тип һүҙен дауам итте Усаев. – Ҡайҙандыр, кемдәндер өҫтәмә отрядтар көтөп ятаһы юҡ. Салауат тотош армия алып килгән.

– Ваҡытты һуҙмаҫҡа кәрәк, Иван Степанович. Дошман йоҡлап ятмай. Гагрин тигән секунд-майорҙың, регуляр яза командаһын алып, Кама буйлап был яҡҡа табан килеүе хаҡында хәбәр ҙә бар.

– Ҡайҙан ишеттең, Салауат?

– Көңгөр хәбәре. Ҡала халҡы секунд-майорҙы дүрт күҙ менән көтә, уның еңәсәгенә, яҡлауына ышанып, өмөтләнеп йәшәй.

– Хәйер, быға аптырайһы юҡ. Мин былай уйлайым, – тип Кузнецов ике ҡулын айырып, устарын өҫтәлгә һалды. – Үҙемә рус крәҫтиәндәрен, бөтә булған казактарҙы һәм алты пушка алам. Ильино ҡәлғәһенә урынлашам. Өс мең башҡортто, башҡаларҙы һиңә бирәм, Салауат. Эргәңдә – Усаев. Вознесенское ауылына урынлашаһығыҙ. Йәғни һеҙ Көңгөрҙөң төньяғында, мин көньяғында. Һеҙ ҡаланы – яр яғынан, мин болон яҡлап штурмларбыҙ. – Иван Степанович устарын уртаға тартты. – Сәғәт нисәлә башларға?

– Теүәл етелә.

– Ниңә етелә, Усаев?

– Саҡ яҡтыра башлағанда тотоноу ваҡытлы булыр. – Салауат Ҡәнзәфәр менән килешеүен белдерҙе. – Етелә туптарҙан тондорорбыҙ. Был дошман өсөн көтөлмәгән хәл булыр, ығы-зығы ҡубыр. Шунан инде саҡ йоҡонан һикереп торған һалдаттарға мылтыҡтарҙан пуля, йәйәләрҙән уҡ яуҙыра башларбыҙ.

Ҡәнзәфәр ни өсөн уларға ҡаланың төньяғын – йылға ярын биреүен, ә үҙенә тигеҙ – болон яғын алыуы хаҡында һорарға уйлағайны, тыйылды. Нисә һөйләһәң дә, Кузнецов Зарубин тарафынан «Бөтә рус һәм азиат ғәскәрҙәренең юлбашсыһы» итеп ебәрелгән. Уның айырым отрядтары менән Алтынлы ауылы кешеһе Иван Васев һәм Красноуфимск казагы Михаил Мальцев командалыҡ итәсәк. Васевты Ҡәнзәфәр үҙе тәҡдим итте, сөнки ул Көңгөрҙө штурмлағанда ҙур отряды менән ныҡ ярҙам иткәйне.

Ә инде Салауат командаһында Ҡәнзәфәр, Сөләймән Көскиев, Илсеғол Этҡолов, Әҙил Биғашев, Мәүлет Айытов, Ишмәт Мәмәтов һәм башҡа старшиналар. Батырҡай, отряды менән Әбди Абдулов һуғышып йөрөгән Уса тарафына китеүе сәбәпле, егерме өсөнсө ғинуарға тәғәйенләнгән штурмда ҡатнаша алмаясаҡ. Батырҡай Иткининдең өлөшө ҙур булыр ине, әлбиттә, тик Кама йылғаһы тарафтарында ла хәлдәр хәүефле. Унда ҡанлы бәрелеш бара.

Һуңғы көндәрҙә ҡоторған буран, урмандар араһында аҙашып, Сылва ҡаяларына бәрелә-һуғыла хәлһеҙләнеп, тамам баҫылды.

Аяҙ күктә тулған ай һәм алыҫтағы йондоҙҙар ерҙе тағы ла һалҡынайта кеүек. Әйткәндәй, минутлап ҡына булһа ла көн оҙоная. Төн хужаһы ай, таң һарыһынан ҡурҡҡандай, ireп юғалырға ашыҡҡан шикелле.

Урта буйлы, етеҙ хәрәкәтле Салауат, әллә ҡалын кейенгәнгә, ишектән туп кеүек тәгәрләп керә, тәгәрләп сыға кеүек тойола.

Ул Ҡәнзәфәрҙең урам уртаһында баҫып торғанын шәйләне. Ярым ҡараңғы булһа ла, Салауат уны оҙон кәүҙәһенән таныны.

– Хәҙрәт, – тип өндәште.

Ҡәнзәфәр тиҙ үк бер яғы асылған ҡапҡа эргәһенә килде.

– Йоҡлап булдымы?

– Өлкәндәрҙең йоҡо хаҡында һорашыуы аптырата мине. Ваҡыт ҡына булһын. Мендәр, яҫтыҡ кәрәкмәй.

– Көн шәп, Салауат, Аллаға шөкөр, хатта сәғәт алтыла башлағанда лә ярап торор ине.

– Һөйләшкәнсә. – Салауат яҡын уҡ килде. – Мине пушкаларҙың әҙлеге борсой. Ҙуры, бәләкәйе – йәмғеһе ун дана. Егерме бот дары. Күп түгел. Нисә һөйләһәң дә, Көңгөр ҡала бит әле. Өҫтәүенә, ҡаты нығытылған. Ул ғынамы – яр яғы. Ҡайҙа ҡәлғә төҙөргә баштары эшләгән.

– Туптарҙы ҡырҡ бомбардир хеҙмәтләндерәсәк. Завод крәҫтиәндәре. Дүртәр кеше. Өлгөрәләр. Туптарҙы саналарға беркетеп бәйләнек. Икешәр ат.

– Күрҙем. Кисә ҡарап сыҡтым. Туптарҙы атҡан һайын күсереп йөрөтөрбеҙ. Берҙән, һаҡлау өсөн, икенсенән, быларҙың туптары күп икән, тип уйлаһындар. Мылтыҡтар әҙ.

– Бик үк зарланмайыҡ әле. Көңгөрҙө ҡулға төшөргәс, байырбыҙ, Аллаһ бойорһа.

– Зарланыу түгел был, хәҙрәт, дөрөҫө шулай. Был хаҡта һиңә әйтмәй кемгә әйтәйем. Ярай, ваҡыт яҡынлай. Һәр саҡ элемтәлә булайыҡ...

Яңы көн тыуа. Һул яҡтан һирпелә башлаған яҡтылыҡ ҡәлғә башнялары осона ҡунды ла әкренләп түбәнгә, нығытмаларға, шунан йылға ҡаяһына шыуып төшә башланы.

Салауат яҡында торған туптан атырға әмер бирҙе. Был һөжүм башлауға сигнал ине. Пушкаларҙан, мылтыҡтарҙан дәррәү атырға тотондолар. Алдан һөйләшкәнсә, туптар һалынған саналарҙы һөйрәгән аттар, ҡар ярып, фронттың һул яғына ла, уңға ла ашығып уҙҙы. Шунлыҡтан дошман яғынан йүнле-рәтле тоҫҡап ата алмайҙар ине.

Фетнәселәр йәҙрәләрҙең күберәген ҡаланың уң – йылғалар ҡушылған тамаҡ яғына яуҙырырға һәм шунан бәреп инергә уйланы. Ысынлап та, Көңгөр стеналарына яҡын уҡ килергә мөмкинселек тыуҙы, һәм, ниһайәт, стенаның бер урыны емерелеп, тар ғына асыҡлыҡ пәйҙә булды. Был хәл, йәҙрәләрҙең тау буйындағы урамдарына уҡ төшөп ярылыуы, һыбай отрядтарҙың ҡаланың ситтәге тыҡрыҡҡа бәреп инеүе, ул ғынамы, иң ышанныслы яҡ – Сылва ярынан менеп, сауҙагәр Хлебниковтың йортон үртәү халыҡ араһында паника таратты, ығы-зығы ҡупты. Шулай булмаҫҡа, ҡала магистраты президенты, ҡурғаусылыҡта әүҙем ҡатнашҡан Иван Ивановичтың хужалығын юҡҡа сығарғас, бүтәндәргә ни ҡала.

Тик был ниндәй хәл: ни өсөн Кузнецов һөжүм башламай? Салауаттар инде ике сәғәт һуғыша, ә көньяҡтан – Ильино яғынан тауыш-тын юҡ.

Ҡала ныҒытмалары артына йәшенгән хөкүмәт ғәскәре иһә туптарҙан, мылтыҡтарҙан туҡтауһыҙ ата, был осраҡта йәйә ҡулланыуҙан ни фәтеүә? Ул ғынамы, туптан атыуҙары көсәйгәндән-көсәйә. Ни өсөндөр дошмандың пехотаһы, һыбайлылары асыҡлыҡҡа сыҡмай. Йә күкрәккә күкрәк, ҡылысҡа ҡылыс килеп һуғышырға ҡурҡалар, йә туп, мылтыҡ ярҙамында ғына ҡыйратырға самалайҙар.

Салауаттарҙың туп йәҙрәләре, дарыһы бөттө. Дошман утына ҡаршы торорлоҡ сара ҡалмағас, ҡоро батырлыҡ күрһәтеү иҫәпһеҙ ҡорбандар талап итеүен аңлап, Салауат Ильиноға ҡарай сигенергә әмер бирҙе. Көнө буйы һуғышып арыған, ҡараңғы иртәнән башлап тәғәм итмәгән фетнәселәр эңер йондоҙо ҡалҡҡас ҡына Иҫке Посадҡа ҡайтты.

Кузнецов Салауат менән Ҡәнзәфәрҙе үҙе туҡталған йортҡа саҡыртты. Өйҙә башҡа командирҙарҙың булмауы был икәүҙе аптырата төштө. Армия башлығы, моғайын, бөгөнгө уңышһыҙ һуғышҡа баһа бирәсәктер. Ундай етди һөйләшеүҙә йөҙ баштарына тиклем ҡатнашыу мотлаҡтыр.

– Ултырайыҡ, – тине Кузнецов, башы менән өҫтәл яғына ымлап. – Яман асыҡтым. Һеҙ ҙә шулайҙыр.

Өҫтәл өҫтө ризыҡ менән тулы. Табаҡҡа ит, бәрәңге өйөлгән, икмәкте ниңәлер киҫкеләп түгел, ҙур-ҙур киҫәктәргә һындырып ҡуйғандар. Тоҙланған кәбеҫтә лә, рустарҙың яратҡан ашы сало ла күренә.

– Хужа мышы ите әҙерләгән. – Кузнецов һөйәкле ҙур киҫәкте ҡунаҡтарына ҡаратып ҡуйҙы. – Ябыҡ хайуан, сусҡа түгел. Етешегеҙ. – Ул умырып ашаны ла ҙур ағас һауыттан йотлоғоп кеүәҫ эсте. Һаҡал, мыйығын һыпырҙы. Арыған башын йоҙроғона терәне.

– Штурм барып сыҡманы, – тип һөйләнде «Рәсәй һәм Азия ғәскәренең етәксеһе».

– Өлөшләтә ярарлыҡ булды, тип әйтергә мөмкин. Ҡәнзәфәр отряды яр буйы урамына уҡ бәреп инде. Бер нисә өй яндырылды. – Салауат, башын ҡыйшайта биреп, Кузнецовҡа баҡты.

– Юғалтыуҙар?

– Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Мәйеттәрҙе алып килдек. Бөгөн һуң, иртәгә ерләйәсәкбеҙ. Мосолманда тәртип шулай.

– Батырҙарса һуғышҡанығыҙ өсөн рәхмәт. Ә мин, – Кузнецов тороп ишеклетүрле йөрөнә башланы. – Ә мин... – Ул ниңәлер мөһим һүҙен әйтергә икеләнә төҫлө ине. Бармаҡтарын тығып, һаҡалын бутаны. Ҡабат ултырып, боттарына һуғып ҡуйҙы. – Ә мин хата ебәрҙем. Бөгөнгө штурмда хаталандым. – Ике ҡунағына ла ҡарап алды. – Әгәр хата ебәрелә икән, беҙ уны йәшермәҫкә, тағын да ҡабатланмаһын өсөн бергәләшеп сәбәптәрен тикшерергә, һығымта яһарға тейешбеҙ.

– Ә ни өсөн һин, Иван Степанович, һөжүмде ике сәғәткә һуңлап башланың?

– Һүҙҙе бүлдермә, Усаев, шуға табан барам. Уйымса, был ике сәғәттә дошман минең яҡтағы көсөн һеҙҙең яҡҡа күсерер, шул саҡта, көньяҡ йомшара төшкәс күтәрелергә, тип уйлағайным. Командирҙар араһында аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡты. Һүлпәнлек күрһәтелде. Ә бит пушкаларын, регуляр армияһын ысынлап та Ильино яғынан күсерҙеләр. – Тороп йөрөнә башланы. – Был хәлдән файҙалана, йылғырлыҡ, ойошҡанлыҡ күрһәтә алманыҡ.

– Шундай уйың булғас, был хаҡта кисә йә иһә иртә менән һөйләшергә ине. Быны беҙ ҡайҙан белергә тейеш? Бәлки, башҡасараҡ хәрәкәт итер инек.

– Тулыһынса килешәм, Салауат. Ауыҙҙы бүтәнсә былай бешерергә ярамай. Һабаҡ булһын. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡалаларҙы нисек штурмларға әле өйрәнәбеҙ бит. Иртәгә ҡабаттан һөжүм итәсәкбеҙ.

– Йәҙрә, дары юҡ. – Ҡәнзәфәр Салауатҡа ҡарап ҡуйҙы.

– Әгәр пушкалар күп булғанда, беҙ Көңгөрҙөң умыртҡа бағанаһын һындырыр инек, әлбиттә. Тик ҙур ҡәлғәне күҫәк менән ватып, мылтыҡлыларға ҡаршы уҡ атып ҡына әллә ҡайҙа китеп булмай. – Салауат аҙна элек кенә ҡырҙырып алдырған, әле инде ҡабаттан ҡара булып үҫеп килгән сәсен һыпырҙы.

– Тәҡдимең?

– Батшабыҙҙың әмерен үтәргә. Шуға ебәрелгәнбеҙ.

Салауатты ҡеүәтләп Ҡәнзәфәр:

– Мин ике мең кеше менән Көңгөрҙө ала алманым. Хәҙер көс икеләтә-өсләтә артты. Еңелеү хурлыҡҡа тиң буласаҡ, – тине.

Икенсе көндө, йәғни ғинуар айының егерме дүртенсе көнөндәге һөжүм алдағыһынан да уңышһыҙыраҡ булып сыҡты. Туптары өнһөҙ ҡалған фетнәселәрҙе ҡәлғә яғынан осҡан йәҙрәләр, пулялар тиҙ таратты. Етмәһә аҙағынаса уйлап еткерелмәгән, кәрәгенсә ойошторолмаған бәрелештә Салауаттың сандыр итенә пуля инеп ултырҙы. Йәш батырҙың өсөнсө яраланыуы ине был.

Кузнецов егерме алтыһында йәнә армияны һөжүмгә күтәрергә тәүәккәлләгәйне, «азиаттар» уның тәҡдимен хупламаны. Сөнки егерме өсөнсөләге еңелеү һәр кемгә нисек бар шулай, дөрөҫ килеш барып еткәйне. Ул ғынамы, Ҡазандан ике йөҙ һалдаты менән ике пушка ла алып юлға сыҡҡан секунд-майор Дмитрий Гагрин, Югов заводы тирәһендә фетнәселәргә ҡаршы көрәшеп йөрөгән Михаил Башмаковтың алтмыш казагын, Үрге Мулла ауылының ике йөҙ крәҫтиәнен өҫтәп, Көңгөргә килеп етте. Ылау-ылау запас ҡорал да тейәгән.

– Бына кемдең юлын баҫырға, һалдаттарын, ҡоралдарын ҡулға төшөрөргә кәрәк булған да бит… – тип үртәлде Ҡәнзәфәр. Ул был хаҡта янып, тир эсендә ятҡан Салауатҡа белдермәне. Салауат килгәс тә Гагрин тураһында һүҙ ҡуҙғатҡайны бит. Ләкин киҫәтеүе иғтибарһыҙ ҡалды.

Яраһын уңалтыу, дауаланыу өсөн Салауатты тыуған ауылы Тәкәйгә оҙатырға ҡарар ителде. Ҡәнзәфәр дуҫын Красноуфимскиға тиклем оҙатырға, шунда табип табып, пуляһын алдырырға уйлағайны, тик бар кешене телдән ҡалдырырлыҡ күңелһеҙ хәл килеп сыҡты. Кузнецов Ҡәнзәфәр Усаевты ҡулға алды. Йәнәһе, ул үҙ белдеге менән капитан Воиновты дарға аҫтырған, имеш, ауылдарҙа халыҡты талау менән шөғөлләнгән, етмәһә, бер сиркәүҙең ҡыңғырауын илле һумға һатып ебәргән.

– Ниңә? Ҡулға алыр ваҡытмы ни? – тип Салауат башын саҡ күтәргәс, «Рәсәй һәм Азия ғәскәренең етәксеһе»:

– Зарубин әмере. Усаевты уның ҡарамағына оҙатам, – тип яуапланы.

Ауыр яраһынан һыҙланып, янып, тирләп һыу эсендә ятҡан Салауат:

– И-и-и, – тип һуҙҙы ла, – улайһа, үҙ урыныма Собханғол Килтәков менән Сүри Рәсүлов старшиналарҙы билдәләйем. Саҡырып килтерегеҙ, ҡулдарына ҡағыҙ бирәм. – Салауат күҙҙәрен йомдо. Шулай еңелерәк тойолдо уға, сөнки тәнен ҡуҙғатыу түгел, күҙ ҡабаҡтарын һелкетеү ҙә һыҙланыуҙы арттыра һымаҡ ине. Тәне яна, ҡыҙа. Тәне шул рәүешле асыҡ яраның аҙыуына, боҙолоуына ҡаршы көрәшә ине. Өҫтөнә япһалар, шунда уҡ йөҙөн һыта: «Асығыҙ, ишекте асығыҙ!» – тип һөйләнә. Яуҙаш старшиналар сиратлап эргәһендә ултыра. Ирендәрен ҡымтып, уларҙы еүешләргә булашты йәш батыр. – Ҡәнзәфәр хәҙрәт биргән үләндәрҙе ҡайнатып эсерегеҙсе! – Былай ятыуына үртәлде. Ваҡыты был түгел. Нимә ул бер пуля? Аяғы өҙөлмәгән дә инде. Юҡ, юҡ, тиҙ үк тороп баҫасаҡ. Уны көрәштәштәре көтә. Кем ул Иван Кузнецов? Һөжүм ваҡытында ниңә ебеп ҡалды? Ниңә ул Ҡәнзәфәрҙе ҡулға алды? Уны нимә эшләтмәксе була? Быны Пугачевтан йәшереп, үҙ белдеге менән эшләйме? Ә ниңә уны тураға Бердаға оҙатмай?

Зарубиндың ниндәй ҡыҫылышы бар? Усаевты был тарафтарға Яңы батша үҙе ебәрҙе бит, полковник дәрәжәһен ул бирҙе. Салауат күҙҙәрен асты. – Собханғол ағай, һинме был?

– Эйе, Салауат. Шифалы үләндәр төнәтмәһе хәҙер ҡайнап сыға.

Салауат эйәген күкрәгенә тарта төштө. Тимәк, эйелергә ҡуша.

– Ҡәнзәфәр ҡайҙа?

– Өйөндә һаҡ аҫтында.

– Әйт. Нисек тә уға еткер: Зарубинға бармаһын. Нисек тә Пугачевтың үҙенә юлыҡһын.

– Төшөндөм.

Салауат башын саҡ һиҙелерлек итеп кенә һелкетте. Был хаҡта бер кемгә ләммимде аңлатырға уйлағандыр.

Собханғол Килтәков – Юлайҙан да өлкән кеше. Төбәләҫ волосы старшинаһы. Ихтилал күтәрелгәс тә, Сүркәй ауылы кешеләрен генә түгел, шул тирәләге ир-егеттәрҙе аттарына атландырҙы. Һатҡы заводына табан барыусы Иван Кузнецов хаҡында хәбәр алғас, отряды менән уға барып ҡушылды. Салауат менән бергә Красноуфимскиға һәм Көңгөр эргәһенә килде. Яҡташы, Әйле волосы старшинаһы Сүри Рәсүлов та уның менән бергә ине. Сүри Польша походында өс йыл йөрөп, тыуған төйәгенә ҡайтырға ғына өлгөргәйне. Үҙе әйтмешләй, «тағын поход»та.

Салауаттың Ҡәнзәфәр хаҡында әйткән һүҙҙәрен яуҙа һыналған, Көңгөрҙө штурмлауҙа бергә ҡатнашҡан яҡын яҡташына еткерергә булды. Буталыш заманында донъя хәлен кем белә. Дөрөҫ тә эшләгән, сөнки йорт хужаһына ярҙамлашҡан булып, Усаев эргәһенә ул инде, Салауаттың кәңәшен ул әйтте.

Ҡәнзәфәр менән Кузнецов араһында килеп сыҡҡан низағ дауамһыҙ ҡалманы: Красноуфимск казагы Михаил Мальцев, Салауаттың да, Ҡәнзәфәрҙең дә юҡлығынан файҙаланып, Солтанғол Килтәков менән Сүри Рәсүлевты ҡулға алды. Ғәйеп шул: рус ауылдарында халыҡҡа ҡарата ҡатылыҡ күрһәткәндәр, талағандар, христиан диненә тел тейҙергәндәр. Былар хаҡында һуңынан ныҡлап һөйләшәсәктәр.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ныҡлап һөйләшеү булманы, сөнки Кузнецов Ҡәнзәфәрҙе ҡаты һаҡ аҫтында Чесноковкаға илтеүҙе Мальцевҡа ышанып тапшырҙы. Ә был, юлға сығырға «ҡабаланыуы» арҡаһында, Собханғол менән Сүриҙе бик аҫтында онотоп киткән. Фетнәселәр сигенеүе арҡаһында ике старшина – ике батыр язалау командаһына юлыҡты. Язаның иһә ҡатыһы һайланды, әлбиттә: айға яҡын һорау алыуҙарҙан, ғазаплауҙарҙан һуң, икеһен дә Көңгөрҙә ҡабырғаларынан аҫтылар. Шулай итеп, Кузнецов командаһы отрядтарының береһе – яраланғанға тиклемге башлығы Салауат булған армия етәксеһеҙ ҡалды. Иван Кузнецов үҙе иһә, Зарубиндан ярҙам һорарға тип, Чесноковкаға юлланды...

***

Ҡалыпланған Усаевты Иҫке Посадтан Алтынлы ауылына килтерҙеләр. Сана башына арҡаһын терәп ултырған Ҡәнзәфәр арттан оҙата барған ике һыбайлынан башҡа бер нәмәне күрмәне, хатта тирә-яғына ҡараманы. Күңеле ҡырылыуы тынысланырға ғына түгел, оҙон төндәр буйы йоҡларға ла ирек бирмәне. Ул хатта алдағы көндәрҙә нимәләр көтөүе, аҙмышы ҡайһы яҡҡа боролоуы хаҡында ла уйларға теләмәне. Әлеге хәле, Көңгөр эргәһендә уңышһыҙлыҡҡа осрауҙары әрнетте. Күпме ауырлыҡтар күреп, яфа сигеп, мең кешенең аҙмышын иңенә һалып, Пугачевтың ышанып тапшырған бурысын үтәргә кил дә аяҡ-ҡулдарыңа бығау һалдырып кире ҡайтмы? Хеҙмәтеңде, тырышлығыңды бына

нисек баһаланылар. Былары ла иң мөһиме түгелдер, иң мөһиме, иң һыҡратҡаны: ауылдарынан, заводтарынан, ғаиләләренән айырып яуға алып киткән шул ҡәҙәр әҙәм балаларының йәһәннәм аҫтында һинһеҙ ҡалыуы. Уларҙың һәр ҡайһыһы ышанып, киләсәккә өмөтләнеп һинең күҙҙәреңә ҡарай ине бит. Уларҙың тамағын туйҙырырға, йылытырға тырыштың. Булдыра алғанса тинләп булһа ла хеҙмәт хаҡы ла бирергә ынтылдың. Уларҙың бөтәһе лә һинең ҡушыуың буйынса ут эсенә, үлергә барҙы. Береһе генә лә яу яланын ташлап ҡасманы. Дошман туптарҙан, мылтыҡтарҙан ата, ә улар һөнгөһөн, күҫәген күтәреп, балтаһын тотоп шуға ҡаршы йүгерә. Салауат яраланып, дауаланыу өсөн тыуған төйәгенә ҡайтып китте. Берүк тиҙерәк терелә күрһен. Ваҡытлыса ғына булһа ла унаң сафтан сығыуы – үҙе бәхетһеҙлек. Егерме дүртенсе ғинуарҙа штурм яһауҙың кәрәге юҡ ине, әлбиттә, сөнки алдағы көндөң кисенә үк, йәҙрә, дары бөтөү сәбәпле, туптар өнһөҙ ҡалғайны бит. Ҡорал тупларға, хәлде аҙағынаса тикшерергә, аңларға тейеш инек... Хәйер, был хаҡта әле баш ватыуҙан ниндәй файҙа? Етмәһә, баш полковник Кузнецов та, армияны ошо хәлдә ҡалдырып, Чесноковкаға һыпыртты. Уның бойороғон үтәмәҫкәме? Ярамай. Командирға буйһонмау – енәйәт. Енәйәт эшләгән һәр кем яза алырға тейеш. Пугачев законы. Уға тоғоро хеҙмәт итеү өсөн ант иткәнһең. Шулай дөрөҫ.

Алтынлы ауылына килеп еткәс, атты ҙур ҡапҡа төбөнә туҡтаттылар. Тун, ҙур бүрек кейгән көрәк һаҡаллы әҙәм сыҡты.

Оҙата килеүселәр:

– Герасим Ивановичҡа һаулыҡ теләйбеҙ, – тип сәләм бирҙеләр.

Ҡарт шунда уҡ һораша башланы:

– Кемдәр булаһығыҙ? Ниндәй йомош? Кем ебәрҙе?

– Колодник, – тип санала килгәне сыбыртҡы һабы менән Ҡәнзәфәргә ымланы.

– Ниндәй колодник? Көңгөрҙәнме? Әллә ҡаланы алдығыҙ?

– Көңгөргә теш үтеңкерәмәй. Үҙебеҙҙең полковник.

– Фетнәсеме? Әллә хәҙер бер-берегеҙҙе ҡулға ала башланығыҙмы? Фамилияһын беләһегеҙме?

– Усаев. Улығыҙ Иван Герасимович һеҙгә инергә ҡушты.

– Әллә ҡасан шулай тиергә ине. – Йорт хужаһы ҡапҡаны шар асты. – Инегеҙ тиҙерәк.

Ҡәнзәфәр Герасим Ивановичтың улын – Иван Васевты яҡшы белә. Көңгөрҙө тәүге штурмлауҙа бергә булдылар. Сөнки Ҡәнзәфәр, был тарафтарға килеп еткәс тә, отряды менән уның командаһына ҡушылды. Батыр, тәүәккәл командир. Тик Кузнецов рустарҙы бүлеп үҙенә алғас, Васев отряды менән уның ҡул аҫтына күсте. Тимәк, Усаевты Алтынлы аша алып китәһеләрен белгәс, уның хаҡында ҡайғыртҡан.

Ҡәнзәфәрҙе колодкаларынан да азат итмәйенсә өйгә индерҙеләр.

– Һеҙ нимә, ниңә кеше башынан көләһегеҙ? – тип йорт хужаһы казактарға асыуланды. – Шундай ҙур командирҙың башынан көлөргә кем ҡушты?

– Атаман Мальцев, – тип яуапланы оҙатып барыусыларҙың береһе.

– Беләм Еремканың писарын.

– Уға баш полковник Иван Кузнецов әмер биргән.

– Әмер, имеш. Кеше булып ҡалырға кәрәк. Улым Иван бер осрашҡанда был иптәште бик маҡтап телгә алғайны. Беҙҙең төбәккә уны батша Петр Федорович үҙе ебәргән бит. Сығып тороғоҙ. Ул минең ҡунағым. Ҡалыптарын һалдырығыҙ.

– Хаҡыбыҙ юҡ.

– Һеҙ, диуаналар, ошо килеш юлда алып бара күрмәгеҙ. Өфөгә еткәнсе ҡулдары,

аяҡтары өҙөлөп төшәсәк. Аңлайым, аңлайым: һеҙ – ябай һалдаттар. Әҙәмсә ял итергә, тамағын туйҙырырға ирек бирегеҙ.

Казактар башҡаса һүҙ әйтмәй сығып китте.

– Инде берүк башҡорттар, рустар, татарҙар үҙ-ара һуғыша күрмәһен. Ул сағында карателдәр фетнәселәрҙе берәмләп түгел, меңәрләп һуясаҡ. – Герасим ҡарт күргән-белгәндәрен байтаҡ ваҡыт һөйләп ултырҙы. Әбейе ике-өс тапҡыр ғына күренеп ҡалды ла ҡайҙалыр йоҡларға ятты шикелле – юҡ булды.

Был тарафтарҙа заводтар төҙөлә башлағас, Герасимдың атаһын, башҡа яҡташтарын Калуга яҡтарынан күсенеп килергә мәжбүрләгәндәр. Башҡорттар иһә үҙ биләмәләрендә заводтар, ҡәлғәләр төҙөүгә баш-аяғы менән ҡаршы килгән. Тиндәргә, араҡыға һатылған башлыҡтарын, старшиналарын ғәйепләп, хатта уларҙы үлтереп ташлау осраҡтары ла ҡабатланып торған. Улары улар, төрлөсә ҡыйырһытыуҙарға, мысҡыл итеүгә түҙә алмаған ерле халыҡ, ойошоп, иҙеүселәргә ҡаршы баш күтәргән, заводтарҙы, ҡәлғәләрҙе талаған, үртәгән. Дошманлыҡ, нәфрәт, бысаҡҡа бысаҡ килеү арта ғына барған. Ә юғарыла ултырған даирәләргә шул ғына кәрәк. Рустар, башҡорттар, татарҙар, башҡа халыҡтар үҙ-ара аралашмаһын, бер йоҙроҡ булып ойошмаһын. Әле килеп тыуған хәл иһә бөтөнләй икенсе: төрлө милләт кешеләре тик бер генә уй, маҡсат менән күтәрелә – Әбей батшаны тәхеттән бәреп төшөрөп, уның урынына ирек, ер, һыу вәғәҙә итеүсе Петр Өсөнсөнө ултыртыу.

Герасим ҡарт, ныҡ һирәгәйгән, ап-аҡ төҫкә ингән сәсен ҙур усы менән һыпыра-һыпыра, Ҡәнзәфәр эргәһенә яҡын уҡ ултырҙы, маңлайын терәрҙәй итеп уға һуҙылды.

– Манифесын Ваня күрһәтте, һығымтаһын әйтте. Имеш, һин Петр Федоровичтың эргәһендә булғанһың, имеш, бында уның әмере буйынса килгәнһең? Ысынлап та, уны үҙ күҙҙәрең менән күрҙеңме? Юғиһә, төрлө һүҙҙәр йөрөй: имеш, ул бөтөнләй Петр Өсөнсө түгел, ә ялған исемдәге батша.

– Ул ысын батша, Герасим Иванович. Петр Беренсенең ейәне. Тәхеттә йылдан артыҡ ҡына ултырғас, тотҡан юлы менән килешмәүселәр уны үлтерергә һүҙ ҡуйыша. Петр Өсөнсө быны һиҙеп ҡала ла ҡаса. Сөнки армия ла быны яҡламай. Бер урында ғына йәшәмәй. Ил буйлап берәҙәк рәүешендә халыҡтың нисек йәшәүен ҡарап, өйрәнеп йөрөй. Ун ике йыллап ваҡытын үткәрә. Ниһайәт, шундай ҡарарға килә: Рәсәйҙәге ябай халыҡ артабан былай көн итергә тейеш түгел, ҡоллоҡ бығауҙарын үҙе өҙмәһә, уға бер кем дә ярҙам итмәйәсәк. Бай ҡатлам сереп байыясаҡ, ә крәҫтиән астан үләсәк. Төйөн көрәшһеҙ сиселмәйәсәк. Тик эште ҡайҙан, кем менән башларға? Яйыҡ йылғаһының түбәнге яғында, Ырымбур тарафтарында хеҙмәт итеүсе казактар, имеш, баш күтәрергә, Әбей батшаны бәреп төшөрөп, ябай халыҡты ҡоллоҡтан ҡотҡарырға уйлай. Шунда юллана. Хәбәр дөрөҫ булып сыға, һәм ул фетнәселәрҙең, ихтилалдың башында торорға ризалаша. Ябай халыҡ, тоғро хеҙмәт итеү өсөн ант итеп, уға ағыла. Армияһы, әкиәт батыры кеүек, йыл үҫәһен көн үҫә. Ғәскәр Яйыҡ буйындағы ҡәлғәләрҙең береһе артынан иенсеһен ҡулға ала. Ырымбурҙы ҡамай. Белеп, ишетеп тораһығыҙҙыр, бөтә башҡорт ере: Волга, Кама буйҙары, Пермь провинцияһы ихтилалсылар ҡарамағында.

– Ә ниңә ул батша башы менән ябай бер казак ҡыҙын үҙенә ҡатын иткән?

Ҡәнзәфәр был көтөлмәгән һорауҙан ҡаушабыраҡ ҡалды. Шундай хәбәрҙең таралыуына аптыраны.

– Шулайын шулайҙыр, тик бына ул тиклем донъяны ҡулығыҙҙа нисек тоторһоғоҙ? Тирә-яҡ язалау командалары менән тулған.

– Бөтәбеҙ бергә көрәшһәк кенә, яҙмышыбыҙға хужа булырбыҙ.

– Әле һине һаҡлаған һалдаттарҙың береһе: «Усаев сиркәү ҡыңғырауын һатҡан, шуға ҡалыпҡа һалғандар»,– ти. Дөрөҫтөрме, түгелдерме, миңә ҡараңғы, ә шулай ҙа сиркәүҙәргә тейергә ярамай. Ул – халыҡтың Алла менән ҡайғыһын, серен уртаҡлашҡан, уға табынған берҙән-бер изге урын. Беҙ, христиандар, мосолмандарға ҡағылырға тейеш түгелбеҙ. Ана, бынан егерме йылдар элек бер муллағыҙ мәсеттәрҙе емергән өсөн бола күтәргәйне шикелле. Беҙҙән әллә ни алыҫ түгел, Барҙы тирәһендә лә тулап алғандар, тип ишеткәйнек. Унда башҡорт, татарҙар күпләп йәшәй. Уларҙың болаһын баҫтырып, үҙҙәрен яман яҙмышҡа дусар иткәндәр. Әле лә шулай була күрмәһен, тием. Бөтә бәлә ябай халыҡҡа төшә бит.

– Һинеңсә, ғүмер буйы баш эйеп йәшәргәме?

– Белмәйем, туғанҡай. Рәсәй шулай ҡоролғандыр инде, башҡаса юлы юҡтыр. Берәүҙәр типтерә, меңдәр интегеп йәшәргә тейештер. Бог шулай ҡушҡан. – Өй хужаһы мөйөштәге тәрегә ҡарап суҡынып алды.

Ҡапҡа асылғандай булды. Ишекте шаҡынылар. Герасим тунын яурынынына һалды ла соланға сыҡты. Өйгә хужаның улы Иван Васев менән Ҡәнзәфәрҙе һаҡлаусы казактарҙың береһе инде. Уларға Герасим эйәргәйне.

– Хәҙер үк һалдыр ҡалыптарын! Ҡалыптар миңә кәрәк.

– Үҙең яуап бирерһең, арлы-бирле булһа, – тип казак кеҫәһенән асҡыстар сығарҙы ла шәм яҡтыһында йоҙаҡтарҙы алып сығып китте.

Иван Ҡәнзәфәрҙең ҡулдарынан тотоп күреште. Ҡәнзәфәр, уға урын бирергә теләп, тәҙрәгә ҡарайыраҡ тартылды.

– Ултырып торорға ваҡыт тар, полковник, секунд-майор Гагрин, регуляр командаһын Көңгөрҙәге ғәскәр менән дә тулыландырып, Красноуфимскиға килә. Шуға күрә мин тиҙ үк отрядым эргәһенә сабам. Яу көсәйә, ғәҙел командирым булдың. Шундай мәхшәрҙә һин дә, Салауат та, Кузнецов та юҡ. – Эйәген услап уйланып торҙо. Башын ҡапыл ғына күтәрҙе. – Ике сәғәттән юлға сығығыҙ. Юғиһә, язалаусыларға эләгеүең ихтимал. Атай, бынауы ҡалыптарҙы алыҫҡараҡ йәшер, бәлки, секунд-майорҙы әсир итһәк кәрәгер. – Аяҡтарына баҫҡан Ҡәнзәфәрҙе ҡосаҡлап, ныҡлығын ҡарағандай һелкетте. – Хуш, полковник. Ставкаһына барып етеү менән, императорға Урал сәләмен еткер. – Ҡолағына һуҙыла бирҙе. – Оҙатыусыларға буйһонорға тырыш. Уйланмаған аҙым яһама. Йә ул алйоттар һиңә ҡарата әллә ниндәй яуызлыҡ ҡылып ҡуйыр. Кузнецов Ҡәнзәфәрҙе ныҡ һаҡлау хаҡында Мальцевты ҡаты киҫәткән. Атай, оҙатырһың ҡунаҡты. Ә быларҙы, – иҙәндә ятҡан ҡалыптарға ымланы, – мин алып китте, тиерһең. Әлегә... – Иван ҡулын күтәреп хушлашты ла сығып китте.

Герасим Иванович: «Һаҡланырға тырыш, Ванюша» – тип һөйләнә-һөйләнә, улы артынан ашыҡты.

– Хәүефле көндәр көтөлә был төбәк кешеләренә. – Ҡәнзәфәр үҙ алдына һөйләнде лә тәҙрәгә үрелде. Ләкин, быяла ҡалын боҙға туңғанлыҡтан, бер нәмә лә күренмәне.

...Ҡышҡы бормалы, үрле-түбәнле юл. Боғалыш ауылы үтелде. Һул яҡта тигеҙерәк урындар, асыҡлыҡтар күренгеләһә, уң яҡлап урман менән ҡапланған бейеклектәр, тауҙар оҙата бара.

Ҡәнзәфәр Көңгөргә электән үҙе белгән, һәр хәлдә Ҡарышҡа тиклем, төбәктәр аша үтһә, «ҡайтып барған» юлы әлегә тиклем күрелмәгән ят ерҙәргә һуҙылған.

Көн аяҙ, үтә һалҡын. Артта килгән ат танауынан сыҡҡан быу аҡ төтөндәй өрөлә. Шуныһы һәйбәт: ел юҡ. Герасим бүләк иткән иҫке толоп менән аяҡтарҙы

ла ҡаплап ултырғас, февраль айының тәүге көнө икәнен дә онотаһың. Санаға теҙләнеп алға ҡарап барған дилбегә тотҡан казакка шул толопто кейергә тәҡдим итеп тә ҡарағайны, теге ишетергә лә теләмәне. Күрәһең, уларға ҡулға алынған Усаев менән бер ниндәй мөғәмәлә лә булмаҫҡа кәрәклекте ныҡ аңлатҡандарҙыр. Туңһа туңа, һыр бирмәй. Ярай, үҙҙәре ҡараһын. Әлеге хәлендә Ҡәнзәфәр тик үҙе өсөн генә яуаплы. Уның яуаплылығында бер кеше лә юҡ, бөтә яуҙаштары Иҫке Посад тирәһендә ҡалғайны. Уларҙың бөгөнгө яҙмышы хаҡында белмәүе йөрәген һыҡратты.

Салауат Көңгөргә килгәндә, моғайын, ошо юлдан үткәндер. Ҡайҙалыр бынан алыҫ түгел уның тыуған төйәге булырға тейеш. Әй, Йүрүҙән, тип маҡтанып та, һағынып та иҫкә ала торғайны. Ана, Әләгәз, Мәсәғүт ауылдары Әй буйына ултырған, Таймый, Мәсетле, Ҡаратаулы тигәндәре – Йүрүҙәндә. Тимәк, ул ошо тирәлә үҫкән. Ғәскәрен дә ошо тарафтарҙа йыйғандыр.

Тауҙан төшкән юл урта тәңгәлендә ҡапыл уңға бороллдо. Урман менән уратылып алынған тәрән соҡорҙа Эҫем заводы ултыра. Был хаҡта ҡаршы осраған ниндәйҙер башҡорт ҡарты әйтеп үтте.

– Эҫем, Эҫем, – тип ирендәрен ҡыбырлатты Ҡәнзәфәр. Был исемде, эйе, эйе, Бердала саҡта Салауаттан ишеткәйне. Дөрөҫөрәге, Юлайҙың биләмәһен Твердышевтар тартып алып, завод төҙөгән, унда эшләргә крепостной крәҫтиәндәрен ҡыуып килтергәндәр. Юлай ҡайҙарға ғына яҙып ҡарамаған, Ырымбур губернаторына ла барған, тик бер урында ла яҡлау, хаҡлыҡ тапмаған. Рәсәй мәнфәғәттәрен күҙәтеп Польша походында ҡатнашҡан, батшаға тоғро хеҙмәт иткән Аҙналин һаҡалын һыпырып ҡалды. Уның элек урмандар ҡаплаған, шарлап аҡҡан йылғалы ерендә, торбаһынан һары төтөн борҡотоп, завод Твердышевтарға йыл һайын меңәрләгән бот суйын иретеп сикһеҙ байлыҡ килтерә. Тирәяҡтағы урмандарҙы мәрхәмәтһеҙ рәүештә ҡырҡалар. Сөнки завод мейестәре, убыр шикелле, ағас күмерен ашай. Байлыҡты иһә, яман ҙур баржаларға тейәп, яҙғы һыу ташҡынында тәүҙә – Эҫем, шунан Ағиҙел буйлап түбәнгә ҡыуалар...

Әлеге хәбәрен Салауат Кинйә абыҙға һөйләп торғайны.

Ҡыш булһа ла, киң генә һай йылға ағып ята. Уның күперен сыҡҡас, юл тауға күтәрелә башланы. Атҡа еңелерәк булһын, аяҡтарын яҙыр өсөн, Ҡәнзәфәр сананан төштө. Әлегәсә тотҡондоң бындай ҡылығын бик үк хуплап бөтмәгән һаҡсылар был юлы өндәшмәне. Улар хатта Васевтың ҡалыптарҙы һалдырыуына ҡыуанды. Сөнки был «имгәк»те йөҙәрләгән саҡрым буйы кинәндереп алып бар. Ат тотоусы үрҙәрҙә төшөргә, ә ул ирәйеп ятырға тейеш. Ҡунып ҡалған ауылдарҙа хатта аттарҙы ҡарашырға ҡуша башланылар. Йәнәһе, ул ял итеп кенә бара, ҡулына дилбегә, теҙген тотмай.

Чесноковкаға ҡайһы яҡлап, нисек барып инергә икәнлекте белмәгәнлектән, оҙатыусылар бер туҡтағанда Ҡәнзәфәргә үҙҙәре мөрәжәғәт итте.

– Һин командир булғанһың бит, Өфө тирәһен һәйбәт беләһеңдер. Артабан ниндәй юлдан барыу дөрөҫ булыр? – тип шөбһәләнеүҙәрен белдерҙеләр.

Ул бер аҙ ваҡыт уйланып торҙо ла юл ситенә маяҡ итеп ҡаҙалған ҙур ботаҡты һурып алды. Бер эҙһеҙ ап-аҡ ҡар өҫтөнә үрелеп, бәләкәй түңәрәк һыҙҙы. Шуның тирәһенә бер нисә төрткө яһаны.

– Бына бынаһы Өфө булыр, – тине, түңәрәккә күрһәтеп, – Уң яҡта, йәғни ҡаланың көньяғында – Чесноковка. Беҙ барған көнсығыштан юл юҡ хөкөмөндә. Ҡариҙел һәм ҡарурманлы тау. Унда дошман. Төньяҡлап бөтөнләй хөрт: текә яр, аҙашырлыҡ урман. Өфө үҙе ҡамауҙа. Берҙән-бер хәүефһеҙ юл көньяҡлап. Уңға, Ҡарамалы тигән ауылға боролорға кәрәк. Шунан һуң Ағиҙел аша боҙ өҫтөнән сыҡҡас, Ҡабаҡ, Алмантай ауылына туҡталыу хәйерлерәк.

Казактар, тотҡондо иғтибар менән тыңлаһалар ҙа, уның һүҙҙәренән бер нәмә лә аңламанылар. Ул һанаған ауылдарҙың исемдәре лә хәтерҙәрендә ҡалманы. Элекке командирҙы һаҡлаһалар ҙа, асыуынан, язалау командаһы осрап, дошманға һатып ебәреүенән шөрләп барҙылар.

Алмантай сыуаш ауылы булып сыҡты. Һуңғы төндө бында үткәрәсәктәр ҙә иртән, тамаҡ туйҙырғас, Чесноковкаға юл аласаҡтар. Уға әллә ни алыҫ та ҡалмаған, ти.

Ауылға килеп инеү менән, Ҡәнзәфәр казактарға тәүге осраған кешенән старостаның өйөн һорарға ҡушты.

– Давай, давай, һин үҙең, йә беҙгә әйтмәҫтәр, – тип оҙата барыусылар әлеге яуаплы эште тотҡонға йөкмәттеләр. – Ят төбәк. Өйҙәрен дә теләһә ниндәй ағастан ғына һалғандар.

– Иғтибар итмәнеңме ни: был тирәлә, ғөмүмән, шыршы, ҡарағай үҫмәй, – тине икенсеһе, белдеклеген күрһәтеп.

Староста өлкән йәштәрҙәге, һирәк һаҡаллы, күҙҙәре ҡыҙарып бөткән Сиханов Шушпан тигән кеше икән.

Юлсыларға иҫе китмәне. Һуңғы айҙарҙа халыҡты талап аптыратып, йөҙәтеп бөткәндәр. Ун һигеҙҙән алтмышҡаса йәштәге барлыҡ ир-ат һуғышта икән. Килеүселәр бигерәк тә бесән, һоло таптырып ҡаңғырталар, ти.

Баштан-аяҡ тигәндәй киндер туҡыманан кейенгән староста Ҡәнзәфәрҙең полковник икәнлеген белгәс, зарланыуынан туҡтаны. Ҡундырып сығарырға йылы өй табырға вәғәҙә итте.

– Һин былирҙың берәйһе менән... – Ҡәнзәфәр уға күҙ ҡыҫты һәм татарса: «Мин айырым»?– тип бышылданы. Сыуаш телен тыйып, туҡтап ҡалды ла эйелеп сабата киндерәһен бәйләгән булды. – Улайһа, былай итербеҙ: һин миңә инерһең, ә был өс иптәшең Алмантай ҡартҡа урынлашыр. Ауылға шуның исемен ҡушҡандар.

Казактарҙың береһе:

– Беҙгә айырылырға ярамай, – тип һүҙ башлағайны, староста:

– Рәхмәт әйтегеҙ. Халыҡ ҡурҡып бөттө. Сит кеше индерергә сат ҡаршы. Ҡатын-ҡыҙға үрелергә лә тартынмайҙар. Аттарығыҙҙы ихатама индерергә ҡаршы түгелмен.

– Давай, егеттәр, старостаның һүҙен тыңлайыҡ. Саҡырылып килгән, көтөп алынған ҡунаҡ түгелбеҙ. Беҙҙең халыҡта шундай һүҙ бар: «Бер кискә кер мейескә». Әгәр минән шикләнәһегеҙ икән, сиратлашып ихатала һаҡларһығыҙ.

Шушпан әйткәнсә килештеләр. Старостаның шул яғы яҡшы: русса ла, татарса ла белә. Казактар булғанда Ҡәнзәфәр йәшерен һүҙҙәрҙе үҙенсә әйткеләне.

Муса ауылы еренә сыуаштар Ҡазан өйәҙенән килгән. Араларында суҡындырылғандары ла бар, ти. Тегендә ер ҡыҫыҡ булһа, бында хәйерселек хөкөм һөрә.

Ҡәнзәфәр ихатаға сығып, һыбай килгән ике аттың яҡшыраҡын айырым бәйләп, алдына артып ҡалырлыҡ һоло һалды. Ике-өс сәғәт ныҡлап ашаһын. Алдан уйлағаны шул: ат тамағын туйҙырһын, ял алһын, үҙе саҡ ҡына серем итә һәм – юлға. Шуға күрә йорт хужаһы менән оҙаҡ гәпләшеп торманы. Толобын йәйеп, урындыҡ ситенән урын алды.

– Шушпан ағай, оҙаҡ ятырға ваҡытым юҡ, ныҡлап йоҡлап китә ҡалһам, уят. Юлға сығам.

– Ә тегеләр?

– Иртә менән уларға былай тиерһең: «Полковник үткән төндә ҡунған ауылда

мөһим документын онотоп ҡалдырған, шуның артынан сапты. Төшкә урап килергә тырышасаҡ. Мине мотлаҡ көтһөндәр».

– Кире килмәһәң?

– Артабан үҙ яйҙарын үҙҙәре ҡарар. Толопты ҡалдырам, иҫкерәк булһа ла, ярап торор. Минән иҫтәлек.

– Исем-атың кем булды һуң? Әйтмәнең.

– Ғүмер бөтмәһә, осрашырбыҙ әле. Иртәнге яҡта ғына китте, тиерһең.

– Төшөндөм, полковник.

– Бынығы дөрөҫ. Мин – полковник. Яңы батша полковнигы.

Ҡәнзәфәр хырлап йоҡлап китеүгә, староста уны уятты. Юлаусы тиҙ кейенде. Хужа менән ихатаға сыҡтылар. Яңы ай көн яҡтырғанда ғына тыуғанлыҡтан, ергә күктәге йондоҙҙарҙан ғына бер аҙ яҡтылыҡ төшә ине. Сиханов эйәр ҡайыштарын ҡаптырышты. Атҡа менгән полковник ҡапҡанан сыҡҡас, уңға боролғайны, староста:

– Һулға, һулға! Ҡабаҡ ауылы һулда, – тип ҡысҡырҙы.

– Тәүҙә был яҡҡа, Шушпан ағай, унан ғына был яҡҡа, – тине лә Ҡәнзәфәр атын Өфө-Ырымбур юлына әйҙәне.

Сиханов ҡарт уның был һүҙҙәренән бер нәмә аңламаһа ла, ҙур бейәләй кейгән ҡулын күтәрә төшөп:

– Иҫән йөрө, яугир, – тип һөйләнде. – Тамуҡ тигәндәренә әйләнде бит был ҡара донъя. Аҫты өҫкә килә. Яңы батша тиҙерәк еңһә, мәхшәр тыныр ине. Ерле итһәләр, һуғыш та бөтөр. – Өйөнә инеп, йоҡларға ашыҡты. Сөнки көн тыуһа, мәшәҡәт арта. Килеп-китеп йөрөүсеһе лә бихисап. Инде берүк ҡыш уртаһында ауыл янып китмәһен.

***

Ҡәнзәфәрҙең бөтә күңеле, йөрәге Боҙаяҙына тартылһа ла, Сүриәһен, балаларын өҙөлөп һағынһа ла, уларҙы бер күрергә зар-интизар булһа ла, атын һулға – Ҡырмыҫҡалы яғына тартты. Үҙе төҙөгән өйөнә ҡағылып китә алмауына сәбәптәр етерлек. Уның юғалыуын белгәс, Зарубин эҙләтмәй ҡалмаҫ; шулай уҡ ҡайныһы Мөҡсин, Ишмөхөмәт старшина ла йоҡлап ятмайҙыр. Быларынан да бигерәк, иҫән-имен саҡта Пугачевтың үҙенә барып юлығырға кәрәк. Ғаиләһе менән барыбер осрашасаҡ, донъя рәткә һалынһа, ауылында йәшәйәсәк. Халыҡтың көнкүреше, тормошо яҡшырыр, балалар уҡыр. Ҡәнзәфәр Боҙаяҙҙа ғына түгел, башҡа ауылдарҙа ла мәсеттәр төҙөттөрөр, мәҙрәсәләр астырыр. Берәй волоста старшина була ҡалһа, һалым һалыу һәм йыйыу, килеп тыуған бәхәстәрҙе ҡарау, ерҙәрҙе бүлеү, әрме хеҙмәтенә ебәреүҙе күҙәтеү кеүек эштәр менән генә шөғөлләнмәҫ, иң мөһиме, ирек, тигеҙ хоҡуҡлыҡ, ҡоллоҡтан, бурыстан ҡотҡарыу кеүек мөһим мәсьәләрҙе хәл итеүҙе алға ҡуйыр. Хәйер, ул саҡта ер-һыу, урмандар ябай халыҡҡа биреләсәк тә инде.

Таныш юл. Ҡәнзәфәр был юлдан уҙған йылдың ноябрендә Ырымбурға – «Петр III»-нө күрергә тип үтһә, декабрь айында Пугачев уны Көңгөр тарафтарына ебәрҙе. Яңы, 1774 йылдың февраль айы башы, ул тағын ошо юлда. Ишле ауылы, Стәрлетамаҡ, Бөгөлсән пристандәре, Йөҙөй, Бикҡол ауылдары һәм Берда биҫтәһе. Ырымбур әле булһа ҡамауҙалыр. Яйыҡ буйындағы ҡәлғәләр ниндәй хәлдә икән? Петр Федорович Башҡортостанға йыйынмаймы? Теге саҡта ул Кинйә абыҙ менән: «Әгәр, ғәли йәнәптәре, беҙҙең тарафтарға барып сыҡһаң, һиңә тиҙ арала биш мең кеше йыйып бирәбеҙ», – тигәс, был хаҡта уйлап ҡарарға вәғәҙә иткәйне. Ниңәлер һуҙа. Бер Ырымбурға бәйләнеп, Бердалағы землянкаларҙың түшәменә төкөрөп

ятыу, ҡулға төшкән мөһим крайҙарҙы ҡулдан ысҡындырыу ҡурҡыныс тыуҙыра түгелме?..

Юлдар осһоҙ-ҡырыйһыҙ булып тойолһа ла, улар, диңгеҙҙәргә, бейеклеге саҡрымдарға күтәрелгән тауҙарға барып төртөлгәс, туҡталып ҡала. Ә уйҙарға сик юҡ. Уларҙың оҙонлоғон да, киңлеген дә үлсәү мөмкин түгел. Ҡәнзәфәрҙең күршеһендә яңғыҙ ҡарсыҡ йәшәй. Бабайы ла, балалары ла, хатта яҡын ғына туғандары ла юҡ. Егете уны заманында алыҫтан алып ҡайтҡан. Бергә оҙаҡ йәшәй алмағандар. Иген сәсергә ер асыр өсөн  урман ҡырҡҡанда ирен имән ағасы баҫып үлтергән. Тыуған төйәген дә, туған-тыумасаларын да хәтерләмәй. Тик шуны ғына иҫләй: имеш, ауылдары эргәһендә ҡамышлы күл бар, борон унда ҙур йылан йәшәгән. Бер саҡ тик торғандан ғәрәсәт ҡупҡан да, ҡара болоттар түбәнәйеп, шуны күтәреп алып киткән. Ҡойроғо хатта әллә ҡайҙа тиклем һөйрәлеп барған. Хужаһыҙ ҡалған күл йылдан-йыл бәләкәйләнә бара икән. Элек аҡҡоштар оя ҡорһа, хәҙер өйрәктәр ҙә төшмәй, ти.

Шул ҡарсыҡ әкрен генә тик бер генә йырҙы һуҙа ине:

*Уйлайым да уйлайым, осона сыға алмайым.*
*Ғүмерем буйы көтәм, дуҫҡайым, эргәңә бара алмайым...*

Көйө лә таныш түгел, һүҙҙәрен дә, бәлки, үҙе уйлап сығарғандыр. Моғайын, көйөн дә баҡый донъяға үҙе менән алып китер. Бәлки, һүҙҙәре ҡалыр...

Күпме саҡрым юл үтһә лә, юлда бер генә лә шикле кеше осраманы. Йә күшегеп бөткән берәҙәк, йә арыҡ ат һөйрәгән сана артынан саҡ эйәреп атлаусы өлкән йәштәрҙәге ҡарт-ҡоро. Тауар, аҙыҡ-түлек тейәгән оҙон-оҙондарға һуҙылған ылауҙар юғалды. Алыҫ илдәр, Фирғәнә, Бохара, Хивалар менән ара өҙөлдө. Тик килер ваҡыт: Ырымбур, Өфө, Ҡазан алыныу менән, сауҙагәрҙәр тағы юлға сығыр.

***

Берда биҫтәһендә тынлыҡ ине. Кемдәрҙер аттары тирәһендә урала, төркөмдәргә бүленеп һөйләшә. Өй мөрйәләренән, ҡыуыш, землянка түбәләре тишектәренән төтөн күтәрелә.

Ҡәнзәфәр Кинйә тирмәһе алдына атын етәкләп барҙы. Ишек эргәһендә торған казак килеүсенең кемлеге менән ҡыҙыҡһынды һәм әйтеү өсөн эскә үтте. Тиҙ үк сығып, башы менән генә ишеккә ымланы.

Кинйә ут яҡтыһында ниндәйҙер ҡағыҙға текәлгәйне. Шуны бер нисәгә бөкләнгән кейеҙ өҫтөнә ҡуйҙы ла Ҡәнзәфәргә бороллдо. Алға атлап, ике ҡулын һуҙҙы. Күрешкәндән һуң балаҫҡа ултырып доға ҡылдылар.

– Һис киҫекмәҫтән батша хәҙрәттәрен күрергә кәрәк, Кинйә абыҙ. Ул бындалыр бит?

– Ҡабаланма. Ул Яйыҡ ҡаласығында. Инде айҙан артты.

– Ҡәлғәләме?

– Юҡ, ҡәлғә әле булһа ҡамауҙа. Был юлы шуның көлөн күккә осороу уйы менән юлланғайны, гарнизон бирелмәй. Симоновты, йәғни шундағы командирҙы баш эйҙереү кәрәк. Сөнки Яйыҡ ҡәлғәһе тәнгә ингән шырау шикелле: арҡаңа теләһә ҡасан хәнйәр ҡаҙау ҡурҡынысы янай. Ҡәлғәне алырға Толкачевты ебәргәйне.

– Толкачевтар күп бит. Бер туғандары ла бар.

– Быныһы – атаман Михайло. Улар үҙҙәре шунан. Хәлле ғаилә. Ул булдыра алмағас, үҙе юлланды. Казактарҙың Яйыкты шуға ла юҡ иттергеләре килә: ғаиләләре өсөн ҡурҡыныс. Яза отрядтары килеп теләһә ҡасан ҡыйратыуҙары бар. Беҙҙең халыҡҡа Ырымбурҙың бирелмәүе кеүек. – Ҡәнзәфәр, Кинйәнең был

фекерен аңламай, яурынын һикертте. – Башҡорттар Ырымбурҙы туҙҙырыуҙы талап итә, сөнки уның ҡул аҫтында булғанда ирекле көн итеү юҡ. Ярай, алыҫ юлды яҡын итеп килгәнһең икән, тигәндәй, ныҡлап танышырһың. Әгәр дөрөҫ еткерһәләр, Көңгөр тирәһендә йәмһеҙерәк күренештәр булған.

– Матур түгел, әлбиттә, абыҙ. Беренсенән, ҡорал етмәй, икенсенән, һуғыша белмәйбеҙ.

– Үҙ-ара?

– Үҙ-араны һеҙ тикшерегеҙ. Ундағы ғәскәр менән командалыҡ итергә Салауат ҡалһа, күңел ул тиклем әрнемәҫ ине.

– Яраланыуы нисек булды?

– Егерме өсөнсө ғинуарҙа Көңгөрҙө көнө буйы штурмланыҡ. Верхнее Озеролағы кеүек, минең команда уң яҡтан бәреп тә ингәйне – ярҙам булманы. Сигендек. Кеше ғәйепләгән кеүек була. Ул хаҡта Иван Кузнецов яҡшы белә. Әгәр ҙә ысын егет икән, дөрөҫөн һөйләр. Бөтә йәҙрәне атып бөттөк, дары ла ҡалманы. Икенсе көндө тағын штурм... Салауаттың сандыр итенә пуля ингән. Яраһы ҡаты, ҡурҡыныс. Ҡанын күп юғалтҡан. Етмәһә, беҙгә командующий булып килгән шул уҡ Кузнецов Салауатты һүлпәнлектә ғәйепләп маташты.

– Ә үҙеңде?

– Бер капитанды аҫтырыуҙа ғәйепләне. Ғинуар баштарында булған хәлде ай аҙағында килтереп сығарҙы. Сиркәүҙең бер ҡыңғырауын һаттым илле һумға. Алған туптарҙы, ҡулға төшөргән аҡсаларҙы Чесноковкалағы Зарубинға оҙаттым.

– Бүтәне бүтән, ҡыңғырау һатыуыңды хупламайым. Теймәгеҙ, яҡын бармағыҙ сиркәүҙәргә. Ҡолағыңа киртеп ҡуй: сит дингә тығылмағыҙ. Ябай кеше донъялағы бер нәмәгә ышанмаһа ла, Аллаға ышана, ярҙам һорап уға табына, мөрәжәғәт итә. Беҙгә мәсет нисек ҡәҙерле булһа, уларға – сиркәү. Батша хакимлығы, уның вәкилдәре ғүмер баҡый халыҡтарҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйып дошманлаштырып бөтөргән.

– Миңә нимә эшләргә? Әллә уның эргәһенә Яйыҡҡа барырғамы? Былай ҡасып йөрөгән кеше шикелле килеп сыға.

– Йөрөмә. Ҡайтырға тейеш. Эш етерлек. Яҙыр, рәткә килтерәһе ҡағыҙҙар күбәйеп китте. Указдарҙы, манифестарҙы күсерергә кәрәк. Ярҙамлашырһың.

Бердала аҙна буйы йәшәгәс, Ҡәнзәфәр түҙмәне, Кинйәнән фатиха алып, бер төркөм казактарға ҡушылып, Яйыҡ ҡаласыһына юлланды. Өҫтөнән ғәйеп алынмаған көйө икеле-микеле йәшәү күңелен ҡырҙы. Ул ғынамы, донъя ут эсендә, фетнәселәр аяуһыҙ көрәш алып бара, ҡан ҡойола, ғүмерҙәр өҙөлә, йәндәр ҡыйыла, ә һин ҡайҙалыр далала тыныс ҡына йәшәп ятсы әле. Абыҙ шулай уҡ, форсат сыҡһа, Пугачевтың ҡолағына ғына Боғрослан тарафтарынан генерал Петр Голицын ҙур һанлы ғәскәре менән Ырымбурға ҡарай юлланыуы хаҡында еткер, тине. Ҡайтһын.

Оҙаҡҡа һуҙылған салт аяҙ, һалҡын көндәрҙе һәм төндәрҙе, әйтерһең, далаға хужа булып иҫкән елдәр һепереп алып китте: буран ҡоторҙо. Ысынлап та, был төбәктәге елдәр юлдарына осраған һәр нәмәне өҙөргә, йолҡорға, һындырырға, йәһәннәмгә оҙатырға, кешеләрҙе, хайуандарҙы аяғынан йығырға ынтыла кеүек. Бураны иһә күҙҙе астырмай, юлдан яҙҙыра, аҙаштыра, хәлдән тайып ҡалыусыны тиҙ үк күмеп ҡуя. Уға ҡаршы торор көс тә, әмәл дә юҡ.

Шундай ҡот осҡос буранда барырға тура килде Яйыҡҡа. Ҡасаба урамдарында ла ҡар өйөрмәһенән ғәйре нәмә юҡ ине. Петр Федорович атаман Толкачев йортона урынлашҡан икән. Уға инерҙән алда Ҡәнзәфәрҙән кемлеген, ниңә килгәнлеген әллә нисә кеше һорашты, хатта тун кеҫәләрен ҡапшап ҡаранылар. Бер

ҡарауға был ҡыланыштары ғәрләндерһә, икенсенән, дөрөҫ тә, сөнки Пугачевтың башын Әбей батша ун мең һум менән баһалаған бит. Был тиклем аҡсаға, кем әйтмешләй, ярты донъяны һатып алырға мөмкин.

Әллә Берданан килтергәндәр инде, Ҡәнзәфәр ингәндә Яңы батша шундай уҡ бейек арҡалы, биҙәкле ҙур ултырғыста ине. Эргәһендә ебәк, бәрхәттән генә кейенгән, әкиәт донъяһынан килеп төшкәндәй сибәр ҡыҙ ултыра. Ҙур ҡара күҙҙәренең еңел ҡабағын төйөп, Ҡәнзәфәргә ҡарап ҡуйҙы. Маңлайын Пугачевтың беләгенә терәне.

Пугачев, Ҡәнзәфәрҙе күреү менән, ҡулын ҡыймылдатып, әлеге ҡыҙҙы ситкәрәк этәрҙе. Күрешергә тартылды. Ҡәнзәфәр башын эйеп, ҡулын күкрәгенә ҡуйып сәләм бирҙе. Шунан ғына үҙенә һуҙылған ҡулдарҙы тотто. Әлеге ҡулдар ике ай эсендә йомшара, бәләкәйләнә төшкәндәй тойолдо.

Ҙур өйҙөң оҙон өҫтәле артында Яңы батшаның яҡын ярҙамсылары ултыра ине. Улар араһынан Яйыҡ казагы полковник Тимофей Мясниковты, полковник Тимофей Подуровты, Хәрби коллегияның канцелярия эштәренә яуаплы Яйыҡ казагы Иван Почиталиндарҙы шәйләп алды Ҡәнзәфәр.

– Ҡәнзәфәр Усаев! – Ярым ҡысҡырып тегеләргә өндәште Пугачев. – Һуғыш яланынан килгән. Ай буйы Көңгөрҙө штурмланы. Ҡайнар аш бирегеҙ. Шарап эсмәй. Мулла ул. Ҙур белемгә эйә, тиҙәр үҙен.

Өҫтәл артындағылар нисек ултырғандар – шулай ултырыуҙарын дауам итте.

Ҡәнзәфәр, Пугачевҡа ғына ишетелерлек итеп, хәлен ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙе.

– Бөтәһен дә ғәфү итәм. Онот. Уйҙарың киләсәктәге һуғыштарҙа күңелеңде ҡырмаһын. Кем йылы өйҙә мейес башында ята – шул ғына ғәйепһеҙ. Ә инде ҡыңғырауға килгәндә, – Яңы батша бармағын һелкте, – ундай эште тыям. – Ҡәнзәфәрҙең яурынына һуғып алды ла өҫтәл артындағыларға боролдо. – Иван Белобородовты бына кем тапҡан. Сатан мужик Уралды дер һелкетә бит. Молодец, Усаев, тоғро хеҙмәтең, кешеләрҙе таный, айыра белгәнең өсөн рәхмәт. Өлгө алырлыҡ кешеһең.

Ҡәнзәфәр Кинйә һүҙҙәрен дә еткерҙе. Пермь провинцияһындағы хәлдәр менән дә асыҡ итеп таныштырҙы. Унда ла эштәрҙең үтә ҡатмарланыуы хаҡында ҡат-ҡат әйтте.

Пугачев, һаҡалын услап, уйға ҡалды. Шул килеш оҙаҡ ултырҙы. Өндәшмәне.

Тороп баҫҡас ҡына, Ҡәнзәфәрҙең арҡаһына йомшаҡ ҡына һуға-һуға:

– Оҙаҡ тормай Бердаға юлланам. Бергә булырбыҙ. Һиңә алдағы көндәрҙә нимәләр эшләргә кәрәклекте шунда хәл итербеҙ. Ә был минең бисә – Устинья Петровна Кузнецова була. – Сибәр ҡыҙға боролдо. – Ышаныслы командир – Усаев. Мишәр.

Йөҙөндә балалыҡ, бер ҡатлылыҡ сағылған батшабикәнең күҙ ҡарашы моңһоу ҡалды.

Казактар Пугачевты Яйыҡ биҫтәһендә ҡалырға, Яйыҡ ҡәлғәһенә яңы штурм яһарға ни саҡлы ғына өгөтләһәләр ҙә, ризалашманы.

– Һеҙгә Яйыҡ ҡәҙерле, ә халыҡҡа – Рәсәй. Көнбайыштан Голицын килә, – тине лә, кашауайға ултырғас, кәүҙәһен төлкө толоп менән ҡапланы һәм егерме беренсе февралдә Бердаға ҡайтып төштө. Һыбайлылар араһында Ҡәнзәфәр ҙә бар ине.

Туй мәшәҡәттәре менән йонсоған Пугачевҡа, ниһайәт, айнып, һушына килер ваҡыт етте, сөнки уға ҡаршы Голицын ғына түгел, Бөгөлмә яҡлап Башҡортостанға генерал-майор Александр Ларионов етәкселегендәге ғәскәр ҙә походҡа сыҡты. Төп маҡсаты – алыҫтарға ҡурҡыу һалып Чесноковкала ятҡан, Өфөнө әле булһа ҡамауҙа тотҡан Зарубин-Чиканы тар-мар итеү.

Бурандарҙы ауыҙлыҡларға теләпме, Арал диңгеҙе яғынан йылы елдәр далалар өҫтөнә һуҙылып ята башланы. Ҡояш көндән-көн юғарыраҡ үрмәләп, көндәрҙе оҙонайта барҙы. Ҡыйыҡтарҙан ашығып тамған тамсылар кискә ҡарай боҙбармаҡтар хасил итеп аҫылынһалар ҙа, төнөн артыҡ һалҡынайтмай. Оҙон ҡыш буйы әсе һалҡындарҙа интеккән фетнәселәрҙең дә, малҡайҙарҙың да һулышы иркенәйә төштө.

Шундай көндәрҙең береһендә, йәғни март уртаһында, Пугачев Ҡәнзәфәрҙе үҙенә саҡыртты. Яңы батша артыҡ етди ине. Иҫәнләшеүе лә ҡоро ғына булды.

– Беҙ, Усаев, аңлап тораһың, оло, изге эш башланыҡ. Дошман яман көслө, яуыз, хәйләкәр, ғәскәре өйрәтелгән, тейешенсә ҡоралланған, провиантҡа ла мохтажлыҡ кисермәй. Өҫтәүенә, күп старшиналар беҙгә ҡаршы. Нимә эшләргә тейешбеҙ? Ҡулдарҙы күтәреп бирелергә, башты түмәргә һалырғамы, әллә ирек өсөн йөрәгебеҙҙең һуңғы тибешенә ҡәҙәр боғаҙлашырғамы? Өндәшмәй тор. Беләм, һин халыҡ өсөн йәнеңде фиҙа ҡылырға әҙер. Өҫтөбөҙҙәге болоттар ҡуйыра, ҡарая бара. Тик ул ваҡытлыса ғына. Күгебеҙ һәр саҡ аяҙ булһын өсөн һыбайландыҡ. Үҙең менән ете кеше ал да юлға сыҡ. Һине үҙең тапҡан, фатиханды биреп яуға оҙатҡан Иван Белобородовҡа ярҙамға ебәрәм. Көңгөргә мең кеше йыйып алып барып һуғышҡан батырҙар командирыһың. Тейешле ҡағыҙҙарҙы алырһың. Беҙ – һалдаттар, атака алдынан ҡосаҡлашып хушлашайыҡ. – Яңы батша, ҡоласын йәйеп, Ҡәнзәфәргә табан атланы. Уны өс ҡабат үпте. – Юлың уң булһын, Ҡәнзәфәр. Яу яланында осрашырға насип итһен.

– Амин, шулай булһын.

Һирәк була торған һалҡын һәм буранлы, күп ҡарлы ҡышты онотторорға тырышҡандай, яҙҙың тәүге айы марттың йылы елдәре өрҙө, ә инде көндән-көн бейегәйә барған ҡояш нурҙарын ергә мул түгә башланы. Кешеләр күңелендә лә яңы хистәр, өмөттәр уяныр мәл етте.

Тик фетнәселәргә яман осор яҡынайыуы хаҡында яңынан-яңы шомло хәбәрҙәр өҙлөкһөҙ килеп торҙо. Боғрослан тарафтарында генерал Петр Голицын хәрәкәтләнһә, Ҡазан юлынан Өфөгә ҡарай походҡа сығырға юғарынан генерал Александр Ларионов әмер алды. Был инде Әбей батшаның ялған Петр Федоровичты, йәғни Пугачевты тиҙ арала һәм аҙағынаса тар-мар итеү, хатта исемен дә халыҡ күңеленән юйып бөтөрөү, онотторoу өсөн иң шәп регуляр ғәскәрҙәрен Өфөгә, Ырымбурға ебәреүе ине.

Ларионов алтынсы мартта Ыҡ йылғаһы буйына 1736 йылда төҙөлгән Нуғайбәк ҡәлғәһен фетнәселәрҙән ҡайтарып алды. Ләкин генералдың күтәренке кәйефен ике көндән һуң баш атаман, полковник Василий Торнов, Ҡаранай Моратов, Ҡыҙрас Муллаҡаевтар боҙҙо. Баш күтәреүселәр батырлығына сыҙай алмай, хөкүмәт ғәскәре кире сигенде.

Кеше яҙмышы. Баш атаман Торновты Персианинов тип атап йөрөтөүселәр ҙә бар. Сере шунда: әлеге Василий Ивановичты ун йәшлек сағында төркмәндәр Ирандан урлаған һәм Вәлитте ҡаҙаҡтарға һатҡан. Далала көтөү көтөп ун алты йәшенә еткәс, Яйыҡ йылғаһының тамағында урынлашҡан Гурьев ҡалаһына ҡасҡан. Ҡаҙаҡ телендә һөйләшкән ҡаҡса йөҙлө, ҙур танаулы, эре бөҙрә сәсле үҫмер «Ҡайҙан?» тип һораусыларға «Мешхәд», «Иран» һүҙҙәрен генә ҡабатлаған. «Диңгеҙгә барам. Төркмәндәрҙән ҡурҡам», – ти икән...

Моғайын, Вәлит Каспий диңгеҙе аша тыуған иленә ҡайтырға хыялланғандыр. Шуғамы, уға «Персианинов» фамилияһын сәпәгәндәр. Бейек, артыҡ ныҡ бейек болоттарҙы йыртҡан тауҙарҙы күҙ алдына килтереп илаған иранлыны Ырымбурҙа суҡындырғандар. Шунан башлап ул Вәлит түгел, ә Василий. Пәрәнжә ябынып йөрөгән ҡыҙға түгел, ә зәңгәр күҙле Кристинаға өйләндергәндәр. Крәҫтиән

ҡыҙы үҙе һары сәсле булһа ла, Василий Торновты ҡуңыр йөҙлө ике малай, бер ҡыҙ бала табып ҡыуандырған.

1773 йылдың октябрь айында уҡ Пугачев яғына сыҡҡан. Яйыҡ буйындағы ҡәлғәләр өсөн һуғышып, Ырымбурҙы штурмлауҙа актив ҡатнашып йөрөгәндән һуң, Пугачев уны Нуғайбәк ҡәлғәһенә баш булырға һәм тирә-йүнде күҙәтеү аҫтында тоторға, хөкүмәт ғәскәрҙәрен Башҡортостанға үткәрмәҫкә тип ебәрә.

Нуғайбәктә ҡышлағандан һуң, Ҡазан яҡлап ҡурҡыныс ныҡлап янай башлағас, яңы йыл башында Торнов Ҡаранай менән бергә Бердаға юллана. Маҡсат шул: Әбей батша ғәскәрҙәренә ҡаршы тороу өсөн өҫтәлмә кешеләр, пушкалар һорау.

Ләкин Яйыҡ ҡаласығында туй мәшәҡәте менән мәшғүл булып ятҡан Пугачевтан, шулай уҡ Хәрби коллегиянан дә ярҙам ала алмайынса, Нуғайбәккә кире боролалар.

Алыҫ араны үтеп, көндәрҙе сарыф итеү арҡаһында, улар ҡайтыуға Бибиковтың язалау отрядтары Минзәлә, Нуғайбәк тирәләрендәге фетнәселәрҙе туҙҙырғайны инде.

Ҡаранай отрядтары Илья Ульянов командаһына ҡушылып, Нуғайбәкте ҡабат ҡулға төшөрҙө. Тик оҙаҡҡа түгел, яҡшы ҡоралланған регуляр ғәскәр, ҡаласыҡты арыу уҡ тупҡа тотҡандан һуң, фетнәселәрҙе Нуғайбәкте ташлап ҡасырға мәжбүрләне. Ә инде ун икенсе мартта, 630 кешенән торған ғәскәрен һәм дүрт пушкаһын да алып, полковник Николай Котин Баҡалы эргәһенә килеп етте. Әммә фетнәселәр аяуһыҙ һуғышты. Бер ҡоралһыҙ халыҡтың атакаға ташланыуын күреп, генерал Ларионов хатта аптырап ҡалды. Разведка эшен йүнләп ойоштора белмәгәнлектән, генерал төндә Ульяновтың үҙе менән байтаҡ кешеһен, пушкаларын алып Чесноковкаға, ике туған ағаһы Зарубин эргәһенә китկәнлеген дә белмәне. Шунлыҡтан аҙна буйы, урынынан ҡуҙғалырға ҡурҡып, Баҡалы эргәһендә ултырҙы.

Теге саҡта Көңгөр ҡалаһына штурм ойошторған, әле инде Баҡалы ҡәлғәһе өсөн барған һуғышта Ульяновҡа ярҙамға ебәрелгән Табын казагы Иван Кузнецов батырҙарса һәләк булды.

Пугачевҡа ҡаршы көрәштәге уңыштары хаҡында Әбей батшаға туранан-тура рапорт ебәреп ултырған Ларионов күрһәткән мәғлүмәттәр баш командующий Бибиковтың һарыуын ҡайната ине.

Фетнәселәрҙе туҙҙырыуҙа уңыштарға ирешелмәгәс, Дунай походтарында йөрөгән Александр Суворовты Бөгөлмә тарафтарына ебәреү хаҡында ла юғарыла һүҙ ҡуҙғатылды, әммә ләкин һуғыш яландарында, һалдаттар араһында дан ҡаҙанған генерал-майорға әлегә ҡағылмаҫҡа ҡарар ҡылынды. Сөнки ундағы походтар тағын да яуаплыраҡ. Һүҙ Рәсәйҙең донъя алдындағы абруйы хаҡында бара. Бында иһә әлегә Бибиковтың аҙмышы, дәрәжәһе хәл ителә.

Командующийға оҙон-оҙаҡ уйланырға ваҡыт юҡ ине. Ул генерал Ларионовты подполковник Иван Михельсон менән алмаштырҙы. Михельсон, йәш булыуына ҡарамаҫтан, һуғыштарҙа тәржибә тупларға өлгөргән. Иң мөһим сифаты: тәүәккәл. Ларионов кеүек икеләнеп, оҙаҡ баш ватып тормай.

Михельсон Санкт-Петербург полкының күп өлөшөнә етәкселек итеп, ун туғыҙынсы мартта Баҡалы ҡәлғәһенә килеп етте һәм, ике меңдән торған ғәскәрен ике көн ял иттереп, Өфөгә ҡарай походҡа ҡуҙғалды. Корпусы үткән ауылдарҙың бушлығына, ҡайһы берҙәренең яндырылыуына ул аптыраманы, нигеҙҙәрен ташлап ҡасҡан кешеләрҙең март айында ҡайҙа, нисек көн итеүҙәре лә уны хәсрәтләндермәне. Киреһенсә, бындай күренеш полковникты осондорҙо ғына, сөнки ҡаршылыҡ күрһәтеүсе юҡ. Тик шуныһы: фетнәселәрҙең ҡайҙалығын,

ҡайһы яҡтан һөжүм итеүҙәрен һорашып белергә форсат юҡ – мөмкин түгел. Атта еңел генә саптырып Өфөгә барып инә алмаясағын Михельсон яҡшы аңлай ине. Бындай осраҡта иң мөһиме – уяу булыу, тоҙаҡҡа эләкмәү, арттан килтереп сәпәүҙән һаҡланыу. Дөрөҫ, Михельсон, уның хәүефһеҙлеге өсөн полковник Кожин яуаплы икәнлеген белһә лә, алға ынтылыу менән бергә, тылын да онотманы.

Шулай ҙа егерме өсөнсө мартта осрашты ул фетнәселәр менән, дөрөҫөрәге, Зарубиндың разведкаһы уны Дим буйындағы Ҡара Яҡуп ауылы эргәһендә ҡаршы алды. Төркөм өсөн әлеге бәрелеш фәжиғәле тамамланһа ла, Михельсон корпусының ҙурлығы һәм ҡайҙа килеп еткәне хаҡында хәбәр итеү өсөн, ике һыбайлы Чесноковкаға елдерергә өлгөрҙө.

***

Тере ҡалып әсирлеккә төшкән Табын казагын һөйрәп подполковниктың үҙенә килтерҙеләр. Ныҡ туҡмалған бисараның ҡулдарын ысҡындырғас, ул еңе менән ҡанлы ауыҙын, танауын һөртөргә ашыҡты.

– Ялған батша – Пугачев ҡайҙа? – Михельсон, ваҡыты юҡлыҡҡа ишара яһап, атынан төшмәй генә һораны.

Әсир мыҫҡыллы йылмайҙы. Һынған тештәре төбөнән әле булһа ҡан һарҡа ине. Шуны һурып, тапалып бөткән ҡарға төкөрҙө.

– Петр Федоровичты күрергә насип булғаны юҡ әле. Өфөнө алыу өсөн бында килергә тейеш шикелле. Ҡаршы алырға иҫәп ине. Ул бит батша кеше, буталып йөрөмәй. Бердала тороп етәкселек итә, тиҙәр.

– Зарубин? Ялған Чернышев?

– Генерал Иван Никифоровичты һорайһыңмы? Ул Ставкала.

– Беҙҙең килгәнде беләме?

– Генерал кеше нимә эшләп белмәһен. Беҙҙе разведкаға ебәрҙе. Белә. Һине көтә.

–Ҡайҙа көтә?

– Жуково ауылында. Дим йылғаһының һул яғында.

– Ниңә унда? Күпме фетнәсе?

– Өфө юлы һаҡлана. Кеше һаны ике меңдән ашыу.

– Чесноковкала?

– Унда төп көс. Ғәскәребеҙ ун меңдән кәм түгел.

Михельсон атының башын ситкә ҡайырҙы. Казактың еңенән тотоп торған офицер подполковникка өндәште:

– Нимә эшләтергә?

– Үҙебеҙ менән алып барабыҙ. Алдашҡан булһа, үлтерерһегеҙ. Һис кисекмәҫтән Зубовоға. – Ситкәрәк киткәс, Михельсон тиҙгә генә өлкән офицерҙарын йыйҙы. – Ни өсөн Жуковаға түгел тиһегеҙме? Мине Өфө юлын һаҡлап ятыусылар ҡыҙыҡһындырмай. Беренсе сиратта, дошмандың төп көсөн тар-мар итеү мөһим. Жуковола торғаны үҙенән-үҙе тарҡаласаҡ. Миңә Зарубин кәрәк. Уны юҡ итмәй тороп, Өфөгә инеп булмаясаҡ. Төндә атакалайбыҙ.

Төн тигәне лә ҡыштың болотло ҡыҫҡа көнөнә тиңләрлек ине. Сөнки аяҙ күктә йөҙгән ай, әйтерһең, язалау отрядтарының Өфө тарафына килеүен көткән – булған нурын, йүнәлеш күрһәтеп, ҡар өҫтөнә ҡоя. Төнгә ҡарамаҫтан, яй ғына иҫкән йылы ел дә алға барырға өндәгән һымаҡ.

Чесноковкала йоҡоһоҙ төн. Зарубин, ни тиклем яуаплы, ауыр ваҡиғалар кисерергә тура киләһен алдан белеп, тойоп, булдыра алған сараларҙы күрергә тырышты. Иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙға балаларын алып, ауылдан китергә бойорҙо. Икенсенән, биш саҡрым алыҫлыҡтағы Третьяково ауылы эргәһенә мең кешелек

ғәскәрен ҡуйҙы. Ун туғыҙ пушкаһының икәүһен уларға бирҙе. Ә инде ете пушканы Зубово ауылына ултыртты. Улары дүрт мең кешенән торған ғәскәре менән дошманға ҡаршы хәрәкәт итәсәк.

23 мартта Чесноковкаға килеп төшкән Ҡәнзәфәрҙе Зарубин ҡоро ҡабул итте. Ул хатта Пугачевтың, Усаевҡа бәләкәй генә булһа ла яза бирмәйенсә, уны Белобородовҡа ярҙамға ебәреүенә ғәжәпләнде. Алданыраҡ килмәгән, исмаһам, отряд йыйырға өлгөрөр ине. Ә шулай ҙа тәжрибәле командирҙың файҙаһын күреү зарур булыр. Ул хатта ашығыс һәм ҡыҫҡа тотасаҡ кәңәшмәһенә Ҡәнзәфәрҙе лә саҡыртты.

– Михельсондың көн яҡтырыуын да көтөп тормай һөжүмгә күсеүе бар. Третьяковолағы ғәскәр уға ҡаршылыҡ күрһәтеп тотҡарлар, байтаҡ көсөн үҙенә йәлеп итер. Беҙҙең төп ғәскәр – Зубово эргәһендә удар яһарға, дошманды тарҡатырға тейеш.

– Флангылар нисек?

Зарубин, һүҙенән туҡталып, ҡарашы менән һорау биргән кешене эҙләй башланы. Муйынын һуҙып, үҙенә ҡарап торған Ҡәнзәфәрҙе күргәс, йөҙөнә шәүлә төшкәндәй булды.

– Усаевмы? Фекеремде әйтеп бөтмәнем. Икенсе линияла саңғысылар ышыҡлауында кавалерия хәрәкәт итәсәк. Шунда һинең булыуың кәрәк, Усаев. Флангыны яратаһың, тип ишеткәйнем. Оҙаҡ гәпләшергә ваҡыт юҡ. Һәр берегеҙ үҙ урынын, үҙ бурысын белә, аңлай. Алға! Дошманды еңгәс, йыйылырбыҙ. Кем ул шатлыҡты күрә алмаҫ, уға алдан уҡ дан.

Ләкин, уй уйға тура килмәй тигәндәй, Третьяково ауылы эргәһендәге фетнәселәр хөкүмәт ғәскәрҙәренә әллә ни ҡаршылыҡ күрһәтә алмай, паникаға бирелеп, нимәһе бар шуны ташлап, тирә-йүнгә һибелде. Язалаусыларға тереләрен берәмләп йыяһы ғына ҡалды.

Таң һарыһында Михельсон Зубово эргәһендәге асыҡлыҡҡа килеп етте һәм, туҡталып та тормай, фетнәселәргә ябырылды. Алдан билдәләнгән төркөмдәр иң тәүҙә фетнәселәрҙең туптарын юҡҡа сығарырға тейеш ине. Шуға күрә язалау отрядтары өҫтөнә йәҙрәләр яуыуы тиҙ үк өҙөлдө. Михельсондыҡылар ебәргән йәҙрәләр иһә халыҡ араһына туҡтауһыҙ төшөп шартлап ярыла, тиҫтәләгән ғүмерҙәрҙе өҙә, буталыш тыуҙыра ине.

Үлемесле алышта сикһеҙ сыҙамлыҡ, батырлыҡ күрһәткән фетнәселәр Михельсонды таң ҡалдырҙы. Улар, ҡоралһыҙ килеш, аттарҙың йүгәндәренә, кавалеристарҙың аяҡтарына килеп йәбешәләр. Эйәрҙәгеләрҙе һөйрәп ергә төшөрәләр ҙә муйындарына йәбешеп, баштарын ҡарға батырып тонсоҡторорға тырышалар. Ҡайһыһы ҡулы өҙөлгән килеш башын эйергә, ҡоларға теләмәй, үлеп ятҡан һалдаттың йә мылтығын, йә ҡылысын алырға маташа... Ҡан, ҡан... Мәйеттәр, мәйеттәр... Әлегәсә ҡар өҫтө ҡара булып күренһә, көн яҡтыра барған һайын аллана барҙы. Йә эсе аҡтарылып, йә аяғы һынып, өҙөлөп ярҙам һорап аҡырып ятыусыға иғтибар итеүсе юҡ. Күҙе тонған әҙәм балаһының уйы берәү генә: кемделер үлтереү. Үлтерергә, сөнки һин өлгөрмәһәң, теге өлгөрәсәк.

Юғарыға уҡ үрмәләргә өлгөргән ҡояш бөгөн ағарманы, офоҡтан айырылғандағы ҡыҙыллығы хатта ҡуйыра төшкәндәй тойолдо. Ҡурҡышынан ҙурайманы, хатта бәләкәйләнә барҙы, ниңәлер ҡалтырарға тотондо.

Яландағы ҡыйралыш һуңғы кеше ҡолағансы дауам итер, уны бер кем дә туҡтата алмаҫ кеүек ине.

Шул саҡ Михельсон эргәһенә һыбайлы сабып килде.

– Подполковник әфәнде, ҡараҡтар ылаусыларҙы айырҙы. Талау башланасаҡ.

Корпус башлығы алға ынтылды һәм, ғәскәренең бер өлөшөн бүлеп, арттан эйәреп килгән ылауҙары яғына оҙатты.

– Кожин ҡайҙа? Минең әмерҙе еткерегеҙ! Бер кемде аяп тормай тар-мар итегеҙ!

Кем-кем, Михельсон ылауҙарҙың нимә икәнлеген яҡшы белә. Унда ҡорал, унда аҙыҡ-түлек, унда фураж, унда бөтә кәрәк-яраҡ. Әгәр уларҙан ҡолаҡ ҡағаһың икән, был тирәләге мең ҡат таланған ауылдарҙан бер өйрәлек ярма ла таба алмаҫһың.

Ылау өсөн көрәшеүсе, уны төп көстәрҙән өҙөп алыусылар араһында Ҡәнзәфәр ҙә бар, сөнки бер төркөм фетнәселәр менән ул командалыҡ итә ине.

24 марттың төнгө, дөрөҫөрәге, иртәнге өс сәғәтендә башланып, көнө буйына һуҙылған ҙур яу әлегәсә күрелмәгән мәхшәргә, ҡан ҡойошта меңәрләгәндәрҙең йәнен ҡыйыуға әйләнеп тамамланды, хатта ҡояш кәртәләнеп, ашығып, түбәнәйеп көндө киҫкәндәй тойолдо. Бындай күренеште кешеләр нимәгә юрарға ла белмәнеләр. Һәр хәлдә яҡшыға түгел.

Чесноковкаға бәреп ингән майор Харин командаһы урамдарҙы мәйеттәр менән сыбарланы, ете йөҙ кешене әсирлеккә төшөрҙө.

Зубово тирәһендәге һуғыш яланында Зарубин ғәскәре биш йөҙ кешеһен юғалтты, мең ярымдан артығы әсир төштө. Башҡортостандың төньяғына, Белобородов дуҫына ярҙамға ебәрелеп, аҙмышы арҡаһында Чесноковка өсөн һуғышта ҡатнашып иҫән ҡалған Ҡәнзәфәр язалау командаһы тарафынан ҡулға алыныусылар эргәһендә ине. Көлтә урынына түшәлеп ятҡан, күпме генә ваҡыт эсендә ғүмерҙәре өҙөлгән ҡыҙыл яланда баҫып тороуына, иҫәнлегенә ҡыуанманы ул. Ирек, халыҡ өсөн йәндәрен фиҙа ҡылғандарҙы бәхетлегә һананы. Хәлдең ни өсөн былай тамамланыуы, ни өсөн Михельсондың ике тиҫтә генә кешеһе һәләк булыуы, өс тиҫтә генә кешеһенең яраланыуы аңына һыймай.

Ҡәнзәфәр мулла дошман ҡулында. Пермь провицияһында ҡылған ҡылыҡтары Михельсонға мәғлүмдер. Берәй яры алып китеп язаларҙармы, әллә ошо баҫып торған урынында, дар ағасы булмағас, атып үлтерерҙәрме? Уға барыбер ине. Һорау алалар икән, рәхим итһендәр: бөтәһен дә нисек бар, шулай һөйләп бирәсәк. Ниҙә йәшереп торорға, нимә өсөн көрәшеү кемгә сер? Әгәр ҙә Яңы батша ябай халыҡҡа вәғәҙә иткәндәрҙе Әбей батша үтәй икән, һуғышып, ҡан ҡойоп тораһы ла түгел. Бөтә талап тик шул ғына бит. Әгәр ҙә был талап үтәлмәй икән, ихтилал туҡталмаясаҡ, Чесноковкала уңышһыҙлыҡтарға осрау еңелеү тигән һүҙ түгел. Пугачев бар, Салауат бар. Көрәш йәйелә бара, көрәш дауам итә. Зарубин да тотолмаһа...

Ике меңдән ашыу әсирҙе Өфөгә ҡарай алып киттеләр. Өйөрҙөң башы, аҙағы күренмәй ине…

Фетнәселәрҙе ҡалаға индермәнеләр, әлбиттә. Уларҙы боҙо әкренләп йоҡара башлаған Ағиҙел өҫтөндә туҡтаттылар. Асыҡлыҡ, һис кем бер ҡайҙа ҡаса алмай. Һәр береһенең кемлеге, ҡайҙан килеүе, бында нисек юлығыуы тикшерелер һәм, һәр ҡайһыһының ғәйебенә ҡарап, артабанғы аҙмышы хәл ителер.

Михельсон иһә, Чесноковканы алыу менән, генерал-аншеф Александр Ильич Бибиковҡа 24 мартта Өфө эргәһендә фетнәселәргә ҡаршы нисек көрәшеүе хаҡында ашығыс рәүештә рапорт яҙырға ултырҙы. Пугачевтың икенсе армияһын тар-мар итеү бөйөк еңеү түгелме ни?!

«Һеҙ ғәли йәнәптәрҙең бойороғон Аллаһ ярҙамы менән үтәнем», – тип башланы рапортын. Ярай әле, килеп өлгөргән, юҡһа ун меңгә яҡын йыйылған әтрәгәләм Өфөгә һөжүм итергә йыйынған. Дүрт ай буйы ҡамауҙа торған ҡаланы үлемдән ҡотҡарған. Төрөш ауылынан Ҡара Яҡупҡа тиклем аралағы ауылдар

буш булыу сәбәпле, фетнәселәрҙең ҡайҙа һәм күпме икәнлектәрен белмәй барған. Ҡара Яҡупта дүрт йөҙ кеше һөжүм иткән. Шуларҙың утыҙы үлтерелгән, әсирлеккә бишәү алынған, ҡалғандары ҡасҡан. Михельсон яғынан ике кеше, ике ат яраланған. Әсиргә төшкән кеше аша белгән: яҙалаусыларҙы Өфөгә үткәрмәҫ өсөн Жуково ауылында дүрт пушка менән ике мең фетнәсе көтә икән, ә Чесноковкала ун мең тирәһе кеше бар. Жуководағыларҙы атакаламайынса, тураға Чесноковкаға юлланған. Әммә төндө көтөү өсөн, Келәштән ете саҡрым бирерәк, Әри ауылында туҡталырға ҡарар иткән. Киске сәғәт биштәрҙә Келәш яғындағы тауҙа биш йөҙләп фетнәсе пәйҙә булған. Ике йөҙ һыбайлыны ебәргәс, тегеләр таралған. Төнгө ун берҙә алға ҡуҙғалған. Зубово ауылы эргәһендә ҡаты һуғыш булыу хаҡында бәйнә-бәйнә яҙырға була. Бигерәк тә майор Хорин батырлыҡ күрһәткән. Чесноковкаға барып инеү менән, һайлап ҡуйылған боласы Стафеевты аҫырға бойорған, сөнки ул 1773 йылдың декабрендә ҡала кешеләренән яҡлау өсөн отряды менән Өфө эргәһенә Зарубинға мөрәжәғәт итергә Стәрлетамаҡ пристаненә барған. Мөһим хәбәре лә бар: Берда биҫтәһендә ятҡан Баш яуыз дары етмәүҙән ҡытлыҡ кисерә, ти. Ә бында фетнәселәр күпләп тә, берәмләп тә Михельсонға ғәфү үтенеп, кисереүен һорап киләләр, тик бына ҡаты бәғерле башҡорттар баш эйергә, бирелергә теләмәй. Ҡулға алынғандары кеҫәләренән бысаҡ сығарып һалдаттарға, офицерҙарға ташлана, хатта бесән аҫтына, мөгәрәптәргә йәшенгәндәре табылһа, тиҙ үк бысаҡтарын, һөнгөләрен эшкә ҡуша. Артабан нимәләр булыр, бөтәһе тураһында ла хәбәр итеп торор. Утыҙ мискә шарап эләктереүен, яртыһын командаһына таратыуын, ун мискәне ылау менән Өфөгә оҙатасағын теркәргә лә онотманы.

Әйҙә, дүрт ай буйы ҡамауҙа ҡалтырап ултырған чиновниктар байрам итһен. Әлеге көнгә ҡәҙәр өфөләрҙең уй-хыялы берәй һыныҡ икмәк табыу ине бит...

Ҡәнзәфәр иһә бындағы ваҡ командирҙарға асылып бармаҫҡа ҡарар ҡылды, сөнки шарап эсеп күҙҙәре томаланған яуыздар хөкөм итмәйенсә сапҡыларҙар ҙа ташларҙар. Исмаһам, өҫ кейемдәрен дә алыштырырға өлгөрмәне. Һәйбәт тун, итектәр, күлдәк, салбары ла өр-яңы. Кем уны ябай фетнәсе тип уйлаһын.

Ул, әлбиттә, былай еңелеү хаҡында уйламағайны. Һуғыш уты ла, үс иткәндәй, Зарубин эргәһенә килеп етеүҙең икенсе көнөндә үк тоҡанды. Кем белә, бер нисә көнгә алданыраҡ килгән булһа, бәлки, алынған хәбәрҙәргә таянып, Михельсонды ҡаршылауҙы икенсерәк төрлө итеп ойоштороророға мөмкин булыр ине. Кем белә, бәлки, Зарубин уны тыңлап та тормаҫ ине, сөнки ул – Пугачевтың иң яҡын кешеһе, Яйыҡ казагы, атаман, армия полковнигы. Кем белә инде, хәҙер төрлөсә баш ватырға мөмкин. Терһәкте тешләү ҡаралмаған...

Оҙаҡламай шартлап ярылырға, ҙур-ҙур киҫәктәргә бүленеп ағыу өсөн ҡуҙғалырға әҙерләнгән боҙ өҫтөндә баҫып торғанда, таныш тауыш ишетелде:

– Хәҙрәт, был һин икәнһең. Ә беҙ һине юғалтҡайныҡ. Пермь тарафынан да киткән, имеш, тип ишеткәйнек. Ниндәй елдәр килтерҙе?

Ҡәнзәфәр башын күтәрҙе. Дағаланған яҡшы ат өҫтөндә – Солтанморат Янышев ултыра ине. Өҫтөндәге төлкө тунын көмөш ҡәмәр менән быуған, башында – ҡамсат бүрек. Аты һис арымағандыр, тапанып, бейеп тора.

– Замана шулайыраҡ бит, һин үҙең нимә эшләп йөрөйһөң һуң? Михельсон менәндер?

– Бәй, башҡаса нисек булһын. Нуғайбәктән үк уның менән. Халыҡтан бигерәк, һинең кеүектәрҙе аҡылға ултыртырға кәрәк. Тыныс йәшәгән Башҡортостанды ниндәй хәлгә килтергәнегеҙҙе аңлағанһыңдыр. Тирә-яғыңа күҙ һал, хәҙрәт, ер өҫтөн мәйеттәр ҡаплаған. Һин бит мулла кеше, Аллаһ ҡаршыһында ниндәй яуап бирерһең?

– Ә бына ошо тиклем бәндәләрҙең ғүмерен ҡыйғандарҙың яуабы нисек булыр икән, баш старшина Яныш улы?

– Бер үк ҡәберҙәребеҙ йәнәш була күрмәһен, хәҙрәт, шуны теләйем.

Ҡәнзәфәр артабан мәғәнәһеҙ һүҙ көрәштермәҫкә булды.

Боҙ өҫтөндәге фетнәселәрҙе бүлеп-бүлеп ҡайҙалыр алып китеү дауам итте. Ике һалдат эйәрткән офицер былар эргәһенә килеп туҡтаны. Солтанморат ҡамсы һабы менән уларға ары китергә ымланы.

– Беҙ, хәҙрәт, һинең менән ике тапҡыр яҡташ бит әле. Ҡарышты ла онотма. Минең ауыл, һинең уҡыған мәҙрәсәң. Батырша боҙған һине. Инде Боҙаяҙ тарафтарында бергәбеҙ. Шулай булғас, ике тапҡыр яҡташ түгелме ни?! Ҡайның ҡайҙа, беләһеңме? Ғаиләң?

Ҡәнзәфәр «юҡ»ты аңлатып башын һелкте. «Ғаилә» һүҙе йөрәген өйкәп алһа ла, һыҙланыуын йөҙөнә сығарырға тырышманы, үҙен мәртәбәле тотто.

– Ярай, бер юлға яҡлашырмын. Тик башҡаса йыйын әтрәгәләмде батшабыҙға, хөкүмәткә ҡаршы ҡотортоп йөрөмә. Боҙаяҙҙа мәсет һалырбыҙ. Йәшә рәхәтләнеп. Әйҙә, Чесноковкаға, Михельсонға. Ул ғәфү итергә тейеш. Киҫәтеп ҡуям: Көңгөрөң хаҡында уға ләм-мим.

Ҡәнзәфәр: «Һинең үҙ батшаң, минең – үҙемдеке. Үҙем рәхәтләнеп йәшәүҙән ҡол хәлендәге халыҡҡа еңеллек килерме һуң?» – тип һүҙ ҡуҙғалтырға уйлағайны, тыйылды. Чесноковкаға ҡарай атланы...

«Бүтәнсә ҡараҡтар менән эш итмә, – тип Михельсон, һөйләшеп тә, һорауҙар ҙа биреп тормай, Ҡәнзәфәрҙе өйөнә ҡайтарып ебәрҙе. – Был толпаны ҡайҙа ҡуйып бөтөргә?» – Солтанморатҡа боролдо.

– Аҫаһын аҫырға, киҫәһен киҫергә, каторгаға ебәрергә, халыҡ алдында сыбыртҡыларға... Тәүбәгә килгәндәре өйҙәренә таралһын. Питерҙағы батшаға ҡаршы баш күтәргән ахмаҡтарҙы аҡылдарына ҡабат нисек ултыртмаҡ кәрәк, подполковник әфәнде. – Ҡарыш старшинаһы Яныш Абдуллиндың улы Солтанморат был юлы ла халыҡҡа ҡарата ҡатылыҡ, ҡанһыҙлыҡ күрһәтеү яғында ине. Алма ағасынан алыҫ төшмәй тигәндәй, 1740 йылда Ҡараһаҡал етәкселегендә ихтилал күтәрелгәс, башҡорт эштәре буйынса комиссия начальнигы генерал Соймонов юҡҡа ғына Яныш Абдуллинға ашығыс рәүештә «караҡ Ҡараһаҡал»ды тотоу өсөн йөҙ кешенән команда йыйырға приказ бирмәгән. Бойороҡ уңышлы үтәлгәндән һуң, Яныш фетнәлә ҡатнашыусыларҙың ҡатындарын, улдарын үҙенә ҡоллоҡҡа ала. Сөнки ул күп ерҙәргә хужа бит. Уларҙы кем эшкәртергә тейеш? Генерал Соймонов та рәхмәтһеҙ ҡалмай, ул палач Янышҡа Ҡанһөйәр ауылы ҡыҙы Зәбирәне, язаға тартылған фетнәсе малайҙары Мөхәй Суҡаевты, Мостафа Сәғитовты, Мәүлиттең улы Мәғдитте һәм ҡыҙы Мотиғаны бүләк итә. Бүләккә ҡаршы бүләк тигәндәй, 1747–1748 йылдарҙа Танып, Бөрө йылғалары буйҙарында яңынан ихтилал күтәрелгәс, язалау отрядтарына ярҙамға шул уҡ Яныш ашыға. Тиҫтәләгән фетнәселәр үлтерелгән икән, Таныпҡа батып һәләк булғандарын кем һанаған?! Себер юлы старшинаһының малайҙары Солтанморат, Бәхиәр, Солтанбәк тә арып-талып, янып-бешеп, йәндәр ҡыйып, ауылдарҙы үртәп батша генералдарына тоғролоҡло хеҙмәт итәләр. Себер юлы ҡыҫыҡ булғандыр, күрәһең – бүре балалары Нуғай юлына күскән...

Ҡәнзәфәр, үлем тырнағынан ҡотолоуы хаҡында уйлауҙан бигерәк, Чесноковка эргәһендә ҡот осҡос тар-мар ителеүҙе Пугачевҡа нисек хәбәр итеү, еткереү хаҡында баш ватты. Ул был тарафтарға юлланғанда, Йайыҡ буйҙарында ла эштәр яман ҡатмарлы ине бит. Боғрослан тарафтарынан ҙур ғәскәр, күп һандағы пушкалары менән генерал Голицындың Ырымбурға ҡарай килеүе билдәле ине. Йәғни яҡынлашып уҡ бөттө. Алтынсы мартта Пронкино ауылы эргәһендә генералдың авангарды менән бәрелеш булды. Ун беренсе мартта Сорочинскиҙы алдылар. Татишев ҡәлғәһенә лә алыҫ ҡалынмағайны...

***

Күңеле шомланған Ҡәнзәфәр, уңға боролоп, Татар Ҡарғалыһына атын саптырҙы. Слобода урамдары халыҡ менән тулы, йырып үтерлек түгел. Йөрәкте ҡалтыратырлыҡ хәл: ни өсөн халыҡ бында? Саналарға һалынған туптар ҙа бар. Таныштар ҙа күренә. Тимәк, Берданан сигенгәндәр. Тимәк, дошман ҡайҙалыр яҡында. Ҡыҫҡаса ғына шул мәғлүм булды: 22 марттың иртәһендә, йәғни сәғәт дүрттә Голицын Переволоцкий ҡәлғәһенән сыға ла Татишев ҡәлғәһенә йүнәлә... Күрелгән тамашаны һөйләп бөтөрөрлөк тә, күҙ алдына килтерерлек тә түгел икән. Сағыштырһаң, Зубово эргәһендәге мәхшәр – бәләкәй күренеш. Пугачевтың ике мең ярым кешеһе үлтерелгән, дүрт меңе әсир төшкән, үҙе саҡ ҡасып ҡотолған. Әлеге ваҡытта «Петр Өсөнсө» Һаҡмар ҡаласығында, ти. Ҡәнзәфәр шунда сапты.

Ҡояш, көндәрҙе һиҙелерлек итеп оҙонайта-оҙонайта, күккә юғарыраҡ күтәрелә бара һәм нурын сәсеп оҙағыраҡ тора ине. Арал диңгеҙе тарафтарынан иҫкән йылы елдәр, ҡаҙаҡ далаларында ҡаршылыҡ тоймайынса, Яйыҡ, Һаҡмар буйҙарына ашыға. Быйылғы ҡалын ҡар юл йөрөүҙе ауырлаштыра барҙы. Урыны-урыны менән аттар ҡорһаҡ аҫтарына тиклем сума.

Пугачев йорто алдында Ҡәнзәфәр килеп туҡтағанда, Яңы батша Кинйә менән санаға ултырған килеш гәпләшәләр ине.

Әле кисә генә Петр Өсөнсө ставкаһы өсөн һайланған Берда биҫтәһендә сираттағы тар-мар ителеүгә дусар булынды. Бибиков ғәскәре нисек теләй, шулай туҡманы. Дүрт йөҙ кеше һәләкәткә юлыҡҡас, өс мең ярымы әсир төшкәс, артабан һуғышыу, ҡаршылыҡ күрһәтеү хаҡында уйға килтерәһе лә ҡалманы. Пугачев эргәһендә ни бары биш йөҙ кешеһе. Шуларҙың өс йөҙө – башҡорт, ҡалған ике йөҙө – Яйыҡ, Илек казактары һәм завод крәҫтиәндәре.

– Отрядтар, пушкалар алып килдеңме, Усаев? – тип Пугачев урынынан торҙо, күрешеү өсөн ҡулын һуҙҙы. Ҡара йөҙөнә яҡтылыҡ ҡунғандай тойолдо. Кинйә лә күреште. Ул да һораулы ҡараны.

– Юҡ, хөрмәтле әфәнделәрем, ҡыуанyслы хәбәр килтермәнем. Өфө эргәһендә Зарубин тар-мар ителде. Үҙем шаһит.

– Ә-ә?! – Пугачев, был хәбәрҙең дөрөҫ булмауын теләгәндәй, күҙҙәрен йомдо. Йоҙроғон йоҙроғона һуҡты. Әллә хәбәрҙең дауамын ишетмәҫкә теләп, ситкәрәк китеп, уйланып торҙо. Боролмайынса ғына:

– Өфө башҡаса ҡамауҙа түгелдер? – тип һораны.

– Юҡ.

– Зарубин нисек?

– Богоявлен заводында һатлыҡ йән казактар тарафынан ҡулға алынып, Михельсонға тапшырылған.

– Их, шул һатлыҡ йәндәр... Бибиковтың да, Голицындың да, Фреймандың да, Михельсондың да кемлектәре билдәле, ә һатлыҡ йәндәр?.. – Сана эргәһенә кире килде лә Кинйәнең яурынына тотондо. – Һин дә, Усаев та күптән Башҡортостанға саҡыра инегеҙ... – Һүҙенән бүленеп, һаҡалын ышҡып торҙо. – Ваҡыт еткәндер, моғайын. Кинйә, һин ышанyслы кеше булараҡ, һәр саҡ эргәмдә йөрө.

– Өфөгә барыу ярамай. – Кинйә ҡуйынынан үҙе һыҙып, яҙып эшләгән ҡалын ҡағыҙ сығарҙы. – Карта был.

– Уны үҙең генә ҡара. Миңә аңлатырһың. Башҡортостанда булғаным юҡ. Яйыҡтан китергә кәрәк беҙгә, төньяҡҡа. Һис кисекмәҫтән – юлға! Ә һин, Усаев дуҫ, үҙ төбәгеңә ҡайт. Отрядтар тупла. Башҡортостандың көнбайыш, көньяҡ яртыһына һин яуаплы. Манифест ҡулыңда. Танауҙы төшөрөргә ярамай. Әле еңелһәк тә, еңеп

еңелдек. Һуғыш иһә гел еңеүҙән генә тормай. Элемтәлә булырбыҙ. – Пугачев үҙен көр күңелле итеп тоторға тырышһа ла, күҙҙәре элеккесә янып тормай, моңһоу ине. Шул тиклем кешенең ҡыйратылыуынан һуң башҡа берәү һығылыр ине. Ә ул яңы походтар, яңы еңеүҙәр хаҡында уйлай, киләсәкте күҙаллай. – Давай, Усаев, йылы аш менән тамағыңды туйҙыр, шунан сәфәргә. Атың йонсоғанға оҡшаған, алмаштыр. Килеүеңә рәхмәт. Үҙ ваҡытында ишетелһә, әрнеүле дөрөҫ хәбәр ҙә файҙалы.

Әҙерәк хәл алғандан һуң, Ҡәнзәфәр һәр боролошон, һәр соҡорон, үрен яттан белгән юлға сыҡты. Инде нисәнсе ҡат!

Пугачев командаһы Ташлы, Ҡыҙыл Мәсет ауылдары аша Кананикольский, Түбәнге Әүжән, Белорет заводтарын үтеп, Магнит ҡәлғәһенә йүнәләсәк. Уларҙы ҡаялы тауҙар, кеше үтмәҫлек урмандар көтә ине.

***

Пугачев командаһы Уралға шул тиклем ашығып барҙы ки, яҙын ташҡан йылға ағышын хәтерләтте. Ташлынан һуң бер көндә йөҙ илле саҡрым юл үтеп, аттарын хәлдән тайҙырып, күҙ бәйләнгәндә Ҡыҙыл Мәсет ауылына килеп етте. Иртәгеһенә, икенсе апрелдә, Кананикольский заводында ине. Пугачев үҙен яраланған бүре кеүек тойҙо. Сөнки уны эҙәрлекләп килеүҙәрен, командаһының аҙ һанлы икәнен аңлай. Әгәр ҡыуып етәләр икән, ул күтәргән ялҡындың һүрелеүе, һүнеүе ихтимал. Ул сағында инде әҙәм ҡаны ярҙарынан бына-быны бәреп сығырға етешкән йылғаларҙы хәтерләтер. Берҙән-бер юл, сара шул: нисек тә Михельсондан, Фреймандан йыраҡлашыу, яңы заводтарҙы ҡулға төшөрөү, көслө ғәскәр, ҡорал туплау. Шунһыҙ Әбей батша генералдары Иван Михельсон, Федор Фреймандарға ҡаршы тороу, уларҙы ҡыйратыу мөмкин булмаясаҡ...

Апрелдең тәүге көндәре. Ҡояш яндырып бара, көньяҡтан иҫкән ел ҡарҙы рәхимһеҙ кимерә. Яландар, уйһыулыҡтар, баҫыуҙар асыла. Ваҡ йылғалар ҡара, ҡыҙғылт төҫкә инеп, бәрелә-һуғыла ағып ярҙарын ашай. Тик ҡыш буйы ҡалынайған сана юлдары ғына бирешергә теләмәй, ҡатылыҡтарын һаҡларға тартыша. Урыны-урыны менән улар ҙа атты күтәрә алмай. Ана, Боҙаяҙға ҡарай килгән һыбайлының бүртә бейәһенең аяҡтары туҡтауһыҙ ҡарға бата.

Эйе, хәҙер ҡарға, яҫтыҡ ҡалынлыҡ булһа ла, яҙғы боҙға ышанаһы юҡ. Тиҙерәк ер-һыу кипһен, аттарға арбалар егелһен.

***

Бүртә бейәгә иһә Ҡәнзәфәр атланған. Ауылына ҡайта. Өйөнән сығып китеүенә байтаҡ ваҡыттар үткәнлектән, унда нимәләр барын, нимәләр булып үткәнен, ғаиләһенең иҫәнме-түгелме икәнлеген белмәй ине. Бәлки, әлеге ваҡытта унда язалаусыларҙыр? Бәлки, уны эҙләйҙәрҙер? Исмаһам, берәй юлсы ла осрамай, һорашыр, белешер ине.

Хәҙер кире боролоу юҡ инде. Дошман була ҡалһа, бирелмәйәсәк. Шулай уйлап, ул бил ҡайышына таҡҡан хәнйәрен ҡапшаны, мылтығына ҡулын тейҙерҙе.

Ә шулай ҙа йәшәү дауам итә. Ҡаршыға бәләкәй сана һөйрәгән өлкән йәштәрҙәге ҡатын тап булды. Ҡәнзәфәр атын ситкә тартһа ла, теге лә юлдан сыҡты. Күҙенең ҡойроғо менән генә ҡарап ҡуйҙы ла башын түбән эйҙе.

– Ҡайҙан? Ҡайҙа китеп бараһың?

– Туҡайҙан килгәйнем,– тип һөйләнде юлсы ҡатын, Ҡәнзәфәргә ҡарамайынса ғына, – аҙыҡ артынан инде. Йәндәрҙе өшөтөп яҙ килә. Аслыҡ... Биш бала. Сирле... ҡәйнәм.

– Ирең ҡайҙа?

– Һуғышҡа тип алып киттеләр.

– Кемдәр?

– Кемдәр икәнен кем белһен. Һыбайлылар ауылға килә лә инә бит. Беҙ, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡайҙа етте шунда боçабыҙ.

– Күҙ һалдыңмы, Боҙаяҙ ни хәлдә?

– Әлләсе, урамдары буш. Мөҡсиндәре беҙҙең Ишмөхәммәт менән өйөр йыйып йөрөй, ти. Икеһе лә яҙалаусылар яғында бит. Бер бисә өс ҡаҙаҡтай он бирҙе. Бушҡа. Мулла ҡатыны шикелле. Исеме ятыраҡ, әллә Сәриә инде.

– Сүриә тигән исем дә бар мосолмандарҙа.

– Шулай шикелле. Бик миһырбанлыға оҡшаған, рәхмәт төшкөрө.

– Ҡасан күрҙең?

– Унымы ни? Бөгөн. Өйөндә ине. Бик матур ике малайы ла бар. Күршеләре, ире Яңы батшаға хеҙмәт итә, ҡасып йөрөй, тинеләр.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Ҡәнзәфәрҙең ҡысҡырып йырлағыһы ла, илағыһы ла килде. Атынан һикереп төштө лә ҡатындың арҡаһынан һөймәй түҙә алманы. Кеçәһенән көмөш аҡса сығарып, юлсыға һуҙҙы.

– Ауыр көндәреңдә аҙыҡ алырһың.

– Юҡ, юҡ, аҡса кәрәкмәй. Йә, ҡайҙан алдың, ҡайҙан таптың, тип төпсөнә башларҙар. Беҙ ҡулыбыҙға аҡса алғаныбыҙ юҡ.

– Юлда осраған юлсы бирҙе, тиерһең.

– Исемең кем? Һораһалар нисек әйтергә?

– Өфөләге хужаһына ашығыс йомош менән китеп барыусы офицер, татарса белеүсе урыç ине, тиерһең.

– Ышанырҙармы? Урыçҡа оҡшамағанһың да.

– Ышанырҙар.

Ҡатын санаһын һөйрәп юлға сығарҙы, Ҡәнзәфәр атын Боҙаяҙға әйҙәне.

Ауылға килеп ингән һыбайлыны күреп, Сүриә ихатала уйнап йөрөгән малайҙарына ҡысҡырҙы:

– Батырша, Абдулла! Тиҙ генә өйгә! – Өç-баштары еүешләнергә өлгөрмәгән балалары тәүҙә тирә-йүнгә ҡаранып алдылар ҙа, ул-был күренмәгәс, таяҡтары ярҙамында аҙбар яғынан ағып килгән йырғанаҡты киңәйтергә тотондолар. – Кемгә әйтәләр, ә? Ишетмәнегеҙме ни?

Ҡабатлау һүҙҙәрен ишеткәс, малайҙар таяҡтарын ҡарға ҡаҙанылар ҙа өйгә ашыҡтылар.

– Нимә, әсәй?

– Ауылға ниндәйҙер яугир килә. Әллә кем булыуы мөмкин. – Балалары инеү менән, ишекте эстән бикләп ҡуйҙы.

Һыбайлы иһә килеп туҡтаны ла, ҡапҡаны шар асып, атын индерҙе.

– Атайыбыҙ! – Сүриә ойоҡсан килеш солан ишеген бәреп сыҡты һәм тиҙ иреһен тип таратылған ҡарға һикерҙе. Бөтә йөрәге, күңеле менән иренең муйынына аçылынған итеп тойһа ла, кемдәрҙең күҙәтеп тороуынан шикләнгәндәй, был ҡылығынан тыйылды. Һулҡылдап илап, күрешергә ҡулын һуҙҙы. Ҡәнзәфәр иһә ҡатынын үҙенә тартты. Һелкенгән арҡаһынан һөйҙө. Ул да түгел, малайҙары сығып ҡосаҡланы.

Иң яҡын кешеләре менән Ҡәнзәфәр оҙаҡ, бик оҙаҡ торорға, һағыныуҙарын саҡ ҡына булһа ла баçырға теләне. Ләкин әлеге мәлдәге бәхетле хәле тиҙ генә үтерлек, кәмерлек түгел ине. Ул тегеләрҙең яланөç булыуҙарынан, һалҡын тейҙереүҙәренән шикләнеп, бөтәһен дә ҡосағына һыйҙырған килеш, күтәрмә яғына атланы.

– Атай, атты?

– Әлегә бәйләп ҡуйығыҙ. Берүк һыу эсерә күрмәгеҙ. Тире ҡатһын. Эйәре өҫтөндә торһон, һалдырмағыҙ.

Иренең һуңғы һүҙҙәрен ишетеп, Сүриә шомланып иренең күҙҙәренә баҡты.

– Тыныслан. Ә һеҙ, егеттәр, онота яҙғанмын, эйәр артына эләктерелгән тоҡсайҙы алып инегеҙ.

Өҫтәл артына теҙелеп ултырып тамаҡ туйҙырҙылар. Малайҙарға бигерәк тә өрөк оҡшаны. Тик тәмле аҙыҡты икешәр дана ғына бирҙеләр. Өрөк тигән емеш алыҫ-алыҫ Фирғәнә тарафтарында үҫә икән. Ғөмүмән, ул икенсе төрлө емештән барлыҡҡа килә, ти. Әфлисунды киптерәләр, ти. Әфлисун иһә бешкәс ғәжәп тәмле, ғәжәп һутлы була икән. Шуныһы аяныс: ул бешкән килеш оҙаҡ һаҡланмай, боҙола, шуға күрә киптерәләр икән.

– Бик күп йөрөнөң, атай, шул емеш үҫә торған эҫе төбәктәргә барманыңмы ни? – тип малайҙар төпсөнөүҙән тыйыла алманы. Атай кеше уларға һәр саҡ әллә ниндәй алыҫ илдәр, унда йәшәгән халыҡтар хаҡында төрлө-төрлө әкиәттәр, тарихтар һөйләй ине. Уның мажараларын туҡтауһыҙ тыңларға мөмкин. Инде уҡырға, яҙырға ла өйрәтә башлағайны, ниндәйҙер мәшәҡәттәре тыуғас, сығып китте. Ауылда йәшәү ҡурҡыныс тип, әсәһенең ай-вайына ҡуймай, олаталары ҡышҡа Өфөгә алып китте. Ҡаланы боласылар уратып алғанлыҡтан, әллә ҡайҙарҙан уратып-суратып йөрөттө. Бер саҡ шул боласылар ҡалаға туптарҙан аттылар, бейек ҡойманы емерергә ынтылдылар. Шул саҡ олаталары: «Ипләберәк ҡарағыҙ, ҡала халҡын үлтерергә килеүселәр араһында берәҙәк атайығыҙ ҙа булыуы ихтимал», – тине. Ул хаҡта башҡаса һүҙ ҡуҙғалтылманы. Әсәләре, өләсәләре иһә: «Был хаҡта һорамағыҙ, беҙ бер нәмә лә белмәйбеҙ», – тип яуапланы.

– Атай, Фирғәнәгә бармағас, өрөктө ҡайҙан алдың?

– Бик уҡымышлы, бик абруйлы, хөрмәт ителгән бер бабайығыҙ һеҙгә күстәнәс итеп бирергә ҡушты. Шул тарафтарҙа булған шикелле.

– Кем ул? Исеме нисек?

– Кемлеген әйтмәне, ашыға ине, – тип Ҡәнзәфәр малайҙарын көскә тынысландырҙы.

– Исемһеҙ инеме ни ул йомарт бабай?

– Һеҙгә генә әйтәм, исеме – Кинйә.

– Әкиәттәр ҙә алып ҡайтҡанһыңдыр әле, бөгөн һөйләрһеңме?

– Атайығыҙҙың нисек арығанын күрмәйһегеҙме ни? Йоҡларға ятығыҙ.

– Әгәр ул тағын китеп барһа?

– Йәгеҙ, улдарым, йоҡлашайыҡ. Мин атты ҡарап инәйем дә, бәү-бәү.

– Беҙ ҙә сығабыҙ...

Йылы иркен өй. Иң мөһиме – эргәңдә ғәзиздәрең. Юғиһә, ярты йыл ваҡыттың бөтә көндәре лә асыҡ яланда, урманда, иң һәйбәт тигәндә, сит ауылдарҙың ихаталарында үтте бит. Һалҡындарҙа, бурандарҙа өй-маҙарға эләкһәң дә, ятыу түгел, һөйәлеп торорға ла мөмкинлек юҡ. Ундай саҡта хыялың – туңып үлмәү. Әйткәндәй, үҙ өйөңдөң еҫе лә татлы, ҡәҙерле.

Ятыр алдынан Ҡәнзәфәр күлдәген һалды. Беләгенә ураған аҡ ебәк яулыҡты, һүтеп алып, ҡатынына һуҙҙы.

Сүриә иһә шундай бүләкте күргәс, шатлығын йәшерә алмай, тултырып йылмайҙы. Йыйып ҡыҫһаң уҫҡа һыйырлыҡ ҡәҙерле әйбер, өйҙө тултырғандай булды. Ҡулына алыу менән танауына яҡынайтып еҫкәне. Тик шунан һуң ғына йәйҙе. Яулыҡ үтә күренерлек, йоп-йоҡа ине.

Малайҙар ҙа һикерешеп торҙо. Нимә эшләп инде бындай ваҡиғанан ситтә тороп ҡалһындар, ти! Тәүге һорауҙары шул булды:

– Ҡайҙан алдың?

Йылмайып торған Ҡәнзәфәрҙең йөҙө ҡатып ҡалғандай булды. Ул, был хәленән тиҙ генә ҡотолорға теләп, ике малайының да саҡ тигеҙләнергә өлгөргән сәстәренән һыпырҙы.

– Күп белһәгеҙ, тиҙ ҡартайырһығыҙ. Йоҡларға. Ҡарағыҙ уны, иртә уятасаҡмын.

Малайҙар толоп аҫтына сумды. Әсәләре иһә, аҡ яулыҡты ҡулына тотҡан килеш, уңайһыҙ хәлдә ҡалды. Бүләкте хатта ҡулынан төшөрә яҙҙы.

Ҡәнзәфәр Сүриәнең яурынынан тотто ла ҡолағына әйелде:

– Яңы батша бүләге.

– Китсе. Атайым ул кешене: «Ялған батша. Иң яуыз кеше. Әгәр был яҡҡа килеп сыға ҡалһа, бер иҫән кеше лә, яндырылмаған бер ауыл да ҡалмаясаҡ»,– ти... – Сүриә был һүҙҙәренән һуң, аҫҡы иренен йомшаҡ ҡына итеп тешләп, һүҙҙәренән бүленде. Ул бит атаһының һөйләгәндәрен Ҡәнзәфәренә бер ҡасан да еткермәҫкә үҙенә һүҙ биргәйне. – Шул батшаны күрҙеңме?

– Был хаҡта башҡаса һөйләшмәйек, Сүриә. Ҙур тарих ул.

Күңелен өйкәгән әлеге еңел яулыҡ томанға, төтөнгә әйләнеп юҡҡа сыҡҡандай тойолдо. Ҡулынан ысҡындырыуҙан, юғалыуынан ҡурҡҡандай, Сүриә бүләкяулыҡты кәштәгә элде. Инде нисәмә йылдар бергә тороп, ике малай тыуҙырып, ире алып ҡайтҡан һәр әйбер, һәр тәғәм өйҙө ҡыуаныс менән тултыра торғайны. Хатта байрамға әйләнә ине. Бөгөнгөһө иһә тамаҡҡа төйөр булып ултырҙы. Бәлки, балалары әллә нисек, шикле итеп һорау бирмәһәләр, былай уҡ тойолмаҫ ине.

Йомшаҡ түшәккә ятҡас, Сүриә башын иренең күкрәгенә һалды. Төнө буйы йоҡламайынса ҡәҙерле кешеһенең йөрәген, һулыш алыуын тыңларға теләне. Ярты йылдың һәр минутын хафаланып, борсолоп үткәрҙе бит. Март аҙаҡтарындағы Өфө эргәһендәге һуғышта, имеш, ул да ҡатнашҡан. Тик ҡыйратылған меңдәр араһында уның үле кәүҙәһе табылмаған. Имеш, ул хөкүмәт ғәскәрҙәре тарафынан әсиргә алынған. Имеш, ниндәйҙер генерал уны ярлыҡаған... Бөтәһе лә «имеш», шул. Ә шулай ҙа Сүриә иренең иҫән йөрөүенә ышанып, өмөт менән йәшәне. Ҡәнзәфәрҙе изге кеше итеп күрҙе. Изге кешеләр оҙон ғүмерле була, үлем ундайҙарҙы урап үтә, ти. Әлбиттә, шулайҙыр, быны киреһе икән, ул сағында бөгөн уның ҡуйынында ятыр инеме ни? Тик киләсәккә уйҙары нисек икән? Бәлки, бөтөнләйгә ҡайтҡандыр. Иртәгәнән тыныслап, бәхетле тормошта йәшәй башларҙар. Бирһен Хоҙай...

***

1774 йылдың март айы боласыларға ҡот осҡос еңелеүҙәр, бәхетһеҙлектәр, фажиғәләр килтерҙе. Пугачев үҙе етәкселек иткән Баш армия ла, Зарубин командаһы аҫтындағы Икенсе армия ла тар-мар ителде. Яңы батша – Урал тауҙарында, Зарубин-Чика – төрмәлә. Артабан нимә эшләргә? Ҡайһы бер старшиналар кеүек, Михельсондарға барып алдарына теҙләнергәме? Ярлыҡау һорап, улар яғынан тороп, халҡыңа ҡаршы һуғышырғамы? Халҡыңды язаларғамы? Юҡ, умыртҡа бағанаң төҙ сағында, ҡулыңа ҡылыс тота алғанда ул ниндәй баш эйеү, ти! Әгәр быны киреһе икән, ниндәй йөҙөң менән, ғәрләнмәйенсә ер йөҙөндә йәшәмәк кәрәк. Шул уҡ Ишмөхәммәт, Солтанморат, Миндәй Тупиев, Мөҡсиндәрҙән мыҫҡыл ителергәме? Һис юҡ. Тиҙ арала Ҡаранай, Әлибай, Торнов, Һеләүһен, башҡа старшиналар менән элемтәгә инергә, ихтилалды һүндермәү өсөн халыҡты яңынан күтәрергә кәрәк.

Салауат, Белобородов Әй буйҙарында үҙҙәренә яңы командалар туплай. Ә инде Пугачев барғас, Уралда ихтилалдың яңы ялҡыны дөрләне. Юҡҡа ғынамы ни Үрге Яйыҡ ҡәлғәһе коменданты полковник Ступишин, кәмәһенә һыу инә

башлағас, алтынсы апрелдә башҡорт халҡына мөрәжәғәт итеп Өндәмәһен сығарҙы. Сөнки Пугачев Магнит ҡәлғәһендә бит. Ара, үҙе әйтмешләй, ҡул һуҙырлыҡ ҡына. Юғиһә, Ступишин Исет провинцияһының татар старшинаһы Мөхәмәт Сафаровҡа, Ҡара Табын старшинаһы Юламан Ҡушаевҡа тәүҙәрәк, буйһоноуҙарын талап итеп, күп тапҡырҙар указ ебәреүенә тегеләр хатта яуап та бирмәнеләр. Асыуына сыҙай алмаған полковник Ырымбур губернаторына улар өҫтөнән рапорттар яҙһа, хәҙер килеп халыҡты язалау менән янай башланы. «...Ырымбурҙан ҡараҡ һәм ялған исем йөрөткән Емельканың ҙур көс менән килеүен көтөүегеҙ һәм уның, имеш, сикһеҙ рәхимлелек күрһәтеүенә, яландағы ҡырағай януар кеүек йәшәргә вәғәҙә итеүенә ышаныуығыҙ хаҡында ишеттем. Һеҙгә әйтәм, бындай уйығыҙҙан кире ҡайтығыҙ. Әгәр ҙә һеҙҙең ҡараҡлығығыҙ, хәйләкәрлегегеҙ, үҙегеҙгә уғрыларҙы көтөүегеҙ, уларға аҙыҡ-түлек, мал-тыуар, уҡ-һаҙаҡ, ҡорал әҙерләүегеҙ миңә билдәле була икән, мәрхәмәтлек көтмәгеҙ. Һеҙҙе язалаясаҡмын, аяғығыҙҙан, ҡабырғағыҙҙан аҫасаҡмын, игенегеҙҙе һәм бесәнегеҙҙе яндырасаҡмын, шулай уҡ мал-тыуарҙарығыҙҙы ҡыйратасаҡмын. Ишетәһегеҙме? Әгәр ишетәһегеҙ икән, ҡурҡығыҙ: мин алдашырға һәм шаярырға яратмайым. Һеҙ ҙә мине беләһегеҙ, мин дә һеҙҙе яҡшы беләм». Ысынлап та, ҡәлғә комендантының ҡылыҡтары башҡорттарға мәғлүм ине, сөнки ҡулына төшкән ирҙәрҙең ҡолаҡтарын, танауҙарын, бармаҡтарын аҙ ҡырҡманы. Ҡыш тип тормай, ауылды үртәне. Өйҙәренән сыға алмай, байтаҡ ҡатындар балалары менән янып үлде. Ундай яуыздар, Тәфтиләүҙәрҙең ҡанлы эшен дауам итеүселәр Башҡортостанда аҙмы ни? Ул ғынамы, һатлыҡ йән Ишмөхәммәт, Мөҡсин, Солтанмораттар халыҡты ҡыйратыуҙа үҙ-ара ярышалар. Бигерәк тә Әхмәр, Бәхтиәр, Солтанморат Янышевтар аяуһыҙлыҡ күрһәтә. Маҡсаттары шул: Әбей батша генералдары ҡаршыһында кемлектәрен күрһәтеү һәм, илдәге мәхшәрҙән файҙаланып, булдыра алған тиклем байлыҡ йыйыу, теләгән тиклем күп ер, шунда эшләтеү өсөн ҡолдар эләктереп ҡалыу. Бола ойоштороусыларҙың балалары, ҡатындары бушҡа өләшеләсәк бит...

Тәҙрәгә бағып ултырған Ҡәнзәфәр, ҡарҙан асыла барған ерҙе лә күрмәй, кәртә эргәһендә бысылмай ҡалған ҡайын ботағында тыуған төйәгенә иҫән-имен ҡайтыуына бөтә йөрәгенән ҡыуанып һайраған сыйырсыҡтың тауышын хатта ишетмәй ине. Ул эргәһенә ҡатынының нисек килеп ултырғанын да тойманы.

– Артабан нисек йәшәрбеҙ, Ҡәнзәфәр? Беҙҙе уйлайһыңмы?.. – Сүриә, башын иренең беләгенә терәп, шыңшып илай башланы. – Ҡыйын миңә. Атайым да сит итә. Тере етем мин.

Ҡәнзәфәр ҡатынының яурынына ҡулын һалды. Икенсе ҡулы менән эйәгенән тотоп, күҙҙәренә ҡараны.

– Түҙергә тейешбеҙ, аҡыллым. Донъянан ут оса бит.

– Күпме сыҙарға?

– Оҙаҡ булмаҫтыр. Дауыл да, ғәрәсәт тә тиҙ үтеүсән. Яҙмышыбыҙға төшкән һынау. Меңәрләгән кешеләр шундай хәлдә. Өйҙә ултырыр саҡмы ни, Сүриә. Ауылға ҡара, берәй ир ҡалғанмы?!

– Ә ниңә атай менән бер яҡта түгелһең?

– Был һорауыңа яуап биреүе еңел түгел. Донъяға, тормошҡа һәр кеше үҙенсә ҡарай. Ҡойондан һуң ялтырап ҡояш сыҡҡандай, ил яҡтырыр, бына шул саҡта яланға барырбыҙ ҙа сиҙәмгә һуҙылып ятып, туйғансы гәпләшербеҙ. Малайҙарыбыҙ еләк йыйыр, ә беҙ һинең менән серләшербеҙ ҙә серләшербеҙ. Шунан инде рәхәтләнеп тормош көтә башларбыҙ. Мин йөҙ башы мәшәҡәтенән ҡотолоп, муллалыҡ эшенә тотонормын, мәсет һалып, мәҙрәсә асып, ауыл балаларын уҡытырмын. Кешеләр иректе йәшәр, ерле булыр. Йылға буйына төшөп балыҡ

тоторҙар, урманға барып кейек ауларҙар. Үҙ-ара һуғышмаҫтар. Беҙҙе никах, ҡөрьән уҡырға саҡырырҙар. Һин – абруйлы оҫтабикә.

Сүриә бала шикелле ихлас көлдө. Ул хатта был ҡылығына аптырап ҡалды, сөнки һуңғы тапҡыр ҡасан көлгәнен дә хәтерләмәй.

– Күңелем ышанмай.

– Ышаныс юғала, өмөт өҙөлә икән, үлергә генә ҡала. Ышанайыҡ, өмөтләнәйек... Остазым Батырша шулай өйрәтә торғайны.

Торнов, йәғни суҡындырылған иранлы Вәлит хаҡында Ҡәнзәфәр шомло хәбәр ишетте: имеш, уны ҡулға алғандар. Быны кемдән, нисек асыҡларға? Ибраш Уразбахтин бар ине. Өфөнө ҡамауҙа тотҡанда боласылар етәкселәренең береһе Ибраш Уразбахтин иҫәпләнгән. Тик ул тереме, тере икән, әле ҡайҙа? Шулай уҡ Атйетәр ауылынан Ҡунаҡҡол була торғайны. Ул атаман Торнов отрядында һуғышып йөрөгән. Бәлки, унда хәбәр барҙыр. Уның ауылы Боҙаяҙҙан алыҫ түгел.

Ҡәнзәфәр һыбай менде. Сүриәһе болдорға сыҡты. Йөҙө борсоулы ине, әлбиттә.

– Йөрөштөрөп, ураштырып ҡына киләм,– тип ҡатынын тынысландырырға тырышты Ҡәнзәфәр. – Егеттәр!

Малайҙары, аталарының өндәшеүенә шатланып, ҡапҡа асырға ашыҡты.

– Тиҙ йөрөргә тырыш, атай. Һин ҡайтҡанды ихатала көтөрбөҙ.

Көндәрҙең аяҙ, эҫе тороуы арҡаһында юлдағы ҡар бутҡаға әүерелде. Йылғалар кинәнеп таша ине. Дим дә, Өршәк тә, Сәрмәсән дә яман йәйелгәндәр, тип торҙолар кисә ауыл уртаһында туҡталған юлсылар.

Үкенескә ҡаршы, Ҡунаҡҡол өйҙә булмай сыҡты. Ҡар аҫтынан күренгән ҡапҡа һыныҡтарын йыйып торған ҡатын килеп туҡтаусыға башын күтәреп тә ҡараманы. Ағас күҫәктәрен күтәреп, өйө ишегенә табан ҡуҙғалды.

– Ҡунаҡҡолда йомош бар ине, – тип өндәште Ҡәнзәфәр, атын ҡуҙғатмай ғына. – Ҡайҙа ул?

– Белһәм икән. – Ҡатын һыбайлыға башын бороп ҡараманы. Көрһөнөп ҡуйҙы. – Ана, ниндәй хәлгә төшөрҙөләр. Һуңғы башмаҡты ихатала һуйып, түшкәһен санаға һалып алып киттеләр. «Һиңә быныһы ла хәрәм, рәхмәт әйт», – тип башын ғына ҡалдырҙылар. Ә ул берәҙәк малайҙары менән бергә фетнәселәр яғында, ти. Уның үсен минән алалар, минән таптыралар... – Ҡулындағы ағастарҙы күтәрмәһе төбөнә төшөрҙө лә ишегенән инеп китте.

Бөтә өмөт Ибраштa ине. Ҡәнзәфәр Атйетәр ауылынан сыҡҡас, уңға тартылып, атын батыра-сумдыра, Өршәккә ҡарай юлланды. Ул хатта йылғаның ҡотороп ташҡан мәле икәнлеген дә иҫенән сығарғайны. Һуң, Ибраһим ауылы теге яҡта бит. Ысынлап та, Өршәк күҙ күреме ергә йәйелгән. Һул яғындағы әрәмәләр тотошо менән һыу аҫтында. Ҡалҡыулыҡтан ҡарағанда Ибраһим ауылы яҡында ғына ла бит, атың Дөлдөл булһа икән, һикереп кенә сығыр инең йылғаны.

Ҡәнзәфәр ергә төшөп, теҙгенде атының тубығы аҫтынан бәйләне. Алыҫ китә алмаҫ. Ашай торһон. Бәй, түбәндә, был яҡтағы эре таллыҡта ике кеше йөҙөп йөрөй түгелме һуң?! Кәмә тиһәң, кәмә түгел, нимәгә баҫҡандар? Ҡәнзәфәр шуларға ҡарай ашыҡты. Балыҡ тоталар икән. Мауығыуҙары арҡаһында килеүсене шәйләмәй ҙә ҡалғандар. Өндәшкәс, береһе ҡурҡышынан хатта саҡ һыуға ҡоламаны. Дүрт бүрәнәне бергә ҡушып арҡанлағандар ҙа һал-кәмә һымаҡ нәмә әтмәләгәндәр.

– Ибраһимданмы һеҙ?

– Кем әйтте?

– Бәй, был тирәлә башҡа ерҙән кем йөрөһөн? Бик аҙға ғына сығығыҙ әле, егеттәр, һүҙ бар. – Талға йәбешеп тотонған әлеге кешеләр, ағып китергәме, әллә яңы

сәкмәнле, итектәр кейгән был бәндәне тыңларғамы, тигәндәй икеләнеп, һынаулы ҡараш ташланылар. – Шикләнмәгеҙ, юлбаҫар түгелмен. Ышанығыҙ миңә.

– Ышаныс юғалды, иптәш, ышанысты йоттолар, – тине кәзә һаҡаллыһы, ҡояш нурҙары әрнеткән күҙҙәрен ситкәрәк бороп. – Һин киләһең – һиңә ышан, иртәгә тағын берәү килә, уға ышан. Ышан, ти ҙә өйөңә инеп һуңғы киҫәк икмәгеңде тартып ала.

– Шулай ҙа сығығыҙ әле, әҙәм булығыҙ. – Ярға яҡынлашты. – Ташла арҡаныңдың осон, талға эләктерәм.

– Үҙебеҙ бәйләрбеҙ. Ағып китә икән һалыбыҙ, һыу ҡайтҡансы, ер кипкәнсе тигәндәй, был яҡта тороп ҡалыуыбыҙ ихтимал.

– Ҡунаҡта ятырһығыҙ.

– Тот тоҡсайыңды. Кемдә кем ҡайғыһы хәҙер.

Шулай ҙа балыҡсылар ярға сығып, һалдарын ныҡ итеп бәйләп ҡуйҙылар һәм өҫкәрәк менделәр.

– Көнө буйы аяҡтар боҙло һыуҙа, – тип һөйләнде береһе, сабаталарын сисеп. – Исмаһам, форсаттан файҙаланып, ойоҡто һығып кейергә кәрәк.

– Балыҡты нисек тотаһығыҙ һуң, сер булмаһа?

– Ниндәй сер, ти, ау менән, һыу ҡайта төшкәс, мурҙа һалабыҙ. Әле Иҙелдән үрләй бит. Эреләре күп. Ау бәйләргә еп юҡ. Мурҙа ни ярҙа үҫә. Ярай әле, әҙ-мәҙ булһа ла балыҡ бар, юғиһә тамаҡҡа бер нәмә лә юҡ.

– Бына нимә, ағай-эне, ҡабатлап әйтәм: минән шикләнмәгеҙ. Ибраш Уразбахтин кәрәк.

– Ҡулға алырғамы? Беҙ ундай кешене белмәйбеҙ. Ә һин үҙең кем һуң, бик ышаныслы булғас?

– Боҙаяҙҙан. Усаев.

– Усаев? Ҡәнзәфәрме? Мулламы?

Ҡәнзәфәр яуап урынына тултырып йылмайҙы.

– Улайһа, эш былай, хәҙрәт, старшина Ибраш был көндәрҙә ауылда булырға тейеш, – тип һөйләп китте кәзә һаҡаллыһы. – Өфө эргәһендәге һуғыштан һуң ҡайтты. Ҡулына ҡорал алмаҫҡа, баш күтәрмәҫкә ант иткән шикелле. Беҙҙең ауылдан да бер нисә егет уның ҡотҡоһо арҡаһында, Чесноковка тигәндәреме, шунда башын һалды.

– Нисек күрергә Ибрашты? – Тегеләр яурындарын ғына һелкеттеләр. – Әллә берегеҙ саҡырып килтерәме? Түләр инем.

– Һин нимә, иптәш, һыу йырып ауылға нисек бармаҡ, нисек итеп кире килмәк кәрәк? Ибраш бала-саға түгел, старшина кеше бит, беҙгә ышанып нисек бында килһен, маңлайына тай типмәгән дә инде.

Ҡәнзәфәр, һындырып алған һәм көсөктәре ҡабарып үҫкән тал ботағы менән битен һыпыра-һыпыра, уйға ҡалды. Әгәр ысынлап та өйөндә икән, Ибрашты һис кисекмәҫтән күреп һөйләшергә кәрәк. Ул тәжрибәле, отряды менән һуғышып йөрөгән командир. Ҡәнзәфәрҙең киләсәктәге эше Өршәк, Сәрмәсән, хатта Ыҡ буйҙары менән бәйле булырға тейеш. Ҡыш буран, һыуыҡ, тәрән ҡар, тип ыҙалана инек, инде көндәр шәп, әммә ләкин йөрөргә мөмкинселек юҡ. Ер өҫтөнә, әйтерһең, туфан ҡалҡҡан. Язалау отрядтарын тап ошо саҡта ҡыйратырлыҡ та бит, команданы нисек тиҙ генә йыйып алаһың?..

Ҡәнзәфәрҙең һүҙһеҙ ҡалыуына, тәрән уйға сумыуына иғтибар иткән балыҡсыларҙың кәзә һаҡаллыһы:

– Мин бер юл таптым үҙемсә, юғиһә, башҡа сара юҡтыр әлеге хәлдә, – тип һөйләнде.

– Ниндәй юл? Әйт тиҙерәк! – Ҡәнзәфәр башын күтәрҙе.

– Һин үҙең бар ауылға. – Юлсының көләмһерәүен күреп: – Ризалашмаһаң, үҙ яйыңды үҙең ҡарайһың.

– Һуҙма, әйт һүҙеңде!

– Фекер шулай: һине ҡаршы яҡҡа ҡустым һалда сығара, ибет. Һин килгәнсе балыҡ тота торабыҙ.

– Ауылға нисек барам?

– Һыбай. Атың йөҙөп сыға. Яҡшы ат өсөн Иҙел дә сүп кенә. Эйәрең был яҡта ҡалһын.

Балыҡсыларҙың кәңәше дөрөҫ булды. Ҡәнзәфәр һал-кәмәлә, ә бүртә бейә үҙе йөҙөп сыҡты. Күрәһең, аттың элек тә бөгөнгөләй хәлгә юлыҡҡаны булғандыр, сөнки һыу ситенә килмәҫкә тартышып торманы, әйҙә, малҡай, тип әйтеүгә, инеп тә китте, башын күтәреп, танауы тишектәрен ҡабартып йөҙә лә башланы. Теҙгенгә ялғанған дилбегәне иркен тотоп, ҡаршы ярға уның яйына аҡтылар. Ергә баҫҡас, мәхлүк бөтә кәүҙәһен ныҡ һелкеп, тиреһенә һылашҡан һыуҙы ҡойҙо, һәм, бер нәмә лә булмағандай, уҙған йылдан ҡалған үләнгә үрелде.

Был яҡҡа сығарған балыҡсыларҙың йәшерәге менән шулай килешелде: Ҡәнзәфәрҙең ауылдан кире килеүе күренгәс тә, уны әлеге урында көтөп аласаҡ.

Ибраһим тигән бәләкәй генә ауыл да, йөҙәрләгән башҡа ауылдар шикелле, шөҡәтһеҙ ине. Икешәр, өсәр тәҙрәле өй ҡыйыҡтарының бөтәһе лә тип әйтерлек ҡабыҡ менән ябылған. Бер нисәһенә генә ҡамыш түшәлгән.

Балыҡсылар әйтеүенсә, Ибраштың өйө ауылдың теге осонда, ҡояшҡа ҡараған яҡта, икән. Башҡаларҙан ҙурлығы, матурлығы менән айырылып тора. Түбәһе лә таҡтанан. Нисә һөйләһәң дә, яһаҡ түләүсе татарҙар старшинаһы.

Ҡапҡа төбөнә килеп туҡтауға, әйтерһең, алдан хәбәр алған – өйөнән үҙе сыҡты. Башын ҡағып ҡына иҫәнләште.

– Кем булаһың? Ҡайҙан? Ниндәй йомош? – Ибраш, ваҡыты тар кешеләй, бөтәһен бер юлы белергә теләне.

– Бәлки, ихатаңа инербеҙ, – тине Ҡәнзәфәр, һүҙҙең ҡыҫҡа түгеллегенә ишара яһап.

Хужа кеше боролоп, өндәшмәй генә ишегенә ҡарай атланы. Ҡәнзәфәр иһә, урамда күренеп тормаһын өсөн, йүгән башынан тотоп, атын үҙенә эйәртте.

– Мин Ҡәнзәфәр Усаев булам. Петр Өсөнсөнөң үҙенән.

Ибраш, һиҫкәнеп, килеүсегә боролдо. Йөҙө ағарҙы, хатта танау япраҡтары өрөлдө.

– Ниндәй елдәр килтерҙе бында? – Саҡ ишетелерлек итеп кенә өндәште. Ул ҡаршыһында баҫып торған кешегә шикләнеп ҡараны. Бәлки, алдайҙыр, шаярталыр? Ҡәнзәфәрҙе күреп белмәһә лә, уның хаҡында әллә күпме хәбәр йөрөүен хәтерләй. Пугачев был әҙәмде хатта Көңгөрҙө яуларға ебәргән бит. Башҡортостандағы берәй ҡәлғәгә йә заводҡа түгел, Пермь провинцияһына оҙатҡан. Һуңыраҡ Салауат та шул тарафтарға юлланған. Шундай ҙур етәксе нимә эшләп Ибраһим ауылына килеп сыҡҡан? Шундай шомло, ҡурҡыныс заманда, етмәһә һыу ташҡынында бер яңғыҙы йөрөп ята.

– Ҡырын ҡарайһың, әллә ышанмайһыңмы? Бына батшаның манифесы, ордеры. – Сәкмән түшенән ҡағыҙҙар сығарҙы.

– Мин ихтилалдан ситләштем. Еңелдек. Рәсәйҙә бер ҡасан да дөрөҫлөк булмаясағына ышандым. Күпме әҙәм балалары, юҡ өсөн һуғышып, йәндәрен ҡыйҙы. – Ибраш, оҙайлы сәфәрҙән арып ҡайтҡан кешеләй, болдорона ултырҙы.

– Һинең төшөнкөлөккә бирелеүең аяныс. Шулай икән, ябай халыҡтан нимә көтөргә кәрәк. Шуны белгем килә: Торнов ҡайҙа? – Ҡәнзәфәр ҙә ап-аҡ итеп йыуылған күтәрмәгә ултырҙы. – Уның яҙмышын белеү миңә бик мөһим.

– Торновты әйтәһең инде. – Ибраш, буталған уйҙарын бер тәртипкә килтерергә теләгәндәй, мыйығын һыпыра-һыпыра, бик оҙаҡ һүҙһеҙ ултырҙы. Ул әле булһа Ҡәнзәфәрҙең кемлегенә икеләнә ине. – Әгәр һин Ҡәнзәфәрһең икән, шуны әйт: Яңы батша ҡайҙа? – Башын бороп, ҡунағына һынаулы ҡараш ташланы.

– Белорет заводтары тирәһендә булырға тейеш.

– Ырымбурҙы ташланы, тимәк.

– Уны Ҡазан ҡыҙыҡһындыра, Мәскәү.

– Ырымбурҙы ала алмай, Өфөнө лә, Көңгөрҙө лә...

– Уларын беҙ алырбыҙ.

– Ҡулың менән муйыныңды уратып, уң ҡолағыңды тота алаһыңмы?..

Ҡәнзәфәрҙең йөҙөнә асыу йүгерҙе, ҡаштарын төйөрҙө. Ҡысҡырырға теләпме, тамағын ҡырҙы.

– Һорауымды оноттоң шикелле, Ибраш?

– Улайһа эш былай: Зубово ауылы эргәһендәге мәхшәрҙән һуң Сөн, Нөгөш йылғалары тарафына юлландым. Нуғайбәктә еңелгәс, Торнов шул тирәгә сигенде. Март аҙағында барып еттем. Торнов, Ҡаранай, Ҡыҙрас, Ҡәйептәр шунда ине. Баҡалыға һөжүм ойоштороу өсөн һөйләшеү, кәңәшләшеү өсөн Бишҡураз ауылына йыйылдыҡ. Ҡыҙрас үҙенекен тылҡый, йәнәһе, аяҡ аҫты йөрөрлөк түгел, ике-өс аҙна көтәйек, ти. Торнов ҡыҙыу ҡанлы бит. «Язалаусыларға Ҡазандан өҫтәлмә көстәр килгәнсе һөжүм итәбеҙ. Бойорам! Кем ҡаршы, шул Петр Федорович дошманы, һатлыҡ йән! Ундайҙарға үлем!» – тип ҡысҡырҙы. Юртагишевтар тигән өс бер туған егеттәр бар ине, шуларҙың береһе: «Һин ул тиклем кем, керәшен, әмер бирергә?!» – тимәһенме! Торнов эргәһендә торған ярҙамсыһына: «Уҡыт иманын!» – тип әйтеүгә, теге ҡылысын ҡынынан һурып алды ла Юлбарыҫ тигәненең муйынын сабып та өҙҙө. Китте буталыш. Икенсе көндө Ҡыҙрастыҡылар Торновҡа һөжүм иткән һәм уны егерме биш кешеһе менән ҡулға алған. Шуларҙың һигеҙен, Торновты Бөгөлмәгә илтеп, хөкүмәт ғәскәрҙәренә тапшырған. Йәнәһе, ул Әбей батша алдында һәйбәт кеше. Әлегәсә яңылышҡан, башы эшләмәгән. Бына шундай тарих. Мин өйөмә ҡайттым. Ҡыҙрас әле ҡайҙалыр, белмәйем.

– Ике йөҙлө бәдбәхет! – Ҡәнзәфәр тороп баҫты. – Уны юҡ итергә кәрәк. Хәл былай, Ибраш: һин артҡа сигенергә тейеш түгел. Бөгөндән үк көс тупларға. Отряд йый. Бойороҡ был. Минең командала булырһың. Әҙер тор. Ҡаранай Стәрлетамаҡ тарафтарында булырға тейеш.

– Ә һин Әлибайҙың Михельсонға баш эйеп барғанын беләһеңме? Баш старшина Мырҙағоловты әйтәм.

Әлеге хәбәрҙе ишеткәс, Ҡәнзәфәр тертләп китте.

– Булмаҫ. Кинйә абыҙҙың ышаныслы кешеһе.

– Ышаныу-ышанмау – һинең эш. Ҡәйеп Зиәмбәтов, Ибраһим Мерәҫовтар ҙа уның юлын ҡабатлаған. Һис ялған хәбәр түгел. Алмаҡай Әлкәйев һөйләне. Ул беҙҙең ауылдыҡы бит. Элекке старшина. Яңы батша уларҙы Чесноковкаға ебәргән. Юлда Алмаҡай Әлибайҙы, ихтилал тар-мар ителде, аҫылаһың килмәһә, әйҙә провинция концелярияһына, тип өгөтләп, ҡурҡытып алып барған. Йылан.

– Хәҙер аңлашылды. Алмаҡай үҙе ҡайҙа һуң?

– Өфөлә яталыр. Унда өйө бар. Ауылдағы йорт-ерен фетнәселәр талаған, туҙҙырған.

Ҡәнзәфәр атына менде. Ибрашҡа эйелә бирҙе.

– Уразбахтин, вәғәҙә көсөндә ҡала: отряд йый, ҡорал әҙерлә. Яугирҙарың йәйәүле булмаһын. – Атын килгән яҡҡа, Өршәккә, ҡарай әйҙәне. Балыҡсыларҙы көттөрөүенә үкенеп ҡуйҙы. Әйткәндәй, бәлки, балыҡ һатып алыр. Малайҙарын шатландырыр. Ғаиләһен ят аш менән һыйлар.

Ибраш иһә ҡапҡа бағанаһына һөйәлде. Сөнки Усаев уны утҡа һалды. «Тағы һуғышмы? Бер ҡайғыһыҙ, рәхәтләнеп бер генә көн булһа ла йәшәһәң ине был фани донъяла», – тип һөйләнде.

«Әлибай, Әлибай, кем-кем һин быны эшләргә тейеш түгел инең. Һин губернаторға ярҙамға тип Стәрлетамаҡ пристаненә йыйылған мең дә ике йөҙ кешене унынсы ноябрҙә Салауат менән Пугачев яғына алып сыҡҡан кеше. Әгәр Кинйә абыҙҙы осратһаң, униң күҙҙәренә нисек ҡарарһың? Атайың Мырҙағол Абысовты 1737 йылда язалаусылар отряды сапҡылап үлтергән бит... Ҡәйеп, Ибраһим... Ҡәйеп Нуғайҙың уң ҡулы була торғайны. Униң Баҡалы, Нуғайбәк тарафтарында батырҙарса көрәшеүе билдәле. Аңлашылмай. Ибраһим иһә 1735 – 1740 йылдарҙағы ихтилалды баҫтырыуҙа тиреһенән сығырҙай булып ҡатнашып йөрөгән билдәле старшина Мерәҫ Еләүембәтов малайы. Аумаҡайлығына аптырарға ярамайҙыр. Дим буйы батырҙары, ташҡа үлсәйем...» Күңеленә тығылған уйҙарынан Ҡәнзәфәрҙең маңлайы сатнай башланы.

– Былай ярамай, былай бармай. Һатылмаған старшиналар ҡайҙа? Һеләүһен ҡайҙа йөрөй? – тип һөйләнә-һөйләнә, Ҡәнзәфәр атын шәбәйтте. Балыҡсыларҙың был яҡта тороуҙарын күргәс, өҫтөнән ҙур таш төшкәндәй тойолдо. Ярай әле, миһырбанлы кешеләр бар. Ике крәҫтиән. Көнө буйы йөрөп лысма һыу булғандар, күшеккәндәр. Дер-дер ҡалтыраһалар ҙа, көттөргән кеше өсөн борсолғандар.

– Ибрашты осрата алдыңмы? Балыҡты байтаҡ тотtoҡ, күпме кәрәк, күстәнәскә ал.

Ҡәнзәфәр, рәхмәт әйтә-әйтә, кеҫәһенән көмөш аҡса сығарҙы...

Өршәк үрен менгәс кенә, Ҡәнзәфәр зәңгәр күккә баҡты. Һабан турғайҙарының үҙ-ара ярышып һайрауына һоҡланып күҙҙәрен йомдо. Үҙ яйына атлаған ат өҫтөндә шулай барыу рәхәт ине. Етмәһә, йылы, дымлы ел йөҙҙө иркәләй. Бөрөләр шартлап ярыла. Ҡоштар тыуған илдәренә ашығып ҡайта... Ә шулай ҙа донъя ғәжәп матур, Донъя гүзәл. Йәшә лә йәшә...

Тик Хоҙай биргән ғүмереңде кинәнеп үткәрергә осоро тура килмәне. Өфө, Ырымбур тирәләрендә еңелеүҙәргә дусар ителгәс, баш күтәреүселәрҙең кеме ҡайҙа таралды. Күпселеге, әлбиттә, тыуған төйәгенә, ғаиләһенә ашыҡты. Байтағы, урын, оя тапмай, әле булһа берәҙәклектә, ваҡ төркөмдәр рәүешендә урмандарға һибелгән. Беренселәре, тамағы ас икән, исмаһам, йылы өйҙәрендә, ә былары? Уларға тик урлашып, юл баҫып ҡына көн итергә ҡала. Ҡасып йөрөүсе элекке фетнәселәрҙән зыян күреү былай ҙа ғүмер буйы михнәт сиккән халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙыра, Яңы батшаға ҡарата ышаныуҙы кәметәсәк, униң абруйын төшөрәсәк. Шуға ундай әҙәм балаларын йыйырға, тупларға, ҡулдарына ҡорал тотторорға кәрәк. Ә быниң өсөн Башҡортостандың көнбайыш өлөшөн, көньяғынан төньяғына тиклем ҡыҙырып йөрөп сығырға тейешһең. Тағы ла иң мөһиме: ихтилалдан ситләшмәгән старшиналар менән осрашырға. Михельсонға һатылғандарын күреү ҙә зыян итмәҫ. Ҡабаланыу талап ителә. Мөмкинлектәрҙе ҡулдан ысҡындырырға ярамай. Үлемгә һыуһап, ҡанһырап ауылдарҙы айҡап йөрөгән язалау отрядтарының юлын кем бүлер, уларҙың яуызлыҡтарына кем сик ҡуйыр? Әйткәндәй, Өфөнән бик үк алыҫта ултырмаған Сәфәр ауылы мишәрҙәре, аптырағас, Пугачевтың үҙенә үк үтенес менән мөрәжәғәт иткәндәр. Ҡәнзәфәр хаттың йөкмәткеһен генә түгел, хатта унда яҙылғандарҙы һүҙмә-һүҙ хәтерләй: «Өфөнө ҡамауҙан ҡайтарыу өсөн хөкүмәт ғәскәрҙәре килгәс, беҙҙекеләр ҡайһыһы ҡайҙа таралып бөттө. Өфө тирәһендә беҙҙекеләр ҡалмағас, язалаусылар тирә-йүнде таларға йыйына. Үҙебеҙсә һаҡланыу сараларын күрергә тырышабыҙ. Әлбиттә, ҡарауыл ҡуйҙыҡ. Тик беҙ, аҙ булғанлыҡтан, ҡаршы тора алмаясаҡбыҙ. Бигерәк тә старшиналар Морат Янышев, Миндәй Тупиев, әгәр

ҙә беҙ күндәмлек күрһәтмәһәк, беренсе сиратта беҙҙе, шунан өйҙәгеләрҙе ҡыйратыу менән янай. Әлеге мәлдә ҡәбәхәттәрҙән нисек ҡотолоу юлын белмәйбеҙ. Ағарҙы ауылынан килгән язалаусылар ҡарауылда торған дүрт кешебеҙҙе үлтергәндәр, бер гусарҙы тотоп, ҡарауыл аҫтында старшина Ҡәйеп Зиәмбәтовҡа оҙатҡайныҡ, эҙәрлекләү менән ҡурҡыталар. Яуыз бәндәләрҙән нисек ҡотолорға белмәйбеҙ. Беҙҙе яҡларға әмер биреүегеҙҙе үтенәбеҙ. Беҙ – мишәрҙәр, башҡорттар һәм уларға оҡшаш башҡа халыҡтар кеүек, күсенеп йөрөмәйбеҙ, шунлыҡтан әгәр ҙә яҡларға хәрби кешеләр килеп етмәһә, тирә-йүндәге ауылдарҙа йәшәүсе тар ҡарашлы әҙәм балалары бөләсәк. Мәрхәмәт итеүегеҙҙе көтәбеҙ?» Сотник Кәлимулла, Ғәбиҙулла Әсәҙуллиндар, Әбләзиз Мостаев, Әбдилтә Ҡорташев, Зәйеп Мортазин ҡул ҡуйған, ә Сәлкәй, Сәйфулла Айытовтар, ауыл ҡарттары Бакиш, Әлмән Йосоповтар, Бикәй Бикмаев, Уразбай Әбдүков, Сәйет, Микәш Мортазиндар, Әбдрәшит Мәғзүтов, Әмин Айҙаров, Яким Йәнтийәровтар ҡултамғаларын һалғандар.

Күпме волостарҙың халҡы ошо хәлдә бит. Уларҙы Ҡәнзәфәрҙәрҙән башҡа кем яҡлар? Кем ярҙам ҡулы һуҙыр?..

Ҡәнзәфәр Боҙаяҙға һуңлатып ҡына ҡайтты. Малайҙары ҡапҡа асып, атайҙарының төшөүен дә көтөп тормайынса, теҙгенде ике яҡтан тотоп, атты аҙбар алдына уҡ алып барҙылар.

Айғолаҡтарынан эләктереп, тал сыбығына теҙелгән балыҡтарҙы күргәс, һикерергә тотондолар.

– Атай балыҡҡа барған. Атай суртандар, йәйендәр ҡаптырған! – тип болдорға сығып баҫҡан әсәләренә ҡысҡырҙылар.

– Шауламағыҙ. Юғиһә, балыҡтар уянырҙар ҙа һикерешеп төшөп, ҡар һыуында ағып та китерҙәр.

– Үлгәндәр. Шаяртма, атай, ҡанаттары булһа ла, оса алмайҙар. Йәйен юҡ.

– Ә былар? Исемдәре нисек? – Малайҙар талға теҙелгән балыҡтарҙы юғары күтәрҙеләр. – Сабаҡ, ташбаш, табан?..

– Хәҙер тикшерербеҙ. – Ҡәнзәфәр ергә һикерҙе. – Уларҙы мин дә бик айырып бөтөрмәйем. Ҙур йылға буйында үҫмәнем.

Өсәүләшеп өс яғынан атланылар.

– Асһыңдыр. Әйҙә өйгә. Балыҡтарҙы үҙегеҙ таҙартһағыҙ ғына бешереп ҡарармын. – Сүриәгә лә ҡыҙыҡ тойолдо. Ҡар өҫтөнә һалынған балыҡтарға яҡыныраҡ килде.

– Атай, һөйлә, был ниндәй балыҡ? Быныһы?..

– Ҙурынан башлайыҡ, – Ҡәнзәфәр сүгәләне. – Ҡанаттары ҡыҙыл, ап-ағы – ҡушбаш.

– Ике башлы түгел дә инде.

– Маңлайы киң. Көслө балыҡ. Ҡармаҡҡа ҡапһа, һөйрәп сығарыуы ауыр, тиҙәр. Иң бәләкәйе – этеш.

– Аб-бау, үҙе ҙур күҙле, үҙе лайлалы, үҙе сәнскеле. Тауыҡтарға йә бесәйгә бирәйек.

– Ашаны, ти, бесәй, ул иң ҙурына өмөтләнәләр әле. Ана, үҙе лә мырлап килә ята. Брс ситкәрәк.

– Быныһы, улдарым, һыла. Ул алабуғаға оҡшағаныраҡ. Тәмлеләрҙән иҫәпләнә. Һирәк эләгә. Быныһы, иң киңе – ҡорман. Ул да бик тәмле, тик һаҡ ашарға кәрәк, ваҡ ҡылсыҡлы. Сабаҡ – бик йылғыр, хәйләле, шуға ла, моғайын, үҫмәй, ябыҡ, үтәнән-үтә күренерлек.

– Табан балыҡ ҡапманымы?

– Табан күлдә генә йәшәй. Ағын һыуҙы яратмай.

– Ә һин быларҙы ҡайҙан тоттоң?

– Өршәктән. Мин тотманым. Бер бабайығыҙ, бер ағайығыҙ күстәнәс ебәрҙе...

Атай кешенең балалары менән гәпләшеүенә Сүриә сикһеҙ шат ине. Йөҙө көндөҙгө ҡояштай балҡый. Ҡыш буйы Өфөлә йәшенеп ятҡанда малайҙары туҡтауһыҙ атайҙарының ҡайҙалығын һорап теңкәгә тейҙе. Олатайҙары өйҙә саҡта был хаҡта һүҙ сыҡһа, теш араһынан ғына: «Тау башына менеп ҡарағыҙ, уның йолҡоштары беҙгә ата, – тип һөйләнә. – Юлбаҫар ул. Үлемен эҙләп йөрөй». Бындай минуттарҙа Сүриә, әгәр Ағиҙелдең туң сағы булмаһа, ярға йүгереп төшөп, һыуға һикерер сиккә етә. Ярай әле, әсәһе Хафиза ҡыҙының хәленә керә белә. «Атайың тик бүтәндәрҙән генә ғәйеп эҙләй, бүтәндәрҙе генә ғәйепләргә белә, ә үҙе ғүмере буйы кешеләрҙе рәнйетеп, ғәйепһеҙҙәрҙе баструкка ултыртып, байҙарҙы яҡлап йәшәне. Тамағым туҡ, өҫтөм бөтөн булһа ла, әллә әсәйеңде бәхетле тип уйлайһыңмы?..» Сүриә бер ҡасан да әсәһенең шәхси тормошо, уй-кисерештәре хаҡында һорашманы. Иренә ҡаршы һүҙ әйтмәҫ, һәр саҡ башын эйеп йөрөгән, Мөҡсиндең тупаҫлығына, екеренеүенә риза Хафиза һәр саҡ балаларының күҙ алдында ине бит. Иренең ҡайтыуын көтөп, төндәрҙе тәҙрәгә ҡарап үткәрергә, осоп сығып ҡапҡа асырға, йылы ашты өҫтәлгә килтереп ултыртҡас атты туғарырға йүгерергә тейеш...

Ҡәнзәфәр бөтөнләй икенсе, Мөҡсингә ҡапма-ҡаршы әҙәм. Ул кешелекле, кеселекле. Ярҙамға мохтаж кешегә һуңғы күлдәген һалып бирергә әҙер. Хыялы – мәсет һалыу, хыялы – халыҡты уҡый-яҙырға өйрәтеү. Ҡыйырһытылыуҙарға, кәмһетелеүҙәргә дусар булғандарға, бәхетһеҙлектәргә юлыҡҡандарға ярҙам итеү өсөн ҡайҙарға ғына, кемдәргә генә яҙмай, шундайҙарҙың йомошон юллап Өфөгә барырға ла иренмәй. Тик бына гөрләп йәшәгәндә генә...

Ҡыҙҙырылған балыҡ, Саҡмағоштағы ҡартатайҙары әтмешләй, телде йоторлоҡ тәмле булды. Уны ашағанда нисек һаҡланырға икәнлеген Ҡәнзәфәр малайҙарына тәфсилләп аңлатты. Тамаҡҡа ҡылсыҡ ҡаҙалып, интегеп үлгән кешеләр ҙә бар икән.

Малайҙар һис кенә лә йоҡларға теләмәне. Улар атайҙарының әкиәт, ҡыҙыҡлы, ҡурҡыныс ваҡиға һөйләүен ҡат-ҡат талап итте.

– Бөгөнгә булмай, улҡайҙарым, арыным. Башҡа саҡта күп тарихтар һөйләргә вәғәҙә итәм. Ә һеҙ мин күрһәткән хәрефтәрҙе өйрәндегеҙме һуң? Ҡушып уҡырға ваҡыт. Тикшереп ҡарармын.

– Ә беҙ беләбеҙ. Бөтәбеҙҙең дә исемен яҙа беләбеҙ. Әсәйҙән һора. Ул да өйрәнә.

– Егеттәрһегеҙ икән! Иртәгә ихаталағы ҡарҙы таратып бөтөрөгөҙ. Бөгөнгә бәү-бәү...

Ҡәнзәфәр ысынлап та ныҡ арығайны. Күргән-белгәндәрен ҡатынына һөйләй-һөйләй, һүҙҙәренең осона сыға алмай йоҡлап китте.

Ә инде иртә менән, малайҙары уянғансы, алыҫ юлға сәфәр сыҡты. Был юлы – Стәрлебашҡа егерме биш саҡрым барып етмәҫтән урынлашҡан Ҡаранай ауылына. Ҡаранай Моратовты унда тип ишетте.

***

Ҡаранай Моратов. Ирәндек башҡорто. Ҡәнзәфәр уны Бердала осратты. Ҡырҡ йәшен үтһә лә, әллә бик үк һүҙсән түгеллеге, әллә яңғыҙыраҡ торорға, уйға сумырға яратыуы арҡаһында, өлкәнерәк күренә. Ҡыҫыҡ күҙҙәре лә, түңәрәк йөҙө лә йылмайыуға һаран.

– Күк Ирәндек бөркөтөнә тауҙар етешмәй шикелле? – тип кемдер шаяртҡас:

– Эш ҡаяларҙа, ҡайындарҙа, Талҡаҫ күлендә генә түгел, – тип яуапланы. Шуның менән вәссәләм.

Һиҙелеп тора: ул Батырша ихтилалының шаһиты. Бөрйән волосынан Миркәт-

Мин волосына күсенеп килеүҙәре лә тикмәгә генә түгелдер. Тыуған төйәгендә ер әҙме ни?

Ҡәнзәфәр Ҡаранайҙы Ырымбурҙы штурмлағанда, Верхнее Озеро ҡәлғәһе өсөн һуғышта ла күрҙе. Лагерҙағы яй хәрәкәтен, әйтерһең, йыуып алғандар, бөркөттәй осоп йөрөй.

Пугачев урынлашҡан йортҡа инеп-сығып йөрөгәнен күргеләне Ҡәнзәфәр. Ҡаранай күберәк ваҡытын Кинйә тирәһендә уралып үткәрҙе. Күрәһең, абыҙ уны һынап ҡарағандыр. Шулай булмаһа, Пугачев уны Минзәлә тарафтарына ебәрмәҫ ине. Ноябрь аҙаҡтарында юлдар айырылды. Ҡәнзәфәр – Көңгөргә...

Ул көндәрҙән һуң ярты йыл ваҡыт үтеп китте. Донъя ифрат ҡатмарлы, ауыр булһа ла, уның айҙары, йылдары, бөгөн шаулаған яҙғы ҡар һыуҙарылай, ҡайҙа барып бәрелергә-һуғылырға белмәй ağа ла аға. Юлдар айыра, юлдар осраштыра.

Бөгөн Ҡаранай Моратов ҡайҙа? Ауылдамы, әллә ҡасып йөрөймө? Еңелеүҙәрҙән һуң ихтилал яғында ҡалғанмы, әллә ҡайһы бер старшиналар шикелле, ҡылған ҡылыҡтары өсөн ярлыҡау һорап Әбей батша генералдары алдына барып билен бөккәнме? Юҡ, һуңғыһына ышанғы килмәй, сөнки уның етәкселегендәге ғәскәр Ҡазандың эргәһенә үк барып еткәнлеге хаҡында хәбәрҙәр йөрөнө.

Ҡәнзәфәр Ҡаранайға Өршәктең уң яҡтағы ауылдары арҡыры барыуҙы дөрөҫтөр тип фекерләне. Сөнки Бөгөлмә-Ырымбур трактының әле лә тынғыс түгеллеген, язалаусыларҙың, үләкһә эҙләгән ас януар шикелле, туҡтауһыҙ йөрөүен самалай ине. Регуляр армияныҡылар түгел икән, Солтанморат Янышев, Миндәй Тупиев, Мөҡсин Әбдесәләмов көсөктәре лә фетнәселәргә һунар итә.

Ҡәнзәфәр, Төрөмбәт ауылының юғары осондағы ҡалҡыулыҡҡа еткәс, атын туҡтатты. Ләкин ергә төшмәне. Аҫта Өршәктең һул яғы күҙ күреме ергә йәйелгән. Урыны-урыны менән түңәрәкләп йә бормаланыбыраҡ асыҡлыҡ ҡалдырып үҫкән, бөгөн килеп билдәренә ҡәҙәр һыу эсендә ултырған талдарға ҡарап йәйен шунда күлдәр хасил булыуына ла икеләнмәҫкә мөмкин. Балығынан башҡа, был ерҙә өйрәктәр ҙә, башҡа һыу, һаҙ ҡоштары ла яман үрсейҙер. Ваҡыт тап та ауға кил. Ул шөғөл әлегә хыялда ғына. Бөгөн Өршәк, Дим, Сәрмәсән, Ыҡ буйҙары үҙенә тарта. Уларҙың ике яғына ауылдар теҙелгән. Командаға кешеләрҙе күберәк тик шунан ғына йыйырға мөмкин. Ирекке бик мохтаждар. Сөнки һыу буйында йәшәп, малдарын йөрөтөргә көтөүлектәрҙән, балыҡ тотоу бәхетенән, беренсе сиратта, улар мәхрүм. Тик бына эсер һыуға килгәндә, өршәктәр ҡыйынлыҡ кисерә. Сөнки һыу – татыр. Ауыл тирәһе яланға әйләнеп бара, хатта аҡ сәсле ҡылған орлоғо ла ҡайҙандыр осоп килеп, урын һайлаған. Ихсан ауылы эргәһенә тәгәрләп килгән ҡамғаҡ та күп һорамаҫ. Ул да ялан, дала ярата бит, ҡылғандан ҡалышмаҫҡа тырышыр.

Соҡор менән айырылған кескәй генә фәҡир ауыл урамында ир-ат күренмәне. Кем белә, бәлки, сит һыбайлы пәйҙә булғас, тағын команда йыйыусы килгәндер, тип боҫоп бөткәндәрҙер. Хәҙерге әҙәм балаһы үҙ күләгәһенән үҙе өркөп йәшәй.

Ҡәнзәфәр Ҡаранайға еткәнсе Мырҙағол, Өршәкбаш, Ҡарамалы ауылдарында туҡталып торманы. Был осраҡта кеше күҙенә артыҡ салынмауың хәйерле.

Ауыл ситтәрендәге ҡарҙан асылған, ҡайһы береһенән пар күтәрелгән ҡалҡыу урындарҙа мал-тыуар, аттар уҙған йылдан һаҡланып ҡалған үләнде ҡапҡылап йөрөй. Улар тирәһендә ялан тәпәйле бала-саға күренә.

Бер табаҡтан ашап йөрөмәһәләр ҙә, Ҡаранай Ҡәнзәфәрҙе оло ҡунағы рәүешендә ҡабул итте. Килеүсенең, ҡунһа ла, тик бер кискә генә ҡаласағын, үҙе әйтмешләй, таш яуһа ла, иртә таңдан ҡайтып китәсәген аңлағас, тәкә һуйырға һәм кискә ҡорьән ашы уҙҙырырға ҡарар ҡылды. Был хаҡта ҡатынының ҡолағына ике-өс тапҡыр төшөрҙө.

Сәй эсеп алғас:

– Бер ыңғай үҙебеҙ ҙә һыйланырбыҙ, – тип ихлас көлдө. Өрлөккә ҡыҫтырылған үткер ҙур бысағын алып, ишектән сығып уҡ китте.

Ҡәнзәфәр ҙә, өйҙә бер үҙем нимә эшләп ултырайым тигәндәй, ихатаға ашыҡты. Ул атын ҡараштырған арала, Ҡаранай лапаҫ аҫтына тейәк менән аҫҡан тәкәһенең тиреһен һалдырырға ла өлгөрҙө.

– Ҡулың уйнап тора, – тип һоҡланыуын белдерҙе ҡунаҡ. – Минән булманы инде, ҡурҡам. Кеше саҡырам.

– Мишәргә, бигерәк тә мулла кешегә килешә, ә инде мал һуя белмәгән башҡортҡа килгәндә, йә ул ғәрип, йә һуҡыр ғына булыуы ихтимал. Көйәләнмә, Ҡәнзәфәр, походта бергә тура килһәк, өйрәтермен.

Ҡатыны сығып, табаҡҡа һалынған эс-бауырҙы, ҙур киҫәктәргә бүленгән иттәрҙе өйгә алып инеп китте.

– Кәүҙәм генә ауылда, ә уй-хыялымда әле булһа язалаусыларға ҡаршы һуғышып йөрөйөм, – тип уфтанып торҙо хужа кеше. – Минзәләгә ҡарай Ҡыҙрас Муллаҡаев, Ҡәйеп Зиәмбәтов, Ишҡара Арыҫлановтар менән юлландыҡ. Беҙ барып еткәндә, урындағы Мәсәғүт Ғүмәров, Шәфи Тойғозин, Бәки Абдулов, Назар Атексеев, Айыт Уразымбәтов, тағы байтаҡтарҙың командалары хәрәкәтләнә ине. Бөтәһен дә үҙ ҡулым аҫтына алырға тура килде. Минзәләгә айырым асыу бар: ул Башҡортостанда быға тиклем булып үткән ихтилалдарҙы тар-мар итеү пункты ролен уйнаған. Бикәнәй Торопбирҙин, Алдар Иҫәнгилдин һәм башҡа юлбашсылар ошонда язаланып үлтерелгән. Ябай ҡала ғына түгел. Уны күп һанлы гарнизон һаҡлай. Башнялар, бойницалары булған бүрәнәләрҙән төҙөлгән бейек стена менән уратып алынған. Ул ғынамы, ҡәлғә урыны тәрән итеп ҡаҙылған соҡорға Минзәлә йылғаһын йырып, һыу тултырылған. Ҡалала бихисап пушка, дары, снарядтар, етерлек күләмдә икмәк барлығы билдәле ине... – Ҡаранай ошоларҙы алыҫ-алыҫҡа ҡарап һөйләгәндә, әйтерһең, Минзәләнең үҙен күрә ине. Әҙ һүҙле кешенең былай асылып китеүе Ҡәнзәфәрҙе хатта ғәжәпләндерҙе. Ә шулай ҙа Минзәлә, Нуғайбәк, Баҡалы тарафтарында булып үткән ваҡиғалар хаҡында Ҡәнзәфәрҙең ишеткеһе килә. Бигерәк тә үҙ башынан үткән, дөрөҫөрәге, алыштарҙа етәкселек иткән кешене тыңлау ҡимммәтле ине. Ирешелгән еңеүҙәрҙе, ебәрелгән хаталарҙы байҡау, тикшереү – үҙе бер һабаҡ.

Ҡәнзәфәр төп мәсьәлә хаҡында һөйләшеү, фекерләшеү мөһимлеген хәтерләп, генерал Фрейманға ҡаршы һуғыштарға һуңра әйләнеп ҡайтырға уйлап:

– Киләсәк хаҡында уйҙарың нисек? «Еңелдек тә ултырып иланыҡ» түгелдер бит? – тип һораны.

Ҡаранай, тирләгән маңлайын елләтергә теләгәндәй, бүркен артҡараҡ этте, көслө, ҡаты бармаҡтары менән ҡара һаҡалын ышҡып торҙо.

– Һинең эстә ниндәй уйҙар ҡайнай? – тип һорауға һорау менән яуап бирҙе. Һынаулы ҡараш ташланы. – Ерле юҡҡа йөрөмәйһеңдер...

– Серем шунда, Ҡаранай: иҫәбем – команда йыйыу. Өршәк, Димдең урта өлөшөн, Сәрмәсән буйын, Ыҡтың уң яғын үҙемдең ҡарамаҡҡа аласаҡмын. Бөгөлмә-Ырымбур юлына беҙ хужа булырға тейеш. Нығынып алғас, Өфөнө ҡулға төшөрөү. Ә һиңә, уйымса, Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш өлөшө. Кәңәшләшергә тип килдем. Ишетеүемсә, Бердала, Чесноковкала, шулай уҡ Баҡалы тарафтарында туҙҙырылғандан һуң, халыҡ ҡайҙа барып бәрелергә белмәй йөрөй, ҡасаҡ рәүешендә төркөмгә бүленгәндәр ҙә байтаҡ икән. Уларға хәҙер енәйәт юлына баҫырға ғына ҡала. Бындай хәл ихтилалдың абруйына ҡара тап булып яғыласаҡ. Шуға күрә уларҙы ҡабаттан йыйып алыу – мөҡәтдәс бурысыбыҙ, тип уйлайым.

– Әйҙә әле, ултырышайыҡ, – тип Ҡаранай кәртә буйында аҫлы-өҫлө ятҡан өс бүрәнәне күрһәтте. – Әлеге көндә Ббатша ҡайҙа?

– Урал аръяғында. Командаһына халыҡ меңәрләп ағыла икән. Бигерәк тә заводтыҡылар. Нуғай юлының тынып ҡалыуына, хөкүмәт ғәскәрҙәренең шашыуына борсола.

– Тимәк, ул Көңгөр аша Ҡазанға йүнәлмәксе. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, Ҡәнзәфәр, марттағы бәрелештәрҙән, меңәрләгән кешенең һәләкәтенән һуң өмөт өҙөлә яҙғайны. Үҙемде балтаһы һыуға төшкән кешеләй тойҙом. Иҫән ҡалыуым киләсәктә тағы ла аяуһыҙыраҡ көрәшеү өсөндөр, тип уйлайым. Башыбыҙҙы эйһәк, халыҡты бөтөрөп ташлаясаҡтар. Үс алыуҙың иге лә, сиге лә булмаясаҡ. Әбей-бабайҙар, ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар йәл. Беҙ теҙләнһәк, уларҙы кем яҡлар? Уйҙарыбыҙ тура килә, Усаев. Серемде сисәм: тирә-йүнгә күҙ ташлаштырам. Уйымса, яҡын арала дүрт-биш йөҙ кеше йыйырмын. Тик һәр саҡ үҙ-ара хәбәрҙә булыу кәрәгер. Айырылғандарҙы, бүленгәндәрҙе нимә көтөүе билдәле.

Ҡаҙан тултырып итле аш бешерелеүе арҡаһында, өйҙә эҫе ине. Урындыҡҡа ҡорьән ашына килгән ундан артыҡ кеше һыйҙы. Улар тик өлкән йәштәгеләр. Мөмкинселек булһа, әлбиттә, кешеләрҙе күберәк тә саҡырырҙар ине, сөнки алыҫтан уҡ килгән мулланы, уның вәғәзен тыңлау ауылдағы һәр кем өсөн мәртәбәгә һаналыуы яҡшы билдәле.

Табындағыларҙы шулай уҡ кемдең ҡайҙа, нисек, ниндәй уйҙар менән йәшәүе лә ҡыҙыҡһындырҙы, әлбиттә. Әйтәйек, быйыл ер эшкәртеп иген сәсәсәктәрме? Сөнки оҙаҡламай баҫыуға сығыр мәл етә. Ә донъя тынысһыҙ заманда, ғөмүмән, аптыраҡ. Заводлы төбәктәрҙә әҙәм балаларының шөғөлө ҡалай? Ҡышын ҡар күп яуыу сәбәпле, яҙғы ташҡын да көслө булды.Теләк шул: берүк йәй ҡоро килә күрмәһен...

– Киләсәктәге тормош тик ауылдарға йыйылып, өйҙәр төҙөп, мал-тыуар аҫрап, ер эшкәртеп, иген игеп йәшәүҙә икәнлеге бер кемдә лә шик, икеләнеү тыуҙырмайҙыр. Быға мең йылдар аша килгәнбеҙ. Халыҡ ҡайҙа ла арыш, һоло, арпа, тары, киндер сәсә. Тик ҡайҙа ла ябай кешеләр өсөн йәшәү ауыр. Хеҙмәтенән бигерәк, әллә нисә төрлө яһаҡ түләү яфалай, ер-һыуҙарға тик айырым кешеләр генә хужа булыуы интектерә. Хоҙай Тәғәлә бөтәбеҙҙе лә тигеҙ итеп яратҡан. Һөйләшергә өйрәтте. Ҡояш менән Ай теүәл үлсәп, хисапланғанса, йәғни Аллаһ тарафынан билдәләнгән ваҡытҡаса, билдәләнгән юлдан хәрәкәт итәләр. Күктәге йондоҙҙар, ерҙәге үләндәр, ағастар уға сәждә итә. Теүәл үлсәү менән Аллаһ күкте бейек итеп яратҡан. Беҙгә мөхит бүләк итте. Ә инде кемдәрҙеңдер «Был тау минеке», «Был күлгә мин хужа», «Урман миңә тейеш...» тип үҙҙәрен хужа рәүешендә иғлан итергә выжданы етә. Ерҙең өҫтөндәге байлығы ла, аҫтындағыһы ла уртаҡ. Улар менән файҙаланырға һәр беребеҙҙең хаҡы тигеҙ. Шулай уҡ һәр әҙәм балаһы тик үҙе өсөн генә хеҙмәт итергә тейеш. Заводтар һүҙе сыҡты. Әйтәйек, кемдәрҙер Уралға килеп, башҡорттарҙың ерҙәрен оятһыҙ рәүештә тартып ала, завод төҙөй. Дөрөҫөрәге, төҙөтә. Ул ғына ла түгел, шунда эшләтеү өсөн бүтән губерналарҙан крәҫтиәндәрҙе ҡыуып алып килә. Ул бәхетһеҙҙәрҙең көн итеүе эттекенән дә яманыраҡ.

– Әллә үҙеңә күрергә насип булды, хәҙрәт? – Һорауы менән тынлыҡты боҙғаны өсөн ҡыйынһынып, йәшерәк кеше яңыраҡ ҡына сәсе ҡырылған башын эйҙе.

«Нисегерәк яуап бирһәң дөрөҫ булыр икән?» тигәндәй, Ҡәнзәфәр уйға ҡалды. Был хәлен тойҙортмау өсөн ҡорот ҡушып яһалған айранды йотто.

– Аллаға шөкөр, ундай тамуҡта ыҙа сигергә тура килмәне-килеүен, әммә ләкин тере мәйеттәрҙе күрҙем. Улар – ҡол. Ғүмерен тимер, баҡыр, суйын иретеп үткәрергә тейеш. Завод хужаһы ул бисараны теләй икән туҡмай, теләй икән үлтерә. Тамағын бурысҡа алып туйҙыра. Шул бурыстарын түләп бөтөрә алмай

теге донъяға китә. Бөгөнгө көндә улар баш күтәрәләр, Яңы батша ғәскәренә ҡушылалар. Заводтарҙы ҡыйраталар, бурыстары яҙылып барған ҡағыҙҙарҙы юҡ итергә тырышалар. БыҒауҙарын өҙәләр. Ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, иректә йәшәргә ынтылалар. Бөтә Рәсәй шундай хәлдә. Уйымса, ҡулына ҡорал тота алған һәр ир-егет быны эшләргә бурыслы. «Әл-Ғәҙийәт», йәғни «Уҙыш» сүрәһенә иғтибар итәйек. Бисмилләәһир-рәхмәәнир-рахим. Мәрхәмәтле вә рәхимле Аллаһ исеме менән башлайым. Йөрәк ҡағып, тупылдап сапҡан аттарға, тояҡтарынан ут сәсрәтеп уҙышыусы саптарҙарға, таң атҡанда йыһат өсөн яу сапҡан арғымаҡтарға, күкте саң менән ҡаплаған йылҡыларға, дошман өйөрөнөң уртаһына бәреп ингән юрғаларға шан-шәрәфтәр булһын! Шуларҙың исеме менән әйтәйем ки: бәндәләр ысынлап та шөкөрһөҙ, Аллаһҡа ҡаршы көфөрлөктә ғәмәл ҡылалар. Хаҡтыр ки, ул яман ҡыланыштары менән улар үҙ көфөрҙәренә үҙҙәре шаһит. Хәҡиҡәттән, әҙәм балаһы байлыҡ-малға табына. Хәттин ашҡан ҡомһоҙлоҡ-һаранлыҡ эсендә йәшәй... Аллаһ ҡаршыһында бөтәбеҙ ҙә яуаплы. Уның күҙәтеүе аҫтында йәшәйбеҙ. Кем дә кем уға хөсөтлөк тота, ундайҙарҙың нәҫеле ҡорор. «Әл-һүмәзә», йәғни «Ғәйбәт, һүҙ йөрөтөү» сүрәһендә шундай юлдар бар: «Әсе ҡәһәр төшкән кеше артынан һүҙ йөрөтөүселәргә, байлыҡ туплап, ҡан ҡалтырап торған һарандарға, байлығым-малым мине мәңге йәшәтер, тип уйлағанға. Хәйер, ул кеше Хутәмәгә атыласаҡ. И-й, Мөхәммәт Хутәмәнең нимә икәнлеген беләһеңме? Аллаһ яндырған хәтәр тамуҡ булыр ул...»

– Хәҙрәт, мөмкин булһа, шундай һорау тыуа: һин үҙең кем? Стәрлебаш мәҙрәсәһендә һабаҡ алманыңмы? Мин дә шунда барып ҡарағайным, уйым барып сыҡманы. Тормош ауыр.

Әлеге һорауҙы ла шул уҡ кеше бирҙе. Тимәк, ул ҡунаҡтың һәр һүҙен йөрәге аша үткәреп ултыра, һәр хәбәргә битараф түгел.

– Юҡ, иптәш, Стәрлебашта уҡыманым.

– Улайһа, тағын ҡайҙа мәҙрәсәләр бар?

– Ырымбурҙа, Стәрлетамаҡта, Танып йылғаһы тарафтарындағы Ҡарыш ауылында. Ишетеүемсә, уҙған йыл Стәрлебаштың икенсе мәсете эргәһендә лә асылған икән. Бирһен Хоҙай. Улар күбәйгән һайын аңыбыҙ киңәйер. Киләсәк көндәрҙә, Аллаһ бойорһа, һәр ауылыбыҙҙы, иманым камил, мәсет манараһы биҙәп торор, мәҙрәсәләр асылыр.

– Хәҙрәт, һин үҙең Әбей батша яҡлымы, әллә Яңы батша яҡлымы?

– Кемде яҡлауым һөйләгәндәремдән аңлашылырға тейештер...

Ҡөрьән ашына йыйылған кешеләр шундай мәрхәмәтле хәҙрәт менән осраштырғаны өсөн айырыуса Ҡаранайға рәхмәтле икәнлектәрен белдерҙе. «Ашҡа, сәйгә йыйылған бар, әммә ләкин ғилем эйәләре менән эстәр бушағансы әңгәмәләшеп, уларҙың аҡыллы һүҙҙәрен тыңлап ултырыу юҡ дәрәжәһендә», – тинеләр. Әгәр ҙә форсат тапһа, оҙағыраҡ ваҡытҡа килеүен, бүтән өйҙәрҙә лә ҡунаҡ булыуын үтенделәр.

Кисен, көн һалҡыная төшкәс тә, Ҡаранай менән Ҡәнзәфәр теге бүрәнәләр өҫтөндә оҙаҡ һөйләшеп ултырҙы.

Ҡаранай, Минзәләлә ҡаты еңелеүгә дусар ителгәс, тыуған төйәгенә ҡарай китергә, ҡасып йөрөргә мәжбүр була. Сөнки һатлыҡ йән Ҡыҙрас Муллаҡаев кеүек старшиналар дошмандан да ҡурҡынысыраҡ йән эйәләренә әйләнә. Фрейман, Бибиков табанын яларға әҙер Муллаҡаевтар регуляр ғәскәрҙәргә ҡаршы әле яңы бергә һуғышып йөрөгән яуҙаштарын үлтерергә, тереләй тотоп дошман ҡулына бирергә ант иттеләр. Уларға ни хәҙер дошман ярлыҡауы, дошман бүләге кәрәк. Торновты ҡулға алыу шатлығынан Бибиковҡа яҙған рапортында Муллаҡаев нисек уның командаһына һөжүм итеүе, күптәрҙе үлтереүе хаҡында бәйән итә.

Етәкселеген һыҙыҡ өҫтөнә алып, үҙен баш старшина, тархан тип атай. Тик, уҡый-яҙа белмәүе арҡаһында, тамға ғына ҡуя. Мөһим документты дөрөҫләп, тағын һигеҙ старшина: Ҡәйеп Зиәмбәтов, Ишара Арыҫланов, Мәҡсүт Мырҙаҡаев, Исмәғил Үрәзмәтов, Ишкилде Моратов, Ҡунаҡкол Атйетәров, Ғәли Йәрмөхәммәтов, Юлдаш Ишбулдин, хатта йөҙ баштары: Һартан Таһиров, Ҡосаҡ Боранғолов, Юлдаш Ямаев, Мөҡәй Ҡолойов, ул ғынамы, Ҡыҙрастың писары мулла Юныс Йосопов та ҡулдарын ҡуйҙы. Хәреф белмәгәндәре тамғаларын һалды.

Тик Бөгөлмәлә Бибиковтың үлеүен ишеткәс, уны йәлләп түгел, хаттың уның исеменә яҙылып өлгөрөүенә үкенделәр, Ҡаранай ҙа күп һанда яугирҙарын, аттарын юғалтҡан. Ибраш Уразбахтин да отряды менән уның командаһында һуғышып йөрөгән икән. Сиктән тыш ярҙам кәрәк саҡта Торнов та, хәлде белә тороп, хатта үтенескә яуап та бирмәгән. Зарубин тарафынан ебәрелгән туған тейешле кешеһе – Ульянов та буталсыҡ тыуҙырып йөрөгән. Еңелеү сәбәпһеҙ булмай, әлбиттә, уны алдан белеп, тойоп, тейешле сараларҙы күрмәйһең икән, был осраҡта һин йөҙ, мең тапҡыр ғәйепле.

Ҡәнзәфәр, үҙ сиратында, бер нисә заводты нисек алыуы, Көңгөр ҡалаһына яһалған штурмда Салауат Юлаевтың, Иван Кузнецовтың ҡатнашыуы хаҡында һөйләне. Унда ла фетнәселәр менән етәкселектә аңлашылмаусанлыҡ килеп тыуған.

– Кешеләр йыйырбыҙ, тик ҡоралды, бигерәк тә пушкаларҙы ҡайҙан табырға?
– Икеһе лә был мөһим мәсьәлә хаҡында ҡат-ҡат ҡабатланылар. Ҡыҙрасҡа ҡарата сара күреү тураһында ла иҫкә алдылар.

Ҡаранайҙы осратыуы, алда торған төп бурысты нисек, ниндәй юлдар менән хәл итеү хаҡында аңлашыуҙары, үҙ-ара һүҙ ҡуйышыуҙары, ҡараштары, фекерҙәре тура килеүе Ҡәнзәфәрҙе ҡыуандырҙы. Килеп тыуған мәсьәләләрҙең мөһимлегенә, шарттарға ҡарап, тиҙ арала ойоша һалырға һәм кәрәк була ҡалһа, бербереһенә ярҙамлашырға, кем баш, кем түш икәнлеген тикшермәҫкә. Талап ителә икән, мин – һинең урынбаҫар, һин – минең урынбаҫар. Бүлешер нәмә юҡ. Маҡсат асыҡ – дошманды еңеү.

Шундай уй-хыялдар менән Ҡәнзәфәр Боҙаяҙына йүнәлде. Пугачев алыҫ, Зарубин зинданда. Кәңәшләшер, ярҙам һорар кеше юҡ. Үҙең уйла, үҙең хәл ит. Ҡулыңдан килеүенә шикләнәһең икән, тотонма. Тотонғанһың икән, ҡуйған маҡсатыңа ирешергә тырыш. Йә батыр булып ҡал, йә хәшәрәт ҡурҡаҡ йәнгә әйлән.

Ибраш, Ҡаранай үҙ урынында, хәҙер ең һыҙғанып, халыҡ йыйырға тотонорға кәрәк. Аҙыҡ-түлек туплау – мөһим эш, хатта иң ҡатмарлы мәсьәләлер. Сөнки яҙ. Сөнки әҙәм балалары бар булғанын ашап бөткән. Шуныһы еңелгә тура киләсәк: алда йәй. Йылы эҙләп ауылдарға инеп тораһы түгел, һәр ҡыуаҡ, һәр ағас төбө урындыҡ.

Ун өсөнсө апрелдә Ҡәнзәфәргә Фреймандың Стәрлетамаҡ пристаненә китеп барыуы хаҡында мәғлүм булды. Унда Ырымбур өсөн аҙыҡ-түлек, фураж әҙерләйәсәк икән. Шунан тороп Өфө провинцияһы волостарына башҡорт, мишәрҙәрҙән торған биш йөҙ кешелек отряд ойошторорға әмер ебәргән. Тик провинция генералға ни бары ике йөҙ генә кеше йыйырға форсат таба. Башҡорттарҙан хатта берәүҙе лә йәлеп итә алмайҙар...

«Ҡыҙыҡлы хәбәрҙәр, бик ҡыҙыҡлы, – тип ишекле-түрле йөрөндө Ҡәнзәфәр. – Был осраҡта генералдың үтә йәшерен бойороҡтарынан файҙаланып булмаймы икән? Аҙыҡты, фуражды иһә әлегә туплай бирһен. Уны күҙ уңынан ебәрмәҫкә кәрәк, файҙаһы тейеп ҡуйыуы ихтимал. Ә яугирҙар? Йәл, өс йөҙҙө йыя алмағандар. Бәлки, ул команданы үҙ яғыма ауҙарып булыр ине. Ә шулай ҙа әмерҙең үтәлмәй ҡалыуы насар түгел».

Командаһында ике йөҙ кеше булған Ҡәнзәфәр, регуляр ғәскәрҙәр менән бәрелешеүҙән, оло юлдан ситләшеп, Димдең урта тәңгәлендә йөрөнө. Ә инде апрель урталарының бер кисендә, ун биш һыбайлы оҙатыуында, Боҙаяҙға килеп, Ишмөхәммәттең ишеген шаҡыны.

Болдорға сыҡҡан хужа, түбәндә баҫып тороусының кемлеген танығас, саҡ ҡолап төшмәне.

– Ҡәнзәфәр хәҙрәт?! Ниндәй елдәр...

– Апрелдә ни яҙғы елдәр исә торғандыр. – Өй хужаһына ҡарай атлап, терәлерҙәй булып баҫты. – Ҡайным менән икегеҙ, тиҙ рәүештә, биш йөҙ кеше йыйып бирегеҙ. Фрейман бойорҙо.

– Ә һин ҡайһы яҡта? Әллә үҙебеҙгә ҡайттыңмы?

– Әйткәнемде, эшлә. Биш йөҙ кеше! Аңлашылмаһа, кереп ят. – Ҡәнзәфәр, ҡапҡанан сығып, теҙгенен бер һыбайлы тотоп торған атҡа һикереп менде лә, төркөм тояҡ тауыштары ғына ҡалдырып, юҡ та булды.

Хәлһеҙләнеүҙән Ишмөхәммәтең тубығы бөгөлдө. Болдорона ултырҙы. Әллә оҙаҡлауынан шикләнепме, ҡатыны сыҡты.

– Кемдер килдеме, атаһы? – тип иренә эйелде.

– Килделәр, киттеләр. Атларлығым юҡ, тиҙ генә Мөҡсинде саҡыр. Мөһим хәбәрем бар.

– Әллә иртәгәме...

– Йүгер, тиҙәр! Муйыныңа элмәк һалһалар, иртәгә булыр.

Мөҡсин, эштең хәтәр икәнен аңлағандыр, күрәһең, тиҙ үк килеп етте. Ишмөхәммәт эргәһенә ултырып, һулышын тынысландырҙы. Ҡот осҡос хәбәр ишетеүенән ҡурҡҡандай, һорау бирергә ашыҡманы. Танауын йыш-йыш тартып, аҙбар-ҡура тирәһенә күҙ һалды. Еүеш һауанан башҡа ят еҫ тойолманы, шулай уҡ шырт иткән тауыш та юҡ ине.

– Кейәүең пәйҙә булды.

– Ҡасан? Әле ҡайҙа?

– Ҡайҙалығын үҙенән һора. Кем-кем, ә ҡайныһы белергә тейеш.

– Ағыуыңды сәсмә. Һинекеләр ҙә әллә кем түгел.

– Юл баҫҡандары юҡ, Аллаға шөкөр, Әбей батшаға хыянат итмәйҙәр. Үкенес, сауҙа итеүҙәре туҡтабыраҡ тора, зыян күрәләр. Ә һинең башкиҫәрең биш йөҙ кешене йыйып биреүҙе талап итә. Янирал Фрейман бойорҙо, ти.

– Әмерен үтә. Юҡһа язалар.

– Үтә. – Ишмөхәммәт көләмһерәне. – Икебеҙгә үтәргә ҡушты. Фрейман әмерен һиңә еткерергә бойорҙо, бик беләһең килһә.

– Эй, шул Солтанморат диуана! Михельсонға эләккән юлбаҫарҙы ҡотҡарҙы бит.

– Кейәүеңә үлем теләмә. Ейәндәрең бар.

– Көлмә, Ишмөхәммәт. Рәсәй күләмендәге башкиҫәр, берәҙәк Пугачевтың уң ҡулы булып йөрөгән ҡасаҡ нимә эшләп кейәү булһын?! Ундай әҙәм аҡтығына ҡәберең яҡын булмаһын, Аллам.

– Мулла сағында ҡалай һәйбәт ине. Ялған батша еңә ҡалһа, яҡлаусың, ҡотҡарып алып ҡалыусың да буласаҡ ине.

– Юҡ менән баш ватмайыҡ. Ҡасан киләм тине?

– Шуны әйтә буламы? Ул бит фетнәселәр араһында дан ҡаҙанған юлбашсы.

– Ашығыс рәүештә губернаторға яҙып, сапҡын ебәрәйек. Шундай-шундай хәл килеп тыуҙы, тиәйек. Ә үҙебеҙ ул бандит артынан күҙәтеү ойошторайыҡ. Балаларын күрергә лә ҡайтып сығыуы ихтимал. Шап ҡапҡанға! Миҙал бирмәһәләр ҙә, аҡса тамыҙырҙар, рәхмәт һүҙе ишеттерерҙәр. Замана ҡатмарлы, Ишмөхәммәт, йә – беҙ, йә – фетнәселәр. Хәҙер үк писарь Юнысты саҡыртып, грамоталы итеп Рейнсдорпҡа рапорт яҙҙырайыҡ. Хәл итһен, кәңәш бирһен...

Дар ағасынан саҡ ҡотолған губернатор әлеге рапортҡа битараф ҡала алманы, әлбиттә, тиҙ үк Өфө провинция канцелярияһына ордер ебәрҙе. «Ҡәнзәфәрҙең ике йөҙҙән торған командаһы менән яуызлыҡтар ҡылып йөрөүе хаҡында хәбәр килеп етте. Тоғро старшиналар тарафынан Ҡәнзәфәрҙе ҡулға алырға һәм көслө һаҡ аҫтында тоторға бойорам. Был хаҡта, һис киҫекмәҫтән, миңә хәбәр итегеҙ», – тиелә документта.

Ырымбур губернаторы, генерал-поручик Иван Рейнсдорп Ҡәнзәфәр исеменә киң һәм етди ҡарай. Дүрт ай буйы ҡамауҙа тотолған, яңыраҡ ҡына бәхетһеҙлектән ҡотҡарылған ҡаланың, шулай уҡ фетнәселәр ҡулында булған бөтә Башҡортостандың яңынан ҡот осҡос хәлгә әйләнеп ҡайтыуы бар бит. Пугачев иҫән, Кинйә иҫән, Салауат иҫән, Ҡәнзәфәр иҫән... Пермь провинцияһын шаулатҡан Ҡәнзәфәр иҫән генә түгел, ул Өфө тирәһендә. Яңы команда йыйған. Етмәһә, Әбей батша генералы исеменән үҙенә халыҡ туплурға бойора. Ҡара һин уны, ниндәй хәйләкәр, мәкерле, уҫал ниәтле... Яңылыш юлға баҫмаһа, белемле, уҡымышлы ундай кешене дәүләт хеҙмәтендә файҙаланырға мөмкин булыр ине. Кинйәһен, Салауатын әйт. Үҙ ҡәҙерҙәрен үҙҙәре белмәй. Төрлө-төрлө яуыз ҡотҡоларға бирелеп үҙҙәрен харап итәләр... Әле иһә һабаҡтары ҡырҡылған башҡорттарҙың, татарҙарҙың, башҡа әтрәгәләмдәрҙең тамырҙарын ҡороторға, яңы үҫентеләренә баш төртөргә ирек бирмәҫкә кәрәк. Ҡәнзәфәр кеүегерәктәре, өлгөргән имән шикелле, орлоҡ ҡоя, орлоҡ сәсә. Ундайҙары айырата ҡурҡыныс...

Мөҡсин менән Ишмөхәммәтте Өфөгә саҡыртып, губернаторҙың ордерын ҡулдарына тотторҙолар.

– Ҡәнзәфәрҙе, һис кисекмәҫтән, ҡул-аяҡтарына бығау, муйынына ҡалып һалып, бына ошонда килтерегеҙ! – тип аҡырҙы ниндәйҙер чиновник. – Губернатор әмеренә башығыҙ менән яуап бирәсәкһегеҙ. Эҙләгеҙ! Табығыҙ! Усаевтан башҡа бында эҙегеҙ булмаһын!

Тоғро хеҙмәт иткән Мөҡсин менән Ишмөхәммәт, быңдай тупаҫлыҡтан, янауҙан хатта ҡаушап, ниндәй яуап бирергә лә белмәй аптырап ҡалдылар.

Мөҡсин Өфөлә алған бойороҡто шымсыларына еткерҙе.

– Ике көн ваҡыт. Ҡайҙалығын белмәһәгеҙ, һыртығыҙҙы, ыштанығыҙҙы һалдырып, арт яғығыҙҙы үҙем ярасаҡмын, әрәм тамаҡтар. Ҡәнзәфәр энә түгел, уны танымаған, белмәгән бәндә әҙ. Күп һөйләргә, һүҙемде елгә осорорға яратмағанымды яҡшы беләһегеҙ.

– Уны Өршәктең юғары тәңгәлендә күргәндәр.

– Өршәк буйындағы Ибраһим ауылында ла булған, имеш...

– Имеш. Беҙгә имеш кәрәкмәй, Усаев кәрәк!

Ҡәнзәфәр төн уртаһында өйөнә ҡайтты. Тәҙрәгә сиртте. Ҡатынының шәүләһен күргәс, ҡулын һелкте. Инеп сисенгәс, Сүриәнең арҡаһынан һөйҙө, бер ни белмәй йоҡлап ятҡан малайҙарының өҫтөн рәтләп япты.

– Ут ҡабыҙма.

– Тағын китәһеңме? Бәлки, ҡайтырһың тип, ашты күберәк бешергәйнем. Йылытайыммы?

– Шул килештә ярар, һыуынмағандыр.

Ҡәнзәфәр артыҡ ныҡ арығайны, ашап ултырғанда башы эйелеп-эйелеп китә, ҡашығын төшөрҙө. Шунда уҡ һиҫкәнеп, күҙҙәрен асты. Еңенән тартып ҡатынын эргәһенә ултыртты, ҡосағына алды. Утыҙ алты йәштә. Балалар үҫтереп, донъяны гөрләтеп йәшәр сағы.

Сүриә иренә һыйынды. Уның йылыһын тойоп, уның ҡәҙерен күреп, уны хөрмәтләп, кинәнеп көн итәһе урынға – утта яна. Урамға сығырға, кеше күҙенә күренергә тартына. Март аҙағында Өфө эргәһенән ике мәйетте алып ҡайтып ерләгәс,

шуларҙың етем ҡалған ҡатындары, балалары алдында үҙен ғәйепле иҫәпләне. Үҙенең ире лә шул яуҙа булған бит. Ырымбурҙан ҡайтҡанда өйҙә ҡунһа, шундағы ҙур һуғышҡа барып өлгөрмәҫ ине.

– Аҙ ғына серем итеп алам. Таң һарыһынан китәм. Тора алмаһам, уят. Эшем ашығыс.

– Нимә әйтергә лә белмәйем. Башым шаулай. Һаҡ йөрө. Ишмөхәммәт ағайҙарға һине тотоп, Өфөгә илтеп тапшырырға ҡушылған.

Ҡәнзәфәр кемдән ишетеүен һораманы, сөнки ҡайһы бер хәбәрҙе Сүриәгә әсәһе еткереүен һиҙенә. Хәйер, был хаҡта үҙе лә тойоп йәшәй. Әллә ҡайҙа алыҫҡа китәһе юҡ, Торнов менән булған фажиғәне оноторға ярамай.

Ҡояш сығышы яғында тәҙрәнән өй эсенә һиҙелерлек булып яҡтылыҡ төшә башланы. Сүриә, иренең йөҙөн күреү өсөн шул нурҙы көтөп, төн йоҡламай ултырҙы. Бына-бына ҡапҡаны асып инерҙәр, ишекте дөбөрләтерҙәр, тип шомланды. Таң яҡтыһына ҡыуанһа, көн тыуыуын тотҡарлар көс булһа икән, тип йөрәге болоҡһоно. Ҡәнзәфәренә ҡурҡыныс төштәр инә шикелле: ҡаштары төйөрөлгән, ирендәре ҡыҫып ябылған. Маңлайындағы өс һыҙығы тәрәнәйә төшкән. Ауыҙы ситенә ҡунған йыйырсығы, бите буйлап, юғарыраҡ үрмәләгән. Сәсенә артыҡ оҙонайырға ирек бирмәй, ҡырҙырып тора. «Ҡояшым, сығырға ашыҡмай тор. Ирем сикһеҙ арыған, үҙен туйғансы йоҡлат...» Сүриә усын Ҡәнзәфәрҙең беләгенә һалды. Тик һелкетергә ашыҡманы. Аҙ ғына, саҡ ҡына булһа ла өйөндә, ғаиләһе эргәһендә торһон...

Ҡәнзәфәр һиҫкәнеп күҙҙәрен асты ла ашығып тороп ултырҙы. Аптырап ҡаранды. Тик Сүриәһен күргәс, тултырып йылмайҙы. Ҡатынының ҡулдарын ҡулына алды.

– Рәхәт. – Шулай тине лә тороп баҫты. – Ниңә уятманың? Һуңланым.

– Ҡайҙа ашығаһың һуң шул тиклем? Кемдәр көтә?

– Кешеләр, Сүриә, халыҡ көтә.

– Сәй ҡайнаны. Атыңды эсерҙем.

– Төрөп икмәк кенә бир. Юлда ҡапҡылармын. – Сүмес тултырып һыу эсте лә бишмәтен кейеп, билен быуҙы.

– Ут эсендә йәшәйем бит. Күңелем тынғыһыҙ. Һағыраҡ йөрөргә тырыш. Тағын ҡасан ҡайтаһың?

Ҡәнзәфәр яуап урынына ҡатынының яурынынан һөйҙө лә ишекте асты.

***

Ул Сахай ауылына, әгәр Ағиҙел аша сығып арғы яғына һыу артыҡ йәйелмәгән булһа, Инйылға, Яңғыҙҡайын, Ҡотлоғужа ауылдарына уҡ барып етергә кәрәкләгән уйына һалғайны. Әгәр иҫән-һау икән, Юрматы волосы старшинаһы Ҡотлоғужа Сәфәрғоловты ла осратып һөйләшеү яҙыҡ булмаҫ. Зарубин шул төбәктә ҡулға алынғандан һуң, халыҡ күңел төшөнкөлөгәнә, өмөтһөҙлөккә бирелә, ышанысын юғалта күрмәһен. Бер тапҡыр туҡмалған әҙәм балаһын ҡабат яуға күтәреү – өсләтә, бишләтә ауырыраҡ.

Ҡәнзәфәрҙең уй-иманы әлегә шул ине: үҙ төбәгендә булдыра алған тиклем яугир йыйырға ла артабан Баҡалы, Бәләбәй тарафтарына, Ыҡ йылғаһы буйына йүнәлергә!

Сахай урамына барып ингәс тә Ҡәнзәфәрҙең күңеле буйлап шом йүгереп үтте. Һәр ихатала тигәндәй эйәрле ат күҙенә салынды. Шуныһы ғәжәп: урамда йөрөүсе юҡ. Тимәк, бында ситтәр. Әгәр өйҙәренә инеп кенә йәшенгән булмаһалар, регуляр ғәскәр һалдаттары килеүе тойолмай.

Ҡәнзәфәр туҡталып тормаҫҡа булды, ауылды сығып, бер ни тиклем араны

үтеп, Ағиҙелгә күҙ һалырға ла, әгәр ул артыҡ ныҡ йәйелгән булһа, аша сығырға яйы табылмаһа, уның һул ярынан юғарыға, Ҡыйышҡы ауылына ҡарай юлланыр. Унан һуң, бәлки, Талбазыға уҡ барып етер...

Сахайҙы сығып саҡрым да үтмәне, артта ат тояғы тауыштары ишетелде. Ҡурҡыныс янауын тойһа ла, Ҡәнзәфәр артына әйләнеп ҡараманы. Итек үксәләре менән тибеп, атын шәбәйтте. Тороп сабырға ла мөмкин, тик арҡаңа пуля алыуың бар йә уҡтар килеп ҡаҙалыуы ихтимал. «Кемдәр килә? Ниндәй маҡсат менән? Ҡулға алһалар, ҡайҙа алып барасаҡтар?..»

– Туҡта, бур! Туҡта, башкиҫәр!

Ҡәнзәфәр атын артҡа ҡаратып борҙо. Дүрт һыбайлы килә ята. Яҡ-яҡтан туҡтанылар.

– Тыңлайым. – Ҡәнзәфәр тыныс. Тик йөҙө уҫал ине.

– Беҙ старшина Ҡунаҡҡол Атйетәров кешеләре, – тине өлкәнерәге, ниңәлер ҡамсыһын туҡтауһыҙ һелтәп.

– Үҙе ҡайҙа?

– Ауылда. Килтерергә ҡушты сит кешене.

– Мине таныйһығыҙмы?

– Ҡәнзәфәр...

Ҡалған өсөһө бер юлы тегеңә аҡырҙы:

– Наҙан! Беҙ кемлегеңде ҡайҙан беләйек. Йә берәй шымсыһыңдыр. Донъя тулы әтрәгәләм.

– Ҡунаҡҡолдың миңә әмер бирергә хаҡы юҡ. Мин Ишмөхәммәт Сөләймәновты йә Мөксин Әбдесәләмәтовты ғына таныйым. – Ҡәнзәфәр тегеләргә һынаулы ҡарап торҙо.

– Мөҡсине күренмәне. Ишмөхәммәт Сахайҙа.

Шул саҡ тағын биш һыбайлы килеп етте. Береһе Ишмөхәммәт ине.

– Килеп ҡаптыңмы, аҫыл ҡош! – тип бар көсөнә ҡысҡырҙы ул, тауышын Өфөгә үк ишеттерергә теләгәндәй.

Халҡы алдында енәйәт эшләп, халҡын талап йәшәгән бәндәгә ерәнеп ҡарап торҙо Ҡәнзәфәр. Өндәшмәне. Тел әрәм итеп һүҙ көрәштереүҙе түбәнселек булыр тип һананы.

Кемдеңдер өйөнә алып инделәр. Еүеш, тынсыу ине. Тәҙрәләр бәләкәйлектән, эскә яҡтылыҡ та йүнле-рәтле инмәй.

– Сығарып бәрегеҙ! – тип ҡысҡырҙы Ишмөхәммәт инеү менән, ишек төбөндә бәйләнгән яңыраҡ ҡына тыуған быҙауға күрһәтеп. – Тышта туңырлыҡ түгел.

– Ҡайҙа быҒауҙар? Ҡалып? Йүгертегеҙ! Был әҙәм ябай кеше түгел. Шамбы. Төлкө. Теленән бал тама. Юғалыуын һиҙмәй ҙә ҡалырһығыҙ. – Ишмөхәммәт урындыҡҡа ултырҙы.

Ҡәнзәфәрҙең аяҡтарына, ҡулдарына бығау һалғас, ҡалып килтерҙеләр. Сөләймәнов ҡамсыһын күтәрҙе.

– Әйтер һүҙе барҙыр, бәлки.

Ҡәнзәфәр өндәшмәне. Бығауҙың ауырлығын самаларға теләгәндәй, ҡулын ҡуҙғатты.

– Отряд йыйырға Фрейман ҡушҡан, ә... – Ишмөхәммәт кеткелдәп көлгән булды. Тик йөҙө таш кеүек ине. – Бәлки, Әбей батшаның үҙенән әмер көтәһеңдер, ә? Бәлки, ул, миңә ҡаршы һуғышһын өсөн Усаевҡа армия йыйып бирегеҙ, күп һанлы пушкалар менән тәьмин итегеҙ, тип губернаторға бойорор, ә?

– Нимә әйтмәксе булаһың, ҡара йылан? Халыҡ һиңә күптән бәддоға ҡылған бит, – тип теш араһынан ғына һөйләнде Ҡәнзәфәр. – Үҙеңде ер йотмауына аптырайым.

– Кемде алданыраҡ ер йоторон бөгөн, иртәгә белербеҙ. Ҡатыныңа рәхмәтлебеҙ, Сахайға китеүеңде атаһына ул әйткән.

Әлеге һүҙҙәрҙән һуң Ҡәнзәфәрҙең йөрәге ярһыны. Ул, өлгөрә алмай ҡалыуынан ҡурҡҡандай, Ишмөхәмәтккә тартыла биреп, тегенең битенә төкөрҙө.

– Алдашма, ҡәбәхәт! Бөтә кешене лә үҙеңә тиңләмә, һатлыҡ йән! – Ҡулдары бығауҙа булмаһа, Ҡәнзәфәр Ишмөхәммәттең боғаҙынан алыр ине, аяҡтарын ҡуҙғата алһа, тапар ине. Ҡот осҡос алдашыу. Уның Сүриәһе, хатта иренең ҡайҙа юлланғанын белһә лә, кемгәлер әйтер инеме?!. Ошонда ла бәдбәхет йән, ришүәтсе, кешеләрҙең ҡулынан һуңғы һынығын тартып алыусы старшина аламаһы ара бутарға аҙаплана. Ир кеше өсөн бынан да түбәнгәрәк тәгәрләү буламы?!

– Ҡалып! – Ишмөхәммәт еңе менән битен һөрттө. – Яҡшылыҡты аңлай торған бәндә түгел был. Үлемдән алып ҡалған Солтанморатҡа рәхмәтең ошомо, алйот мулла?

Ҡәнзәфәрҙе санаға ултырттылар. Хатта шунан алда Ишмөхәммәт сана төбөнә һалынған һаламды алып ташларға бойорҙо: «Арт яғы туңһын. Аңларға арыу булыр». Ләкин санаға егелгән атты тотоп барасаҡ башҡорт егете быны эшләмәне. Алдан да, арттан да һыбайлылар оҙатыуында сана алға ҡуҙғалды.

Арыраҡ киткәс, ат тотоп барыусы егет әкрен генә һөйләй башланы. Үҙе Төрөмбәт ауылынан икән. Һуңғы көндәрҙә Мөҡсин менән Ишмөхәммәт команда йыя башлаған. Таралған фетнәселәрҙең ҡабаттан тупланыуынан шөрләйҙәр икән. Бигерәк тә, Ҡәнзәфәр тигән атаман пәйҙә булды, тигән хәбәр ишетелгәс, зыҡ ҡупҡан. Яҡын-тирә ауылдарҙың бөтәһенә лә ҡарауыл ҡуйылған, хатта бөтә юлдарға ла. Шулай булғас, ул батыр әҙәм барыбер эләгер ине. Отряд йыя икән, Усаев халыҡты яуға яңынан күтәрәсәк, Өфөнө аласаҡ, тип шыпырт ҡына һөйләшәләр икән...

Күп урында сананы ҡара ерҙән һөйрәтеү арҡаһында, әкрен барылды. Ҙур күлдәй йыйылған ҡар һыуҙарын урап үтергә лә тура килгеләне.

– Үҙең кем яҡлы һуң? – тип әкрен генә һорап ҡуйҙы Ҡәнзәфәр, эйәреп килеүселәргә ишеттермәҫкә тырышып.

– Һин үҙең кем һуң?

Ҡәнзәфәр башы менән егеткә эйелергә ымланы.

– Мин һин һөйләп барған кеше.

– Һиҙенгәйнем шул. Башҡа берәү булһа, был тиклем ығы-зығы, шау-шыу ҡуптармаҫтар ине. Минме ни кем яҡлы? Белмәйем.

– Күңелең һәйбәт икәнлеген тоям, егет, һин миңә ҡарата асыулы, уҫал булып ҡылан. Бәлки, миңә берәй нисек ярҙам итерһең.

– Быларҙан ҡотолороң, бар? Арала Өфөнән килгән урыҫ һалдаттары ла бар. Башҡорт, татар булып кейенгәндәр.

– Тура Өфөгә барасаҡһығыҙмы?

– Кискә ҡалынһа, берәй ауылда ҡуныуыбыҙ ихтимал. Ағиҙелде сығаһы ла бар бит. Ул ғына ла түгел, Ишмөхәммәт Чесноковка ауылы тирәһенән шөрәләй шикелле. Шунда Ҡәнзәфәрҙең кешеләре йөрөүе хаҡында һөйләнә...

Ысынлап та, Алмантай ауылына еткәс, Ишмөхәммәт:

– Өфөгә ҡырҡ саҡрым ара ята. Аттарҙы ял иттерербеҙ ҙә таң һарыһынан ҡуҙғалырбыҙ, – тип ҡарарын белдерҙе. – Ә был бәндә өсөн башығыҙ менән яуап бирәсәкһегеҙ. Уны воевода, губернатор көтә.

Таныш ҡапҡа төбөнә килеп туҡтағас, бер һыуға ике тапҡыр кереү ҡаралмаған, тиһәләр ҙә, донъяла әҙәм балаһы ышанмаҫлыҡ хәл-күренештәрҙең булғылап тороуына бик үк аптырарға ла ярамай, тип бер саҡ абыҙы Батыршаның һөйләп торғаны Ҡәнзәфәрҙең иҫенә келт итеп төштө.

Эйе, был староста сыуаш Симонкин Шушпан өйө ине. Ул ҡапҡаһын шар асты ла күрешеү өсөн Ишмөхәммәткә ике ҡулын һуҙҙы, тик старшина, ерәнгәндәй, йөҙөн һытты, ситкә боролдо.

– Санала дәүләт енәйәтсеһе. Аңланыңмы, батшабыҙға баш, ҡул күтәргән енәйәтсе! Уны һинең өйөңә индерәбеҙ. Һин – дәүләт кешеһе. Һиңә ышанабыҙ. Һин - дә кем ҡунғанын ауылдағы эт тә белергә тейеш түгел. Өйөңдә үҙеңдән башҡа бер кем дә ҡалмаһын. Ишеттеңме? Аңланыңмы кемде ышанып индергәнде?

– Ундай яуыздарға баструк та аҙ. Аңламай ни, минең кемлегемде күптән беләһең, Сөләймәнов.

– Беләһең. Фетнәселәр араһында ауылығыҙҙан нисә сыуаш барлығын беләинеңме?

– Был заманда кемдең ҡайҙа йөрөгәнен эт тә белмәç. Старшина урмансы Миңнебай малайына яңылыш эйәргәндәр булған шикелле.

– Тиле-миле булып ҡыланма, Шушпан.

Ҡәнзәфәр урынынан ҡуҙғала башлағайны, эргәһендә ат тотоп килгән егет йүгереп килде лә яурынынан тартты:

– Ултыр берегеп! Рөхсәтһеҙ ҡыймылдама ла.

– Дөрөç, ҡусты. Был өйҙә һин ҡун, һаҡлашырға ярҙам ит.

– Аңланым, старшина ағай, шыбырлап ҡына ҡараһын. – Ҡулын күтәрҙе. – Берәгәйле итеп берҙе тондорормон.

Әмер бирелгәс, Ҡәнзәфәр саҡ һөйрәлеп өйгә инеп, ишек төбөндәге мөйөшкә ултырҙы. Туҡтауһыҙ инеп-сығып йөрөгәнлектән, өй һыуынғайны. Иҙәне боҙҙай һалҡын. Былары – бер хәл, ҡалып муйынды быуа. Боролоу түгел, башты ҡыймылдатырлыҡ та түгел.

«Төн. Бөгөнгө төн яҙмышты хәл итәсәк. Өфөгә барып юлыҡтың иһә – бөттөң. Дар ағасы. Солтанморат килеп сыҡһа: «Хурлыҡҡа ҡалдырҙың»,– тип үҙ ҡулдары менән аçасаҡ».

Ҡәнзәфәр төрлөсә баш ватып, өй түрендә яңғыҙы ғына оҙаҡ ултырҙы. Урамда шаулаштылар, тик һүҙҙәренән нимәлер аңларлыҡ түгел ине. Аты кешнәне. Тауышынан таныны. Эйе, уның аты ла әсир. Бәлки, хужаһының быңдалығын белә, аңлай торғандыр?!

Урамда яҡты булһа ла, өй эсе ярым ҡараңғы . Ишектән ике рус, хужа кеше, санала ат тотоп килгән егет инде.

– Тышҡа сығырға ине? – тип өндәште Ҡәнзәфәр күҙҙәрен йомған килеш.

– Юҡ, юҡ, ярамай, старшина ҡушмай, – тип теге егет ишек төбөнә килеп баçты.

– Ә һин кем?– тип урындыҡтан торҙо рустарҙың береһе. – Старшинаң Өфөгә һыпыртмағайы. Сыуаш өйөндә ҡандаланан таланыуынан шөрләй аҡ һөйәк. Беҙгә ҡашынһаҡ та ярай, имеш. Йоҡламаçҡа арыу булыр, йәнәһе. Туҡтағыҙ әле, был, бахыр, беҙгә ҡаршы ниндәй енәйәт эшләгән, ә? Ҡалыпты һалдырырға, ҡулындағы бығауҙы ысҡындырырға кәрәк. Бар, ағай, алып сығып ин Сөләймәнов дошманын. Ә һин, егет, күҙ-ҡолаҡ бул. – Бығау асҡысын Шушпандан алды ла тәҙрә төбөнә ташланы. – Йә төндә кеçәнән төшөр.

Аҙбарға яҡынлашҡас, Шушпан яҡ-яҡҡа күҙ ташланы ла:

– Нимә эшләп гел ҡулға алалар үҙеңде? – тип һораны әкрен генә. – Был юлы бик яман кешегә эләккәнһең.

– Ярҙам ит, Симонкин?

– Белмәй-белмәй, аптырағанский. Быларҙы һыйларға тура килер. Анауы башҡорт егете яуызға оҡшаған.

– Оҡшаған ғына, һәйбәт булырға тейеш. Арлы-бирле ысҡына ҡалһам, анауы

сана башына бәйләп ҡуйылған бүртә атты эләктереп кенә ҡуйырға тырыш әле? Минеке ул. Көмөшкәң бармы?

– Араҡыһы ла табылыр ҙа ул. Ғүмер ике килмәй, мать яғаһына, тиергә ҡала.

– Үтенеп һорайым, балаларым хаҡына, Шушпан дуҫ.

– Арыу ғына кешегә оҡшағанһың, тәүҙә шул Ишмөхәммәт кеүектәрҙе дөмөктөрөргә тырышырға ине. Әйҙә, инәйек, оҙаҡ торһаҡ, йә шикләнә башларҙар...

Өйгә инеү менән, Ҡәнзәфәр стенаға һөйәлеп, элекке урынына ултырҙы. Күп тә үтмәне, башҡорт йоҡлап китте.

– Ныҡлап аңламаным, кем һуң был әҙәм? – тип һорап ҡуйҙы һаҡсыларҙың береһе.

– Ауылдаштар шикелле. Тегеһе быға үпкәләгән. Юҡ-бар яла яғып үс алмаҡсы була. Шулай аңланым. Бәлки, ысынлап та ҙур енәйәтселер. Башҡорттар, татарҙар береһен-береһе һатырға ярата бит.

– Төкөрәйек тә, тығылмайыҡ. Әйҙә, үҙ-ара һуғыша бирһендәр. Беҙгә бынан эҫе лә, һалҡын да түгел. Эй, хужа?

– Бындамын, – тип Шушпан мейес яғынан былар эргәһенә килде.

– Бында булғас, бик яҡшы. Эсер нәмә табырға буламы? Түләрбеҙ.

– Тырышып ҡарарбыҙ. Ҡабырға сало ғына.

– Икмәк бар беҙҙә. Был әҙәмгә лә бир.

– Ул мосолман.

– Икмәк бир.

Шушпан өндәшмәй генә сығып китте. Байтаҡ ваҡыт үткәс кенә әйләнеп керҙе. Сәкмән сабыуы аҫтынан сирек сығарып, урындыҡҡа ултыртты.

– Урам ниндәй хәлдә? – тип һорап ҡуйҙы һалдаттарҙың береһе, өй хужаһына ҡарап та тормайынса.

– Йөрөйҙәр. Шаулайҙар.

– Сығарығыҙ әле, – тип уянған кеше булды Ҡәнзәфәр. – Эсем бора.

– Һин, тотҡон, беҙҙе бимазалама, бәпес түгелһең. Сыҡ та кер. Ана теге егет, – мейес эргәһендә ултырыусыға ымланы, – эйәрер. Төшөндөңмө? Атлаған һайын беҙҙе бимазалама.

– Быңау ауырттыра.

– Ҡулдарына һалмағыҙ. Ҡалыбың алынған. Еткән. Аяҡтарыңдағы торасаҡ.

Ҡәнзәфәр аяҡтарын саҡ ҡыймылдатып ишектән сыҡты. Апрель урталары еткәнлектән, төн бик үк ҡараңғыланмағайны әле. Ул сана башына бәйләнгән атын да шәйләне.

– Егет, исемеңде әйт, былай ярамай ҙа инде.

– Йәнбәк. Мәркәт-Мин волосы. Әллә ҡайҙа барма яфаланып, этем бармы, этем күрәме.

– Йомошом юҡ, Йәнбәк туған, хәйлә генә. Һин бында ҡалма, былар иҫереп йоҡлағас, таң яғына ҡарай шылайыҡ.

Ишек асылды. Юҡҡа шомландылар, өйҙән хужа сыҡты. Ул да былар эргәһенә килде.

– Һин, Ҡәнзәфәр, иҫән сағыңда ҡас.

– Ә һин?

– Берәй хәйлә уйлап табырмын әле. Әгәр китә ҡалһаң, урам буйлап түгел – күрерҙәр, миңә ҡыйғас ҡына ҡаршы яҡта тыҡырыҡ бар. Артҡа сығырһың, унда ҡорораҡ. Яйлы булыр ҡасырға.

– Улайһа, былай ит: мин өйгә ингәс, берәй туғаныңа йоҡларға китергә рөхсәт һора тегеләрҙән. Һеҙгә иркенерәк булыр, тип әйт. Ысынлап та берәйһенә барып йоҡла. Ишмөхәммәттекеләрҙең кемеһелер күрһен. Минең арҡала язаға тарттырыла күрмә, тим.

– Килештек, – тине Шушпан һәм өсәүләшеп өйгә инделәр.

Ике һалдат урындыкта ҡырын ятып сиректе кәметәләр ине.

– Эс, нисек эс? Әллә мул ғына тоҙ һалып, берәй туҫтаҡ ебәрәһеңме? Ауыртыныуҙы йыуып алғандай итә. Үҙем һынағаным бар. Әллә ышанмайһың?

– Миңә ярамай. Рәхмәт.

– Мосолмандар эсмәй, – тип һүҙгә ҡыҫылды Шушпан.

– Ҡайғырмағыҙ, өйрәнерҙәр әле. Мәжбүрләмәйбеҙ.

– Мөмкин булһа, хөрмәтле һалдаттар, мин апайыма барып йоҡлар инем. Һеҙгә иркенерәк булыр. Ултырығыҙ, һыйланығыҙ, күңел асығыҙ. Һалдат кешегә былдай ирек йыш эләкмәҫ, – тип һалдаттарға мөрәжәғәт итте өй хужаһы.

– Апайың ҡайҙа йәшәй?

– Өс өй аша ғына.

– Һин нисек ҡарайһың, Ваня?

– Беҙҙе урламаҫтар әле. Китәм, ти икән, китһен.

– Әгәр ҙә тотҡондо урлаһалар?

Икенсе һалдат, ҡысҡырып көлә-көлә, туҫтағын күтәрҙе.

– Башы ике кеше генә урлар. Бынауы юл өҙөгөндә ҡайҙа китһен? Әйҙә, сығып инәйек. Беҙҙә лә ҡорһаҡ бар бит әле. – Ике һалдатҡа Йәнбәк тә эйәрҙе. Йәнбәк кире керҙе.

– Аҙбарға ҡарай киттеләр, – тине лә Йәнбәк ҡабат сыҡты. Шушпан йәһәт кенә үрелеп тәҙрә төбөнән асҡысты алды ла Ҡәнзәфәргә һондо.

– Ҡулдарым ҡалтырай, үҙең асып ҡара.

Асты бығауҙы Ҡәнзәфәр. Өй хужаһы асҡысты тәҙрә төбөнә кире ҡуйҙы.

– Был тиклем ҡалтыранғаным юҡ ине, –тип һөйләнде ул, – йөрәк сығырҙай булып тибә.

– Быйылғы яҙ иртә килде.

– Иртә генә түгел, ҡояш яндырып бара. Ямғыр ҙа яуып ебәрһә – туфан, – тип һөйләнә-һөйләнә, ике һалдат ишектән керҙе. – Әйҙә, Ваня, һин нисектер, мин өшөнөм шикелле, тотайыҡ. Ә шулай ҙа йоҡлағанда ҡамасаулаһа ҡамасаулар, асҡыстарҙы кеҫәгә һалайым әле, йә онотоп кителер. – Сиреккә үрелде.

– Ярай, ҡунаҡтар, һеҙгә тыныс йоҡо. Булмаһа, мин апайымдарға барайым.

– Давай, давай, староста старик, һин дә төндө тыныс үткәр.

Шушпан, Ҡәнзәфәрҙең ботона аяғы менән генә ҡағылып, хушлашыуын аңлатты ла ишекте асты.

Һалдаттарҙың теле көрмәлә башлағас, Ҡәнзәфәр хырлап йоҡлаған булды.

– Эй, егет, һин уяуҙыр бит? – тип ҡысҡырҙы Ваняһы.

– Уяу, уяу, бөгөн йоҡо юҡ. – Йәнбәк ишекте тартып ҡуйҙы.

– Арлы-бирле булһа, беҙгә өндәшерһең. Беҙ серем итәбеҙ.

Ҡәнзәфәр иһә күҙҙәрен йомманы, таң яҡтылығын көттө. Был арала Йәнбәк сығып, аттарҙы барлап, ҡапҡаны яртылаш асыҡ ҡалдырып инде.

Тәҙрәгә һиҙелерлек кенә булып яҡтылыҡ ағылғас, Ҡәнзәфәр ҙур һаҡлыҡ менән генә сынйырҙарын ситкәрәк этте. Ҡараңғыла бәрелеп тауыш-маҙар һиҙелә күрмәһен. Ихатаға тәүҙә Ҡәнзәфәр сыҡты. Тирә-йүндә шырт иткән тауыш та юҡ. Аты эргәһенә килде. Теҙгенде ысҡындырҙы. Тегеһе, ирендәрен ҡалтыратып, таныуын белдерҙе. Хужаһының битенә үрелде. Йәнбәктең өйҙән нисек сыҡҡанын Ҡәнзәфәр хатта абайламай ҙа ҡалды. «Шыма егет»,– тип уйлап ҡуйҙы. Йәнбәк кистән күҙе төшкән атты етәкләне. Улар һыбай менмәне, ә урам аша сыҡҡансы, тыҡрыҡты буйлағансы мәхлүктәрҙе етәкләп барҙылар. Атланғас та атлаттылар ғына. Ә инде ауылдан алыҫлаша төшкәс, сабып киттеләр.

– Хәҙер ҡайҙа, ағай? – тип һораны Төрөмбәт егете, Ҡәнзәфәр яҡынлашҡас.

– Өфө, Стәрлетамаҡ араһындағы юлдан әлегә беҙгә йөрөргә ярамай. Келәш, Сыуалҡип тигән ауылдарҙы ишеткәнең юҡтыр-юҡлыҡҡа, шул тарафтарға, Димдең уң яғы үренә юлланырбыҙ...

Фетнәселәр өсөн март бурандары алып килгән еңелеүҙәрҙән һуң тынлыҡ оҙаҡҡа һуҙылманы, яҙғы ташҡындар халыҡта ҡабаттан көрәш хисе уята башланы. Кешеләр тағы ла кемдәрҙеңдер килеренә, уларҙы тағын отрядтарға, командаларға йыйырына шикләнмәй ине. Сөнки язалаусылар, улар алдында ярамһаҡланып йөрөүсе Мөҡсин, Ишмөхәммәт кеүек старшиналар ҡоторона, тиреләренән сыға башланы. Ябай халыҡты уларҙан кем ҡурсалар?

Офоҡта Ҡәнзәфәр, Ҡаранай, Ҡасҡын, Һеләүһен кеүек билдәле, танылған, ғәйрәтле баһадирҙар ҡабаттан ҡалҡып сыҡты. Тимәк, кешеләрҙең кемгә таяныры бар. Улар яҡлаусыларын юғалтмаған. Баһадирҙар үҙҙәре, ярҙамсылары ауылдарҙан ауылдарға, йәйләүҙәрҙән йәйләүҙәргә йөрөй, өндәмәләрен тарата, Яңы батшаның манифесын уҡып ишеттерә. Ләкин шымсылар ҙа йоҡлап ятмай, йәшенеп кенә халыҡ һулышына, һүҙенә ҡолаҡ һала, мәғлүмәттәр йыя һәм үҙҙәренең «тоғролоҡло» старшиналарына еткерә. Һаҡ ҡылананалар, әлбиттә, сөнки ундайҙар фашлана икән, күп һорап, күп һөйләшеп тормайҙар: хөкөм! Ана, Миндәй Тупиев тигән һатлыҡ йәндең шымсы итеп Яңы батшаға ҡаршы ҡотҡо таратырға ебәргән ҡустыһы – Хәмитте эләктереп алғандар ҙа Торновтың үҙенә һөйрәп илткәндәр. Закон ҡаты – шпионды туҡмап үлтергәндәр.

Башҡортостандың көнбайыш өлөшөндә, дөрөҫөрәге, Ағиҙелдең тотош һул яғында көрәш ялҡыны телдәре күренә башлағас, генералдар, батша сатраптары ғына түгел, Әбей батша үҙе лә шомлана башланы. Янғынды аҙағынаса һүндермәгәндәр – ҡуҙы ҡалған. Ҡуҙға ни өрөүселәр бар. Ҡуҙға һыу һипмәй, шуға ел ебәреүселәрҙең тамырын ҡоротмай тороп, Рәсәйҙә тыныслыҡ урынлашмаясаҡ...

«Тоғролоҡло» әҙәм балалары Өфөгә лә, Ырымбурға ла хәбәрҙәр яуҙыра. Тик уларҙың береһе генә лә шатлыҡлы түгел, һәммәһе йән өшөттөргөс. Баҫып йөрөгән ер яна.

Үҙе әйтмешләй, күпте күргән, күпте ишеткән илле алты йәшлек коммерсант Миндәй Тупиев та ситтә ҡалырға теләмәгән. Стәрлетамаҡ пристаненә тоҙ, Ырымбурға иген ташып, кеҫәһен ҡалынайтып йөрөгән. Дүртөйлө тарафындағы Өсбүлә ауылы татары юлына арҡыры төшкән фетнәселәр менән нимә эшләп килешеп йәшәргә тейеш? Уны хатта губернатор Рейнсдорп үҙе белә бит. Пугачевҡа ҡаршы көрәшеү өсөн башҡорт отряды йыйырға ҡушты. Улмы ни һуғышыр кеше, октябрь башында уҡ Өфөгә тайҙы, унда рәт сығырлыҡ булмағас, Бөгөлмәгә үк ысҡынды. Ә инде май ҡояшы ялтырауға, Мөҡсин, Ишмөхәммәт менән Өфө властарына, генерал Фрейман ярҙамына таянып, таныш ерҙәргә әйләнеп ҡайтты. Ҡайтыуҙан ниндәй файҙа: бында Ҡәнзәфәр, Ҡаранайҙарға ҡаршы һуғышырға кәрәк икән. Бына ҡайҙа мәсьәлә? Мылтыҡ, ҡылыс күтәрмәһәң, фетнәселәргә ҡаршы ҡулыңдан килгән өлөшөңдө индер. Был осраҡта Өфө провинция концелярияһына ошаҡ еткереү ҙә ярап торор. Башҡорттар араһында Нуғай юлында башланған сыуалыштарҙы баҫтырыу өсөн Өфө өйәҙенә регуляр ғәскәр командаларын ебәреүҙе һорарға кәрәк. Юҡһа, Өршәк-Мин волосы старшинаһы оятһыҙ Ибраһим Мерәҫов, Пугачев Магнит ҡәлғәһендә үҙенә һигеҙ мең кеше йыйған, әле лә шул эшен дауам итә икән, башҡорттар уға ағыла, ти. Һүҙебеҙҙе һөйләр өсөн халыҡ араһында йөрөргә ҡурҡабыҙ. Халыҡ, уҙған йылдағы шикелле хыянат итеп, беҙҙе һәләкәткә килтерә күрмәһен. Әле иһә кешеләр көнөн дә, төнөн дә йәйләүгә сыға. Разведка яһарға бер кем дә баҙнат итмәй.

Миндәй рапортын 1774 йылдың 18 майында ебәрһә, уяу Ибраһим Мерәҫов та ҡул ҡаушырып ултырмай. Өфөнө ҡамауҙа тотҡанда әүҙемлек күрһәтеп, Яңы батшанан полковник дәрәжәһе алһа, һуңынан ихтилалдан ситләшеп, апрель айынан башлап элекке көрәштәштәре өҫтөнән ошаҡ яҙырға тотонған. Бәлки, Фрейман кеүек генерал булыр. Ул, әлбиттә, юғары инстанцияларға мөрәжәғәт итергә шөрләне, әлегә Мөксингә еткереү ҙә ярап торор. Уның элемтәләре етерлек. Мәғлүмәтте иһә Дим буйында йәшәүсе бер башҡорттан ишеткән. Аҙашҡан алты йөҙ башҡортто йыйған Ҡаранай Ашҡаҙар пристанендә тора икән. Бөгөлмәгә китеп барғанда, Димгә яҡын ултырған Кәркәле ауылы эргәһендәге яланда, өс йөҙ гусарға һөжүм иткән. Ҡырҡ кеше һәләк булған. Шул тирәләге старшиналарҙы йыйып, үҙенә ҡушылырға бойорған. Тыңламаһалар, халыҡты ҡыйратыу, начальниктарҙы аҫып үлтереү менән янаған. Ҡаранай командаһында өс йөҙ ҡалмыҡ, алты йөҙ башҡорт бар.

«Старшина әфәнде, сәғәт тә кисектермәй Өфө канцелярияһына рапорт юллағыҙ. Һеҙҙе өйрәтәһе юҡ. Һеҙгә билдәле Ибраһим. 20 май, 1774 йыл».

Ҡиммәтле ошаҡты провинция канцелярияһына теләһә кем артынан биреп ебәреп булмай ҙа инде, ҡағыҙҙы ҡуйынына йәшереп, Ишмөхәммәт үҙе юлланды. Унда ыштан төбө туҙҙырыусылар ҙа эшһеҙ ултырырға яратмай, рапорт хөкүмәт ғәскәрҙәре командующийы генерал-поручик Федор Щербатовҡа оҙатылды. Канцелярия чиновниктары ошаҡты матурлайҙар, уға етди төҫ бирергә тырышалар. Бына береһе: «Был провинциялағы башҡорттар тынысланыу ғына түгел, яуызлыҡтарын дауам итә. Ырымбур менән Өфө араһында ныҡлап ойошмаҡсылар. Иркенләп йөрөйҙәр. Ат һөтөнән яһалған ҡымыҙ тип аталған нәмәне эсеп, янъял ҡуптаралар. Өфөнө һаҡларға ғәскәр һорайбыҙ. Юҡһа, Пугачевты эҙәрлекләргә тип командалар китеп бөттө лә, арт яҡ яланғас ҡалды».

Билдәле, уның тарафынан Екатерина Икенсегә оҙатылған рапорттарҙа ла, маҡтаныу һүҙҙәренә ҡарағанда, хафаланыу өҫтөнлөк итә ине.

Полковник Михельсон да, капитан Мельгунов та, секунд-майор Дуве ла... һәммәһе лә рапорт яуҙыра. Провинция канцелярияһынан килгәндәрен һанайһы ла түгел.

Баш күтәреүселәр ҙә наҙандарҙан һаналмай, улар ҙа үҙ-ара яҙышып тора. Ана, Ҡасҡын Һамаровтың өндәмәһе нимә хаҡында һөйләй: ул Өфө провинцияһындағы башҡорт, мишәр, татар старшиналарын Пугачев ғәскәренә ҡушылырға саҡыра. «Бөйөк батшабыҙ Петр Федоровичтың, әгәр уға ҡаршы яуыз йәндәр бар икән, уларға ҡаршы торорға, көс етһә, бөтәһен дә ҡыйратырға, көс етеңкерәмәһә, һөжүм булһа ла итергә» тигән указын һәм әмерен алдым. Шулай уҡ Әбей батшаның сапҡыны менән ебәрелгән, башҡорт, мишәр, татар чиновниктарын, аҡһаҡалдарын үлтерергә, ә ғаиләләрен дворяндарға өләшергә, тип ҡушылған указын эләктерҙем.

Эй, халыҡ! Законһыҙлыҡҡа ҡаршы күтәрелегеҙ!

Әлеге әмерҙе алыу менән ҡоралланып яуыздарға ҡаршы сығығыҙ һәм уларға өҫтөнлөк итергә ирек бирмәгеҙ!

Халыҡты ҡоралландырып, походҡа сығырға ҡушып, начальник Аллағол Аҡаев ебәрелде».

Ҡасҡын өндәмәһен алыу менән, Аллағол уны Ҡәнзәфәргә күрһәтте. Тегенеһе күҙ йүгертеп сыҡты ла ҡағыҙҙы Аҡаевҡа кире бирҙе. Аҫҡы иренен тешләп, уйланып торҙо.

– Әбей, дөрөҫөрәге, йәллләт батшаның указын беләм. Быны ҡасан алдың?

– Бая ихатаға сыҡҡас, бер сапҡын тотторорп китте.

Ҡәнзәфәр был көндө фетнәсе Аллағолдоң тыуған ауылы Тукайҙа ине. Алтынлынан ҡасҡандан һуң, ул Боҙаяҙға бер генә тапҡыр инеп сыҡты һәм

туҡтаған бер урынында ике көн торманы. «Ҡурҡмайым», – тип мәһайыусыларға ла асыуланды. «Һаҡланғанды Аллаһ үҙе һаҡлар» тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡабатлаһа ла, үҙе иһә тәүәккәллек күрһәтеүҙән саҡ тыйыла ине.

Иртәгәһен Ишле ауылына барасаҡтар. Йомош шул: команда туплау.

Ҡәнзәфәрҙең килеүе хаҡында шул уҡ көндө, 28 майҙа, Өфөгә хәбәр ебәреү ойоштороусылар табылды, әлбиттә.

«Бөгөн иртән, таң һарыһында беҙҙең ауыл Ишлегә Ҡәнзәфәр Усаев килде. Эргәһендә рус казактары ла бар ине. Походҡа барыу өсөн һәр өйҙән берәр кеше биреүҙе талап итте. Указ һорағайныҡ, күрһәтмәне. Походҡа барырға кешеләр бирмәнек. Асыуынан : «Артымда дүрт мең кешем, алты пушкам бар. Шуларҙы алып килеп, бөтәгеҙҙе лә ҡыйратам», – тип янап китте. Беҙгә килеп һәләк итеүенән ҡурҡып йәшәйбеҙ».

Ҡәнзәфәр тиклем Ҡәнзәфәр исеме ишетелгәс, уны үҙ күҙе менән күргән Ҡотләхмәт Таймәтов тигән татарҙы тотоп, Өфөгә елтерәтеп килтерҙеләр.

– Күргән-белгәндәреңде түкмәй-сәсмәй һөйлә! – Тар ыштанлы, аҡ күлдәкле, аяғына оҙон ҡуныслы итек кейгән ниндәйҙер әҙәм, бармаҡ остары менән нескә мыйығын һыпыра-һыпыра, – бөтәһен дә яҙа бар, – тине ситтәрәк торған һаҡаллы берәүгә ҡарап, тауышын түбәнәйтә төшөп.

– Иртә ине әле. Май айы бөтөүгә табан бара. Көн оҙонайҙы. Ҡояш ҡалҡҡан инеме, әллә юҡмы?.. Беҙҙең Ишле тирәһендә тау-маҙар юҡ, шуға күрә ҡояш ҡапыл ғына күтәрелмәй. Тел осон иренеп кенә күрһәтә. Ул әллә ҡалҡмағайнымы? Ҡалҡҡан булырға тейеш. Малдарҙы ҡыуыр ваҡыт бит. Юҡ, ҡалҡмағайны шикелле...

– Былары этемә лә кәрәкмәй, диуана баш, Ҡәнзәфәр хаҡында һөйлә!

Тәфтишсенең ҡысҡырыуына Ҡотләхмәт тертләп ҡуйҙы. Һүҙенең осон юғалтып ҡаушаны.

– Ҡояш хаҡында һөйләй инемме әле, онотторҙоң?

– Ҡояш ҡалҡҡанын күргәнем бар.

– Ҡәнзәфәрҙе юҡмы?

– Наҙандың наҙаны. – Тәфтишсе ботона һуҡты. – Йә!

– Ҡәнзәфәр хәҙрәт һис наҙан түгел. Тирә - йүндә унан да уҡымышлы кеше юҡ, тиҙәр. Бер саҡ юлда осратып, ике көн намаҙымды ҡалдырғас: «Шул көндәр өсөн Рамаҙан айынан һуң тотһаң да яраймы?» – тип һорағас, мөмкин икәнлекте әйтте. Тик бер көн өсөн алтмыш бер көн яза ураҙаһы тоторға кәрәк икән. Беҙҙең бурыс кеүегерәк: байҙан бурысҡа яҙын бер ҡаҙаҡ иген алаһың икән, көҙөн бишләтә арттырып ҡайтарып бирәһең. Хәҙрәт башлы кеше, шуға бөтәһен дә белә...

– Кисә ауылығыҙға Усаев килдеме, юҡмы?

– Ни эшләп килмәһен, килде. «Ауылға әллә ниндәй һыбайлылар килеп тулды. Ә һин бот күтәреп ятаһың», – тип ҡатын йүгереп килеп инде. Тәүҙә ҡасырға ла уйлағайным, йә эҙләп табып аҫырҙар, тип шөрләп, урамға сыҡтым. Халыҡ эргәһенә барҙым. Ат өҫтөндәге һыбайлы Ҡәнзәфәрҙе танынbackup. Сибәр кеше ул. Нисек әйтәйем, йөҙө оҙонса, – Ҡотләхмәт йыуан, тиреһе ярылған бармаҡтары менән битен ҡыҫып, түбәнгә һыпырҙы. – Күҙҙәре ҙур, сәнсеп ҡарай. Тура танауы аҫтында остары саҡ ҡына түбәнгә аҫылынған мыйыҡ. Йоҡаҡ елән кейгән. Элек күргәндә сапанда ине. Башында түбәтәй һымағыраҡ бейек, йәшел төҫтәге башлыҡ. Мине таныны.

– Ҡәффарәт ураҙаһын тоттоңмо? – тип һораны.

– Эйе, хәҙрәт,– тип ҡысҡырҙым. Әллә шуға, уның менән дуҫ тип шикләнеп, мине Өфөгә алып килделәр.

– Нисә кешеһе бар ине?

– Ике йөҙҙән кәм түгел. Ауылдыҡыларҙан башҡа.
– Нисек аңларға?
– Урамға сығыусы асыҡ ауыҙҙарҙы әйтәм. Ҡәнзәфәр эргәһендә Туҡай ауылы татары Аллағол Аҡаев. Ярҙамсыһылыр, моғайын. Улар Стәрлетамаҡ пристаненә юлланалар икән. Унда туғыҙ мең кешеһе, пушкалары булған Ҡаранай Моратов көтә, ти. Шунан бергәләшеп Өфөгә ашығасаҡтар. Унда инде Пугачев үҙе, старшина Ҡасҡын Һамаров ҡушылыуы ихтимал. Ҡасҡын командаһында ике мең ҡалмыҡ, бер мең башҡорт бар икән. Бына ҡайҙа көс! Юҡһа, беҙҙең ауылдың ҡайһы бер алйоттары: «Һәр өйҙән кеше бирмәйбеҙ, оҙаҡламай бесән өлгөрә», – тип шаулашҡан була. Ҡәнзәфәр теләй икән, бөтәбеҙҙе лә ала ла китә. Уның батырлығы, отҡорлоғо, кешелеклелеге хаҡында хайран ҡалып һөйләйҙәр. Өфөнөң түренә менеп ултырһа, бөтә кешегә ирек, ер-һыу, урмандар бирәсәгенә халыҡ ышана. Һәр хәлдә ҡайныһы Мөҡсин йә Ишмөхәммәт түгел инде. Былары бит май айында тәнгә ҡаҙала торған талпан кеүек...
– Һүҙең бармы тағын?
– Әбдесәләмовтар хаҡында иркенләп һөйләшергә булыр ине лә, ваҡыт юҡ. Ҡатын да, тиҙ ҡайт, фетнәсе, тип тороп ҡалғайны. Ат булмаҫмы?
– Арт яғыңды уҡытмағанға рәхмәт әйтеп, һыпыртыуыңды бел, Ҡотһоҙәхмәт.
– Ағиҙелде сығырға?..
Тәфтишсе ҡаштарын төйөрөп, ҡулы менән «эҙеңде һепер» тигәнде аңлатып, ишеккә күрһәтте лә тәҙрә яғына китте.

Провинция чиновниктары һәммә хәбәрҙе губернаторға оҙатырға тырыша ине. Беренсенән, был хәл төп бурыстарынан һаналһа, икенсенән, яуаплылыҡтан ҡотолоу ҙа күҙ уңында тотола ине: «Беҙ үҙ ваҡытында һеҙҙе киҫәттек, тейешле сараны күрергә кәрәк булған».

***

Губерна волостары Ҡазан юлында яҙалау командаларына саҡырылған башҡорттарҙың Нуғай юлындағы фетнәсе туғандаштары яғына сығыуынан ҡурҡа ине. Шуға күрә уяу булыу, шыш-быш һөйләшеүҙәргә лә ҡолаҡ һалыу – донъянан ут сәсрәгәндә төп шөғөлдән һанала ине. Был йәһәттән хөкүмәт агенты Ғөбәйҙулла Уразаев белдереүенә нисек күҙ һалмаҫһың. Шымсы йәшерен хат ебәреп, Бөгөлмә гарнизоны командиры полковник Николай Кожинды һиҙгер, уяу булырға саҡыра. «Әлеге ваҡытта башҡорт халҡының ниндәй хәл кисергәнен күңелем тоя: ул аттарға атланып, фетнәселәрҙе тотам тигән хәйлә ҡороп, Димдең арғы яғына йүнәләсәк. Тик уйында һис ул түгел, ә Ағиҙел буйындағы Рәсәй полктарын ҡыйратыу. Башҡорттарҙың иһә үҙҙәренә кәрәгенсә генә һыпыртыуы һеҙгә яҡшы билдәле. Эшемде теләһә кемгә белдермәүегеҙҙе үтенәм».

Һәр ошаҡсы кеүек, Уразаев та ҡылған ҡылыҡтары өсөн ҡалтыранып йәшәй. Фетнәселәр ҡулына эләгеп фашланһа, ғүмере нимә менән тамамланасағын, әлеге хужалары ярҙам ҡулы һуҙмаясағын бик яҡшы аңлай ул.

Ә инде тәжрибәле, абруйлы старшина Мөҡсин, атаҡлы шымсы ғына булып ҡалмайынса, Әбей батшаға ҡаршы баш күтәрергә баҙнат иткән туған халҡын ҡанға батырырға хыяллана. Алмантайҙа кейәүен ҡулдан ысҡындырғаны өсөн Ишмөхәммәт дуҫы менән ҡырҡ тапҡыр әрләшһә лә, әле лә бергәләр. Сөнки Салауат, Ҡәнзәфәр, Ҡаранай, Ҡасҡын, Һеләүһендәр Әбей батшаға ғына ҡаршы һуғыш алып бармайҙар бит. Улар еңә ҡалһа, Мөҡсиндәр, Солтанмораттар өсөн ҡояш һүнәсәк.

Был хаҡта күптән үк үҙҙәренсә дөрөҫ аңлаған Мөҡсин, Ишмөхәммәт яҙған рапорттарын провинция канцелярияһына үҙҙәре индереп бирә.

Баш күтәреүселәр ҡорт күсе кеүек гөжләй башлағас, сираттағы рапорттарын яҙҙылар.

*«Ҡаранай командаһы менән Стәрлетамаҡ пристане эргәһендә тора. Унан егерме саҡрымдағы Табынға, Боҙаяҙға тракт буйынса йөрөп ята. Ә беҙ – юҡ. Был яуыҙды тоторға әмер көтәбеҙ. Ә беҙ, Мөҡсин һәм Ишмөхәммәт, Бөгөлмәнән килеүсе хәрби команданы осратыу өсөн командаһыҙ ғына барырға теләйбеҙ. 28 май, 1774 йыл».*

Аңлашыла ки, әлегә ҡәҙәр ҡыңғыраулы аттарҙа ғына сауҙа итеп йөрөгән байҙар юлдан мәхрүм ҡалыуға нисек түҙеп торорға тейеш? Ҡайҙа боролма, юлбаҫарҙарға тап булаһың. Байлығыңды тартып алыу менән генә сикләнһәләр – бер хәл, поход өсөн аттарҙың яҡшылары кәрәк, тип йәйәү ҡалдыралар. Иҫән ҡотолғаның өсөн рәхмәт әйтергә ҡушалар.

Иркенләп йөрөүҙән ваз кисеп күпме йәшәргә мөмкин? Элекке хәлгә ҡайтыу өсөн бер генә юл – Салауат, Ҡәнзәфәр, Ҡаранайҙарҙы дөмөктөрөү. Башлап йөрөүселәре юғалһа, халыҡ – һарыҡ көтөүе, ҡайҙа бораһың, шунда атлай.

Башҡортостандағы хәлдәр көндән-көн киҫкенләшә. Йәй айы еткәнлектән, язалаусыларға һәр ҡыуаҡ артында, һәр ағас башында, ҡамыш, тал араһында уғын тоҫҡап фетнәсе ултыра төҫлө тойола. Ул ирektәге кейек кеүек. Күрермен, тотормон тимә. Етмәһә, мөһим юлдарға ҡарауыл ҡуйғандар.

Ҡәнзәфәрҙең ҡулына мөһим документ килеп эләкте. Табын коменданты канцелярияһынан пакет илтеүсе һыбайлыны Өфө юлында ҡарауылда тороусылар тотҡан. Тегене тентеп ҡағыҙҙы тапҡас, уны уҡып аңлай белмәһәләр ҙә, электән ҡушылыу буйынса, ашығыс рәүештә Туҡай ауылына оҙатҡандар. Сөнки Ҡәнзәфәрҙең ҡайҙалығын Аллағол Аҡаев белергә тейеш.

Табын коменданты элемтәсеһе Өфө коменданты Мясоедовҡа әҙерләнгән экстракт, йәғни баш күтәреүселәрҙең Табын тирәһендәге хәрәкәте һәм Пугачев отрядтарының Себер линияһы ҡәлғәләрендә башҡарған эштәре хаҡында һөҙөмтә ине.

*«Беренсе. Майҙың егерме бишенсе көнөндә Инйылға ауылына етер алдынан биш кешенән торған вахмистр Симонов командаһына отряд һөжүм иткән. Уларҙың һаны йөҙҙән ашыу. Төркөмдөң нисек, ҡайҙан пәйҙә булыуын вахмистр абайламай ҙа ҡалған. Бәрелештә бер Табын казагы һәләк булған.*

*Икенсе. Егерме алтынсы майҙа Ҡуғанаҡ ауылынан килгән отставкалағы һалдат түбәндәгене белдерҙе: башҡорт өйөрөнән килгән Асыутамаҡ ауылы яңы керәшен удмурты старшина Ҡаранай тарафынан татарса яҙылған хат менән таныштырҙы. Уның командаһына утыҙ кеше бирһендәр. Әгәр ебәрмәһәләр, ҡарышалар икән, ауыл яндырыласаҡ, халҡы ҡыйратыласаҡ, тиелгән. Сотник Ливан әмерҙе үтәне.*

*Өсөнсө. Стәрлетамаҡ пристанендә тороусы подполковник Рылеевҡа сапҡынсы ебәргәйнем. Ун биш саҡрым етмәҫтән яр буйында торған яуыз башҡорттарҙың ҡарауылына тап булған. Тегеләр мылтыҡтан, уҡтан ата башлағандар. Ярай әле, ишкәкселәр көслө булған, кәмәлә түбәнгә һыпыртып саҡ иҫән ҡалған.*

*Дүртенсе. Пугачев менән бергә Троицк ҡәлғәһенә тиклем барған һәм шундағы һуғыштан ҡасҡан крәҫтиән Иван Баяров беҙгә килде. Ырымбур эргәһендә тар-мар ителгәндән һуң, Пугачевҡа эйәреп Ташлы ауылына барған. Шунан һуң юл Вознесенск, Әүжән заводтарына илткән. Белоретка еткәс, дүрт аҙна шунда торғандар. Пугачев өс мең кеше йыйған, Магнит ҡәлғәһенә йүнәлгән. Көн буйы быларға атҡандар, ҡәлғәне төндә штурм менән алғандар, начальнигын аҫҡандар. Кәрәк-яраҡтары менән артиллерияны ҡулға төшөргәндәр. Үҙенең*

*төркөмө менән Ҡатау заводынан полковник Белобородов килде. Шунан бергәләшеп Юғары Яйыҡ ҡәлғәһен үтеп, Ҡарағай ҡәлғәһенә юлландыҡ. Унда ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғәйре кеше юҡ ине. Дүрт бәләкәй пушка, ҡалған дарыны алдыҡ. Петропавель, Степь, Троицк ҡәлғәләре беҙҙең штурмға ҡаршы тора алманы. Пугачев Троицк ҡәлғәһенә саҡрым ярымдағы яланда ҡунды. Иртәгеһенә генерал-поручик Деколонг беҙгә һөжүм итә башланы, пушкаларҙан атырға тотондо. Ығы-зығынан файҙаланып ҡастым һәм Табынға килдем.*

*Бишенсе. Воскресенск заводы хеҙмәткәре Василий Гнусаров егерме етенсе майҙа Урал тауҙарына китеп барыусы ике йөҙҙән дә кәм булмаған башҡорт өйөрөн күргән.*

*Алтынсы. Егерме туғыҙынсы майҙа Архангельский заводы приказчигы Рыжков, Эҫем заводынан алты бисә менән ҡасып килгән крәҫтиән, алты көн элек башҡорттар заводты яндырҙы, кешеләрҙе үлтереп бөтөрҙө, әле Архангельский заводына килергә уйлайҙар, тип һөйләне. Рыжков ярҙамға хәрби команда ебәреүҙе һорай...»*

Тимәк, Пугачев, элек әйтеүе буйынса, Салауат командаһы менән ҡушылып, Көңгөргә ҡарай бара. Әлеге көндәрҙә Һатҡы заводы, Әй йылғаһының үрге тарафтарында булырға тейеш», – тип Ҡәнзәфәр үҙе өсөн һығымта яһаны.

Ул Яңы батшаны күреү, унан кәңәш-күрһәтмәләр алыу өсөн юлға йыйынырға ҡарар итте. Әлбиттә, буш ҡул менән бармаясаҡ: бүләккә – отряд. Тик ниндәй маршрут һайларға? Һайланған юл тура ла, хәүефһеҙ ҙә булырға тейеш. Юғиһә, Деколонг, Михельсон һалдаттары менән Урал тулған. Юл иһә – Уралға. Ауыр юлдар, Аллаһ ҡушһа, Пугачев, Салауат, Белобородов менән осраштырырға тейеш.

***

Бер аҙ киңерәк булһа ла, Ҡәнзәфәр командаһы барған юл урмандыҡын хәтерләтә ине. Сөнки ике яҡта бейек ҡойма шикелле үҙ-ара ярышып үҫкән төрлө-төрлө ағастар оҙата. Күпмелер араны үткән һайын, аттарығыҙҙы эсерегеҙ тигәндәй, шарлап аҡҡан йылғалар осрай.

Төркөмдөң егерме һыбайлыһы алдан барһа, шунса атлы арттанырак бара. Һаҡлыҡ өсөн. Тик тояҡ тауыштары ғына ишетелә. Елһеҙ көндә күтәрелгән саң, һарғылт киң таҫмалай, күктә эленеп тора. Шаулашып һөйләшеү юҡ. Ҡоштар ҙа тынып ҡалған. Оҙаҡламай Эҫем заводы өҫтөндәге тауға яҡынайылыр. Һәр хәлдә Ҡәнзәфәр шулай уйлай. Уның фекерләүенсә, шулай булырға тейеш, сөнки был юлды бер тапҡыр үткәйне бит. Тик ул саҡта ҡыш ине. Уны санаға ултыртып Зарубин хөкөмөнә алып баралар ине. Тирә-йүнде ҡар ҡаплағанлыҡтан, айырым билдәләр хәтерҙә ҡалмаған. Эҫемгә тиклем ауылдар түгел, хатта айырым өйҙәр ҙә юҡ. Ә инде заводтың бейек тауҙар араһындағы тәрән соҡорҙа ултырыуы, ғинуар аҙағы булһа ла йылғаһы туңмағанлығы иҫтә.

Ә бит Салауат менән Белобородовты ҡыйратыу маҡсатында, ошо уҡ юлдан Михельсон үткән. Дөрөҫөрәге, ул бөгөн дә ҡайҙалыр алдағы урындарҙа йөрөй торғандыр. Уяу булырға кәрәк. Әлегә уның менән күҙгә-күҙ осрашыуҙан, бәрелешеүҙән тайпылыу хәйерле, сөнки подполковниктың ғәскәре өйрәтелгән меңләгән һалдаттарҙан, тиҫтәләгән пушкаларҙан ғибәрәт.

Шәрә тау башы. Ҡаршы уң яҡтағы бейеклектәр ҡалын урмандар менән ҡапланған. Илаһи ҙур ҡаҙанды хәтерләткән соҡорҙа – завод. Тик торбаларынан төтөн сыҡмай. Ул үҙе, яҡын-тирәләге йорттар күмер төҫөндә. Йылға буйында йөрөгән кешеләр ҙә, атлылар ҙа күренмәй.

Ул да булһа, майҙың егерме өсөнсө көнөндә Эҫем заводын Салауат командаһы килеп яндырған икән. Был хаҡта Боғалыш ауылы кешеһе һөйләп торҙо. Ул

декабрь айында Көңгөргә китеп барған Салауатҡа ҡушылған. Ерал ауылы эргәһендәге яланда ай самаһы элек Михельсон ғәскәренә ҡаршы һуғышта атынан ҡолап терһәк быуынын тайҙырған. Табындан утыҙ биш саҡрымда торған ауылына нисек ҡайтырға аптырап йөрөй икән.

Түбән Ҡыйғыла торған Белобородов Хәрби коллегиянан: «Баш армияға барып ҡушылырға» тигән указды алғас, Салауаттан айырылған һәм Көңгөргә тейеш поход туҡтатылған.

Ерал ауылы эргәһендәге ҡаты һуғышта Салауат сигенергә мәжбүр булды. Иртәгеһен патруль ниндәйҙер бер крәҫтиәнде тотоп, Михельсонға алып килде. Тик яуҙан һуң ғәскәрен тәртипкә килтерергә әмер биреп йөрөгән подполковник йолҡош русҡа иғтибар ҙа итмәне, сөнки башҡорттарҙың уға ҡаршы нисек ябырылыуы әле булһа күҙ алдында тора ине. Уларҙың аҡырыуынан хатта төнөн күҙҙәрен йоморға ҡурҡып ятты. Ҡырағай кешеләр уны уратып алыр төҫлө тойолдо. Тәүҙә иғтибарҙан ситтә ҡалған крәҫтиәнде хәтерләне.

– Подполковник әфәнде, был мужикта мөһим хәбәр бар, – тип майор Харин өндәшкәс кенә, Михельсон фуражкаһын кейеп, крәҫтиәнгә боролдо.

– Һин кем? Ниндәй берәҙәк? Шөғөлөң яуызлыҡтамы?

– Усть-Ҡатау заводынан.

– Бында нисек килеп юлыҡтың?

– Салауатты эҙләп бара инем.

– Салауатты?! Ниндәй Салауатты? Кем ул?

– Полковник. Юлай улы. Ғәскәр башлығы.

– Әллә уның өйөрөнәнме?

– Юҡ. Уға хәбәрем бар. Шуны еткерергә ҡушылды.

– Ниндәй хәбәр? Кем бойорҙо?

– Атаман Башин Сидор, крәҫтиәндәрҙең бер өлөшө Пугачевҡа китте, ҡалғаны тауҙарға ҡасты, тип әйтергә ҡушты.

– Хатын да алдыҡ, бына, – тип Харин Михельсонға ҡағыҙ һуҙҙы.

– Пугачев ҡайҙа?

– Уны белмәйем, беҙҙең крәҫтиәндәр Яңы батшаға барыусы ниндәйҙер Белобородовҡа ҡушылды шикелле.

– Тейешенсә һуҡтырығыҙ был иҫәрҙе. Унан башҡа ла донъя бутаусы етерлек. Башин тигәнен тотоп аҫырға! – Крәҫтиәнде алып киткәс, Хорин менән майор Тютчевҡа боролдо. – Усть-Ҡатауға барабыҙ. Пугачевтың шул тирәлә йөрөүе мөмкин. Һатҡы, Сыбаркүл... Билдәле, Салауатҡа бара ул. Уның, Белобородовтың ярҙамына мохтаж. Нисек тә булһа Салауатты дөмөктөрөргә кәрәк.

Ләкин Салауат еңелерлек түгел ине. Ул ғынамы, Пугачев йөрөгән урындарҙа заводтар, ҡәлғәләр юҡҡа сыға, ә халыҡ фетнәселәр армияһын арттыра, көсәйтә бара. Дошманына ташҡын шикелле күтәрелгән халыҡ нәфрәтенән Урал сайҡала!

Генерал Щербаковҡа яҙған сираттағы рапортында Михельсон шундай һүҙҙәрҙе өҫтәргә тартынманы: «Был халыҡтың ни өсөн шулай ҡаты бәғерле булыуының сәбәбен аңлай алмайым. Уларҙы тере килеш ҡулға алыуы мөмкин түгел. Икәүһе күлгә инеп китте. «Тереләй бирелгәнсе, үлеү хәйерлерәк» тип аҡыра вәхшиҙәр...»

Ҡәнзәфәр Боғалыш крәҫтиәненә үҙенә эйәрергә ҡушты.

– Ҡулыңды төҙәтергә әмәлен табырға тырышырбыҙ. Берәй имсе әбей булһа ла осрар, – тине Көңгөр тарафынан килеп юлыҡҡан кешегә.

Эҫемдең ҡаршы яҡтағы тауын менгәс, һулға боролдо. Башташ һыртын уңда ҡалдырып, тар юл түбәнгә тартылды. Алда иһә борғаланып аҡҡан Йүрүҙән үҙәндәре, ярҙары ине. Июнь ҡояшы күберәк арҡаны һәм һул битте ҡыҙҙырып оҙатасаҡ.

Был юлдар Салауаттыҡы, әлбиттә. Ул тәүҙә атаһына эйәреп тыуған ауылынан Эҫем биләмәһенә килеп йөрөгән. Тик ул ерҙәрен тартып алып, завод төҙөгәндәр. Меңәрләгән бот ҡоросто, суйынды яҙын баржаларға тейәп Эҫем буйлап Ағиҙелгә оҙатҡандар. Унан инде – Кама, Волга... Завод хужалары кеҫәһенә иҫәпләргә баш етмәҫлек аҡса аҡҡан...

Бөгөн килеп шул заводтың өнө тығылған. Уны Юлай улы үртәгән.

Әлкә ауылына еткәс, шул мәғлүм булды: Салауат Юғары Ҡыйғыла булырға тейеш, ә Михельсон Һатҡы заводында. Пугачевтың ҡайҙалығы әлегә билдәһеҙ.

– Ә Ҡыйғыға нисек барырға? – Һорауға Әлкә ҡарты:

– Беҙҙән байтаҡ үткәс, Йүрүҙәндең уң яғына. Шунан Нәсибаш ауылын үтеп, Әйҙе сығырға. Ҡыш түгел бит, кеше йөрөштөрөп тора, белешерһегеҙ, – тип Ҡәнзәфәргә юл өйрәтте.

Хәл иһә бөтөнләй икенсе төрлө булып сыҡты. Июнь айының беренсе көнөндә Үрге Ҡыйғыла Михельсон менән яу ҡупҡан. Шунан һуң подполковник Һатҡы заводына ҡарай кире киткән. Әммә ләкин унан  Эҫем заводына юлланасағы хаҡында хәбәр иткән. Бәлки, ул, Салауатты туҙҙырҙым, ә инде Пугачев менән Белобородовты туҡмау – Деколонг эше, тип Өфөгә ҡайтып китмәкселер.

Ләкин Михельсон ауыҙын йырып, һыҙғырып көй һуҙып ҡына елдермәй торһон әле. Уның юлында мең кешеһе менән Салауат пәйҙә булды, һәм Әй буйында ҡаты алыш башланды. Регуляр ғәскәр пехотаһы, туптарҙан өҙлөкһөҙ яуҙырған йәҙрәләр баш күтәреүселәрҙе сигенергә мәжбүр итте. «Был инде ысынлап та һуңғы алыш булыр», – тип уйлап, Михельсон кавалерияһына «Алға!» тип команда биреүгә «Кемдәрҙер арттан ылауҙарға һөжүм итте» тигән шомло хәбәр алды.

Ылау. Уны юғалтыу иһә, бөттөң, ыштанһыҙ ҡалдың, тигән һүҙ. Сөнки йөктәрҙә дары, йәҙрәләр, кейем-һалым, аҙыҡ-түлек...

Пугачев етәкселегендәге «Баш армия» һөжүм итеүе билдәле булғас, Михельсон шарт аптыраушта ҡалды. «Баш яуыҙ»ды Сыбарҡүл тирәһенән эҙләйҙәр, ә ул бында? Шуныһына иҫ китерлек: ике йөҙ кешелек отряды менән Пугачев ғәскәренә Ҡәнзәфәр килеп ҡушылған.

Үлемесле һуғыш икенсе көндө, йәғни бишенсе июнь иртәһендә Әйҙең һул яғында, был юлы яланда түгел, ә тауҙарҙа, тарлауыҡтарҙа барҙы. Күпме ҡан аҡҡанын соҡорҙар ғына, Әй генә беләләр...

Ике яҡ та иҫәңгерәгәйне. Бер-береһен эҙәрлекләү ҡайғыһы юҡ ине. Михельсон мәйеттәрен арбаларға тейәп, Эҫем яғына юлланды. Ә баш күтәреүселәр, һәләк булған башҡорттар ҡояш түбәнәйгәнгә тиклем ерләнергә тейеш ине. Был хаҡта Ҡәнзәфәр аңлатты: «Кафырҙар менән бутамайыҡ. Мәңгегә айырым йоҡлаһындар», – тине.

Үкенескә ҡаршы, һәләк булыусылар араһында Боғалыш кешеһе лә бар ине. Исемен белеүсе лә табылманы.

Ирек өсөн көрәштә йәндәрен фиҙа ҡылыусылар, йәғни әруахтар рухына Боҙаяҙ муллаһы, ваҡыт аҙлыҡтан, баҫҡан килеш Ҡөрьән уҡыны.

Ниһайәт, тыныслыҡ урынлаша төшкәс, Ҡәнзәфәр Пугачевтың, Салауаттың ҡайҙалығын һораша башланы. Халыҡты йырып йөрөргә тура килде. Кешеләр исемдәр ҡысҡыра. Моғайын, ауылдаштарын, яҡташтарын, отрядтарын эҙләй, тереме-түгелме икәнлектәрен белергә теләйҙәр.

Салауат яр ситендә ине. Буй-һыны менән күптәрҙән тәпәшерәк булғанлыҡтан, айырыуы ҡыйын булманы. Ялан баш, күлдәк иҙеүе сиселгән. Эргәһендәгеләргә ҡулын һелтәп нимәлер һөйләй, аңлата ине.

– Тегеләр киткән яҡҡа ике саҡрым тирәһе барып йәшенеп торорға, һаҡ ҡуйырға. Кире боролоп килеп тондороуҙары бар. Ышан уларға... – тигән һүҙҙәрен генә ишетте Ҡәнзәфәр.

– Хәйләкәр бәндә ул Михельсон. Пруссияла бергә һуғышып йөрөгәнбеҙ. Әле инде ҡапма-ҡаршы. Шайтандан көтөрһөң изгелек. Һаумы, Юлай улы?– Ҡәнзәфәр Салауаттың усын ҡыҫты, шунан беләктәренән тотоп, һелкеп ҡараны. – Арымағанһың.

– Ваҡыт юҡ арырға. Ҡайҙан? Нисек?

– Һуңынан. Батюшканы табайыҡ.

Пугачевҡа уны кемдәр эҙләүен еткерҙеләр. Ул ҡарт имән төбөндә ултырған икән. Торҙо ла:

– Ҡайҙа Салауат? Ҡәнзәфәр бындамы? – тип ҡысҡырҙы. – Беҙҙеңсә күрешәйек... – Шулай һөйләнә-һөйләнә, Салауатты ҡосаҡлап үпте. – Килеүең өсөн молодец, Усаев. Һин кәрәк инең. – Ҡәнзәфәрҙе лә ҡосаҡланы. – Ә хәҙер, минең ышаныслы полковниктарым, һөйләшергә, кәңәшләшергә кәрәк. Тыуған төйәгең, Салауат, ғәжәп гүзәл икән. Бында һуғышып йөрөргә түгел, һунар итергә кәрәк. Әүжәндә айыу ите менән һыйланылар.

– Салауат үҙе лә айыу алған шикелле. – Ҡәнзәфәр, хәйләкәр йылмайып, йәш батырға күҙ ҡыҫты.

– Ниңә шикелле? – Салауат малайҙарса үпкә белдерҙе. – Айыу алыу – башҡорт өсөн мәртәбә. Ваҡыт тапһаҡ, Әй балығы менән һыйланырбыҙ. Ҙур ҡунаҡ өсөн ҡымыҙ ҙа таптырырбыҙ. Төпкөләрәк урындарҙа бешә башлағандарҙыр...

Әй буйында тыныс, йылы кис урынлашты. Күҙ күреме етмәҫ йәшел киңлектәр тора-бара зәңгәрләнеп, әле инде ҡараһыу төҫкә инде. Унда серле тормош. Бер яралыны күтәреп һаҡланып ҡына ярҙан төшәләр. Тегенеһе:

– Ағын һыуға аяҡтарымды тығып торһам, һыҙланыуым баҫылыр ине, – тип һөйләнә.

Уның һүҙҙәренә яҡында ғына саҡырған кәкүк ҡушылды. Бөгөн күпме кеше баҡый донъяға күсте. Уларҙың күпме ғәзиздәре тороп ҡалды. Әсәләре, атайҙары, ҡатындары, балалары ғүмерҙәре бөткәнсе уларҙы көтөр. Ҡәберҙәре ҡайҙалығын яҡындарына  кем еткерер?..

Ҡәнзәфәр Пугачевҡа Бөгөлсәндән Нуғай ҡәлғәһенә тиклем аралағы хәлдәрҙе бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе. Ҡаранай, Ҡасҡын, Һеләүһендәрҙең, үҙенең ҡайһы урындарҙы контролдә тотоуын әйтте. Бөгөлмә – Өфө – Ырымбур трактының фетнәселәр ҡулында икәнлеге Яңы батшаның кәйефен күтәрҙе.

– Бөтә урында ла шуға ирешергә кәрәк, – тип  һаҡалын һыпырып торҙо «Петр Федорович».

Усаҡ яҡтыһында йөҙө асыҡ күренмәһә лә, Ҡәнзәфәр көндөҙ шуға иғтибар итте: ике ай эсендә Пугачев шаҡтай үҙгәрергә өлгөргән: биттәре генә ябығыу түгел, тәне лә ит ташлаған, яурыны тарайып ҡалғандай тойолдо. Урал. Уның һырттарын артылыу уйын эш түгел шул.

Салауат иһә дүрт айҙа ҡалыная төшкән, мыйығы ҡуйырған. Тик ҡаштары түбәнәйә биреп, ҡарашын уҫалландырған. Йылмайыуға һаранланған. Шул тиклем яуаплылыҡты өҫтөнә алыуына, шул ҡәҙәр кеше менән етәкселек итеүенә Әбей батша сатраптары ғәжәпләнеү түгел, аптырашта ҡалды. Наҙан халыҡты ышандырып үҙ артыңдан яуға күтәрергә ниндәй ихтыяри көс кәрәк! Һуғыш юлдары үткән, һуғыш ғазабы күргән генерал булһа, ғәжәпләнмәҫ тә инең, был бит һыбай менеп шаярып йөрөр малайка ғына. Ә ниндәй ҡыйыу, дыуамал. Иң аптыратҡаны шул: оҫта һуғыша, алыш ысулдарын белә.

Пугачев иһә шул уҡ көндө, Әй йылғаһы буйында, Салауат менән Ҡәнзәфәрҙең күп һанлы ғәскәр менән етәкселек иткәндәре, ихтилал алдында күрһәткән ғәжәйеп ҙур хеҙмәттәре,  батырлыҡтары өсөн бригадир дәрәжәһе биреү хаҡында

указ яҙырға бойорҙо һәм икеһенә лә бүләк итеү өсөн ҡарағыҙыл төҫтәге буҫтауҙан тегелгән кафтан килтерергә ҡушты.

– Ну-ка, бригада генералдары, кейеп күрһәтегеҙ, – тип усын усҡа һуҡты.

Былай ҙа оҙон итеп тегелгән кафтан Салауаттың аяҡтарын ғына ҡаплау түгел, итәгенең байтаҡ өлөшө ергә йәйелде.

– Юлаевтың буйы тиҙерәк үҫһен өсөн махсус рәүештә мул итеп тектерҙем, – тип шаярҙы Пугачев, Салауаттың яурынына һуғып. – Ҡәнзәфәрҙең дә бейегәйергә форсаты бар.

Юғары дәрәжәгә һәм ҡиммәтле бүләктәргә лайыҡ булыусыларҙы Хәрби коллегия ағзалары ҡотланы. Ҡәнәғәт икәнлектәрен белдерҙеләр.

Бер аҙҙан Пугачев Афанасий Перфильевҡа, Кинйә Арыҫлановҡа, Салауатҡа, Ҡәнзәфәргә үҙ эргәһендә ҡалырға ҡушты. Ҡулы менән сиҙәмгә ултырырға ымланы. Башын эйә биреп, күҙҙәрен йома төшөп уйланып торҙо.

– Былай итергә кәрәк: Усаевты Башҡортостанға – үҙ төбәгенә кире ебәрәбеҙ. Башҡортостанды ҡулда тотоу – төп бурыстарыбыҙҙың береһе. Юҡһа Ҡазанға яһаясаҡ походыбыҙ ҡатмарланасаҡ. Бөгөлмәләге, Минзәләләге, Нуғайбәктәге хөкүмәт ғәскәрҙәрен Ҡәнзәфәр, Ҡаранай, Ҡасҡын, Һеләүһен, әүҙем хәрәкәтләнеп, үҙҙәренә йәлеп иттерергә тейеш. Дошмандың көсөн бүлгеләргә, күп йүнәлештәргә таратырға мәжбүрләргә, иғтибарын теләһә ҡайҙа йүнәлттерергә кәрәк. Салауат  тыуған төйәгендә ҡаласаҡ. Ҡәнзәфәр, халыҡты күтәреү, команда йыйыу хаҡында манифест, баш полковник-бригадир икәнлегеңә указ, шулай уҡ илле һум аҡса – эш хаҡы алырһың.  Элемтәлә бул. Үҙ-ара килешеп, ярҙамлашып көрәшегеҙ. Һуңыраҡ Ҡаранай Ҡазан яғына тартыла ҡалһа, ҡаршы килмә. Дошманға ҡаршы көньяҡ-көнбайыштан да һөжүм кәрәгәсәк. Ул шуны яҡшы аңларға тейеш.

– Бәлки, һиңә, Петр Федорович, тәүҙә көнбайышҡа боролорға – Өфөнө алырға кәрәктер?

– Фекер башымда йөрөй ине, Ҡәнзәфәр, тик Ҡазанды ҡулға төшөрмәй тороп Мәскәү, Петербург хаҡында уйлау мөмкин түгел. Кама буйлап түбәнгә ҡарай хәрәкәтләнеү сағыштырмаса уңайлыраҡ кеүек, сөнки мине үлтерергә хыялланған ҡатыным, ялған батша Катеринаның армияһы төньяҡта аҙыраҡ, йомшағыраҡ. Голицын менән Михельсонды ҡыйратыуҙы һеҙгә йөкмәтәм...

Ҡәнзәфәр Кинйә абыҙҙың да фатихаһын алды. Күпме ҡатмарлы юлдарҙы үтһә лә, михнәттәр күреп ғазаптар сикһә лә, ихтилал армияһы баш полковнигының кәйефе көр ине. Йә ғына, һәр һүҙенә баҫым яһап һөйләй. Күҙҙәренең ҡыҫыла төшөүе – алда әйтеләсәк фекерен сарлау төҫлө ине.

– Аҡылың иҫән йөрөтә. Киләсәктә лә шулай булһын. Һеләүһенде, Димдең юғары тарафтарында, тинең. Сәләм күндер. Һуғыш бит, тағын ҡайҙа осрашыуыбыҙҙы алдан әйтеүе ҡыйын. Иң мөһиме, иҫән булайыҡ. – Кинйә шуларҙы әйтте лә Пугачевтар баҫып торған яҡҡа боролдо. – Ҡул биреп күрешмәйек. Ус йылыбыҙҙы киләһе күрешеүгә ҡалдырайыҡ.

Осрашыуҙар, күрешеүҙәр. Донъянан ут сәсрәгәндә, тотош ауылдар янғанда, бер юлы йөҙәрләгән ҡәберҙәр ҡалҡып сыҡҡанда киләсәктә осрашыуҙар хаҡында кем генә күҙ алдына килтерә алһын. Бөтәһе лә Аллаһ ихтыярында, Аллаһ ҡулында...

***

Ҡәнзәфәр Өфө тирәһенә кире ҡайтҡас, Ағиҙелдең түбәнге өлөшөнә юлланырға, командаһына кешеләрҙе шул тарафтарҙан йыйырға ҡарар ҡылды. Сөнки унда тынлыҡ, халыҡ унда битараф көн итеп ята кеүек тойолдо. Юғиһә Нуғайбәк, Баҡалы ҡәлғәләре, шуларҙан Өфөгә һуҙылған юл буйҙарындағы ауылдарҙан

күпме кеше ихтилалға ла, язалаусыларға ла йәлеп ителде, ирле йорттар һирәк ҡалғандыр. Йәйҙең ҡоро килеүен иҫәпкә алһаң, аслыҡ көтә, сөнки аҙ-маҙ сәселгән ерҙәр ямғырға тилмереп, кибеп, әлһерәп ята.

Боҙаяҙ муллаһы, ғаиләһе янына ла инеп тормай, Келәш, Әри, Ҡара Яҡуп, Туҡмаҡлы ауылдары аша үтеп, Сәрмәсән буйындағы Ихсанға юлланды.

Дыуанай волосының старшинаһы Ишҡыуат Дәүләтбаев үлгәс, уның урынын Ихсан Баязитов биләне. Тирә-йүндәге ауылдарынан отряд йыйып, ихтилалға ҡушылды. Өфөнө ҡамауҙа ҡатнашты. Әлеге ваҡытта ниндәй хәлдә, иҫәнме икән, тын алышы нисек? Уны күрмәгәнгә күпме йылдар үтергә өлгөргән. Ҡәнзәфәр Сүриәһен тәүге тапҡыр ошо ауылда, йәғни бер ҡыҙ менән Сәрмәсән буйына төшөп барғанда тап иткәйне.

Һыбайлыны Ихсан тәҙрәнән шәйләне лә, килеүсенең өйгә үк килеүен теләмәйенсә, ишектән сыҡты һәм һыбайлының кемлеген танығас, тертләп ҡуйҙы. «Ҡәнзәфәр-р? Усаев? Пугачев полковнигы? Бында нимә ҡалмаған уға?..» Ҡаштары төйөрөлдө. Йөҙөнә болот шәүләһе төшкәндәй ҡарайҙы. Электән күреп белһә лә, күрешергә ҡулын һуҙманы, өйөнә саҡырманы.

– Әллә биҙгәк интектерәме? – тип шикләнеп ҡараны Ҡәнзәфәр. – Әрем ҡайнатып эсергә кәрәк. Файҙаһы тейер.

Ихсан өндәшмәне. Диуана, алдан таныған булһа, өйҙә юҡлыҡҡа ғына һылтаныр, сыҡмаҫ ине.

– Әллә ихтилалдан ситләштеңме? Әллә Михельсон алдында тәүбә итергә лә өлгөрҙөң? – Ҡәнзәфәрҙең һорауҙарын старшина яуапһыҙ ҡалдырҙы. – Бына Петр Федоровичтың манифесы.

Ихсанға ҡағыҙ һондо.

– Уҡығаным бар.

– Улайһа, бик һәйбәт. Ябай халыҡҡа Петр Өсөнсөнөң ысын батша икәнлеген ҡат-ҡат аңлат. Волосыңа ҡараған һәр ауылдың һәр өйөнән аты менән берәр кеше йый.

– Йыйҙым. Һуғыштыҡ. Еңелдек. Таралыштыҡ...

– Иҫәүәнләнмә, Баязитов. Манифесты тулы килеш хәтерләйһеңдер.

– Һин бит хәҙрәт кеше, яҡташһың. Атайыңды ла беләм. Туҡтап, ҡунып киткәне лә бар...

– Тирәк яман бейек, әммә уның ботағына етерлек арҡан табылыр. Закон Саҡмағошҡа ла, Боҙаяҙға ла, Ырымбурға ла бер. Хәҙер үк отряд йыйырға тотон. Ҡасан, ҡайҙа барырһың – хәбәр итербеҙ.

– Пугачев иҫәнме? Әле ҡайҙа?

– Ошо көндәрҙә генә эргәһендә булдым. Теләгең бар икән, ҡул-аяғыңа бығау, ҡалып һалып оҙатырмын.

– Ҡәнзәфәр...

Усаев старшинаны башҡаса тыңлап торманы, атын Яңы Йомран ауылына әйҙәне, шунан һуң юлы Ҡарасайылға, Тәкәрлек, Исмәғил, Әнәс тигән ауылдарға, йәғни Ағиҙелгә табан ине.

Тауҙар, ҡалын урмандар төбәгендә йөрөп ҡайтҡандан һуң Ҡәнзәфәр өсөн был тарафтар киң, иркен булып тойолдо. Сөнки ваҡ-төйәк соҡор-саҡырҙан ғәйре ерҙәр шул уҡ Саҡмағош, Боҙаяҙ, хатта Ырымбур Ҡарғалыһы тирәләрен хәтерләтте. Ерҙе тотош урмандар ҡаплап тормағанлыҡтан, йәйелеп ятҡан асыҡлыҡтар ҙа осрай, ауылдар эргәһендә уйҙыҡ-уйҙыҡ сәсеүлектәр ҙә күҙгә салына. Ауылдар иһә күптән түгел генә ойоша башлағанлыҡтан, күбеһе тиҫтә, тиҫтә ярым ғына өйҙән ғибәрәт. Ҡайһы береһенең түбәһе ҡабыҡ менән ябылған, ҡыйыҡ алдары, арттары ҡапланмағанлыҡтан, үтәнән-үтә күренеп тора.

Ағиҙелдең уң ярына ултырған Әнәс ауылының күпселек кешеһен суҡындырылыуҙан ҡасып килгән mariҙар тәшкил итә икән. Татарҙар ҙа бар.

Ҡәнзәфәр Мансур исемле йөҙ башы өйөнә урынлашты. Хужабикә аш бешереп йөрөгән арала, хәл-әхүәл хаҡында һорашып ултырҙы.

– Халыҡ иң ауыр көндәр кисерә, – тип зарланды хужа. – Әҙерләнгән аҙыҡтан бер тамсы ла ҡалманы. Яңыһы өлгөрөргә, ай-һай-һай, бик алыҫ әле. Ярай ҙа әҙерәк иген булһа, көйҙөрөп, яндырып бара бит. Әле ни төп аҙыҡ:балтырған, кесерткән, ҡуҙғалаҡ. Ағиҙелдә балыҡ күп тә бит, тотоусы кешеләр юҡ дәрәжәһендә. Һатырға нәмәң, алырға аҡсаң юҡ, тигәндәй, йәнде аҫырайбыҙ инде шунда. Беҙҙең сирмеш старшинаһы Тоҡбай Тоҡмозин да күптән күренмәй. Моғайын, ауылдар араһында йөрөйҙөр. Һалым һалыу, уны йыйыу, хәрби хеҙмәткә ебәреү сиратын ҡарау. Ер буйынса ла бәхәстәр тыуып тора... Эш тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел...

– Ә һеҙ Петр Федорович указы, манифесы буйынса йәшәгеҙ.

Улар ултырған урындыҡ аҫтында саҡ ҡына ишетерлек булып сөскөрөү тауышы ишетелде. Тимәк, сит кеше килгәнлектән, балалары шунда инеп йәшенгән.

– Пар атта нindәйҙер бай килеп туҡтаны, – тип әйтә һалды хужабикә. – Сығаһыңмы?

– Үҙе инһен, – тип Ҡәнзәфәр хужаның беләгенән тотто.

Бер аҙҙан өҫтөнә йоҡаҡ халат, аяғына ялтыр итек, бейек башлыҡ кейгән ҙур һаҡаллы кеше инде. Башлығы түшәмгә тейеп, ишек яғына төштө. Шуны алып, ҡулына тотто. Башы бәрелеүҙән ҡурҡҡандай, өрлөккә ҡараны.

– Һәйбәт аттар бир, былары арыны, – тип талапсан тонда өндәште. Быларҙың ҡайһынығы хужа һуң тигәндәй, бер Ҡәнзәфәргә, бер Мансурға ҡараны.

– Кем булаһың, юлсы? – Ҡәнзәфәр күҙенең ҡырыйы менән генә әлеге кешегә ҡарап алды. – Алыҫтанмы? – Сөнки бындай кейемдәге рустың был тирәлә пәйҙә булыуы мәҙәк тойолдо.

– Сауҙагәр мин. Остафий Трифон улы Долгополов. Ржев-Владимиров тарафтарынан.

– Ҡайҙа китеп бараһың?

– Петр Федоровичты эҙләйем. Павел Петрович уға бүләктәрен тапшырырға бойорҙо. Әлеге ваҡытта батшаның ҡайҙалығын әйтә алмаҫһығыҙмы?

– Уҙ, ултыр. – Ҡәнзәфәр үҙ эргәһенән урын күрһәтте. «Нindәй әҙәм был? Йүнле, изге уй менәнме, әллә шымсымы? Әллә Яңы батшаның ғүмерен ҡыйыр өсөн ебәрелгән башкиҫәрме? Ошондай төпкөл ауылға нисек килеп юлыҡҡан?..»

– Нindәй юлдарҙан килдең, сауҙагәр? Нисек аҙашманың?

– Ҡазан, Минзәлә аша. Тел, ат йөрөтә.

– Ҡана, бүләктәреңде күрһәт әле. Батшаға бирерлектәрме икән? Бәлки, сүпсарҙыр.

– Ә һин үҙең кем һуң? Ауыл мужигына оҡшамағанһың.

– Һиҙгерһең. Мин дә килгән кеше. – Ҡәнзәфәр, Долгополовтың икеләнгәнен күреп, уға ныҡыраҡ бороло. – Әллә ҡурҡаһың?

– Кемлегең маңлайыңа яҙылмаған.

– Баш полковник мин. Петр Федоровичтан ебәрелгәнмен. Төшөндөңмө? Бар, әйткәндә эшлә. Бар, бар, ашығаһың бит.

– Ҡайҙа ҡушаһың?

– Бүләктәреңде күрһәт. Теләмәйһең икән, ана бара юлың.

Ҡәнзәфәрҙең үҙен эре тотоуы, әмер биреү тонында һөйләшеүе сауҙагәрҙе тағын шомландырҙы. Берәй ҡараҡ булып, байлығын тартып ала күрмәһен. Ә шулай ҙа Долгополов сараһыҙҙан урамға сығып, йәшел төҫтәге ҙур булмаған

һандыҡ күтәреп инде. Йоҡаҡ көндән алтынлап тегелгән һары төҫтәге сәхтиән итекте ике ҡулына һалып, оҙаҡ тотто. Затлы был аяҡ кейеменә үҙе лә һоҡланып туя алмай ине. Шунан күн бирсәткәләр, эшләпә сығарҙы. Былары ла әлегәсә күрелгән тауар түгел ине. Һандығына тығылып, ҡулын кире күтәрҙе, йоҙроғон һуҙҙы.

– Бында нимә яталыр тип уйлайһығыҙ?

– Таштыр, – тип шаяртты Ҡәнзәфәр.

– Әүлиәһең, баш полковник. Тик юлда аунағаны түгел, аҫылы! Ҡиммәтлеһе! Ер йөҙөндә һирәк осрай торғаны! – Сауҙагәр усын асты һәм өй эсенә нур һибелде. – Хаҡы күпмелер тип уйлайһығыҙ? Алты йөҙ һум! Аңлайһығыҙмы, алты йөҙ һум! Шундай ҙур бүләкте Павел Петровичтың әле күптән түгел генә өйләнгән бисәһе, йәғни батша Петр Федоровичтың килене тапшырырға ҡушты.

– Павел Петрович кем һуң? – тип һораны өй хужаһы, әлеге таштарҙан ҡарашын айыра алмайынса.

– Атаң башы, уның кемлеген белмәү ҙур гонаһ. Ул Петр Федоровичтың улы. Киләсәктә Рәсәй менән ул етәкселек итәсәк. Йәғни атаһы ҡартайып вафат булғас.

– Һандыҡты биклә. Теләһә ҡайҙа, теләһә кемгә һөйләп, күрһәтеп йөрөмә. Ауыҙыңды һыпырып ҡалыуың, үҙең билдәһеҙ юғалыуың ихтимал.

– Әйт, баш полковник, батша ҡайҙа? Малайының йомошон үтәү, уны күреп һөйләшеү миңә бик кәрәк.

– Ул Ырымбур эргәһендә торҙо. Шунда тар-мар ителде. Һуңынан биш кеше алып китте. Әлеге көндә ҡайҙа икәнлеген белмәйем.

– Ярҙам ит, баш полковник, өмөт һиндә. Мәңге рәхмәтле булырмын...

Ҡәнзәфәр аптыраушта ҡалды. Әгәр был сауҙагәр менән бәйләнә икән, бындағы мөһим эштәре туҡтап ҡаласаҡ, әгәр ҙә Пугачевҡа алып бармаһаң, ҡот осҡос хәл килеп тыуыур кеүек. Бәлки, бүләктәрҙән башҡа, был әҙәм күңелендә Петербургтан уҡ алып килгән, тик Пугачевтың үҙенә генә еткерергә тейешле мөһим, серле хәбәрҙәр яталыр?..

Ҡәнзәфәр, бөтә мәшәҡәттәрен артҡа ҡуйып, Долгополовты Пугачевтың үҙенә илтеп еткерергә кәрәк, тигән ҡарарға килде.

– Ат һатып алырға аҡсаң барҙыр бит? – тип һынаулы ҡараш ташланы Ржев тарафтарынан уҡ килгән әҙәмгә.

– Төшөнөп етмәнем. – Долгополов кеҫәһен ҡапшаны.

– Арба кәрәкмәй. Аңлайһыңмы, юлһыҙ ерҙәрҙән үтергә, тау, урман араларында йөрөргә, ҙур йылғаларҙы йөҙөп сығырға тура киләсәк. Төшөндөң?

– Ә ул ҡайҙа? Һандыҡ?

– Эҙләрбеҙ. Бүләктәреңде тоҡҡа һалырһың, кейемдәрең аҫтына йәшерерһең. Юлда янсыҡ та ауыр, ти. Иң кәрәкле нәмәләр генә булырға тейеш.

– Шулай тиһең икән, мин күнәм.

– Бар, әйберҙәреңде ҡараштыр, – тип Ҡәнзәфәр сауҙагәргә сығып торорға ҡушты. Ишек ябылғас, Мансурҙың ҡолағына үрелә бирҙе. – Балаларыңды ҡара. Интеккәндәрҙер. Былай итербеҙ: Әңгәсәк ауылы тирәһенә тиклем иртән иртүк беҙҙе оҙатып ҡуйырһың. Ағиҙелдең уң яғына сығырға кәмә табылыр бит? Был әҙәмде Борайға тиклем булһа ла еткерергә тура килер. Петербургтан уҡ, ти бит. Отряд йыяһың. Форсат сығыу менән ҡағылырмын. Борайға турараҡ юл нисегерәк булыр?

– Әңгәсәктән Салҡаҡҡа сығырға. Унда тиклем барырға тура килгәйне бер заман. Урман да урман, ауылдар юҡ. Хәтерем яңылышмаһа, Салҡаҡтан Борайға утыҙ саҡрым тирәһе шикелле. Кәмәгә килгәндә инде, әңгәсәктәр балыҡсылар бит,

һатырға ла тоталар. Унда Иван Тимашевтың араҡы ҡыуыу заводы. Утҡа осорлоҡ. Араҡыға халыҡтың башын әйләндереп алдап яталар. Шайтан һейҙегенең киләсәктә һәләкәткә илтеүе ихтимал. Яҙалаусыларҙан да ҡурҡынысыраҡ был зәхмәтте сығарған заводтарҙы ҡайҙа осрай, шунда ояһын туҙҙырырға кәрәк.

* * *

Үҙҙәренә йән биргән шишмәләре әллә ни алыҫ та булмаған Шүлиә, Ҡаудыяҙ йылғалары ҡушылған тамаҡта урынлашҡан унлап ҡына өйҙән торған Салҡаҡты үткәс, Ҡарабай тигән ауылға тап булынды. Ул ҙур күренде. Бында фетнәселәр ставкаһы икән. Отрядтар шунда йыйылған, үҙҙәрен тәртипкә килтерә, әҙерлектәр алып бара, ти.

Ҡәнзәфәр атын үләнгә ҡушты ла, ҡарама төбөндә ултырып, аяҡтарын ял иттереү өсөн итектәрен һалды. Күп ваҡыт та үтмәҫтән, уның эргәһенә йөҙө ҡояшҡа янған, етди ҡарашлы, урта буйлы кеше килеп туҡтаны.

– Арыҫлан Ранғолов, – тине ул өҙөп кенә.

– Ҡәнзәфәр Усаев.

– Шулаймы! Күп ишетергә тура килде. Таныш булайыҡ. – Ранғолов ҡулын һуҙҙы. – Уса юлының Ҡыйғаҙы ауылынан. Йөҙ башлығы. Полковник. Күптән түгел генә Петр Федорович эргәһенә барғанһың икән.

– Бөтә хәбәр һиндә, күрәһең. Хәлдәр нисек?

– Һуғышабыҙ. Бөрө тирәһендә секунд-майор Дуве менән яман ҡаты ауыр бәрелештәр булды. Юғалтыуҙар күп.

– Эйе, һуғыш юғалтыуһыҙ булмай. Таныш нәмә. – Ҡәнзәфәр итектәрен кейеп, тороп баҫты. – Борай алыҫмы?

– Егерме саҡрым тирәһе. Әйткәндәй, кисә генә Салауаттан хат алдым. Теләйһең икән, таныш. – Арыҫлан кеҫәһенән бер нисәгә бөкләнгән ҡалын ҡағыҙ сығарҙы.

*«Старшина Буләк Яҡуповҡа, атаман Әлетдин Фләковҡа, старшина Арыҫлан Ранғоловҡа.*

*Әбделкәрим Айытов арҡыры ебәргән рапорттарығыҙҙы алдым.*

*Петр Федоровичтың туғыҙ йөҙ кеше менән Әй йылғаһы буйына килеүе хаҡында белдерәм. Гусарҙар менән булған ике тапҡыр һуғышта тегеләрҙең күптәре үлтерелде, бик аҙы ҡасты.*

*Һеҙгә ебәрелгән командирҙарҙы тыңларға һәм дошманға ҡаршы ҡаҡшамаҫ йөрәктәрегеҙ менән ҡаты торорға бойорола.*

*Июнь айының алтынсы көнө, 1774 йыл.*

*Баш полковник Салауат Юлаев.*

*Һеҙгә барыу мөмкин түгел, Көңгөргә киттек.*

*Ошоно тапшырыусы иптәше менән Әбделкәрим Айытовҡа туҡтап тормаҫлыҡ пар атлы ылау бирегеҙ».*

Ҡәнзәфәр үҙе лә ошондай йөкмәткеле хаттарҙы күп яҙҙы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, элемтәселәрҙең ҡайһы береһе юлда хыянатсылар ҡулына эләгеп, язаға юлыҡты. Тик нисек кенә ауыр, ғүмер өсөн ҡурҡыныс булмаһын, хаттар, бойороҡтар, Яңы батша указдары, манифестары тейешле урындарға, тейешле кешеләргә үҙ ваҡытында еткерелә торҙо.

Хатты тотоп уйға ҡалған Ҡәнзәфәр әкрен генә һөйләнеп ҡуйҙы.

– Салауат, әлегә килә алмайым, тигән, тимәк Пугачев эргәһендә булыу, уның армияһын нығытыу өсөн ярҙам итеү кәрәк. Көңгөр тарафтарында ла хәлдәр ҡатмарлы. Тимәк, улар Көңгөргә ҡарай киткән. Ниңә Көңгөргә? Ниңә көс, ваҡыт әрәм итергә? Ҡазанға, тигәйне бит... – Нимәнелер ҡапыл ғына иҫенә төшөргәндәй,

башын күтәрҙе, туп-тура Ранғоловҡа баҡты. – Оҙатырға үҙең ныҡ белгән ун биш кешеңде бир. Шулар менән әйләнеп ҡайтырға тырышырмын. – Сиҙәмгә һуҙылып ятҡан Долгополовҡа ымланы. – Мөһим кеше. Уны тиҙ арала батшабыҙға еткерергә кәрәк.

– Тәүҙә тамаҡ ялғайыҡ.

– Ашығам.

– Ашау эш ҡалдырмай. Борайҙан Балтасҡамы?

– Күҙ күрер. Ул тарафтарҙы һәйбәт беләм. Күп йөрөлдө...

– Аттарҙың бөтәһе лә көр. Үлән шәп, эш юҡ тигәндәй, ял иттерәбеҙ. Ә һеҙгә тәғәйенләнгәндәрен Ҡайынлыҡ ауылынан килтерҙеләр. Бер өйөр шунда байтаҡтан йөрөп ята. Егеттәр ҙә һыналған, Бөрө эргәһендәге яуҙа ҡатнашҡандары. Хәйерле юл, баш полковник. – Арыҫлан Ҡәнзәфәрҙең ҡулын ныҡ ҡына ҡыҫты. Долгополовҡа иһә, йә ярамаҫ, килешеп бөтмәҫ, тигәндәй, башын ғына ҡаҡты. – Салауатҡа сәләмебеҙҙе тапшыр. Ныҡ торалар, тип әйт.

– Мин дә әйтәм, Арыҫлан, әҙерләнегеҙ. Һеҙҙең поход Бөрөлә генә туҡтап ҡалмайынса, Өфөгә үк етер. Башҡа яҡтарҙан да һөжүм әҙерләнә. Бергәләшеп ҡуҙғалырбыҙ, Аллаһ бойорһа...

Ҡурҡыныс булғанлыҡтан, әлеге сәфәр оҙаҡҡа һуҙылды, сөнки һәр урында туҡтала-туҡтала, төрлө ҡиәфәткә кереп, ҡайҙа кем барлығын, кем йөрөүен ныҡлап белергә, тик шунан һуң ғына юлды дауам итергә кәрәк ине.

Ҡәнзәфәр, үҙенән дә бигерәк, Долгополовтың башы өсөн хафаланды. Әллә дөрөҫ, әллә түгел, бер Хоҙайға мәғлүм, ҡунаҡ бик алыҫтан – Рәсәйҙең баш ҡалаһынан уҡ бит. Етмәһә, Әбей батшаның ейәне атаһына бүләк ебәргән.

Тик ике аҙнанан ашыу ваҡыт үткәс кенә Пугачев туҡтаған Уса ҡәлғәһе тирәһенә барып етергә насип булды. Салауат иһә Усаны штурмлауҙа ҡатнаша, дөрөҫөрәге, ғәскәрҙәр менән етәкселек итә икән. Ихтилалсыларҙың үҙҙәре теләп бирелергә саҡырыуын ҡәлғә эсендәгеләр ҡолаҡтарына элергә лә теләмәй, ти. Шуға күрә унда үлемесле һуғыш дауам итә икән.

Ҡәнзәфәрҙең килеүенә Пугачев, әлбиттә, аптыраны. Ул шунда уҡ:

– Нимә булды?! – тип үҙе ҡаршы атланы. – Бәләгә тарыныңмы әллә?

– Һис юҡ, хөрмәтле батшам Петр Федорович, көтмәгәндә икенсе бер мәсьәлә килеп тыуҙы. – Ҡәнзәфәр Долгополовты ҡайҙа, нисек осратыуын, ни өсөн үҙе килеүен һөйләп аңлатты.

Пугачев түбәһенә таштар һибелгән ҡалҡыулыҡта уйланып хәтһеҙ ваҡыт йөрөнө.

– Ниндәй Павел Петрович? Уның барын-юғын Перфильев ниңә миңә һөйләмәгән, ниңә мине иҫкәртмәгән? – тип һөйләнде ул, һаҡал-мыйығын һыпырғылап. – Петр батшаның балалары булғанмы? Булһа, нисәү? – Ҡәнзәфәр эргәһенә килеп баҫты. Сәнсеп ҡараны. – Ҡоралы бармы?

– Юҡ, – тип өҙөп әйтте Ҡәнзәфәр. – Бәләкәй бысағы бар ине, үҙемә алдым.

– Килтерегеҙ! – Пугачев палаткаһына инеп китте.

Долгополов ингәндә, ул ебәк халатын кейеп келәм өҫтөндә ултыра ине. Сауҙагәр Пугачевты күреү менән баш эйеп, уның ҡул һыртын үпте.

– Һин ниндәй кеше? Ҡайҙанһың? Кемгә, ниңә килдең? – Яңы батша кереүсенән ҡыҫҡырып һораны.

Тупаҫ мөғәмәләне көтмәгән Долгополов ҡаушап ҡалды. Һүҙен нимәнән башларға аптыраны.

– Батша ғәли йәнәптәре, Һеҙҙең улығыҙ, бөйөк принц бүләк ебәргәйне, ҡабул итһәгеҙ ине.

– Ә ниңә ул үҙе килмәне? Ниңә, ҡартлас, үҙе килмәне?

– Хәле шәптән түгел, тинеләр.

– Шулай ҙа булһын, ти. Ҡана, күрһәт бүләктәреңде.

– Бына улар, – сауҙагәр күлдәк иҙеүенән, салбар кеҫәләренән әйберҙәр сығара башланы. – Итек, эшләпә, бирсәткә. Быныһы – ҡиммәтле таш. Алты йөҙ һумлыҡ.

– Хаҡын ниңә әйтәһең? Хаҡы билдәле булғас, бүләк буламы ни? Ал кире.

– Юҡ, юҡ, рәхмәтле батшам, ғәфү итә күрегеҙ мин диуананы, ғәҙәтемә ингән. Мин сауҙагәр бит. Әйтерһең, телемдән тарттылар, ысҡынды.

– Таш та унытҡымы?

– Юҡ, киленегеҙҙән. Ул үтенеп һораны.

– Өйләндеме ни?

– Йәрәштеләр. Немка.

– Немка? Шуларҙан башҡа кәнтәйҙәр юҡтыр шул. Исеме нисек? Минән ҡурҡалармы?

– Исеме Наталья Алексеевна. Нисек инде һеҙҙән, ғәли йәнәптәре, ҡурҡмаһындар, ти. Әлбиттә, ҡурҡалар. Ә мин Һеҙҙе күптән беләм. Рамбовта сағығыҙҙа һоло менән тәьмин иттем...

– Әлегә сығып тор. Старшиналарҙы йыйығыҙ! Ә һин, Усаев, эргәмә ултыр.

Палаткаға берәм-һәрәм старшиналар инә башланы. Улар араһында Илсеғол, Ишмен Этҡоловтар, Иван Белобородов, атаман Андрей Афанасьев, Хәрби коллегия ағзаһы генерал-поручик Иван Творогов һәм башҡалар бар ине.

– Күрәһегеҙме, минең малай атаһына ниндәй ҡиммәтле бүләктәр ебәргән! – тип Пугачев итектәрҙе юғары күтәрҙе. – Алтын ептәр менән теккәндәр. – Ниңәлер яҡын, ышаныслы дуҫы генерал-аншеф Афанасий Перфильевҡа күҙ ҡыҫты. – Ҡатыным Катерина ла онотмай. Итек тә бүләк, энә лә бүләк. Биргәндең битенә төкөрмәйҙәр. – Бүләктәрҙе ситкә этәрҙе. – Әфәнделәр, тулыһынса ҡарарға килдем: Көңгөргә иғтибар итеп тормай, Ҡазанға юлланабыҙ. Юл ыңғай Уса ҡәлғәһен туҙҙырырбыҙ. Ә был сауҙагәрҙе күҙҙән ысҡындырмағыҙ. – Твороговҡа ҡараны. – Иван Александрович, Ҡәнзәфәр Усаевҡа Юлаусы грамотаһы яҙ...

Пугачев эргәһенән сыҡҡас, Ҡәнзәфәр Белобородовты ҡосаҡлап алды.

– Сәләмәтлектәр нисек, Иван Наумович?

– Шөкөр, Усаевич, ихтилал күтәрелмәһә, аяҡҡа зарланып ятылыр ине. Әле ни Уралды дер һелкетеп йөрөлдө. Үҙең, ғаиләң?

– Ғаилә тигәндән... – Ҡәнзәфәрҙең йөҙөнә моңһоулыҡ шәүләһе төштө. – Өйҙә булған юҡ. Малайҙар үҫә. Йәл, уларҙы һөйөп ҡалырға ине лә бит. Ҡатын да ирле көйө етем тигәндәй йәшәй...

– Бөтәһе лә ваҡытлыса, Ҡәнзәфәр, оҙаҡламай бөтәһе тамамланыр, тип уйлайым. Һинең Боҙаяҙ, минең Богородское ауылдары урамдарында ла байрам булыр.

– Федот Елисеев ҡыҙы ни хәлдә?

– Минең Ненилде әйтәһеңме? Сүриәң яҙмышы. Күрше Алтынлы аша нисә тапҡыр үтергә тура килде, ә ауылыма ҡағылыу түгел, күҙ һалып та китә алманым. Иң мөһиме, бригадир, иҫән булайыҡ, ҡалғанын, кеҫәң тишек икән, бурысҡа алып торорға мөмкин, ә сәләмәтлек алтынға ла һатылмай.

Улар ҡайҙарҙа, ниндәй бурыстар башҡарып йөрөүҙәре, кемдәр менән һуғышыуҙары хаҡында һөйләшеп торҙо. Иван Кузнецовты ла хәтергә алдылар. Теге саҡта Көңгөрҙө штурмлауҙарын, Кузнецовтың Ҡәнзәфәрҙе ҡулға алып Өфөгә оҙатыуын иҫкә төшөрҙөләр.

– Эйе, Иван йәл, шәп командир булып етешер ине. Баҡалы тирәһендә һәләк булған икән. Ул ҡәлғә ҡайһы тирәлә һуң? – тип Белобородов Табын казагы хаҡында күберәк ишетергә теләүен белдерҙе.

– Баҡалы Башҡортостандың көнбайыш сигендә. Артабан – Татарстан, Нуғайбәк ҡәлғәһе.

– Күҙ алдына килтерә алмайым, үпкәләмә. Сало ашарға өйрәнмәнеңме әле? Йәй көнө шәп, боҙолмай.

Ҡәнзәфәр яуап урынына ҡысҡырып көлдө.

Икенсе көндө Ҡәнзәфәрҙең ҡулына грамота тотторҙолар. Унда шулай яҙылғайны:

*«Ғәли йәнәптәре, император Петр Федорович Өсөнсө батша, бөтә Рәсәйҙең сикләнмәгән хакимы һәм башҡалар, һәм башҡалар, һәм башҡалар указы буйынса*

*Ошоно күрһәткән мишәр баш полковнигы Ҡәнзәфәр Усаевҡа һәм уның янындағы дүрт кешенене ғәли йәнәптәренең Өфө эргәһендә торған армияһына иркен үткәрергә һәм һис һүҙһеҙ пар атлы алты ылау бирергә.*

*Июндең 23-сө көнө, 1774 йыл.*

*Иван Творогов.*

*Сәркәтип Алексей Дубровский.*

*Повытчик Герасим Степанов».*

Башҡарыласаҡ мөҡәддәс бурыс элеккесә: тыныс йәшәп ятыусы халыҡты иҙеүселәргә ҡаршы ҡоторторға, фетнә күтәрергә, хыянатсыларҙы, аяҡ салыусыларҙы язаларға, төрлө юлдарҙан кеше йыйырға. Иң мөһиме – Өфөнө яуларға, ҡоҙғон ояһын туҙҙырырға.

Ҡәнзәфәр, Пугачев менән хушлашҡан булһа ла, уның эргәһенә ҡабат инергә баҙнат итте. Тик батша, уны күрһә лә, өндәшмәне, хатта бригадирының ҡабаттан алдына баҫыуына риза ла түгел ине шикелле.

– Алыҫтан килгәнемде беләһең, падишаһым, шундай үтенесем бар: Усаға барып, Салауатты күреп килергә рөхсәт итһәң икән?

– Ҡунаҡҡа йөрөшөр саҡ түгел. – Пугачев Ҡәнзәфәргә боролманы. – Һуғышта ул. Уса бынан ҡырҡ саҡрымда. Ваҡыт әрәм итеп торма, юлыңда бул. Ярай кергәнһең, илле һум аҡса ал. – Бригадирына ҡарай ике аҙым яһаны. – Көрәштәш дуҫтарыңа сәләм күндер. Усаев, был сауҙагәрҙе ниңә алып килдең? – Батша һынаулы ҡараны.

– Ул минән башҡа ла һине табыр ине. Дөрөҫөн әйткәндә, йә берәй шымсылыр, шпиондыр, тип шикләндем. Әллә ниндәй хыянатсылар йоғонтоһона бирелеүе ихтимал. Ставкаға үтеп инерҙәр. Аллаһ, һаҡланғанды һаҡлармын, тигән.

Пугачевтың ауыҙы ситенә йылмайыу ҡунһа ла, күҙҙәре шул килеш, етди ҡалды.

– Йә, ярай, Усаев, Салауат дуҫың менән осрашырһың әле, оҙаҡламай ул да Башҡортостанға юлланыр. Иҫән йөрө.

Палатканан сығыу менән Ҡәнзәфәр Долгополовҡа тап булды. Ул Ҡарабайҙан уҡ оҙатып килеүселәргә нимәлер аңлатырға тырыша ине. Сауҙагәр эргәһендә тормаҫҡа уйлағайны, теге үҙе өндәште:

– Әгәр Мансурҙы осратһаң, Усаев, минән сәләм әйт. Ихлас мужик. Петр Федорович менән күрештереү өсөн тағын бер тапҡыр рәхмәт. Кем белә, бәлки, ҡабаттан осрашырбыҙ әле. Беҙ тауҙар түгел бит.

Ҡәнзәфәр шәкәр йөҙлө был бәндәгә һүҙ ҡушманы. Егеттәренә үҙенә эйәрергә ымланы ла лагерь ситенә ҡарай атланы. Ул хәҙер тик Дим, Ыҡ йылғалары тарафтарын ғына күҙ алдына килтерергә теләне. Команда тупларға ашығырға кәрәк. Йәй ҡыҫҡа, шуға күрә уйланған эштәрҙең ҙурҙарын әле башҡарып өлгөрөү фарыз.

Боҙаяҙ муллаһы юлға ашыҡты. Уға Өршәк, Дим, Сәрмәсән, Ыҡ йылғалары буйындағы Өршәк-Меңле, Мирҡәт-Мең, Ҡырҡкүл-Мең, Ҡаршын, Дыуанай,

Ҡанлы, Шишмә, Йылан, Бүләр, Ҡырғыҙ, башҡа волостарҙы ҡыҙырып йөрөргә кәрәк ине. Ваҡыт көтмәй, июль айы килеп етте.

Башҡортостандың ошо хәлдә булыуына, йәғни унда баш күтәреүселәр үҙҙәрен хужа итеп тойоуына батша сатраптары бармаҡ аша ғына ҡарап ятманы, әлбиттә. Өфө, уның тирә-йүне Петербург өсөн илаһи ҙур дары мискәһен хәтерләтеүен тейешенсә аңлайҙар ине. Юҡҡа ғынамы ни генерал Щербатов дүртенсе июлдә Рейнсдорпҡа, бөтә бәлә, яуызлыҡ Ҡазанға табан Ырымбур губернаһынан типкен кеүек килә, тип яҙған. Ул шулай уҡ Голицынға Өфөгә йәһәтерәк барып етергә, Ағиҙелде таҙартырға, Ырымбур – Өфө араһындағы коммуникацияны тергеҙергә бойороҡ бирә.

Түҙеп торорлоҡ хәлме ни, шунан бер генә ай элек Ҡаранай үҙе кеүек һигеҙ йөҙ баш киҫәрҙе йыйып, Ашҡаҙар, Стәрлетамаҡ ауылдарын яндырған һәм пристанде ҡамауҙа тота.

Июль уртаһында йәшерен комиссияларға етәкселек иткән Потемкин ашығыс рәүештә баш башҡорт старшинаһы Шәрип Кейеков менән мишәр старшинаһы Мөҡсин Әбдесәләмовты таптыртып килтертә.

– Һеҙҙе, дуҫтар, ихлас хеҙмәт итеүегеҙ өсөн Михельсон маҡтап торҙо. Шуны иҫәпкә алып, Петербургтан өйөгөҙгә ҡайтарып ебәрәм. – Әбей батшаның яҡындарынан иҫәпләнгән генералдың сәйер һүҙҙәрен ишетеп, старшиналар ғәжәпләнде. Улар баш күтәреүсе милләттәштәренә ҡаршы янып, ярһып һуғышалар ҙа инде. – Ә һеҙ аптырамағыҙ, – тип һүҙен дауам итте Павел Сергеевич. – Яңылыш юлға баҫҡан яҡташтарығыҙҙы өгөтләгеҙ, хаталарын аңлатығыҙ, тынысландырығыҙ. Яуызлыҡтар ҡылыуҙарын туҡтатһындар. Баш эйеп килеүселәрҙе ярлыҡайым. Әгәр мине тыңламайҙар икән, үҙҙәренә үпкәләрҙәр. Юлығыҙҙа булығыҙ.

Мөҡсин менән Шәрип бөгөлә алған тиклем баш эйеп, арттары менән шар асыҡ бейек, матур ишектән йөкмәтелгән бурысты үтәргә сығып китте. Ярай, халыҡ – бер хәл, ә бына Әбей батша яғына старшиналарҙы нисек ҡаратырға?

Ашҡаҙар тамағында Голицын корпусы ғәскәренә көтмәгәндә өс йөҙ кешенән торған фетнәселәр отряды һөжүм итте. Ләкин ҡот осҡос һуғыш баш күтәреүселәрҙе ҡыйратыу менән тамамланды. Күптәр ҡотолоу өсөн, аттарын алып, Ағиҙелгә ташланды. Язалаусылар ҡыҙыҡ өсөн ундайҙарҙың башына тейҙерергә ярышып таш ебәрә башланы. Эҫелә янған хайуандарҙың күбеһе иһә хәлһеҙләнеп һыу төбөнә китте. Тиҫтәнән артыҡ кеше әсиргә төштө. Фажиғә хаҡындағы хәбәрҙе ишеткән аумаҡай старшиналар иһә баш эйергә ашыҡты. Алдан уйлап тормай отрядтарын регуляр ғәскәрҙе атакаларға бойорған һәм еңелеүгә юлыҡҡан старшиналар Әлибай Мырҙағолов, Ибраһим Мерәҫов, Ҡәйеп Зиәмбәтов, Илсеғол Таймасов, Сәйет Мәмбәтовтар, ҡоттары осоп, язалаусылар яғына сыҡты.

Һатлыҡ йәндәр хаҡындағы хәбәрҙе ишеткәс, Ҡәнзәфәр яҡын ярҙамсыларына:

– Хөкүмәт ғәскәрҙәрен ҡыйратыу, Өфөгә һөжүм итеү бурыстарына өсөнсө бурыс өҫтәлде: быныһы – Ҡыҙрас Муллаҡаевты юҡ итеү. Был мәлғүн Әбей батшаның теләһә ҡайһы генералдарынан да ҡурҡынысыраҡ. Уны тоторға! – тип бойорҙо.

Алдан һөйләшеү буйынса, Өфөнө штурмлау һәм уны алыу өсөн төньяҡтан Салауат Юлаев, көньяҡтан Ҡасҡын Һамаров, төньяҡ-көнбайыштан Туҡтамыш Ишбулатов килергә тейеш. Ә Ҡәнзәфәр үҙе Ҡунаҡҡол Атйетәров һәм Ибраш Уразбахтиндар менән көньяҡ-көнбайыштан барасаҡ. Уларға ҡушылырға Һеләүһен Кинзин ашыға. Ә инде Ҡаранай Моратов, Ҡанбулат Моратовтың отрядтары Өфөнән илле-алтмыш саҡрымда ғына тора.

Хыянатсыларҙы иҫәпкә алмағанда, бөтәһе лә уйланылғанса эшләнә шикелле.

Тик дошман быҒаса булмаған активлығын күрһәтә. Полковник Петр Шепелев ғәскәрҙәре Ырымбур менән Өфө араһында даими постар ҡуйырға ынтыла. Өфө гарнизонына ярҙам итеү өсөн, командалыҡ иткән корпусын алып, подполковник Иван Рылеев килеп етте. Полковник Александр Якубович Өфөнән Бөгөлмәгә, Минзәләгә тиклем араны үҙ контроленә алды. Фрейманға корпусын Бөгөлсәндән Ыҡ йылғаһының үрге тирәһенә ҡаҙәр ергә урынлаштырырға бойороҡ бирелде.

Эйе, баш күтәреүселәрҙең хәле киҫкенләшә төштө. Өфөнө ҡамарға йыйынған Ҡәнзәфәрҙәр үҙҙәре солғанышҡа дусар булды.

***

Халыҡ ураҡҡа төштө. Йыл ҡоро килеү сәбәпле, арыштың һабағы хәлһеҙ, башағындағы бөртөгө лә өс-дүрт кенә. Ярай әле, дауыл, ғәрәсәт күтәрелмәй, улай була ҡалһа, етешкәне лә буталанып, ергә түшәлер ине. Һәр кеше сәскәнен йыйырға ынтыла. Ә бит быйылғы үтә ауыр, мәшәҡәтле эште башҡарыу ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, бала-саға елкәһендә.

Шундай көндәрҙең береһендә Ҡәнзәфәргә Әлибайҙан хат килтерҙеләр. Ул, урып-йыйыу осоро булғанлыҡтан, көрәште туҡтатып торорға саҡыра. Уйы, бер ҡараһаң, изгелер ҙә, әммә ләкин дошман өҫтөңә ябырылып барғанда, генерал әйтмешләй, коммуникацияларҙы тергеҙгәндә халыҡты таратырғамы? Ул ғынамы, Әбей батша хөкүмәте генерал Голицынға, полковник Шепелевҡа ашығыс рәүештә провиант, фураж тупларға бойора. Туплау юлы таныш, бер генә: халыҡтың әле йыя башлаған игенен тартып алыу, талау, бәндәләрҙе ас ҡалдырыу...

Мырҙағолов ебәргән сапҡын Ҡәнзәфәрҙән яуап көттө. Ҡалҡыулыҡта баҫып торған Ҡәнзәфәр алыҫҡа-алыҫҡа ҡарап уйланып торҙо. Кинйә абыҙҙың Пугачев менән тәүге таныштырыуы, Ырымбур, Верхнее Озеро, Көңгөр, шул тирәләге ҡәлғәләр, заводтар өсөн барған үлемесле алыштар, Зубово эргәһендәге ҡан ҡойоу – бөтәһе лә секунд эсендә күңеле аша үтте. Суҡындырылған һәм үҙ диненә кире ҡайтып бер генә көн йәшәп, Ачит ҡәлғәһе коменданты капитан Воинов атып үлтергән Таһирйән күҙ алдына килде. Ниндәй батыр, изге йән...

– Яуап хаты булырмы? – тип ярым тауыш менән генә һорап ҡуйҙы сапҡын.

– Хыянатсыға һүҙ-ҡағыҙ әрәм. – Ҡәнзәфәр түбәнгә – әрәмәләге кешеләр яғына атланы. – Нисек ишетһәң, шулай әйт.

Ул Атйетәровты, Уразбахтинды ситкәрәк саҡырҙы. Йоҡаҡ киндер күлдәктән инеләр, баштарында түбәтәй.

– Бына нимә, егеттәр, халыҡтан игенен тартып алыу бара. Хатта оҙон көн буйы шыбағас менән ашлыҡ һуғырға мәжбүрләйҙәр. Ашыҡтыралар. Ҡырып-һепереп, елгә тотторол, тоҡтарға тейәтәләр. Ылауҙар Өфөгә, Табынға, Стәрлетамаҡҡа, Бөгөлсәнгә, Ырымбурға юллана. Әлегә шул бурыс: был ояттһыҙлыҡҡа сик ҡуйырға! Халыҡҡа ярҙам итергә, ылауҙарҙың юлын бүлергә кәрәк. Аблай ауылынан үткәндәре Сәрмәсән аша Баҡай эргәһендә сыға икән. Ибраш, шул төбәк һиңә. Өршәк тирәһе, атап әйткәндә, Төрөмбәт күперенә, Ҡунаҡкол, һин яуап бирәһең. Дим аша юлдарҙы, Никифар ауылы эргәһендәге сығыу урынын үҙемә алам. Стәрлегә шунан күп йөрөйҙәр. Һалдаттарҙы, уларға ялланған урындағы кешеләрҙе аттары, арбалары, ҡоралдары менән үҙебеҙҙең ҡулға төшөрөргә! Ике төрлө юл юҡ: йә – беҙ, йә – улар.

Никифарҙан ебәргән үтенес ҡағыҙы ла Ҡәнзәфәрҙә һаҡлана. Бына ул:

*«Июль, 1774 йыл. Ғәли йәнәптәре, Баш полковник Ҡәнзәфәр Усаев әфәндегә ъаризнамә. Беҙ фәҡирегеҙ һеҙгә хәлебеҙҙе хәбәр итәбеҙ. Уҙъан октябрҙән регуляр һәм регуляр булмаъан полктарҙы, шулай уҡ аттарын да тәъмин иттек. Кәрәк*

*икән, ҡулыбыҙҙағы батша квитанцияларын тикшерә алаһығыҙ. Русса ла, татарса ла яҙылғандары бик күп.*

*Беҙ ете юл сатында урынлашҡанбыҙ. Беҙҙә ярлыларҙың, фәҡирҙәрҙең самаһыҙ күп икәнлеге һеҙгә, ғәли йәнәптәргә, билдәле. Оло юлды, йылға аша сығыу урынын һаҡлау беҙ хәйерселәргә йөкмәтелгән.*

*Беҙ никифарҙарҙы походтан ҡотҡарыуығыҙҙы үтенеп һорайбыҙ.*

*Һеҙгә, ғәли йәнәптәргә, бүләккә өс һум аҡса бирәбеҙ».*

– Эй, был Рәсәй, бахыр бәндәнән ришүәт алыуҙы ҡанына һеңдергән, дауаланмай торған сиргә әйләндергән. Был йоғошло ауырыуҙы юҡҡа сығарырға кәрәк! Әгәр ҙә ришүәт алыусы билдәле була икән, ыштанын төшөрөп, халыҡ алдында ҡайыш сыбыртҡы менән ярырға! Мөлкәтенән мәхрүм итергә! Йоҙроҡ күрһәтеп, бармаҡ һелкеп әрләүҙән мәғәнә юҡ.

Ул әле шул үтенес яҙыусылар эргәһенә китеп бара.

Димгә яҡын ғына урынлашҡан Никифар ауылына килеп еткәс, Ҡәнзәфәр, тирә-йүнгә ныҡлап күҙ һалғас, отрядын көнсығыш яғындағы урманға йәшерергә булды. Йылғаның ике яғы ҡуйы әрәмәгә күмелһә лә, төньяҡтан килеүселәргә ҡалҡыулыҡтан бөтә нәмә ус төбөндә кеүек күренәсәк. Ылауҙар иһә шул яҡлап ағыласаҡ та. Шул да асыҡланды: хөкүмәттең ниндәйҙер офицеры кисә никифарҙарға иген әҙерләп торорға ҡушып, иртәгәһен, йәғни бөгөн ауылға ҡағылып китәсәктәрен белдергән. Әмере үтәлмәһә, ғәйеплеләрҙе язаға тарттырасаҡтар икән.

Ҡәнзәфәр илле кешеһен ауылда ҡалдырҙы. Улар өйҙәрҙә, аҙбар-ҡураларҙа йәшенеп торасаҡ. Кәрәк икән, сигнал булыу менән, урмандағылар ауылға, Дим аша сығыу урынына ябырыласаҡ. Шулай уҡ, сер асылмаһын өсөн, ауыл кешеләренә ситкә сығып йөрөүҙе тыйҙы. Уның уйынса, Бәләбәй, Асылыкүл тарафтарындағы, Өсән, Сәрмәсәндең юғары өлөшөндәге ауылдарҙан талап алынған ашлыҡ тейәлгән арбалар тап ошонан үтергә тейеш. Бүтәнсә йайлы урын юҡ. Ҡалҡыулыҡтан тирә-йүн һәйбәт күренә, сөнки сағыштырмаса тигеҙлек, тотошо менән урман да түгел. Инде айҙар буйы тамсы ла таммағас, юлдағы туҙан юғары күтәреләсәк. Бына шул ауыл эргәһендәге ҡалҡыулыҡта дүрт-биш малай туп һуғыу уйыны ойошторасаҡ та Никифарға килә торған юлды күҙәтәсәк. Офоҡта атлылар күрендеме, береһе шунда уҡ хәбәр менән «ҡунаҡтар»ға йүгерәсәк. Ҡалғандары уйнай бирә. Арбалыларҙың нисәүлеген белеүгә, икенсеһе ауылға саба...

Ҡәнзәфәр уйлап тапҡан «уйын» оҙаҡ көттөрмәне, малайҙарҙың береһе сәсәрҙәй булып ҡайтып та етте.

– Киләләр! – тине ул, саҡ һулыш алып, – күптәр, туҙан алыҫҡа һуҙыла.

Тиҙҙән икенсе малай йүгереп килде.

– Арбалылар алдына ҡайҙандыр күп һыбайлылар пәйҙә булды. – Ҡоласын йәйҙе үҫмер. – Бик күп. Тәүҙә арбалылар ғына күренгәйне. Былары һалдаттар шикелле.

Әлеге хәбәр Ҡәнзәфәрҙе һағайтты. Ниндәй һыбайлылар? Ылауҙы оҙатыусылар ун-ун биштән артмаҫ ине. Бәлки, былары Өфөгә юлланыусы айырым командалыр?..

Ул, хәлдең икенсе төҫ алыуынан шөбһәләнеп, илле кешеһенә ашығыс рәүештә Димдең уң яғына сығырға һәм урманда йәшенергә бойорҙо. Дошман күпергә кереүгә уны атакаларға. Ауыл осондағы урманда боҫоп тороусыларға ла ашығыс хәбәр ебәрелде: йылға буйына һыбайлылар килеп йыйылыуға уларға ташланырға. Иген тейәлгән ылауҙы таларға ауыл халҡы ярҙамлашырға тейеш.

Күпергә килеп еткән һыбайлылар, команда ла көтөп тормайынса, тиҙ үк йылға буйына тарала, аттарын сиҙәмгә ҡушырға, үҙҙәре иһә эҫенән ҡотолоп, бер аҙ

ял итергә уйланы. Хатта ҡайһы береһе ҡулдәген, итектәрен һалырға өлгөрҙө.

Шул саҡ ауылдың көнсығыш яғындағы урмандан яман тауыштар менән аҡырып һыбайлылар атылып сыҡты ла, күҙ асып йомғансы тигәндәй, Дим ярына килеп тә етте. Уларға өйҙәрҙә, аҙбар-ҡураларҙа йәшенеп ятҡан фетнәселәр ҡушылды. Был хәл шул тиклем көтөлмәгәндә һәм ҡапыл булды ки, ҡылысын күтәреп «Атака...» тип нимәлер ҡысҡырырға ла өлгөрмәгән аҡ күлдәкле әҙәм күкрәгенә ҡаҙалған уҡҡа тотонған килеш ергә тәгәрләне. Ул полковник Кожин тарафынан Бөгөлмәнән Өфөгә ебәрелгән отряд командиры булған икән.

Ләкин дошман көтөлгәнсә үк ҡаушап ҡалманы: һушына тиҙ килеп, ҡоралына тотондо. Атыу тауыштары яңғыраны. Өйрәтелгән һалдаттар икенсе атакаланыуҙан таралманы, теләһә ҡайҙа тороп йүгермәне, ә ярым ҡулса рәүешендә оборона ойошторҙолар. Был хәлде күреп, Ҡәнзәфәр крәҫтиәндәре аптыраны, ауылға табан сигенә башланы, сөнки пуля ямғырынан кешеләр көлтә кеүек ергә тәгәрләне. Ул ғына ла түгел, ҡалҡыулыҡ өҫтөндә икенсе төркөм күренде. Тимәк, дошман отряды бүленгән булған. Килеүселәр йылға буйында ниндәй алыш барғанын тиҙ үк төшөндө шикелле: ҡылыстарын болғай-болғай, яман аҡырышып иптәштәренә ярҙамға ташланды.

Фланг һуғышын ятраҡан Ҡәнзәфәр уң яҡлап тау битләүенән дошмандың артына ынтылды – тылынан һөжүм итеп, дошман иғтибарын төрлө яҡҡа йүнәлттерергә уйланы. Арғы яҡ урмандағыларға хәбәр бирҙерҙе. Ундағылар күпергә, йәғни был яҡҡа сығырға йүгерә башлағас, һуңынан килгән язалаусылар төркөмө ҡалҡыулыҡҡа ҡарай кире сапты. Улар, моғайын, үҙҙәрен уратылып алынғандарҙыр, тип уйлағандыр. Шул төркөмдәге ниндәйҙер офицер ҡысҡырып, был яҡҡа боролорға кәрәген белдерергә тырышты. Атын тыйып туҡтап-туҡтап аҡырһа ла, уны тыңларға теләмәнеләр, бәлки, биргән командаһын аңламағандарҙыр...

Никифар тирәһендәге һуғыш оҙаҡҡа һуҙылмаһа ла, һәләк булыусылар ифрат күп булды. Бигерәк тә Ҡәнзәфәр командаһы ҙур юғалтыу кисерҙе. Әсир төшкән дошман һалдаттарын, фетнәселәргә тоғролоҡло хеҙмәт итәсәктәренә ант иттергәс, командаһына ҡушты. Ҡасып киткән төркөмдөң кире килеп һөжүм итеүен булдырмаҫ өсөн, көндөҙ малайҙар күҙәткән ҡалҡыулыҡҡа һыбайлылар ебәреп, һаҡ ойошторҙо.

Ашығыс рәүештә мәйеттәрҙе ерләү башланды, сөнки эҫе йәй көнөндә был ауыр, изге эште ауыл халҡы ғына атҡарып сығырлыҡ түгел ине.

Никифарҙарға өс арба иген, яраланған аттарҙы биреп, дошмандың ҡалған ылауҙарын алып, Ҡәнзәфәр отряды Ыҫлаҡ, Торонтайыш ауылдарына ҡарай юлланырға ҡарар ҡылды. Былай иткәндә язалаусылар командаһына осрамаҫ төҫлө ине. Иң мөһиме, Сөн, Ыҡ йылғалары тарафтарына илтә торған төп юлға сығасаҡ. Уйы – Башҡортостандың көнбайышындағы ауылдарына йәһәтерәк барып етеп көслө команда туплау, уны ҡоралландырыу һәм Өфөнө алыу өсөн походҡа сығыу. Салауат, Ҡаранай, Ҡасҡын, Һеләүһендәр менән провинция ҡалаһында осрашасаҡтар...

Форсат табылһа икән, бер ыңғай мәҙрәсәһендә Батырша абыҙы белем алған Тайсоған ауылына ла күҙ һалып килергә булыр ине, сөнки Бөгөлмәнән йә иһә Нуғайбәктән бик үк алыҫ та түгел шикелле. Ә бит Ҡарышта дәрес биргәндә хәҙрәт Тайсоған мәҙрәсәһе хаҡында бик йыш телгә ала торғайны. Уҡыйым тип ҡайҙарҙан ҡайҙа килеп йөрөгән. Тик шуның өсөн генә лә ул Батыр исеменә лайыҡ. Әлегә былар тик хыялда ғына, сөнки ваҡыт тар, ваҡыт ашыҡтыра.

Биш көн тигәндә Ҡәнзәфәр Бәләбәй ауылын көнсығыш яҡлап урап үтте лә Ермолкино тигән сыуаш ауылынан алыҫ түгел соҡорға туҡталды. Урын бик йәтеш, сөнки тирә-йүнде ҡайын урманы ҡаплаған. Йәй уртаһында тигәндәй, нимә

эшләп сит ауылда ятмаҡ кәрәк. Иң мөһиме, хәүефһеҙлекте тәьмин итеү өсөн тәбиғәт ҡосағында ирektәге ҡош кеүекһең бит. Хәлдәр киҫкенләшә икән, яу ҡайтарырға, дошман менән алышырға, йәшенгән ереңдән һөжүм итергә уңайлы. Хәлдәр ҡатмарлана ҡалһа, урынды алмаштырырға, йыйылырға, үҙ-ара элемтә торорға яйлы. Бер һыҙғырыу етә.

Ҙур, бик ҙур Башҡортостан иле: төньяғына китһәң, һөңгөлә ғәскәр кеүек шыршылар баҫып тора, көньяҡҡа ынтылһаң, ҡылғанлы далалар, ә бында – көнбайышта, әйтерһең, ер өҫтө тик һылыу ҡайындар менән генә ҡапланған. Йондоҙло күктә ураҡты хәтерләтеп йәш ай балҡый. Был юлы ла ул салҡан төшөп тыумаған, тимәк, ямғырҙар булмаясаҡ. Башты әйләндерерлек саф һауаға һиҙелерлек кенә төтөн еҫе өҫтәлгән. Ваҡыт төнгә ауышыр мәл булһа ла, кешеләрҙең йөрөүе күренеп тора, шулай уҡ һөйләшкән тауыштар ҙа ишетелә.

Кемдеңдер:

– Ғаиләң, яҡындарың менән һәр саҡ иректә иркенләп йәшәһәң, ҡалай рәхәт булыр ине, – тип һөйләнеүе ишетелеп ҡалды.

– Ирек, сәләмәтлек кәрәк, әлбиттә. Улар бар икән, бөтәһен дә эшләргә, бөтәһенә лә ирешергә мөмкин. Ирек өсөн үлемесле көрәш бара ла инде...

– Усаев! – тигән тауыш Ҡәнзәфәрҙең уйҙарын бүлдерҙе.

– Кем һөрәнләй? Мин бында.

Командалағы ике һалдат ниндәйҙер ирҙе алып килде.

– Һин кем? Нимә кәрәк?

– Ауылда һине эҙләнек.

– Кемде?

– Исемен белмәйем. Башҡорт старшинаһы: юғарынан кисектергеһеҙ мөһим хәбәр бар, мотлаҡ Усаев кәрәк, осрашыу йәшерен, – тине.

– Ниндәйерәк кеше? Ҡиәфәте, йөҙө, башы?

– Мыйығы бар. Кейеме арыу.

– Үҙе менән күпме кешеһе бар?

– Икәүме, өсәүме генә.

– Мөһим икән – мөһим, кисектергеһеҙ икән – кисектергеһеҙ. Моғайын, минең командаға ҡушырға төркөм алып килгәндер. Йә Ҡаранай ебәргәндер. Әйҙә, күрәйек ул старшинаны, – тип һөйләнә-һөйләнә, Ҡәнзәфәр әлеге кешегә эйәрҙе. Ике һалдатына боролдо. – Минән ҡалмағыҙ. – Әкрен генә һорап ҡуйҙы: – Хәнйәрҙәрегеҙ бармы?

Ауыл ярым ҡараңғыла ултыра ине. Йоҡоһонан бүленергә теләмәйенсә генә, арыраҡ ихатала эт өрөп ҡуйҙы. Урам буш. Ҡапҡа төптәрендә бәйләүҙә торған аттар күренмәй. Ҡәнзәфәр иң тәүҙә шуларға иғтибар итте.

Саҡырып килгән әҙәм икенсе өйҙөң ишегенә яҡынайҙы һәм аяғы менән ҡағылып ҡына асты ла тик Ҡәнзәфәргә генә керергә ишара яһаны.

Урындыҡта ниндәйҙер ике кеше ултыра. Йөҙҙәре күренмәй ине. Мейес яғында ир, ҡатын. «Пата (бутҡа), пашлау (көлсә), уйран (май айраны)» һүҙҙәрен ишеткәс, “сыуаштар йәшәй икән” тип уйлап ҡуйҙы. Сыуаштар менән аралашырға тура килгәнлектән, Ҡәнзәфәр ул халыҡтың телен ярайһы уҡ аңлай ине. Ул ниңәлер Алмантай ауылындағы Шушпанды иҫенә төшөрҙө.

Хужа менән хужабикә тиҙ үк сығып китте.

– Кем саҡырҙы? – тип Ҡәнзәфәр алға атланы.

Яуап бирерҙән алда, урындыҡта ултырыусыларҙың береһе өҫтәлдәге шәмде тоҡандырҙы. Шунда уҡ ишектән дүрт кеше инде. Улар, өй бәләкәй булғанлыҡтан, Ҡәнзәфәргә терәлеп үк баҫты.

Томһа ғына булып таралған ҡыҙғылт яҡтылыҡта Ҡәнзәфәр Ҡыҙрас Муллаҡаевты таныны һәм килеп ҡапҡанлығын аңланы.

– Мин саҡыртҡайным, мин, бригадир Усаев. Иректә күп йөрөнөң.

– Хыянатсы икәнлегең билдәле. Инде, хәшәрәт, кешеләр менән һатыу итеү кеүек түбәнлеккә тәгәрләнеңме?

– Һәр кемдең үҙ шөғөлө, мулла. Ҡул-аяғын яҡшылап бәйләгеҙ. Ҡалыплағыҙ. Юғиһә, бик йылғыр бәндә. Заманында Мөҡсинде, Ишмөхәммәтте төп башына ултыртҡан кеше. Эйәреп килгән икәүһен дөмөктөрөгөҙ. Шулай, сотник, ялған батша Пугачевҡа хеҙмәтең тамам...

– Төкөрөк әрәм һин ҡәбәхәткә...

Ҡәнзәфәрҙе ҡаҡ арбаға һуҙып һалғас, кәүҙәһен арҡандар менән сорнап бөттөләр.

Илле һыбайлы оҙатыуында арба алға ҡуҙғалды. Юл Бөгөлмәгә ине.

Ҡәнзәфәрҙе Кожин канцелярияһына килтерҙеләр. Йорт тирәһендә һалдаттар күплегенә ғәжәпләнде ул. Моғайын, уны һаҡларға килтереп тултырғандарҙыр.

Ҡул-аяҡтарына бығау, муйынына ҡалып һалынған әҙәмгә ҡыҙыҡһынып ҡарайҙар ине. Тик был бисараның кем икәнлеген белмәнеләр, әлбиттә. Береһе хатта: «Беҙҙеке дезиртирлыҡ ҡылмағандыр бит?» – тип һорап ҡуйҙы. «Татар шикелле, фетнәселер», – тип һөйләнде икенсеһе...

Ләкин Ҡәнзәфәрҙең былар ҙа ҡайғыһы юҡ ине. Үҙен кемдәр көтөүе, ни рәүешле яуап аласаҡтары хаҡында уйланы. Бөгөлмәлә оҙаҡ тотмаҫтарҙыр, тик артабан ҡайһы ҡалаға оҙатырҙар? Өфөгәме? Әгәр ҙә унда икән, шәп булыр, уның ҡайҙалығын белеп, барыбер кемдәрҙер ярҙамға килер ине. Ҡайынлыҡта ҡалған командаһы нимә эшләр? Их, бер һыҙғырырға, үҙҙәрен аяҡҡа баҫтырырға. Юҡһа һиҙҙермәй генә барып, тар-мар итеп ташлауҙары мөмкин. Ниңә һуң әле шул тиклем ғәмһеҙлек күрһәтте? Нимә эшләп тоҙаҡҡа үҙе барып юлыҡты? Үҙе урынына хатта кемделер ҡалдырманы ла. Йәнәһе, ауыл яҡын, йәнәһе, тиҙ урап килер...

Эскә инергә ҡуштылар.

Ҡалын таҡтанан яһалған өҫтәл артында бейек яғалы мундир кейгән кеше ултыра ине. Ул, ҡул һырты менән бакенбардын һыпыра-һыпыра, башын инеүсегә борҙо. Оҙонса йөҙлө, бейек маңлайлы кеше ине был. Күкрәгендә ике - өс ордены, миҙалдары ла бар. Һуғыштарҙа ҡатнашҡандыр.

– Николай Кожин. Томск полкы командиры, – тип ярым ҡысҡырып үҙенең кемлеген белдерҙе полковник, ҡашын төйөрөп.

– Баш полковник – бригада генералы Усаев. – Ҡәнзәфәр эйәген күтәрҙе. – Һорау алыуму, әллә һөйләшеү генәме?

– Гәпләшергә ваҡыт юҡ. – Кожин ситтәрәк, тәҙрә эргәһендә ултырыусы писарына боролдо. – Яҙа бар. – Ҡәнзәфәргә ҡараны. – Кем һин, нисә йәш?

– Былай килешәйек, полковник әфәнде, һин хәрби кеше, минең ниндәй хәлгә юлығыуымды дөрөҫ аңларһың: минең ғаиләне Бәләбәйгә килтергәндәр икән, тәүҙә уларҙы күрәйем. Ҡатыныма, балаларыма ике-өс кенә һүҙ әйттерегеҙ. Мин Пруссия һуғышында ла булған кеше, шулай икән: донъя хәлен белеп булмай. Ә һуңынан бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләрмен. Алдашыуҙан Аллаһ һаҡлаһын. Килешәйек. Бала-саға түгелбеҙ.

Яуап урынына ошондай үтенес ишетеүенә Кожин аптырап ҡалды. Ниндәй оятһыҙлыҡ! Икенсе яҡтан ҡараһаң, былдай осраҡта кешелеклелек күрһәтеү ҙә кәрәк төҫлө. Кожинды капрал сағында хеҙмәт итергә Себергә ебәргәйнеләр. Йәш ине әле ул. Әлбиттә, үҙен походтарҙа күрһәтергә хыялланды. Ә бөгөн килеп – йүнле-башлы кешеләр ҙә йәшәмәгән тайгаға. Етмәһә әсәһе үлем түшәгендә ята. Командирының ул саҡтағы яуызлығына әле әрнешә. Сөнки әсәһен күреп килергә рөхсәт итмәне. Ә бит ваҡыт та бар ине.

«Һуғышмы, түгелме, һалдат сафта булырға тейеш!» – тип ҡырт киҫте командиры. Был хаҡта ҡабат һүҙ ҡуҙғатһа, гауптвахта менән яnaны.

Себергә киткәндең өсөнсө көнөндә әсәһе донъя ҡуйған. Хатта, яҙыуҙарына ҡарағанда, әсә кеше һуңғы һулышына тиклем улының исемен ҡабатлаған: «Коля! Колямды килтерегеҙ? Коленькамды күреп үлгем килә...»

Күрә алманы әсәһе һөйгән улын. Уның һуңғы үтенесенә Николайының офицеры ҡаршы килде.

Ҡәнзәфәрҙең әлеге мөрәжәғәте полковниктың алыҫта-алыҫта тороп ҡалған ваҡиғаны иҫенә төшөрҙө. Йөҙө таш кеүек ҡатһа ла, күҙҙәрендә мәрхәмәтлек нуры төҫмөрләнде.

– Ҡатының нимә эшләп Бәләбәйҙә йөрөй? – Кожин алдында ятҡан ҡалын ҡағыҙ киҫәген ситкә этте. Писарына сығып торорға ымланы. – Унда икәнлеген кем әйтте?

Ҡәнзәфәрҙең күңеле аша яуаптарҙың төрлөһө йәшен тиҙлегеләй үтте. Был хаҡта Бөгөлмә юлында Ҡыҙрас әйтте. Ул, әлбиттә, шатландырыу хәбәре итеп түгел, ә тотҡононоң йөрәген әрнетер өсөн ысҡындырҙы. Уның уйынса, дошманды төрлөсә мыҫҡылларға, кәмһетергә, әрнетергә кәрәк, шул сағында ғына ул бөгөлөр, һыныр, теҙләнер.

– Муллаҡаевтан ишеттем. – «Дөрөҫөн әйтеп, саҡ ҡына булһа ла Ҡыҙрастың үҙенә бәлә килтереп булмаҫмы? – тип уйланы Ҡәнзәфәр. – Бындай хәлдә тик шул ғына мөмкиндер».

– Ниңә әйтте?

– Башыма һыйҙыра алмайым. Моғайын, «Тик һин ҡатыныңды күрә алмаясаҡһың» тип мәсхәрә итергә уйлағандыр. Беләм мин уны, яуызлығының сиге юҡ. Бөгөн мине һатһа, ул иманһыҙ, иртәгә һеҙҙе тотоп бирәсәк. Фетнәселәр яғында сағында регуляр һалдаттарҙы күп ҡыйратты.

– Ярай, Усаев, бөгөнгә етеп торор. Һөйләшеүҙе иртәгә дауам итербеҙ.

Ҡәнзәфәр боролоп ишеккә атланы. Уны ниндәйҙер ҙур йорттоң аҫҡы ҡатында ҡундырҙылар. Яңғыҙы ине, әлбиттә. Бығауҙарын һалдырманылар. Ашарға ла бирмәнеләр. Буйы етмәҫлек бейеклектәге бәләкәс кенә ике тәҙрәһенә арҡыс-торҡос тимер беркеткәндәр. Мөйөштә иҫке септә, киндер тоҡ ҡалдыҡтары ята. Ҡалын имән ишеге, ике йоҙаҡтан торған биге бында элек ниндәйҙер склад булыуына ишаралай.Тышҡы яҡта һөйләшкән тауыштар ишетелә. Һаҡсыларҙыр. Үтеп-һүтеп йөрөүселәрҙең аяҡтары тәҙрәләрҙән күренеп ҡала.

Кожин ни өсөн яуап алырға теләмәне? Ҡәнзәфәрҙең үтенесенә ҡолаҡ һалырға булдымы, әллә тәжрибәле һуғыш суҡмары хәйлә ҡорамы? Бында ниндәйҙер сер бар. Ҡәнзәфәр барыбер дөрөҫөн һөйләйәсәк. Үҙе ҡылған ҡылыҡтар хаҡында ғына, әлбиттә. Ҡылған эштәре билдәлелер, сөнки шул уҡ Әлибай, Ҡыҙрастар менән бергә Әбей батшаға ҡаршы һуғышып йөрөнө бит. Ишмөхәммәт, ҡайныһы Мөҡсин дә кейәүе өҫтөнән ошаҡ йөрөтөп торҙо...

Былары барыһы ла – ваҡ мәсьәләләр. Бөгөн иң мөһиме – алыҫтан ғына булһа ла Сүриәне күреп ҡалыу. Күңеле һиҙенә, йөрәге менән тоя: был донъяла бүтәнсә бер ҡасан да ул, изге йән эйәһе, тере килеш күҙ алдында пәйҙә булмаясаҡ.

Төнө буйы уйланып йоҡламаны, ике тәҙрәгә төшә башлаған яҡтылыҡтың арта барыуына ҡарап, Ҡәнзәфәр төш яҡынлашыуын самаланы. Ә ниңә инеүсе, хәл белеүсе, саҡырыусы юҡ? Әллә оноттолармы?..

Ниһайәт, аҫмалы йоҙаҡты шалдор-шолдор килтереп астылар. Төшөү-менеү өсөн ерҙе ҡаҙып баҫҡыс яһалғанлыҡтан, ишектән яҡтылыҡ бөркөлмәне.

Һалдаттар икәү ине. Мылтыҡлылар. Береһе Ҡәнзәфәргә тимер һауыт, икмәк киҫәге һуҙҙы.

– Тиҙ генә аша ла командирға барырбыҙ, – тине.

Ҡәнзәфәр тәғәмде йоткас ҡына асыҡҡанын самаланы.

Башҡаса һүҙ ишетелмәне. Аш һауытын кире бирҙе лә, аяҡтарын саҡ һөйрәп, алдындағы баҫҡысҡа ҡарай ҡуҙғалды. Хәле юҡлыҡтан түгел, аяғын бығау ауырттыра ине.

Ҡәнзәфәр канцелярия бүлмәһенә ингәндә, Кожин тәҙрәгә ҡарап ишеккә арты менән тора ине. Ул боролманы. Шул саҡ уң яҡта кемдер шыңшып илап ебәрҙе. Кемлеген күрмәһә лә, Ҡәнзәфәр шунда уҡ Сүриәһе икәнлеген аңланы. Бығау аҫҡа тартып торған ҡулдарын күтәрергә итте.

Шул саҡ Кожин ялт итеп ишек яғына боролдо һәм, ашығып килеп, тотҡондоң бығауын ысҡындырҙы ла һүҙ-маҙар әйтмәйенсә сығып китте.

Ҡәнзәфәр ғүмерендә тәүге тапҡыр хәлһеҙләнеп иҙәнгә теҙләнде, ҡулдарын илаусыға һуҙҙы.

– Кил йәһәтерәк. Һөйлә тиҙерәк. Хәҙер айырасаҡтар.

Сүриә тәүҙә иренең башын ҡосаҡланы, шунан әкрен генә теҙләнде.

– Мин... һин... – Ауыҙы кипте. Теле ағас шикелле ҡатып ҡалғандай тойолдо.

– Малайҙар?..

– Уларҙы урыҫ иттеләр. Батырша – Барис, Абдулла – Әләксәй. Мин Сафия. Фамилиябыҙ – Уфимцев. Мин хәҙер мәрйә…

– Нимә һөйләйһең?

– Суҡындырҙылар беҙҙе. Балаларыбыҙҙы ниндәйҙер генералдарға бирәсәктәр, ти. Кафтаныңды Ҡыҙрасҡа бирҙем. Мөлкәтебеҙҙе атай тартып алмаҡсы. Бандитың йортомдо үртәтте, тип ҡотора.

– Уф, йөрәккәйем, мине кисер. Яҙмыш.

– Ҡотҡарһалар ярай ҙа.

– Һөйлә, Сүриә, нимәләр бар?

– Һөйләнем бит. Яҙмыш мәрйә итте. Малайҙар – урыҫ.

– Исем ҡушып ҡына кешене үҙгәртеп булмай. Туҡта әле, беҙ иң кәрәкле һүҙҙәребеҙҙе генә һөйләшәйек.

– Ҡәнзәфәр, мине ҡайҙалыр илтеп япмаҡсылар, ти. Исеме манастр шикелле. Эҙләп табырға тырыш мине, малайҙарыңды?

– Һеҙҙе алып киткәндә атайың өйҙә инеме?

– Э-э.... Эйе, тик килмәне. Фетнәселәргә ҡаршы һуғышырға Ҡазандан ҡайтҡан. Беҙгә күҙ тейгәндер...

– Иҙеүемә тығыл әле, эстәге кеҫәлә аҡса бар. Ал шуны.

– Ниңә кәрәк?

– Донъя хәлен кем белә...

Шул саҡ ишектән Кожин инде. Ул быларға иғтибар итмәй генә өҫтәле яғына атланы.

– Ваҡыт сыҡты, Усаев.

Ҡәнзәфәр тороп баҫты. Сүриәнең усын мәңге ебәрмәҫлек итеп ҡыҫып, уға күтәрелергә ярҙамлашты.

– Хуш, Сүриәм, бәхил бул. Рәнйемә миңә. Яңылышты был, тип уйлама минең хаҡта. Шулай тейеш ине. Миңә Хоҙай әлеге юлдан үтергә ҡушҡан. Ғәҙеллек, ирек өсөн ҡан ҡойоу, йәнен фиҙа итеү – һәр мосолмандың мөҡәддәс бурысы. Үкенмәйек, бәғерем…

Ишектән кисәге писарь, тағын берәү инде.

– Ханыма сығып китергә ярҙам ит, – тине полковник.

Сүриә йәш ҡаплаған күҙҙәрен йоҡаҡ бүләк яулығы менән һөртә-һөртә, ҡарашын иренән ала алмайынса ишеккә сигенде.

– Ҡул күтәрмәгеҙ уға! Изге кеше ул... Хуш, йәнекәйем...

Ҡәнзәфәр өсөн ҡатынының һуңғы һүҙҙәре ошолар булды. Ошолар ғына…

– Усаев, бына был – хәрби тәфтишсе. Писарҙы беләһең. Уның һорауҙарына теүәл яуап бир. Бөтәһе лә яҙыла барасаҡ. Һуңынан уҡып, ҡул ҡуйырһың. Тәржемәсе кәрәкме?

– Юҡ, тәржемәсе бутап ҡына бөтөрөр.

Бик етди ултырған тәфтишсе йылмайып ҡуйҙы. Эйе, уның алдында ябай фетнәсе түгел, Пугачев генералы баҫып тора. Тиккә генә шартлатып русса һөйләшмәйҙер.

Тәфтишсе туп-тура итеп Ҡәнзәфәргә ҡараны ла тәүге һорауҙарын бирҙе.

– Ниндәй кешеһең, нисә йәштә, русса-татарса уҡый яҙа беләһеңме, император ғәли йәнәптәренә тоғоро хеҙмәт итеү өсөн ант иткәйнеңме?

Яуап:

– Мине Ҡәнзәфәр тип исемләйҙәр, Усай улы, Өфө өйәҙе Нуғай юлы Боҙаяҙ ауылы мишәр йөҙ башы, миңә утыҙ алты йәш, татарса, русса уҡый, яҙа беләм, император ғәли йәнәптәренә тоғро хеҙмәт антында булдым.

Һорау:

– Яуыз Пугачевтың ҡасаҡ Дон казагы икәнлеге хаҡында иғлан ителгән батшабикә манифесын ишеттеңме?

Яуап:

– Яуыз Пугачевтың ҡасаҡ казак икәнлеге хаҡында иғлан ителгән манифесты ишеттем.

Һорау:

– Күпме ваҡыт уның яуыз төркөмөндә торҙоң, ниндәй урындарҙа, ниндәй кешеләр менән булдың, ниндәй яуыз эштәр ҡылдың, команданда кемдәр, ниндәй кешеләр булды?

Яуап:

– Уҙған 1773 йылдың ноябрь айында мишәр старшинаһы Йәғәфәр Көсөкәйевтан, Пугачевтың үҙенең төркөмө менән Ырымбур эргәһендәге Берда биҫтәһендә тороуын ишеткәс, ысын Петр Федоровичтың дөрөҫлөгөнә ышаныу өсөн алты мишәр кешеһе менән уның эргәһенә юлландыҡ. Килеп еткәс, Яйыҡ казактарынан белеп, уның янына индек. Эргәһендә бер ай булдыҡ. Ырымбур эргәһендә һуғышыу өсөн күп тапҡырҙар сабауылда ҡатнаштым, шуның өсөн яуыз Пугачев полковник дәрәжәһе бирҙе. Шунан һуң һигеҙ кеше менән халыҡты ҡотортоу, үҙемә төркөм йыйыу, Пугачевтың ысын Петр Федорович икәнлегенә халыҡты ышандырыу өсөн Өфө өйәҙенә ебәрелдем. Кемдәр ҡаршы – шуларҙы аҫырға ҡушылды.

Йыйған һикһән кеше менән Көңгөргә йүнәлдем, юлыбыҙ директоры Осокин булған Иргә заводы аша ине, уны туҙҙырҙым, ике йөҙ һум ҡаҙна аҡсаһын алдым, Екатеринбургтан Көңгөргә ике мең һум аҡса илтеүселәрҙе таланыҡ, уларҙы Өфө эргәһендә тороусы граф Чернышев тип йөрөтөлгән яуыз начальник Иван Никифоров-Чикаға оҙаттым. Ачит ҡәлғәһендә ҡаршылыҡ күрһәткәне өсөн капитанды аҫтым, исемен белмәйем.

Көңгөргә яуыз баш начальник Иван Чика ебәргән кеше теге капитанды уның рөхсәтенән башҡа аҫҡаным өсөн мине Ырымбурға Пугачевҡа илттерҙе. Ул мине, үҙе ебәргәнлектән, ярлыҡаны, тағын ете кеше менән яуыз начальник Белобородовҡа күп халыҡ йыйырға ярҙам итеү өсөн Екатеринбургка оҙатты.

Шунда китеп барышлай Өфө эргәһендәге яуыздар торған станда туҡталдым. Ҡуна ҡалған төндә ундағы төркөм подполковник тарафынан ҡыйратылды. Унан

яңғыҙым Башҡортостанға ҡастым һәм июнь айы бөткәнсе ауылдарҙа йәшәнем, яуыздар төркөмө булдырманым.

Шул айҙа Пугачевтың Усаға юлланыуын ишеттем дә ун биш кеше менән уның эргәһенә киттек. Барып еткәс, Башҡортостанда нимәләр булғанын Пугачевҡа һөйләнем, шуның өсөн миңә илле һум аҡса, халыҡты ҡоторторға манифест, полковник икәнлегемде бөтәһенә лә күрһәтеү өсөн указ бирҙе.

Һорау:

– Яуыздың үҙенән күптән ҡалдыңмы һәм ҡайҙа ниндәй ниәт менән ебәрелдең?

Яуап:

– Шул манифест менән төркөм йыйыу һәм тыныс йәшәгән халыҡты ҡотортоу, уларҙан бер төрлө лә һалым алынмаясағын аңлатыу өсөн үҙ теләгем менән Пугачевтан Башҡортостанға ебәрелдем. Төркөм йыйып Өфөгә һөжүм итергә һәм Рәсәй ғәскәрҙәрен ҡыйратырға теләнем. Шул маҡсат менән Ыҡ йылғаһы буйына килеп, шунда йәшәүселәрҙе ҡоторттоп, хәрби командаларға һөжүм итеү өсөн разведка яһап, күберәге үҙҙәре теләгән башҡорттарҙан, мишәрҙәрҙән, татарҙарҙан, завод крәҫтиәндәренән дүрт йөҙ кеше йыйҙым. Ермолкино ауылы эргәһендә торғанда минең төркөмдәге ике мишәр менән бергә башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас тотоп, бында килтерҙе. Төркөмдәгеләрҙең тырым-тырағай ҡайҙа ҡасыуын белмәйем...

Һорау:

– Яуыз үҙе ниндәй уй, күпме кеше менән ҡайҙа китте?

Яуап:

– Яуыз Пугачев енәйәтселәре менән бергә Ҡазанға китте, төркөмөндә егерме мең кеше. Эргәһендә – баш начальниктар, Яйыҡ казактары. Ҡазанға барып етеп уны алғас, тип һөйләнде Пугачев миңә, төркөмдәге был тирәләге кешеләрҙе бында, Өфө өйәҙенә, ебәрәсәк.

Һорау:

– Үҙең кеүектәрҙән тағы кемдәрҙең ҡайһы урындарға һәм ни өсөн ебәрелеүен белмәйһеңме?

Яуап:

– Түрәләренең указдары менән Пугачев минән башҡа яуыз полковниктарҙы ла тыныс йәшәүселәрҙе ҡоторттоу һәм төркөм йыйыу өсөн Өфө өйәҙе юлдарына ебәрҙе. Ике көн элек Ыҫлаҡ ауылы мишәр Шәриптән, кем улы икәнлеген белмәйем, Салауаттың Ҡариҙел буйлап түбәнгә ҡарай миңә килеүе хаҡында ишеттем, башҡорт Ҡәйеп Йынбатов Дим аша сығып минең менән ҡушылырға төркөм килеүен хәбәр итте. Йөҙөй юлынан Ағиҙел буйлап түбән ҡарай бындағы ауылдарға миңә, кем командаһында икәнлеген белмәйем, ҙур төркөм килә. Шул уҡ Шәрип еткерҙе, Өфөгә яҡын ерҙә яуыз полковник Туҡтамыш тора. Ул юғарыла әйткән ҙур күләмле төркөмдәрҙе туплап, бергәләшеп Өфөгә һөжүм итергә һәм хәрби командаларҙы ҡыйратырға мине көтә, төркөмдә күпме кеше икәнлеге мәғлүм түгел.

Һорау:

– Әлеге һорау алыуҙа ысын дөрөҫлөктө күрһәттеңме һәм өҫтәп әйтергә һүҙҙәрең юҡмы?

Яуап:

– Әлеге яуап алыуҙа иң дөрөҫлөктө күрһәттем һәм өҫтәп әйтер хәбәрем юҡ.

Ҡәнзәфәр Усаев яуап биргән пунҡттарҙы дөрөҫләп ҡул ҡуйҙы.

– Рәхмәт, полковник, ҡатынымды күрҙем, хушлаштым. Дөрөҫөн әйткәндә, быны эшләреңә ышанмағайным, әлбиттә.

– Эште нығ, саманан тыш нығ ҡуйыртҡанһың, сотник. Бәлки ярлыҡау һорап, баш эйеп йәшерен комиссияға, атап әйткәндә, уның начальнигы генерал-майор Павел Сергеевич Потемкин исеменә үтенес яҙырһың?

– Юҡ, полковник, халҡыма хыянат итәсәгем юҡ. Хөкөм алдына баҫырға әҙермен. Шуныһы йәл: королоҡ арҡаһында барлы-юҡлы етешкән игенен талаусыларҙан ҡотҡарыу өсөн крәҫтиәндәргә ярҙам итә алмаясаҡмын.

– Дим буйындағы Никифар ауылы эргәһендә минең отрядты һин ҡыйраттыңмы?

– Эйе, тик бер хата ебәрелде: отрядтың икегә бүленгәнен самаламаным. Бөтәһен дә белеп тыумайһың шул.

– Ҡазанға оҙатырбыҙ үҙеңде, Усаев. Йәшәгең килһә, ҡасырға ынтылма. Юғалыу ғәҙәтең бар икән.

– Тормош барыһына ла өйрәтә, полковник. Егерме йыл элек уҡытыусым Батырша хаҡлыҡ өсөн көрәшеп йәнен фиҙа ҡылды.

– Файҙаһы булдымы һуң?

– Уның ихтилалынан һуң халыҡты тотошо менән мәжбүри суҡындырыуға сик ҡуйылды, мәсеттәр һалырға рөхсәт ителде. Зыянмы ни? Ҡол булып йәшәүҙән файҙамы?

– Батырша тинең бит әле, яңылышмаһам, ул башҡорттар ихтилалына етәкселек иткән. Беләһеңме, уны ғүмерлеккә ҡайҙа илтеп япҡандар? Шлиссельбург ҡәлғәһендәге таш төрмәгә. Ул төрмә иһә Ладога күленән Нева йылғаһы ағып сыҡҡан төштә. Бынан ун-ун ике йыл элек зинданда сағында өс һаҡсының башын ярған. Үҙе лә үлгән. Бында ебәрелер алдынан Башҡортостан хаҡында яҙыуҙар ҡараштырғайным, шуларҙан белдем.

– Ул төбәкте күҙ алдыма килтерә алмайым, полковник. Ҡайғылы хәбәр әйтһәң дә, рәхмәт. Абыҙымдың яҙмышын белдем. – Ҡәнзәфәр «Иннәә лилләәһи вә инәә иләйһи раажиғун» тип доға уҡыны. Амин тотто. (Мәғәнәһе шул: «Беҙ һәр ҡайһыбыҙ Аллаһы Тәғәленекелер вә һәр ҡайһыбыҙ Аллаһы Тәғәләгә ҡайтасаҡбыҙ»).

Пугачевтың иң күренекле командирҙарының береһе менән күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеү, бәхәсләшеү Кожин өсөн ҡыҙыҡлы ине, әлбиттә. Тик был яуыз дошмандың үҙен ғорур, иркен тотоуы йәнен көйҙөрә ине. Өҫтәлдәге кескәй генә еҙ ҡыңғырауын шылтыратты. Ишектә ике һалдат күренде. Полковник Ҡәнзәфәрҙе алып сығып китеүҙәрен күрергә теләмәне шикелле, тәҙрәгә боролдо.

1774 йылдың 17 августа Йәшерен комиссия начальнигы генерал Потемкин батшабикә Екатеринаға түбәндәге хәбәр ебәрҙе:

«...*Халыҡты баҫтырыу өсөн төрлө ысулдар ҡулланырға кәрәк. Минең ҡушыуым буйынса башҡорттоң бер старшинаһы Пугачевтың енәйәт ҡылыу буйынса иң ҙур юлбашсыларының береһен – Ҡәнзәфәрҙе тотто, шуның өсөн йөҙ һум аҡса бирҙем һәм әйткән старшина Ҡыҙрасҡа миҙал ебәрҙем, әле тороп ҡалған икәүҙе – Ҡаранай һәм Салауатты торорға ҡуштым һәм һәр ҡайһыһы өсөн йөҙәр һум аҡса вәғәҙә иттем*».

Был осраҡта Потемкин намыҫына хыянат итте, әлбиттә, сөнки Ҡыҙрасҡа батшабикәгә әйткән һумдарҙың яртыһын ғына тамыҙҙы. Нимә эшләйһең, генералдарға ла аҡса кәрәк.

Ҡәнзәфәрҙе, Бөгөлмәлә оҙаҡ тотмайынса, көслө һаҡ аҫтында Ҡазанға оҙатырға ашыҡтылар. Беренсенән, бәләнән баш аяҡ, сөнки уны ҡотҡарыу өсөн фетнәселәрҙең һөжүм итеүе мөмкин; икенсенән, ул тәүге һорау алыуҙа уҡ бөтәһен дә, тәфтишсе әйтеүенә ҡарағанда, асыҡтан-асыҡ һөйләне лә бирҙе.

Ҡурҡыу, үкенеү кеүек төшөнсәләрҙең эҫе лә һиҙелмәне. Әйтерһең, ҙур мәжлес табынына килгән дә маҡтанып ултыра.

Ҡазандағы Йәшерен комиссия палачтары нисек кенә алдап-йолдап ҡарамаһындар, ҡанһыҙланмаһындар, Ҡәнзәфәрҙән өҫтәмә күрһәтеүҙәр һура алманылар.

Артабанғы юлы – Мәскәүгә, Сенаттың Йәшерен экспедицияһына. Уны хатта дәүләттең эске дошмандары ҡылған енәйәт эштәрен тикшереүҙә дан-шөһрәт ҡаҙанған обер-секретарь Степан Иванович Шишковский ҡарамағына тапшырҙылар. Екатерина батшабикәнең ҡамсы менән язалаусы был хәшәрәте ҡорбанынан яуап алырҙан элек уны һушынан яҙҙырғансы туҡмата, иҙмәһен иҙҙерә, тик шунан һуң ғына бисараны «эшкә яраҡлы» тип иҫәпләй.

Ҡәнзәфәрҙе килтергәс: «Эйе, беҙҙә алда яман ҡатмарлы, ҙур, мәшәҡәтле эштәр көтә. Быныһы тәүге сыйырсыҡ ҡына. Ә шулай ҙа сургандың эреһе. Ят шөғөл түгел», – тигәйне үҙенә буйһонған хеҙмәткәрҙәренә. Уның ҡарауы, юғары властар алдында кемлеген, оҫталығын, дәүләт аҡсаһын бушҡа ашап ятмағанлығын күрһәтәсәк. Юғиһә Михельсондар, Голицындар, Паниндар, Кожиндар, рапорт артынан рапорт яуҙырып, баш күтәреүселәрҙе ҡыйратыуҙары, еңеүҙәре хаҡында шапырыналар. Йәнәһе, улар герой. Уларға орден, миҙалдар бирелергә, чиндары үҫтерелергә тейеш.

Обер-секретарҙың Ҡәнзәфәрҙән яуап алыу протоколына Бөгөлмәнекенән тыш тик шул ғына өҫтәлде: Пугачевтың баш полковнигы нисек итеп Ржев сауҙагәрен Петр Федоровичҡа алып барыуын һөйләне. Ләкин был тарих мәскәүҙәрҙе ниңәлер артыҡ ҡыҙыҡһындырманы, Екатерина II-нең ейәне Павел Петровичтың, ниндәй ауыр, ҡурҡыныс, хәүефле юлдар үтеп, атаһына ҡиммәтле бүләктәр илтеп еткереүенә битараф булдылар.

Ҡәнзәфәрҙең артабанғы яҙмышын сенат хәл итергә тейеш ине. Ә уның указын Мәскәү төрмәһендә ярты йыл буйы көтөргә насип булған икән.

Ниһайәт, Крәҫтиән һуғышы етәкселәренә яңы – 1775 йыл «бүләге» итеп 1774 йылдың 31 ғинуарында Сенат указ сығарҙы: Емельян Пугачевты, Афанасий Перфильевты дүрткә ботарларға, Иван Зарубиндың башын Өфөлә сабып өҙөргә, Хәрби коллегия судьяһы, Яйыҡ казагы полковник Максим Шигаевты, полковник Тимофей Подуровты һәм иран керәшене Василий Торновты аҫып үлтерергә. Ҡәнзәфәр Усаевты, Иван Почиталинды, Максим Горшковты, Илья Ульяновты, Денис Караваевты, авантюрист Евстрафий Долгополовты, Григорий Закладновты, Василий Плотниковты сыбырҙҡы менән ҡайыҙларға һәм ғүмерлек каторга эшенә һөрөргә.

Сенат Ҡәнзәфәргә ҡарата тәүҙә үлем язаһына хөкөм итеү ҡарары сығарҙы. Тик инде ун йыл буйы генераль-прокурор посын биләгән кенәз, Екатерина батшаның иң ышаныслы кешеләренең береһе булып иҫәпләнгән Александр Алексеевич Вязимский, һүҙен һүҙ итеп, юғары язаны ғүмерлек каторга менән алмаштыртты. «Аҡыллы, белемле кеше. Минән ун бер йәшкә кесе. Әгәр дөрөҫ юлдан киткән булһа, Рәсәй шарттарында файҙалы эштәр башҡарыр ине. Үҙенсә дөрөҫ фекер йөрөтә. Иленә игелек килтермәһә лә, үлгәнсе йәшәһен. Сираттағы был ихтилалдан һуң уйланаһы урындарыбыҙ күп булыр. Ғәйепте ике яҡтан да эҙләү фарыз», – тигән.

Бәлки, шулай әйткәндере Рәсәйҙең иң бөйөк закон эйәһе, бәлки, йөҙәрләгән ауылдарҙы ер йөҙөнән юҡҡа сығарыу, ғәйепһеҙ бәндәләрҙе балалары менән бергә өйҙәренә бикләп яндырыуҙар, аҫыу-киҫеүҙәр, атыуҙар туйҙырғандыр. Бәлки шуға күрә лә «яуыз халыҡтар баш эйеп йәшәргә, теҙләнергә теләмәйҙер? Уларҙың тамырын ҡоротоу ысулы бармы? Булһа, ниндәй?»

***

1775 йылдың унынсы көнөндә Ҡәнзәфәрҙе Мәскәүҙең Болотный майҙанына сығарҙылар. Июль айында уҡ кейгән күлдәге, ыштаны тетелеп бөткәйне. Шуныһына шөкөр: итегенең табандары эләгеп тора. Камера ишегенән сыҡҡас, ниндәйҙер һалдат уға сәкмән кисәге ташланы. Шуны бөркәнде. Ихатала яман һыуыҡ ине. Аяҡтар тишек итектән шунда уҡ ҡарҙы тойҙо. Ниңә алып сыҡтылар, ҡайҙа алып баралар?

Эргәнән тиҫтәләгән һыбайлылар барғанлыҡтан, Ҡәнзәфәр өйҙәрҙе лә күрмәне, тар тыҡырыҡтарға, буш урамдарға ла иғтибар итмәне. «Бәлки, үлтерергә алып баралар ҙыр? Бәлки, яңынан үлем язаһына хөкөм иткәндәрҙер?.. Тик... аҫыпмы? Әллә ҡабырғанан элерҙәрме? Бәлки, туҡмаптыр? Бәлки, Пугачев язаһы – тураҡлаптыр?..»

Ниндәйҙер сатлыҡтан һыбайлылар оҙатыуында ауыр йөк тарта торған ат егелгән ҙур сана килеп сыҡты. Ҡәнзәфәр бейектәрәк ултырған кешене шәйләп алды. Бәй, был Пугачев түгелме һуң?! Ялан баш, тик элек түңәрәкләп алынған сәсе тәртипһеҙ үҫкән, ныҡ ҡабарған. Әллә аҡ тун кейгәнгә, күҙҙәре элеккенән дә ныҒыраҡ яна. Эргәһендә ҡаранан кейенгән ҙур һаҡаллы әҙәми зат ултыра. Дин әһелелер.

– Петр Федорович! – Ҡәнзәфәрҙең тауышы сатнама һыуыҡта яңғырап сыҡты.

Пугачев яҡ-яғына ҡаранды. Кандалалы аяҡтарын саҡ һөйрәп артынан эйәреп килеүсе яуҙаш командирҙарына текләнде. Таныны уларҙы.

– Денис. Илья. Ҡәнзәфәр. Ваня. Гриша...

Ат тотоусы дилбегә менән яман йыуан бейәнең ҡабырғаһына сирттерҙе. Сана ҡапыл алға тартылды. Ара алыҫлаша төшһә лә, тотҡондар майҙанға ҡәҙәр Пугачев санаһына эйәреп барҙы.

Йыйылған халыҡтың иге-сиге юҡ кеүек. Аттар егелгән кареталар, саналар, йомшаҡ арбалар теҙелгән, яҡын-тирәләге йорттарҙың түбәләрендә йәш-елкенсәк, бала-саға. Урталағы күпер шикелле бейек итеп төҙөлгән нәмәне пехота полктары уратып алған. Офицерҙар тун кейгән. Күпергә оҡшаған нәмә эргәһендә өс дар ағасы һерәйеп тора.

Сана һәм уның артынан һөйрәлеүселәргә кешеләр береһен-береһе этә-төртә юл асты. «Килтерәләр! Ана үҙе!..» – тигән һүҙҙәр яңғырай башланы. Алғараҡ сыҡҡас, Ҡәнзәфәрҙәрҙе туҡтаттылар.

Шул күперҙә ниндәйҙер өс-дүрт әҙәм нимәлер эсеп ултыра. Йыйылған халыҡтың береһе:

– Палачтар шарап эсә. Иҫергәс, күҙҙәре тона, сабырға еңелерәк була икән, – тип һөйләнде.

Күпергә Пугачев, Перфильев, шул ҡара кейемле кеше, тағын ике чиновник күтәрелде. Шуларҙың береһе яман ҡысҡырып манифест уҡырға тотондо.

– Һин Дон казагы Емельян Пугачевмы? – тип һораны.

– Эйе, мин Дон казагы, Зимовей старшинаһымын, Емелька Пугачев. – Ҙур сиркәүгә ҡарап туҡтауһыҙ суҡынды.

Перфильев иһә тик кенә торҙо.

Ҡара кейемле кеше Пугачев менән Перфильевҡа нимәлер әйтеп, өс бармағы менән төртөп доға ҡылды ла түбәнгә ашыҡты. Манифест уҡыусы ла уға эйәрҙе.

Фани донъяла йәшәүенә һанаулы ғына минуттары ҡалғанлығын аңлаған Пугачев, тирә-яғына бөгөлә-бөгөлә, өҙөлөп-өҙөлөп киткән тауышы менән:

– Православный халыҡ, гонаһтарым өсөн ярлыҡа... Ғәфү ит, православный халыҡ!.. – тип өндәште.

Шунда уҡ палачтар уның аҡ тунын һалдырып, күлдәген өҙгөләнеләр... Ҙур балта ялтырап юғарыға күтәрелде... Шул уҡ урында Шигаевтың, Подуровтың, Торновтың кәүҙәләре дар ағасына аҫылынғайны.

Ҡәнзәфәр һулда ситтәрәк баҫып торған Әлибай менән Ҡаранайҙы күреп ҡалды. «Улар бында нисек килеп юлыҡҡан? Нимә эшләп улар һаҡ аҫтында түгел?..»

Ҡанлы тамашанан ҡыҙыҡ ҡалманы тигәндәй, өшөп, туңып бөткән халыҡ тиҙ үк тарала, бутала башланы, теге икәү ҙә юҡ булды. Ул, әлбиттә, Пугачевты нисек итеп язалап үлтереүҙе ҡараһындар, үҙ күҙҙәре менән күрһендәр өсөн Өфөнән Әлибай Мырҙағоловты, Ҡазан төрмәһенән Ҡаранай Моратовты килтергәндәрен белмәй ине.

Сират Ҡәнзәфәрҙәргә етте. Уларҙы күпергә оҡшаған түшәмә эргәһенә еткергәндә ҡан ине. Палачтар яңы ғына сабылып өҙөлгән ҡулдарҙы, аяҡтарҙы, мендәр кеүек кәүҙәне тоҡтарға һала... Ә Пугачевтың башы ҡаҙалған оҙон ҡолға ерҙә ята...

Инде был бисараларҙы сисендереп, сыбыртҡыларға тотондолар. Ҡәнзәфәр һалҡынды ла, ауыртыуҙы ла тойманы. Ул бөгөнгө мәшхәрҙе күрмәҫкә, оноторға теләп күҙҙәрен сытырлатып йомдо. Шуныһы билдәһеҙ, был Пугачевты язалауҙы күрһәтеү генә булдымы, әллә үҙҙәрен язалауҙың башланыуы ғынамы?..

Ләкин иң ҡот осҡосо – каторжандарҙың бөтәһенең дә танау япраҡтарын ҡырҡыу, өрҙөрөлгән күмерҙә ҡыҙҙырылған тимер ярҙамында яңаҡтарына, маңлайҙарына баҫып мөһөр һалыу башланды. Әгәр ҙә кәүҙәһенә бер нисә кеше аҫылынмаһа, Ҡәнзәфәр һуғыр өсөн быҒауланған ҡулдарын күтәрә алмаһа, палачтарға тештәре менән йәбешер ине...

Пугачевты, Перфильевты ботарлағандың, Шигаевты, Подуровты, Торновты аҫҡандың икенсе көнөндә – 11 ғинуарҙа Ҡәнзәфәрҙәрҙе ғазаплы юлға алып сыҡтылар.

Иҫке булһа ла кейемдәр ҙә бирҙеләр, тик уңалмаған яраларҙы һыуыҡ өтөп алды. Әйтерһең, тәндең шул уҡ урындарына утлы тимерҙе ҡабаттан баҫтылар. Уларҙы ҡаплау, ышыҡлау ҙа, ҡул тейҙереү ҙә мөмкин түгел ине.

Барыу юлы – Мәскәүҙән Тверғә, артабан Новгород, Псков, Ревель ҡалалары аша. Ҡышҡы ярым ҡараңғы һәр көн юлда, төндәрен станция ҡараусылар йортоноң иҙәнендә. Ҡайҙа, ти, йоҡо. Төнө буйы инеп-сығып йөрөүселәр өйҙө һыуытып бөтөрә. Аҡырып һөйләшеүҙәр, ваҡыт-ваҡыт үҙ-ара талашыусылар, юлдарын артабан дауам итеү өсөн яҡшы аттар талап итеүселәр хаҡында һөйләп тораһы ла түгел.

– Псковҡа етелде. Унда ҡуныу-ҡунмау хаҡында станцияла уйлашырбыҙ. – тип һөйләнде оҙата барыусы һыбайлылар. – Тура юл булһа, Петербургка ла алыҫ түгелдер. Уңғараҡ тартылып төньяҡҡа ҡарай боролдоң, киттең барҙың...

Уларҙың һүҙен собор, сиркәү ҡыңғырауҙарының доңғор ҙа доңғор килеүе өҙҙө. Новгородтан һуң ҡолаҡтар бер аҙ тынып торғайны, инде тағын шул тауыштар. Әллә үтә һалҡын елдә саң ҡағыу яман ныҡ яңғырай, алыҫтарға тарала. Көңгөрҙә ике генә сиркәү ине шикелле...

«Петербург» һүҙе Ҡәнзәфәрҙең иғтибарын тартты.

– Кожин. Полковник Кожин! Ахун Ғабдулла Ғәлиев – Батыршаның, йәғни мөҙәрисемдең шул тарафтарҙағы ҡәлғәләрҙең береһенә ғүмерлеккә ябылыуы хаҡында хәбәр иткәйне, – тип һөйләнде ул. – Әгәр ҙә Пугачев менән берлектә батшалар йәшәгән баш ҡаланы ҡулға төшөргән булһаҡ, бүтәндәрҙе яфаламаҫ өсөн, иң тәүҙә шул зинданды табып емерер инем...

– Йөҙ йыл элек Псковта ла ихтилал күтәргәндәр. Фетнәселәрҙең бөтәһен дә тотоп, һырттарын ҡайыҙлағандар ҙа башлыҡтарын каторгаға ебәргәндәр, – тип һөйләнде һыбайлылырҙың береһе.

– Тимәк, саналағыларға тиклем дә баш күтәргәндәр.

– Шулай булып сыға...

Һыбайлыларҙың үҙ-ара һөйләнеүе Ҡәнзәфәрҙе һағайтты. «Ихтилал баҫтырылыуы баҫтырылған, шул саҡта азатлыҡ өсөн көрәшеүселәрҙең нәҫел-нәҫәптәре, моғайын, әле лә йәшәйҙәрҙер. Ҡул-аяҡтарым бығаулы булмаһа, шуларҙы эҙләп табып, ярҙамға саҡырыр инем. Псковтарын туҙҙырырға артығын һорамаҫ инек, – тип уйланы Ҡәнзәфәр, күңелендә күтәренкелек тойоп. – Әгәр ҙә ҡотолонһа, артабан нисек йәшәргә, нисек һуғышырға беленер ине лә бит...»

Иркенләп уйланырға шул уҡ ҡыңғырауҙарҙың доңғолдауы ҡамасауланы. Ул хатта шуларҙың һәр ҡайһыһының бүрәнә табанлы яман ҙур санаға һалыныуын һәм әллә нисә ат егелеп тартыуын күҙ алдына килтерергә тырышты. Көңгәр тирәһендәге бер ауылдың сиркәү ҡыңғырауын һатып, аҡсаһын командаһы кешеләренә таратыуын, шунан ғәйеп табып баш полковник Кузнецовтың ғауға күтәреүен хәтерләне...

Новгородтан һуң Утаргош тигән ауыл аша үтелгәйне. Ни өсөн шулай аталыуын белмәй китеү Ҡәнзәфәрҙең күңеленә тынғылыҡ бирмәне. «Утар» мосолман һүҙе булырға тейеш, «гош»ы «ҡош» һүҙелер. Утар тулы ҡош була торғандыр. Новгород тарафтарында татарҙар күп йәшәй, тип ишеткәне бар ине Ҡәнзәфәрҙең. Шунда йәрминкәгә лә барып йөрөйҙәр, имеш. Яман алыҫ яҡ икән дәбаһа.

Псковтан ҡуҙғалғанда дөм-ҡараңғы ине. Аттар юлды тойоп атлай торғандарҙыр. Шулай ҙа бында ла һарыҡташтар аунауын, тирә-йүн ҡуйы урмандарҙан тороуын Ҡәнзәфәр самалағайны инде. «Юл иһә Эстляндияға тиклем фәҡәт Псков һәм Чуд күлдәре боҙо өҫтөнән генә үтәсәге хаҡында кемдер һөйләгәйне инде. Күрәһең, йәйге айҙарҙа һаҙлыҡтар, урмандар аша йөрөй алмайҙарҙыр».

Ҡәнзәфәр ултырған санаға егелгән ат ҡапыл ситкә тартылды һәм, бер нисә тапҡыр ырғыған, һөрләгәп йығылды. Бүтәндәре лә, баш бирмәй, ситкә ынтылды.

– Бүреләр! – тип ҡысҡырҙы боҙ өҫтөнә тәгәрләгән Ҡәнзәфәр.

– Һин ҡайҙан беләһең? Әллә бүрәнә аша күҙеңә күренәме? – тип берәү шарҡылдап көлдө.

– Ул яуыздар менән күп осрашырға тура килде. Йәҙрәгеҙ бар икән, һауаға булһа ла атығыҙ?!

Мылтыҡтан гөрһөлдәттеләр.

Тынлыҡ урынлашты. Ә инде боҙ өҫтөндә ятҡан ат туларға тотондо. Эргәһенә йыйылып, бер ҡосаҡ бесәнгә ут төртөп, шуның яҡтыһында атты торғоҙорға булаштылар. Мәхлүк көслө кешнәй, күтәрелергә ынтыла ла ауып китә...

Шул асыҡланды: егеүле ат, өркөп, балыҡсылар уйған мәкегә юлыҡҡан һәм алғы уң аяғын һындырған...

Ярай әле, ҡаланан алыҫ китергә өлгөрөлмәгән. Ерән алашаны санаға ятҡырып, уны арҡандар менән арҡыс-торҡос бәйләп, станцияға алып ҡайттылар. Мәхлүкте салырға ҡарар ҡылдылар. Ҡәнзәфәрҙең кәңәшенә ҡолаҡ һалып, кәүҙәһен эттәргә ташламай, бешереп ашарға ризалаштылар...

Егерме тәүлеккә һуҙылған ошондай яфаланыуҙарҙан, интегеүҙәрҙән һуң, ниһайәт, Рогервик ҡәлғәһенә аяҡ баҫтылар.

Төньяҡтан иҫкән көслө, һалҡын елдәр ҡыуып килтергән тулҡындар диңгеҙ ярын туктауһыҙ кимергән, йыуған. Океан иркенлеккә туямы ни? Көсөнән килһә, бөтә Ер шарын тоҙло һыуы менән ҡаплар ине. Батшаларға иһә биләмәләр, шуларҙың сиктәрен нығытыу кәрәк. Аллаһ ҡәһәрләгән тарафҡа килеп кем эшләһен! Әйҙә,

тулҡындар менән каторжандар көрәшһен. Баш күтәрергә, һуғышырға яраталар бит, көстәрен бында түкһендәр. Ҙур һәм Бәләкәй мөгөҙ тип аталған утрауҙарға быуа яры һуҙғанда ла насар булмаҫтыр. Хакимлыҡ дошмандарын киләсәктә шуларға күсерһә, уларҙы һаҡларға һанаулы ғына һалдаттар ҙа етер. Ул сағында күпмелер һумдар кеҫәлә ҡалыр.

Ләкин мәкерле диңгеҙ тар ғына өлөшөн булһа ла бүлдерергә теләмәне: каторжандар көнө буйы ташыған таштарҙы, балсыкты тегеләрҙең йоҡонан тороуына юҡҡа сығарҙы, эҙен дә ҡалдырманы. Ярҙы нығытырға маташыусылар менән дә килешмәне. Бәй, тулҡындар ташлы ергә үрмәләргә, тик хәлдән тайғас ҡына сигенергә тейеш бит. Ниңә һуң алйот бәндәләр уларҙың теләгенә ҡаршы төшә, юлдарын быуырға ынтыла?!

Был осраҡта хатта Сенат еңелеүгә дусар булды: диңгеҙ алдында уға баш эйергә тура килде һәм, Ҡәнзәфәрҙәр унда аяҡ баҫырға биш йыл ҡалғас, мәғәнәһеҙгә көс түгеүҙе туҡтатырға, эшкә яраҡлы тотҡондарҙы Себергә оҙатырға, тигән указ сығарҙы. Шулай итеп ҡәһәрле ҡәлғәлә ғәрип-ғөрәбә, сирлеләр генә тороп ҡалды.

Мәскәүҙән алып сығып киткән һигеҙ каторжандың тик алтыһы ғына Балтик диңгеҙе буйына килеп етә алды. Яйыҡтың ике казагы – Закладнов менән Плотников, егерме көнгә һуҙылған юл ғазабын күтәрә алмай, баҡый донъяға күстеләр.

Ҡәнзәфәр менән Яйыҡ казагы Василий Плотниковҡа бер санала барырға тура килде. Һыйынышып бер-береһен йылытырға тырыштылар.

Плотников Перфильевтың яҡташы икән. Төрлө-төрлө ваҡиғаларҙы хәтерләргә, һөйләргә ярата. Пугачев күтәргән ихтилал алдынан улар төбәгендә шундай хәл булған:

– Афанасий Петрович һәр саҡ старшиналарға ҡаршы яҡта торҙо. Яйыҡ ҡаласығындағы бөтә болаларҙа ла ҡатнашты. Кәмһетелеп йәшәү менән килешергә теләмәне. Минең ағайым Савелий Перфильев менән дуҫ була торғайны. Толкачевтар, улар ағалы-энеле бер туған: Андрей, Михаил, Петр, Семен. Бөтәһе лә Пугачев яғында һуғышты. Боласылар шулар йортона йыйылды. Старшиналарҙың башбаштаҡлығына сыҙай алмаусылар ялыу менән генералға барырға ҡарар ҡылды. Фамилияһы Траубенберг. Әйткәндә теленде һындырырлыҡ, валлаһи. «Йәки беҙҙе оятһыҙ старшиналарҙан ҡурсалар, йәки улар менән иҫәпләшәбеҙ!» Генерал һөйләшеп аңлашыуҙан баш тартты. Йәнәһе, һеҙ кем? Ғауға. Ғауға һуғышҡа әйләнеп китте. Һөҙөмтә шул: генерал йән бирҙе. Был фажиғәнән һуң беҙҙе эҙәрлекләү өсөн генерал Фреймандың килеүе мәғлүм булды. Ул командаһы менән Яйыҡтың юғары – Илек яғынан хәрәкәт итә ине. Перфильев беҙҙе йыйып, генералды ҡаршылау өсөн Йәнбулат йылғаһына ҡарай алып китте. Казактар бәрелеште булдырмау һәм Петербургта батшабикә менән осрашыу өсөн Фрейманды күреп, һөйләшеп ҡарарға уйланы. Аралашсы итеп Перфильевты тәғәйенләнек. Генерал Петербургка депутация ебәреү хаҡында ишетергә лә теләмәгән. Әгәр ҙә беҙ болаға ҡотортҡан ҡырҡ кешене тотоп бирһәк, ҡалғандарыбыҙға теймәҫкә вәғәҙә итәсәк икән. Перфильев ҡайтып шуларҙы һөйләгәс, ғәскәр судьялары Фрейман тәҡдимен кире ҡаҡты ла һуғыш башларға тигән ҡарар сығарҙы. Йәнбулат йылғаһын сыҡҡас, яуҙа ҡыйратылдыҡ. Ғәскәри командаға ҡаршы тора алмаясағыбыҙҙы тойғас, Яйыҡ ҡаласығына сигендек. Старшиналар язаһынан ҡотолоу өсөн бөтәбеҙ ҙә бынан киттек. Ҡасаҡтар араһында Перфильев та бар ине, әлбиттә. Ул Яйыҡ ҡаласығынан илле саҡрым ултырған Безымянный Яр ауылына юлланды. Унда хәтһеҙ ваҡыт торғандан һуң, теләһә ҡайҙа йөрөнө. Ҡыш буйы Яйыҡ ҡаласығында үҙ өйөндә йәшенеп ятты. Ә инде

йәйҙе казак Иван Герасимов хуторында үткәрҙе. Ғәйепленләрҙе тикшереү, эҙәрлекләүҙәр хаҡындағы бөтә булған хәбәрҙәр уға еткерелеп торҙо, әлбиттә. Траубенбергты үлтереү буйынса эш тамамланып, ҡулға алынған йөҙ баштары язаға тарттырылғас, Герасимов хуторына минең ағай Савелий килде һәм войсковой йөҙ баштарының, казактарҙың бәхетһеҙлеккә юлығыуын хәбәр итте: генералдың, старшиналарҙың таланған хужалыҡтары өсөн бөтә ғәскәргә аҡырып, үкереп иларға, бүре шикелле олорға бойоролған. Ағайым уйынса, хаҡһыҙ бойороҡто ғәмәлдән сығартыуҙы, язаланған, һөрөлгән йөҙ баштарын элекке ғәскәрҙәренә кире ҡайтартыуҙы ялбарып Перфильев менән Герасимовтың Петербургка – батшабикәгә мөрәжәғәт итеүҙәрен һораны. Быны бөтә казактар, ғәскәр исеменән казак Фофонов үтенгән. Перфильев менән Герасимов әлеге бурысты үтәргә ризалашҡас, Савелий Яйыҡ ҡаласығына барып, ғәскәрҙән йөҙ илле һум аҡса килтерҙе һәм үҙе лә илселәргә ҡушылды. Көҙ башында Петербургка барып еткәндәр. Күптән ғәскәр үтенестәре менән һәм Хәрби коллегиянан ҡасып унда йөрөгән Ивандың ағаһы Петр Герасимовты эҙләп тапҡандар. Дүртәү: Перфильев, Петр, Иван Герасимовтар, Савелий нисек булдыра ала, ҡулдарынан ни саҡлы килә, шул тиклем үтенес яҙып граф Алексей Григорьевич Орловҡа биргәндәр. Ул өс көндән: «Үтенесегеҙҙе батшабикәгә, ғәли йәнәптәренә еткерҙем», – тигән. Ә һин, Усаев, шул Орловтың кем икәнен белмәйһеңме? – тип һораны Василий.

Плотниковты ҙур иғтибар менән тыңлап барған Ҡәнзәфәр, бер аҙ ваҡыт өндәшмәгәндән һуң: «Ишеткәнем бар, генерал-аншеф. 1762 йылғы переворотты яһағанда, Петр Өсөнсөнө үлтереүҙә башлап йөрөүселәрҙең береһе. Шул Орловтар Екатеринаны батша тәхетенә ултырталар ҙа инде. Аңланыңмы? – тип ҡыҫҡа ғына әйтеп бирҙе. – Артабан тағын нимәләр беләһең?»

– Артабанмы? – тип һөйләп китте Василий, – былар ике аҙна буйы Орловтан хәбәр көткән. Бер көндө генерал-аншеф быларҙы саҡырып алған да: «Яйыҡ бәхетһеҙлеккә тарыған: унда үҙен батша Петр Өсөнсө тип иғлан иткән ҡасаҡ, башкиҫәр Дон казагы Пугачев пәйҙә булған һәм үҙ тирәһенә бер төркөм Яйыҡ казактарын, бигерәк тә Траубенбергты үлтереүҙә ҡатнашыусыларҙы йыйып, ҡәлғәләр буйлап Ырымбурға йүнәлгән. Хәҙер үк, – тигән Орлов, – артабан шунда китегеҙ һәм казактарҙы теге ҡараҡтан айырылырға ҡотортоғоҙ, ә үҙен тотоп бирегеҙ. Әгәр ҙә минең бойороҡто еренә еткереп үтәй алһағыҙ, батшабикәгә биргән үтенесегеҙҙең һеҙҙең файҙаға буласағын вәғәҙә итәм». Беҙҙекеләр ризалашҡан, һәм Афанасий Перфильев менән Петр Герасимов ике көндән һуң Яйыҡҡа юлланған. Ә минең ағай Савелий һәм Иван Герасимов Петербургта ҡалған. Теге икәү ҡайтҡанда төрлөсә баш ватҡан: «Нисек инде ябай әҙәм балаһы үҙен батша тип иғлан итә алһын?» Герасимов Петр Өсөнсөнө элек бер нисә тапҡыр күргән булған. Әгәр ул икән, һис шикһеҙ, таныясаҡ. Ысынлап та, әгәр ҙә Екатеринаның ире иҫән икән, ул сағында ҡайҙалыр үҙен күрһәтергә тейеш тә инде. Петр таныһа, ялған батшаға ҡарата бер ниндәй ҙә насарлыҡ ҡылмаҫҡа. Тик шуныһы: унымы, әллә батшабикәне яҡларғамы? Яйыҡ ҡаласығына ҡайтҡас, комендант Симоновҡа документтарын күрһәтәләр. Ә инде теге, хәлде аңлағас, Герасимовты Михаил Толкачев ҡоторҡтан казактарҙы яуыз уйҙарынан кире ҡайтырға саҡырыу өсөн Яйыҡтың түбән форпостарына, ә Перфильевты шул уҡ маҡсатта казак Иван Фофонов һәм бер туған Морошкиндар менән бергә Ырымбур эргәһендә торған Пугачев төркөмөнә ебәрә. Ә бит шул уҡ Фофонов, ҡәбәхәт, һуңынан Яйыҡ казактарын хөкөм итте. Юлда барғанда Перфильев эштең дөрөҫөн асып һала. «Беҙ уның ысын батша икәнлеген ишеттек. Миңә, бөтә ғәскәргә күп яҡшылыҡтар эшләйәсәге хаҡында указ ебәрҙе. Шуға күрә уға ҡарата хөсөтлөк эшләй күрмә, юҡһа һиңә бик хөрт булыуы ихтимал,» – ти тегеләр. Перфильев

ҡурҡышынан һатмауҙарын үтенә, бергәләшеп Петр Федоровичҡа намыҫлы хеҙмәт итәсәген белдерә. Берда биҫтәһендә Перфильев элекке дуҫына – әле инде Пугачевтың беренсе атаманына әйләнгән Андрей Овчинниковҡа килә. Дуҫы иһә быны Иван Федоровичка күрһәтергә алып китә...

Ә инде Перфильевтың Пугачевҡа тәүге килеүенә Ҡәнзәфәр үҙе шаһит. Кинйә менән икеһен Ырымбурға штурм яһау хаҡында кәңәшләшеү өсөн саҡыртҡайны. Һүҙ башлауға Овчинников инеп, ниндәйҙер казакты алып килеүе хаҡында әйтте һәм килтерергә рөхсәт һораны.

Пугачевтың йөҙөндә ризаһыҙлыҡ беленһә лә, ҡулын һелтәп, «әйҙә»не аңлатты.

Перфильев күкрәген усы менән ҡаплап, башын эйҙе. Ул оҙон ғына буйлы, көмрө, әллә йөҙө шаҙраға күрә, уҫал күренде.

Овчинников әлеге кешенең кемлеген, ҡайҙан, ниндәй маҡсатта килеүен ҡыҫҡаса ғына әйтте.

– Ни өсөн Петербургка барҙың? – тип һораны Пугачев ҡоро ғына.

– Мин, атаҡай, ғәскәр һорауы буйынса барғайным. Тик бында килеүегеҙҙе ишеткәс тә, үтенесебеҙгә резолюция һалғанды ла көтөп тормай, һеҙгә намыҫлы хеҙмәт итеү өсөн ҡастым.

– Алдашма! Шымсылыҡ итергә ебәрмәнеләрме?

– Юҡ, ғәли йәнәптәре, Һеҙгә ҡарата бер ниндәй ҙә асыу тотмайым.

– Дөрөҫөн әйтәһең икән, ул сағында үҙегеҙҙең казактар кеүек ихлас хеҙмәт ит. Әгәр ҙә уҫал ниәт менән ебәрелһәң, мин ҡурҡмайым, уйымса, быны бер кем дә эшләмәҫ. Ә инде Петербургка барып һоранып йөрөү кәрәкмәй, ундай үтенестәрҙе үҙебеҙ хәл итербеҙ. Шулай ҙа әйт әле: минең хаҡта Петербургта нимә һөйләйҙәр?

– Беҙ юғарылағы әфәнделәр менән аралашманыҡ. Ә кабактағы ҡара халыҡ шыпырт ҡына: «Ырымбур эргәһендә император Петр Өсөнсө пәйҙә булған һәм ҡала артынан ҡаланы, ҡәлғә артынан ҡәлғәне ала икән,» – тип һөйләй.

– Һүҙҙәре дөрөҫ икәнен үҙең күреп тораһың. Ваҡыты еткәс, Петербургты ла алырбыҙ. Ҡара халыҡтың бөтә ерҙә лә мине ҡыуанып ҡаршы аласағына ышанам.

Һөйләшеү тамамланғандан һуң, Пугачев Перфильевҡа ҡыҙыл буҫтауҙан тегелгән кафтан бүләк итте һәм ун өс һум аҡса бирҙе. Овчинников командаһында хеҙмәт итергә ҡушты...

Көслө буран күтәрелгәс, ристандарҙы оҙата барған ылау станция ҡараусы йортонда туҡталды. Эстә әллә ни йылы булмаһа ла, үҙәккә үтә торған ел юҡ ине. Тоҭҡондар, һәр саҡтағыса, өҫтәренә нимә кейгән – иҙәнгә шул килеш ятты. Кемдер, бесән булһа ла индереп йәйәйек, тигәйне, ҡарауылсы: «Һеҙҙән башҡа ла сүп-сар етерлек, йыйып бөтөрөрлөк түгел,» – тип ҡәтғи ҡаршы килде.

Был төндә лә Ҡәнзәфәр менән Василий рәттән ятты. Бер-береһенә һыйынышып, йылы һаҡларға тырыштылар.

Василий Плотниковтың хәбәр сурытыуына Ҡәнзәфәр ғәжәпләнә төштө. Берәй сер сисергә теләйҙер, тиер инең, хәҙер уларҙың кемгә хәжәте бар. Яуапты күп тапҡырҙар алдылар, шаһиттар, яуҙаштар менән ҡапма-ҡаршы осраштырып та төпсөндөләр. Бөтәһе лә асыҡланды, бөтәһе лә аңлашылды, хөкөм ҡарары сығарылды, әҙәм ышанмаҫлыҡ язаға тарттырылынды, инде – ғүмерлек каторгаға... Кемдәндер ҡурҡаһы ла, өркәһе лә юҡ. Кем белә, Плотников, бәлки, үҙен тыңлаусы булғанға күңелен еңеләйтергә, тынысландырырға теләп һөйләйҙер.

Инеп-сығып йөрөүселәр туҡтағас, ул тағын Перфильев хаҡында һөйләй башланы:

– Йөрәге бәргеләндеме икән, Перфильев Петербургтан ни өсөн бында ебәрелеүен Овчинниковҡа ла асып һалған. Орловтың: «Яйыҡта пәйҙә булған бәндә Петр Өсөнсө түгел, ә Дон казагы Пугачев,» – тигән һүҙҙәрен дә әйткән.

– Һин, Афанасий, икеләнеүеңде күңелеңдән сығарып ташла, – тигән Овчинников, – ул ысын Петр Өсөнсө. Батша сатраптарынан күп интектек, мысҡыллландыҡ, хәҙер бөтәһе лә үҙебеҙҙең ҡулда буласаҡ. Ҡара уны, әгәр ҙә государға берәй хөсөтлөк эшләргә уйлайһың икән, миңә үпкәләмә, дуҫһың тип тормам, һине үҙем ботарлармын. Был уйҙарыңды үҙенә еткерергә кәрәк. Әгәр был хаҡта берәйһенән ишетә ҡалһа, хыянатҡа иҫәпләр. Тартынһаң, үҙем әйтәм. – Овчинников Пугачевҡа инеп һөйләй ҙә Перфильевты саҡырта.

– Нимә әйтергә уйлайһың, Перфильев? – тип һорай Пугачев.

– Атаҡайым! – тип Пугачевтың аяҡтарын барып ҡосаҡлай Перфильев. – Һиңә ҡаршы яуызлыҡ ҡылырға ебәрелгәйнем, тик был хаҡта һеҙгә әйтергә ҡыйманым. Тик бындай ямanлыҡты ҡылырға уйламаным да.

– Ҡара әле, мин быны һиҙендем бит. Был хаҡта онот, һине кем ҡотортҡан, улар менән үҙем иҫәпләшермен.

Яйыҡ ҡаласығында Симоновҡа ҡаршы миңә лә ныҡ һуғышырға тура килде. Шул мәлдә Пугачев казак даирәләрен йыйҙы ла үҙенең ғәскәренә Яйыҡ исеме биреү хаҡында указын уҡытты. Шунда уҡ, ғәскәр атаманын һәм ике старшинаны үҙегеҙ һайлағыҙ, эштәре ҡәнәғәтләндермәһә, өс йылдан һуң ҡабаттан һайлау үткәрербеҙ, тине. Үҙ-ара кәңәшләшкәндән һуң атаман итеп Каргинды, ә старшиналар итеп Перфильев менән Фофоновты һайланыҡ. Беҙҙең боронғо йолабыҙҙы тергеҙеүенә шатландыҡ. Вағыраҡ хөкөм эштәрен ғәскәр судьялары ҡарамағына тапшырҙы. Ә инде ҙур енәйәтселәр була ҡалһа, уға килтерергә ҡушты. Шунан бирле Перфильев Яйыҡ ҡаласығында тоғро торҙо һәм Симоновҡа тынысланырға ирек бирмәне, һөжүм ойоштороҙо. Һәр һуғышта ҡатнаштым. Ялған батша Татищев ҡәлғәһендә тар-мар ителеп, генерал Мансуров ҡаласыҡҡа табан килә башлағас, беҙ далалар аша үтеп, Башҡортостанға барып сыҡтыҡ, шунан Магнит ҡәлғәһендә Пугачевты таптыҡ. Ғәскәре күп түгел ине. Ҡарағай, Степной, Петропавлов ҡәлғәләрен алғас, Троицк ҡәлғәһенә штурм ойоштороғанда Пугачев кешеләре һигеҙ меңгә етте. Ләкин шул тирәлә беҙгә генерал Деколонг һөжүм итте. Беҙ ҡот осҡос һәләкәткә юлыҡтыҡ. Бөтә әсирҙәрҙе, бөтә пушкаларҙы, бөтә ылауҙы дошман алды. Ҡалған мең ярым кеше менән Башҡортостанға ҡастыҡ. Шунда беҙгә дүрт мең башҡорттан торған ғәскәр ҡушылды. Тик беҙҙе тағын еңелеү көткән икән, ниндәйҙер Лягушкина тигән йылға буйында беҙҙе подполковник Михельсон ҡыуып етте. Яман һуғыш булды. Донъя бөтә икән тип торҙом. Ҡыйратылдыҡ. Йүнле-башлы ҡорал юҡ. Биш йөҙ кеше ары киттек. Еңелеүебеҙгә ҡарамаҫтан, бик күп башҡорттар ҡушылды беҙгә. Пугачев береһенә – генерал, икенсеһенә – бригадир, унауһына полковник дәрәжәһе, ҡайһыларына кафтан бирҙе. Усаға еткәндә уның ун мең кешенән торған ғәскәре бар ине. Ҡазанға юлланғанда беҙ – Яйыҡ казактары – уны, Мәскәүгә китәйек, тип өгөтләй башланыҡ, ә ул: «Ваҡыт етмәгән әле. Тәүҙә Донға барырға кәрәк. Шунан һуң ғына Мәскәүгә йүнәлербеҙ», – тип ҡырт киҫте. Ҡазанға юлланырға ғына торғанда, ниндәйҙер башҡорт Пугачевҡа сауҙагәр ҡартты килтерҙе: урта буйлы, ябыҡ битле, шаҙраһы ла бар, сәсенә аҡ төшә башлаған, һөйләгәндә ирендәрен супылдата, йәше алтмыш тирәһендә. Пугачев иһә: «Бөйөк кенәз Павел Петрович миңә хат ебәргән», – тип белдерҙе. Юлда барғанда Перфильев ҡыҙыҡһынып теге ҡарттан һорашты. Эргәләрендә булғас, уларға ныҡ иғтибар иттем.

– Пугачевҡа уны мин алып барғайным бит, – тип мығырланы Ҡәнзәфәр.

– Китсе. Мин һине күрмәнем дә.
– Һуңынан ҡайҙа булды ул сауҙагәр?
– Пугачев уны Ҡазандан ҡыуып ебәрҙе. Петербургка китте шикелле.
– Башҡаса ослатҡаның булманымы?
– Петербург ер сигендә, ти, бит.
– Әй, алйот, алйот, ул авантюристың фамилияһы Долгополов. Әле беҙҙең менән бергә каторгага алып баралар бит.
– Китсе. Танау япраҡтарын киҫкәс, маңлайына, яңаҡтарына тамға һалынғас, билләһи, таныманым. Күҙҙәре, тауышы таныш кеүек шул. Тик уның ни өсөн язаланғанын белмәйем. Ҡулына ҡорал тотоп һуғышып йөрөгән кеше түгел дә инде.
– Яйыҡ ҡалаһына нисек ҡайттығыҙ?
– Бөтәһен дә һөйләһәң, оҙонға китер, Усаев, ҡыҫҡаса былай: Ҡазанда янғын сыҡҡас, Пугачев та, Перфильев та ҡала буйлап дошмандарҙы яман ҡыйраттылар. Атып, сәнсеп, аҫып үлтерелгәндәрҙең иҫәбен кем белгән. Ябай халыҡ үҙен яфалаған, интектергән чиновниктарҙы тотоп килтерә һәм беҙҙән шуларҙы язалауҙы үтенә ине. Уларҙың һорауына нисек ҡаршы киләһең? Дөрөҫөн әйткәндә, артығын да ҡыландыҡ шикелле. Һарытауҙар ҡаршылыҡ күрһәтһә лә, ҡаланы тиҙ ҡулға төшөрҙөк. Царицынды буйһондора алманыҡ. Ә инде Черный Ярҙа Михельсон беҙҙе тар-мар итте. Бөтә ылау, пушкалар уға эләкте. Пугачев әшнәләре менән Волганың һул яғына сығып ҡасты. Перфильев иһә унан айырылды. Бөтә тырышлыҡтары юҡҡа сыҡҡан, күпме туғандарын, дуҫтарын юғалтҡан Яйыҡ казактары тыуған төйәккә ҡайтыу яғында ине, тик Перфильев: «Унда бөтәбеҙҙе лә яза көтә», – тип уйҙарынан ваз кисергә өгөтләне, тик уны тыңлаусы табылманы. Киреһенсә, үҙен Яйыҡ ҡаласығына ҡайтырға мәжбүрләнеләр. Деркул йылғаһы эргәһендә еҫкәнеп йөрөүсе командаға юлыҡтыҡ. Ул беҙҙе тотоп, йәшерен командаға илтеп тапшырҙы....
Василий төндә сирләне, тәне ҡыҙҙы. Янды, туңды. Һаташты. Туҡтауһыҙ һыу һораны. Һалҡын ҡаҡ иҙәндә ятҡан әҙәм балаһының ҡапыл шыбыр тиргә батыуын күреп, Ҡәнзәфәр нисек итеп ярҙам итергә лә белмәне. Ишек төбөндәге һауыттағы һалҡын һыуҙан башҡа нимә бирә алһын һуң? Василий иһә туҡтауһыҙ һаташты. Йә: «Үлтер Михельсонды! Сигенмә!», йә: «Әйҙәгеҙ тауҙарға! Ҡасма!..» – тип ҡысҡырҙы. Әҙерәк тынып торғас, илай, ҡапыл туңа, ҡалтырай башлай. «Үлтермәгеҙ, өҫтөмә ябығыҙ», – тип ялына. Таңға табан ул тынысланды. Хырлап йоҡлап алды. Тик-тиҙ уянды. Алыҫта янған шәмдең томһа яҡтылығынан йөҙөн ныҡлап күреп булмай ине. Ул, ҡайҙа ятҡанлығын төшөнөргә теләпме, тороп ултырҙы. Аңланы шикелле, Ҡәнзәфәрҙе һелкетте.
– Усаев, һинме был?
– Эйе, – тип яуапланы Ҡәнзәфәр, башын ҡалҡыта биреп, – Ят, Василий, хәл ал.
– Һе. Хәл ал, имеш. Баш иҙелә.
– Ял ит, Плотников, иртәгә тағын юлға. Барып етергә күп ҡалманы шикелле.
– Ҡайҙа? Ғүмерлек йортобоҙғамы ни? Унда сирләмәҫменме? Мин иртәгә һиңә, Усаев, Башҡортостанда нисек һуғышып йөрөгәнебеҙ, башҡорттарҙың беҙгә нисек ярҙам итеүе хаҡында һөйләрмен. Ҡыҙыҡ, ҡыҙғаныс хәлдәр, ай-бай, күп булды.
– Өлгөрөрбеҙ, Василий, һөйләшербеҙ. Йоҡла.
– Ҡурҡам. Тәүге тапҡыр ҡурҡам, Усаев, йоҡлаһам, уянмаҫ кеүекмен. Ҡурҡам...
– Перфильев һалдатына шулай әйтеү оят.
Плотников иҙәнгә ауҙы, тағын туңа, ҡалтырай башланы. Ҡәнзәфәр, йылытырға теләп, уны үҙенә һыйындырҙы. Сәкмәнен уға япты. Арыуынан, Василийҙың бимазалауынан йонсоп, Ҡәнзәфәр ғәфләт йоҡоһона сумды...
– Торайыҡ, Василий, беҙҙе диңгеҙ көтә...

Тик бая һулышы ҡыҫылып яфаланған Плотников тынһыҙ ине. Һелкетеп ҡараны. Тәне һыуынһа ла, ҡатып та бөтмәгән. Тимәк, күптән түгел генә йәне сыҡҡан.

Василийҙың кисә үлгән яҡташы, Яйыҡ казагы Григорий Закладнов, ерләргә мөмкинселек табылмағанлыҡтан, урамда санала ята. Уларҙың икеһен бер ҡәбергә Ревель ҡалаһында ерләргә насип булған икән.

Әҙәм балаһының яҙмышы. Ҡәнзәфәрҙең әсәһе Маһинур әйтмешләй: «Кеше ғүмеренең оҙонлоғо – бармаҡҡа урарға ла етмәй».

– Ниһайәт! – тип ҡысҡырҙы оҙатып килеүселәрҙең командиры. – Рогервик!

Әлеге һүҙгә Ҡәнзәфәр артыҡ шомланманы. Рогервик портына ғүмерлеккә каторгаға ебәрелеүен Сенат указын тыңлағанда ишетте. Тик уның ҡайҙалығын күҙ алдына килтерә алманы. Ғазаплы юлда егерме көн үткәненә ҡарап Балтик портының ни ҡәҙәр алыҫлығын аңлай төштө. «Хәйер, диңгеҙҙәр яҡын булмай инде», – тип үҙен тынысландырҙы.

Офицер: «Рогервик!» – тип һөрәнләһә лә, ул бик үк яҡын түгел шикелле, сөнки тағын байтаҡ ара үтелде. Бәлки, сананан төшөп быҒаулы килеш атлағанға шулай тойолғандыр. Ултырып бармауҙың сәбәбе шул: аттарҙың арыуынан тыш, ҡар юҡлыҡтан, сананы табандарын ҡарһыҙ ерҙән һөйрәтергә кәрәк ине.

Ҡышҡы көн, төньяҡ булғанғамы, бөтөнләй ҡыҫҡа икән. Әле генә тигәндәй төш ауғайны, әле килеп, бөтөнләй күҙ бәйләнер саҡты хәтерләтеп, ҡараңғылана барҙы.

Йыуан бүрәнәләрҙең юғары яғын ослап баҫтырып ҡуйған ниндәйҙер бейек ҡойма ҡаршыланы. Ҡалын ҡапҡаһының ике яғында ике һалдат баҫып тора. Улар килеп туҡтаған ылауға боролоп та ҡараманы. Ауыр ҡапҡа асылғас, сана ситенә әләгеүҙән ҡурҡҡандай, сигенә бирҙеләр. Ниндәйҙер тәпәш йорттарҙан тыш, алыҫтараҡ сиркәү манараһы шәйләнде.

Алты пугачевсы яңы – 1775 йылды таш зинданда ҡаршыланы. Юлда килгәндә уларға тамаҡ ялғау өсөн тәүлегенә ике тин бүленһә, бында йәнде нисек аҫраясаҡтарын бер Хоҙай белә.

Ҡәнзәфәрҙе ике кешелек камераға яңғыҙын яптылар. Юғарыға уҡ тишелгән тәҙрәнән яҡтылыҡ самалы төшә. Ҡышын шулай, ә йәйге айҙарҙа, аҡ төндәр килгәс, һуҙыла, ти. Тоҡҡон көндөҙ ятып тормаһын, йоҡламаһын өсөн, тар һикене күтәреп, стенаға һөйәп бикләп ҡуялар. Йәйҙең аяҙ, эҫе булыуына зарланылһа, әле килеп тик үҙеңдең эске йылыңа ғына ышанырға ҡала, юҡһа түшәмдәге, стеналарҙың өҫкө өлөшөндәге бәҫте ҡырып алырлыҡ. Ауыҙ, танау тишектәренән бөркөлгән тын сана тартҡан аттарҙы хәтерләтә. Ихатаға сығарып йөрөтөү ҡаралмаған. Кәрәге лә юҡ. Сөнки унан туңып ҡына керер инең.

Нисәлер көн үткәс, камераға Долгополовты индерҙеләр.

– Йылыраҡ булыр, – тине комендант Деморклевский. Генерал-майор погондарын йөрөтһә лә, ваҡланмайынса үҙе килгән. – Бында хеҙмәт иткәнемә ун йыл тулып уҙҙы. – Етмәһә, оялмайынса маҡтанып ҡуйҙы. «Йүнле генерал булһа, ошонда ятҡырмаҫтар ине. Йөкмәтелгән бурысын үтәй алмағаны өсөн берәй ваҡыт янғандыр, тип уйлап ҡуйҙы Ҡәнзәфәр. – Һытылғансы ашауы, ихатала иркенләп йөрөүе менән генә каторжниктарҙан айырылалыр. Ҡояшты йүнле-башлы күрмәүен һары йөҙө күрһәтеп тора».

Комендант, үпкә сире менән интеккән кешеләй, ябыҡ, төҫһөҙ ине. Һулышы ла ҡыҫыла шикелле. Оҙон, һөйәк-тиренән генә торған бармаҡтары менән һары мыйығын һыпырғылап ала.

– Башҡортостанданһың икән, – тип Ҡәнзәфәргә текләне. Күҙҙәре нурһыҙ, хатта кипкән төҫлө тойолдо. – Унда булырға форсат теймәне-тейеүен, әммә ул төбәк хаҡында күп ишетергә тура килде. Бөтөнләй ҡырағай төбәк, ти, дөрөҫ булһа. Кешеләре лә тәүтормош рәүешендә йәшәйҙәр икән. Шулаймы?

Ҡәнзәфәр көләмһәрәне.

– Барып күрергә кәрәк.

– Ҡырағай халыҡтымы?

– Һеҙ генерал бит.

– Генерал. Ундай яуыз халыҡ хатта атаһын, әсәһен танымайҙыр.

– Төрмәнән тороп халыҡ хаҡында фәлсәфәүи фекер йөрөтөүе ауыр, генерал. Урал тауы итәгенә ултырып баллап сәйен, ҡымыҙын эсергә кәрәк.

– Әйткәндәй, бынан егерме йыл элек булған болағыҙҙа ҡатнашҡан бер нисә башҡорт мин килгәндә лә бар ине. Бәләкәй Рог утрауына быуа быуыу туҡталғас, эшкә яраҡлыларын Себергә ебәрҙек. Берәүһе әле лә бар шикелле. Һеҙ ҡасыу хаҡында уйлай күрмәгеҙ. Бынан сыҡкан да ҡотола алмай. Әгәр үләһегеҙ килә икән, үҙегеҙҙең ихтыярҙа. – Генерал, һүҙ тамам икәнлегенә ишара яһап: – Бына шулай, каторжандар, яуыз Пугачевтың көсөктәре, – тине лә ишеккә боролдо. Сығып киткәндә: – Һинең, Усаев, ҡасырға яратыуың хаҡында өҫтәп яҙғандар. Шуға киҫәтмәксе булдым.

Ауыр ишек ябылды. Шарт-шорт бикләнеләр.

«Ҡайҙан икән теге әҙәм балаһы? Берәй нисек күргәндә һәйбәт булыр ине. Осратһам, ҡыуаныр ине. Бәлки, кешелек сифаттарын да юғалтмағандыр?..» – тигән уй Ҡәнзәфәрҙең күңелендә урын алды. Алда көндәр, айҙар, йылдар күп бит әле, үлмәһә, бәлки, осратып һөйләшергә лә форсат табылыр. Шайтан ғына өмөтһөҙ, ти.

Евстафий Долгополов ныҡ йонсоған. Тәүге тапҡыр Әнәс ауылында күргән сауҙагәр кеүек түгел ине, әлбиттә. Ул саҡта Пугачев менән осрашырға ашҡынып торҙо. Юлда барғанда ялға туҡтағанда ла: «Тик ятҡан ат арымай, әйҙә, ҡуҙғалайыҡ», – тип теңкәгә тейеп бөттө. Ат һатып алғанда: «Егерме биш һумдан бөлмәм, юл уңһа, бишләтә, унлата ҡайтарылыр, Аллаһ бойорһа!» – тип серлерәк һүҙҙәр ҙә ысҡындырғайны шул саҡта.

«Нимә етмәй был сауҙагәргә? Ябай халыҡ кеүек интегеп йәшәгән бәндә түгел дә инде. Ә ни өсөн әле уны шул тиклем язалағандар? Язалауҙан тыш, бында ла һөргәндәр. Ниндәй ғәйептәре өсөн?..» Долгополовты камераға килтергәс, Ҡәнзәфәрҙең күңелендә йөрөгән әлеге һораулы уйҙары ҡабаттан ҡалҡып сыҡты.

Ҡайһы бер әҙәм балаларын, моғайын, көтөлмәгән тормош шарттарына юлығыуы телен асалыр, һөйләнергә мәжбүрләйҙер. Долгополов та, мәрхүм Василий Плотников кеүек, һүҙсән булып сыҡты. Камеранан сыҡмай ултырған каторжан өсөн был хәл файҙалы ла, сөнки ғазаплы күпмелер ваҡытты үткәрергә ярҙам итә. Әгәр ҙә эргәңә ауыҙын асырға ла теләмәгән кеше тура килһә, үҙе бер яза булыр ине. Ржев сауҙагәре иһә, һорашҡанды ла көтөп тормай, тота ла тормошонда булған ваҡиғаларҙы теҙә башлай. Хатта өҙөп-йыртып һөйләмәй, ә бер тәртипкә һалып алған.

– Мин һине тәүге тапҡыр күргәс тә ябай кеше түгеллегеңде тойҙом. Бүләктәремде күрһәтеүемде талап иткәс: «Килеп ҡаптым», – тип шөрләнем. Ә инде Петр Федоровичҡа алып барасағыңды әйткәс, Пугачевты белеүеңде, ул-былдан ҡурсаларға теләүеңде аңланым. Әүлиәлек бар үҙеңдә.

– Быларын ситкә ҡуйып торайыҡ, Евстафий, Пугачевты күреү уйы ҡасан һәм ниңә тыуҙы?

– Бөтөн бер тарих ул. 1773 йыл аҙағында мин йәшәгән Ржев ҡалаһындағы халыҡ араһында, имеш, Ырымбур эргәһендә батша ғәли йәнәптәре Петр Федорович пәйҙә булған, тигән хәбәр йөрөй башланы. Быға иғтибар итмәнем, сөнки Петр Өсөнсөнөң үлеүе, Екатерина Икенсенең тәхеткә ултырыуы хаҡында указдарҙы үҙ күҙҙәрем менән уҡығайным. Шул көндәрҙә Петербургта булған

һәм бөтәһенә лә шаһит Ржев сауҙагәрҙәренән дә ишеткәйнем. Әммә ләкин теге имеш-мимеш хәбәр көсәйгәндән-көсәйә барҙы. Бәлки, ул Пугачев түгел, ә ысынлап та Петр Федоровичтыр, бәлки, ул үлмәгәндер, тигән уй минең күңелде лә тырнай башланы. Әгәр шулай икән, файҙа күрәсәкмен. Сөнки мәрхүм батшанан аласағым бар ине.

– Ниндәй аласаҡ? Батшаның үҙенәнме? – тигән һорауҙы Ҡәнзәфәр бирмәйенсә түҙмәне. Әллә ысынлап та ғәли йәнәптәр менән үк үҙ-ара һатыу итештеме икән, юғиһә.

– Батша менән 675 һумлыҡ һоло алғайны. Аҡсаһын бирмәне. Петр Өсөнсө вафат, ә мин һаҡалды һыпырып ҡалдым. Бер саҡ Петр Евреинов тигән чиновникка мөрәжәғәт иткәйнем, ул: «Миндә ундай аҡса юҡ. Батша үлгәс аҡса һораусылар һинән башҡа ла бихисап», – тип яуапланы ла ҡуйҙы. Бәлә яңғыҙы йөрөмәй, тигәндәй, тауарҙарым тейәлгән баржалар Волгала батты. Аптырағас-йөҙәгәс, һоло хаҡын юлларға тип, Петр Өсөнсөнө эҙләргә сығып киттем. Воеводанан рөхсәт билеты алып, Мәскәүгә йүнәлдем. Унда Тверь бургомистрының кейәүен – сауҙагәр Федор Волковты эҙләп таптым. Ҡазанда һатыу уйы менән шул кешенән үтескә өс йөҙ һикһән һумлыҡ буяу алдым. Буталып йөрөй торғас, Нижегород сауҙагәрҙәрен осраттым. «Ҡазанда буяуға мохтажлыҡ бармы?» – тип һораным. Улар: «Кемгә кәрәк унда? Юлбаҫарҙар башлығы Пугачевтың бөтә ерҙә талауы хаҡында ишетмәнеңме ни? Киреһенсә, ундағылар булған нәмәләрен тиҙерәк һатырға тырыша. Әйбер-маҙарҙы Ҡазанда юҡ ҡына хаҡҡа ҡулға төшөрөп, бында килтереп һатып, яҡшы табыш алырға була», – тинеләр. Ә миңә ни шул буяуҙарҙы Мәскәүҙә һатып, егерме һум зыян күрергә тура килде. Шулай ҙа Ҡазанға юлландым. Барғас, шул беленде: башкиҫәр Берда биҫтәһендә тора икән. Киттем Минзәләгә. Үҙебеҙҙә алған билетты күрһәттем. Урындағы воевода: «Ҡайҙа бараһың?» – тип һораны. «Улым Ирбет йәрминкәһенә киткәйне, таушы-тыны юҡ. Әллә, мәйтәм, теге юлбаҫарға эләктеме? Улымдың иҫәнме-түгелме икәнлеген белеү өсөн Ирбеткә китеп барам», – тип яуапланым. Воевода Ҡазанда билдә һуҡтырмауыма ла иғтибар итмәне, хатта юл хаҡын түләргә булды. Рапорттар менән барырға тейеш һалдатын бер ыңғай эйәртеүемде һораны. Ризалаштым. Тик фатирға төшкән хужа һалдатты алмаҫҡа кәңәш бирҙе: «Боласылар һалдаттарҙы яратмай икән, уның арҡаһында һине лә харап итеүҙәре ихтимал». Ҡурҡыуымдан ҡабаттан Ҡазанға киттем. Батшаны күреү теләге мине Ырымбур юлына сығырға мәжбүрләне. Атта илтеү өсөн Гаврил исемле кешене ялланым. Ул тимерсе һәм буяусы икән. Уға дөрөҫөн һөйләргә ҡарар ҡылдым. Хәйер, ул Пугачевты һүгеп барҙы. Улымды түгел, ә Пугачевты эҙләүемде, ул Петр Өсөнсөмө, әллә түгелме икәнлеген белгем килеүе хаҡында әйттем. Сөнки миңә батша ныҡ таныш ине. Әгәр ул ысын батша икән, бурысҡа биргән һоло хаҡын һораясаҡмын. Әгәр түгел икән, үҙемдең сауҙагәр икәнлегемде әйтермен. Аҫмаҫ әле. Татар ауылына тап булынды. Пар аты менән татарҙы ялланым. Беренсе станциянан һуң тағын өс көн барғас, юлда өйөр-өйөр рус, башҡорт, татар йәйәүлеләре осрай башланы. Улар Берда эргәһендә яуыҙдың тар-мар ителеүе, үҙҙәренең дә шунда булыуҙары, хәҙер өйҙәренә ҡайтып барыуҙары хаҡында һөйләнеләр. Пугачев иһә бик әҙ генә кешеләр менән тауҙарға киткән. Әлеге хәбәрҙе ишеткәс, Мазина тигән ауылға кире килдем. Ике аҙна шунда торҙом. Үтеүсе татарҙарҙан, башҡорттарҙан Пугачевтың Өфөгә юл тотоуы хаҡында ишеттем. Ышаныслы оҙатыусы тип, ҡабаттан Гаврилға мөрәжәғәт иттем. Юлбаҫарҙы барыбер табырға кәрәк. Әгәр ҙә уның ялған батша икәнлеген белһәм, унға яҡын кешене яллап Пугачевты тотоп, батшабикәгә тапшырырға күндереп булмаҫмы, тинем. Ул сағында мин, ай-һай, яҡшы уҡ хаҡ алыр инем.

Гаврил ышаныслы татарҙы тапты. Юлда зыян итмәһендәр өсөн осраусыларға һәр саҡ, Яңы батшаны күрергә барабыҙ, тинек. Әнәс ауылына еткәнсе шуға иғтибар иттем: мосолмандар яуызға ихлас инеләр. Аты менән юл күрһәтеп килгән татарға түләргә онотҡанмын...

– Һаран булғаның өсөн Хоҙай һине һуңғы ваҡытта зыян күрһәттереп йәшәткән дә инде. Шул крәстиән һин алдаҡсыға ышанып, йәйге эҫелә күпме саҡрымдарға атын ҡыуған. Юлда осраған боласыларға ғына тоттораһы булған үҙеңде. Кемлегеңде белмәнем, юғиһә Ағиҙелде сыҡҡанда һыуға ташлар инем үҙеңде.

– Рәсәйҙә алдашмай йәшәп булмай, Усаев. Ә күпме ришүәтсе! Йомош менән канцелярияға инеп ҡараһаң, унда кемдәр ултырғанын белер инең. Ишек төбөндәгеһенән башлап түрҙә ултырғанына ҡәҙәр тамыҙырға, ә түрәгә ағыҙырға кәрәк. Шунһыҙ һин – хужаһыҙ бесәй, типкеләп ҡыуалар ҙа сығаралар.

– Шуларҙан өлгө алырғамы?

– Ә кемдән? Көтөүсенәнме ни, һинеңсә? Әллә һеҙҙәге старшиналар, канцелярияла, воеводала ултырыусылар изге йәндәрҙер тип уйлайһыңмы? Уларҙың бөтәһе лә – кеше елкәһенә ҡаҙалған талпан.

– Ә һин үҙең кем? – тип ерәнеп екерҙе Ҡәнзәфәр. Ул, бәлки, казематта ултырмаһа, был әҙәмде тыңламаҫ та ине. Ярым ҡараңғы таш баҙҙа һөйләнгән тауыш ишетеү, үҙең тауыш сығарыу ҙа – йәшәү тигән һүҙ.

– Һәр хәлдә мин юлбаҫар, талаусы түгел. Мин – сауҙагәр. Алып – һатар. Теләйҙәр икән, тауарымды алалар, кәрәге юҡ икән, боролоп та ҡарамайҙар. Бында бер енәйәт тә күрмәйем. Йәшермәйем, сауҙагәрҙәрҙең бөтәһе лә алдаша.

– Ярай, был һөйләшеүҙе ҡуйып торайыҡ.

– Әйтәйемме, һинең эргәгә күсереүҙе комендаттан үҙем һораным. Уға эләгеү әллә бик еңел булғандыр тип уйлайһыңмы? Ыштаныма йәшергән алтын тиндәрем бар ине, береһен бирергә тура килде. Хатта бында ла ришүәт алалар икән. Каторгала ла!

– Ә ниңә минең эргәгә?

– Электән танышҡа күрә. Һиндә шәфҡәтлелек бар, шул уҡ ваҡытта хәйләкәрһең дә. Әйткәндәй, аҡылһыҙ кеше хәйләкәр була алмай. Фәлсәфәң икенсе. Нисектер үҙеңсә фекерләйһең кеүек. Башҡа берәй холоҡһоҙ кеше менән тура килһәм, икеләтә, өсләтә яза булыр ине. Үлгәнсегә ҡәҙәр ыҙғыш, талаш, бер-береңде күрә алмау... Шулай түгелме?

– Ҡазанда нимәләр булды? Пугачев менән ҡайҙа айырылыштың?

– Пугачев мине һәр саҡ үҙенең тирәһендә тотто. Сәбәбен әле булһа аңламайым. Көймәле арбаһы эргәһендә күберәк Федор Федорович Чумаков менән булдыҡ. Адъютанты ине. Был Яйыҡ казагы Пугачевтың иң-иң ышаныслы кешеһе ине. Кама тигән ҙур йылғаның уң яғына сыҡҡас, бер кис ҡундыҡ. Юлға ҡуҙғалыр алдынан:

– Һиңә, атаҡай, алтмыш ботҡа яҡын дары килтерә инем, судноны Нижниҙа ҡалдырҙым, – тинем.

– Нисек алып килдең? – тип ғәжәпләнеберәк ҡараны миңә. Валлаһи ғәзим, зирәк кеше, әүлиә ине ул.

– Мискәләргә тултырттым да өҫтөнә шәкәр һиптерҙем.

– Ҡайҙан алдың?

– Уны ла Павел Петрович ебәрҙе...

Шулай һөйләп тиҙерәк Пугачевтан ысҡынырға хыялландым. Дошмандарын бер ниндәй ҡыҙғаныуһыҙ аҫтырыуы мине тамам ҡурҡыуға һалды. Ҡайҙа инде ул яуызды казактарҙан тоттороу уйы. Үҙемде ҡотҡарыу юлын эҙләргә кәрәк.

– Атаҡай, ебәр мине. Ҡазанға дары ебәрермен, Павел Петровичты ла эргәңә алып килермен, – тинем.

– Тороп тор, ҡасан ебәрергә икәнлекте үҙем беләм, – тине Пугачев, асыуланып.

Быны ишеткән казактар: «Ниңә үҙенән һорайһың, Афанасий Перфильевҡа йәки Иван Твороговҡа мөрәжәғәт ит. Уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һала батшабыҙ», – тип кәңәш бирҙе.

Бер саҡ шулай урман ситенә аттарҙы ашатырға туҡталғас, Перфильевҡа:

– Афанасий Петрович, ғәли йәнәптәргә һүҙеңде әйт әле, мине ебәрһен? Һуң, мине Павел Петрович көтә бит, – тинем. Ә ул шулай яуапланы:

– Юҡты лыҡылдама, ҡартлас. Беҙҙе алдайһыңмы? Һине Павел Петрович түгел, икенсе кемдер ебәргән. Дөрөҫөн әйт! Ә бына мине Петр Федоровичты тотоп Петербургка килтереү өсөн йөҙ илле һум аҡса биреп, кенәз Григорий Григорьевич Орлов ебәргәйне. Аллам һаҡлаһын, шундай хыянат юлына баҫаммы?! Бөтә дөрөҫлөктө мөхтәрәм әфәнденең үҙенә һөйләп бирҙем.

Миңә күп тапҡырҙар Чумаков менән бер йортта йоҡларға тура килде. Ул да, төрлө һорауҙар биргән булып, телде астырырға маташып ҡараны. «Әйт әле, ҡартлас, был әҙәм ысын Петр Федоровичмы, әллә Пугачевмы?»

«Пугачев хаҡындағы һүҙҙәр бөтәһе лә ялған. Петр Өсөнсөнө күп тапҡырҙар күргәнем булды. Ул үҙе!» – тинем. Емельян Пугачев икәнлеген белһәм дә дөрөҫөн әйтмәнем. Чумаков тегенең ятраҡан кешеһе бит. Тегеңә еткерер ҙә мине рәхәтләнеп язаларҙар.

Ҡазандың нисек яндырылғанын, таланғанын күрһәң икән! Пугачев кешеләрҙе үҙе үлтереп йөрөнө. Михельсон көслө булып сыҡты. Боласыларҙы ҡыйратты. Ҡазандан табанды ялтыратҡас, тамаҡ туйҙырыу өсөн бер ауылда туҡталдыҡ. Пугачев һыртылғансы ашаны ла кейеҙҙәр, келәмдәр түшәтеп, ял итергә ятты. Эргәһендәге бүрәнәгә килеп ултырҙым. Быға ҡунған себендәрҙе ағас ботағы менән ҡыуам. Билғауына ҡыҫтырып ҡуйылған кинжалына күҙем төштө. «Әллә, мәйтәм, үҙен ошо бысағы менән сәнсеп үлтерергәме?» Ҡурҡтым. Казактар рөхсәтенән башҡа эшләһәм, тегеләр ботарлап ташлар. Ҡазанға барғанда казактарҙың үҙ-ара һөйләшеүенән шуларҙы ла ишеттем.

– Ил гиҙеп күпме йөрөргә мөмкин? Өйҙәребеҙҙән йыраҡлашҡандан-йыраҡлашабыҙ. Бөтөп барабыҙ. Кемделер үлтерәләр, кемдер һыуға бата, кемделер язалайҙар. Оҙаҡламай Яйыҡҡа ҡайтырға кеше лә ҡалмаясаҡ.

– Петр Федорович үҙе әйтеп торҙо, кем уны тотоп батшабикәгә илтеп тапшыра, утыҙ мең һум аҡса бирәсәктәр. Башы шулай ҡиммәт икән.

– Биргәндәр, ти, тот тоҡсайыңды. Алдайҙар...

Волганың һул яғына сығыр алдынан Пугачев мине күрҙе лә эргәһенә саҡырҙы.

– Бар, ҡартлас, эҙеңде юғалт, бөтөнләйгә ебәрәм һине, – тине. Күлдәге эсенән сығарып илле һум аҡса бирҙе. – Юлыңа етеп торор. Һин сауҙагәр бит, табырһың.

– Атаҡай, күп аҡса туҙҙырҙым, – тинем. Ә ул:

– Меҫкенләнмә. Ҡазан эргәһендә таланмаһам, куберәк тә тамыҙыр инем. Хатта һоло өсөн дә... – тип шарҡылдап көлдө.

Чебоксарға йүнәлдем. Унда Перфильев исеменән батшабикәгә хат яҙҙым да Петербургка юл тоттом. Барып еткәс, кенәз Орловты эҙләп таптым. Хеҙмәтселәренә: «Мөһим хат бар, уны тик үҙ ҡулына тотторорға кәрәк», – тинем. Йоҡо бүлмәһенә индем.

– Һин кем? – тип һораны Орлов.

– Мин, әфәндем, Яйыҡ казагы, – тип яуапланым һәм теге хатты тотторҙом. Ул: «Перфильев, Перфильев», – тип, нимәнелер хәтерләргә теләпме, уйланып торҙо ла мине батшабикә эргәһенә, Царское Селоға, алып китергә булды. Икенсе көндө үк Екатерина Икенсе мине Галахов тигән капитан менән Пугачевты, Перфильевтарҙы табырға ебәрҙе. Һарытауға еткәс, Галаховтан өс мең бер йөҙ һум аҡса алдым да бер Дон казагы менән яуыздың төркөмөн эҙләп киттек. Әгәр Пугачевты эләктерһәм, аҡсалата ҙур күләмдә бүләк, ике мең һумға еткән элекке

бурыстарымды ла, шул иҫәптән һоло хаҡын да алырмын, сауҙагәрлегем сәскә атыр, тип уйлағайным, ләкин был юлы ла хыялым емерелде. Һарытауҙан сығып күп тә үтмәнем, юлда тап булған сауҙагәрҙән Пугачевтың тотолоуы хаҡындағы хәбәрҙе ишеттем. Был минең өсөн үлемгә тиң ине…

«Кемдәр генә йәшәмәй был фани донъяла, – тип уйланы Ҡәнзәфәр, – кешенең бәхетһеҙ яҙмышынан да төшөм, табыш алырға, файҙа күрергә тырышалар. Күтәргәс, шундайҙарҙы ла ер күтәрә шул. Йотмай». Шулай ҙа түбәндәге һорауын бирмәй булдыра алманы:

– Имеш, Пугачев Ҡазанда тәүге бисәһен осратҡан?

– Эйе, Софьяһын үҙем күрҙем. Ике ҡыҙын: Аграфераны, Кристинаны, малайы Трофимды. Бола башланғас та, уның ғаиләһен Дондан Ҡазанға килтергәндәр. Тәүҙә күҙәтеү аҫтында ниндәйҙер йортта тотҡандар, ә инде Пугачев Ҡазанға яҡынлашҡас, Йәшерен комиссия бинаһына күсергәндәр. Шау-шыу, ығы-зығы ҡупҡас, янғын яҡынлаша башлағас, быларҙы һаҡлаусы капитан, отрядын алып ҡайҙалыр һыпыртҡан. Шунан файҙаланып, Пугачев ғаиләһе урамға сыҡҡан. Булғас була бит донъяла әҙәм ышанмаҫлыҡ хәлдәр: китеп бара инек, бер малай ҡысҡырып ебәрмәһенме:

– Әсәй, әсәй, ҡара әле, атай казактар араһында китеп бара!

– Аллаһыҙ эт. Яуыз! – тип ҡысҡырҙы балалары эргәһендәге бисә.

– Ултыртығыҙ арбаға анау ҡатынды балалары менән! – тип Пугачев казактарға бойорҙо.

Пугачев типтереп йәшәргә ярата ине. Палаткаһында уны биш ҡатын, өсөһө ҡыҙҙар, хеҙмәтләндерҙе. Йоҡлағанда ике яғында ике ҡыҙ ята. Уларҙың сибәрлеген һөйләп, аңлатып бирерлек түгел. Балалары менән Софья урынлашҡан тирмә Пугачев палаткаһына йәнәш. Ире нимә ҡыланғанды күреп тора. Һарытауға етәрәк Пугачев Софья палаткаһына инде лә:

– Минең хаҡтағы уйың нисек, Дмитриевна? – тип һораны.

– Баш тартмаһаң, мин – ҡатының, ә тегеләре – һинең балаларың.

– Бөтәһе лә дөрөҫ. Һеҙҙән баш тартҡаным юҡ. Тик мине иғтибар менән тыңла, Дмитриевна: миңә Дон казактары килеп ҡушылды. Улар алдында миңә Пугачев тип мөрәжәғәт итә күрмә. Былай һөйлә: мин һеҙҙең өйҙә торғанмын, шуның өсөн ирендә язалап үлтергәндәр. Пугачев ҡатыны тип әйт, тик минеке түгел. Күреп, ишетеп тораһың, мине батша Петр Федорович, тип йөрөтәләр. Петербургты алғас, һине лә ситтә ҡалдырмам. Әгәр ҙә мин әйткәндәрҙе үтәмәһәң, ошо ҡылыс менән муйыныңды сабып өҙәсәкмен.

Хатта ҡылысын ҡынынан тартып сығарҙы. Шунан башлап ҡатыны менән яҡшы таныштар кеүек кенә һөйләште. Софья иһә Пугачев әйткәндәрҙе һөйләне. Имеш, уны, йәғни Пугачевты өйҙәренә индергәндәре өсөн ирен язалағандар. Тимәк, Петр Өсөнсөнөң ҡасып йөрөгән көндәре булған. Тик ул сағында кемлеген йәшергән. Яйыҡҡа барып сыҡҡас ҡына ғәли йәнәптәре Петр Федорович икәнлеген иғлан иткән. Пугачев Һарытауҙан Царицынға йүнәлде...мин шунда айырылдым. Артабанғы яҙмыштарын белмәйем...

***

Долгополов һәр көндө, башымдан үтте, тип төрлө-төрлө ваҡиғалар хаҡында һөйләне. Ләкин ҡайһыһы дөрөҫ, ҡайһыһы ялған икәнлеген айырыуы ҡыйын ине. Һөйләгәндәренең бөтәһе лә тип әйтерлек сауҙа мәсьәләләренә ҡағыла. Шул «һоло»һо менән башты ҡаңғыртып бөтөрҙө. Ҡәнзәфәрҙең төшөнә хатта һоло сәскән ерҙәр инә башланы. Имеш, атаһы муйынына тубал аҫҡан да һөрөлмәгән ер өҫтөнә һоло һибеп йөрөй. Ниңә әрәм итә икән? Үлән араһына төшкән орлоҡ

үҫә буламы? Йә алыҫ ҡышҡы юлға сыҡҡандар ҙа атҡа һоло алырға онотҡандар. Инде шул ғына ҡалмаған: һоло өйөмө өҫтөндә Долгополов ауыҙын йырып баҫып тора...

Волганың һул яғында ярға яҡын уҡ ултырған Красный Яр ауылы эргәһендә Пугачевты һуңғы хәл иткес яу көткән икән. Шул хаҡта үлеренән бер көн алда Василий Плотников һөйләгәйне.

– Пугачев, әллә үҙенең еңеләсәген тойопмо, әллә шуға күрә эргәһендәге яуаплы роль үтәүселәрҙең абруйын күтәрергә, уларҙы үҙенә тағын да яҡынайтыу, ихлас хеҙмәт иттереү теләге менәнме, юғары дәрәжәләр өләште. Андрей Овчинниковҡа генерал-фельдмаршал, Федор Чумаковҡа генерал-фельдцейхмейстр, Иван Твороговҡа генерал-поручик чиндары бирҙе.

1774 йылдың 25 августы. Хәтәр эҫе. Исмаһам, ел дә юҡ. Ул иҫһә, бәлки, ҡаршы яры саҡ күренгән йылға өҫтөнән еләҫ һауа өрөләр ине. Шундай ҡыҙыуҙа өҫкә Михельсон армияһы ябырылды. Әллә Чумаковтар, үҙ-ара алдан һөйләшеп, Пугачевты ауыр хәлдә ҡалдырырға уйлаған, ҡыҫҡаһы, беҙ тар-мар ителдек. Һәләк булыусыларҙың һанын кем иҫәпләһен: тирә-яҡ мәйеттәр менән ҡапланды. Ул аҡырып ятыусы яралылар! Мәхшәр. Күреп ҡалдым: Овчинников та ҡан эсендә ята ине. Яйыҡ ҡаласығында Мансуровтан еңелгәс, ул Башҡортостанға ҡасҡайны. Пугачевты Магниткала ҡыуып еткән. Шәп кеше ине мәрхүм. Иҫән ҡалһа, бәлки, Пугачев менән дә ундай уҡ хәл килеп сыҡмаҫ ине. Хәйер, кем белә инде.

Михельсондан тар-мар ителгәс, Пугачев иҫән ҡалған бер төркөм кешеһе менән көньяҡҡа – Бәләкәй һәм Ҙур Үҙән йылғаларына ҡарай һыпыртты. Күп ара үткәс, арып-талып ял итергә туҡтаныҡ. Пугачевҡа сатыр ҡорҙолар. Ғәжәп хәл: күңел тынысһыҙлана. Бына-бына тағын ниндәйҙер бәхетһеҙлек булыр төҫлө. Арттан ҡыуып килеүсе хөкүмәт ғәскәре күренмәй. Сөнки тигеҙ урын, уйһыулыҡ, тирә-йүн ялт итеп ята. Чумаков менән Твороговтың ҡояшта янған йөҙҙәре тағын да ҡарая төшкәндәй тойола. Күҙҙәре лә уҫал ҡарай. Улар эргәһенә Федулов килде. Ә ул, ябай казак булһа ла, ҙур начальниктар араһында үҙен харап иркен тота. Әйтерһең, бергә балыҡ ҡармаҡларға барырға әҙерләнәләр. Үҙ-ара ымлаштылар ҙа сатырға инеп киттеләр. Күп тә үтмәне, унан Чумаковтың яман итеп ҡысҡырыуы ишетелде:

– Һин, Емелька, беҙҙе оҙаҡ алданың! Һин Петр Өсөнсө батша түгел, ә хыянатсы, һатлыҡ йән һәм бола ҡутәреүсе Пугачев!

Ярһып Пугачев килеп сыҡты. Ул:

– Хыянат! Хыянат! Ат бирегеҙ!? – тип ҡысҡырҙы. Атҡа һикереп атланды ла лагерға сапты. – Хыянат! Хыянат!..

Уның артынан Чумаков, Творогов, Федулов елдерҙе. Улар әллә уңышһыҙлыҡҡа осрағанға яман һүҙҙәр менән һүгенделәр. Лагерға етеү менән тиҫтәләгән фетнәселәр Пугачевты уратып алды. Пугачевҡа ярҙамға тип ҡылысын болғап килеүсе ҡайнағаһы Егор Кузнецовты тегеләр шунда уҡ сапҡылап ташланылар.

– Нимә эшләйһең? Аҡылыңа кил! – тип Кинйә Арыҫланов Чумаковҡа ҡысҡырҙы. Тегеләрҙең ҡан баҫҡан күҙҙәрен күрә тороп, Пугачевты яҡларға ынтылыуын күреп ҡурҡып киттем.

–Ах-х, башҡорт! Араға керәһеңме-е... – тип тегеңә уҡталғайнылар, Кинйә, менгән айғырын ҡамсылап, далаға елдерҙе.

Арыҫлановтың шундай саҡта ат өҫтөндә булыуына ниңәлер ҡыуандым. Уны ҡыуып етергә теләүсе табылманы шикелле.

Заговорҙа ҡатнашыусылар Пугачевты Яйыҡ ҡаласығына алып ҡайтып, властарға тапшырҙы. Уларҙың үҙҙәренә ел-ямғыр теймәне, яҙаһыҙ ҡотолдолар. Ҡатыны Софьяны ла Яйыҡҡа алып килделәр. Ә сибәр, йәш Устинья Кузнецова

ҡарауыл аҫтында ине. Шундай яҙмыш көткән Емельян Ивановичты. Ауыр тупрағы еңел булһын, тип әйтер инең, ерләмәнеләр, ә кәүҙәһе киҫәктәрен Мәскәүҙең төрлө мөйөшөндә айырым-айырым яндырып, көлөн күккә осорғандар. Йәне йәнәттә булһын, тип әйтергә генә ҡала...

«Бөтәһе лә аңлашыла кеүек, ә ниңә һуң әле ҡойолған ҡан, түгелгән йәш, фиҙа ҡылынған меңдәрсә йәндәр елгә осто? Ебәрелгән ҡот осҡос хатамы, әллә ошолай файҙаһыҙ бөтөргә тейеш инеме?..»

Уйының сигенә сыға алмаған Ҡәнзәфәр, әрнеп:

– Беҙ – беҙ инде, халыҡ йәл, – тип әйтә һалды.

Хәйер, ҡайҙа, ниңә ашығырға? Каторгалағы тормош ниндәй тормош, ти. Ә бит көндәрҙе, йылдарҙы иҫәпләү башланып ҡына тора…

Балтик диңгеҙенең Фин ҡултығы ярына урынлашҡан Рогервик портына килтерелгәнгә йыл тулырға теүәл бер ай ҡалғас, Ҡәнзәфәр яман хәбәр ишетте. Уны ишек тишегенән ашарға биреүсе капрал эстон әйтте.

– Өсөнсө көн бында һинең кеүек тағын ике башҡортто килтерҙеләр. Һеҙҙеке кеүек, яуыз Пугачев эше буйынса.

– Кемдәр? Исемдәре...

– Һорау бирмә. Ярамай. Йәше – Салауат, ҡарты – Юлай. – Капрал башҡа ләммим һүҙ әйтмәне. Ишектәге тишек ябылды.

«Икәүебеҙ юлда үлгәйне, тағын һигеҙ булдыҡ. Салауатты нисек күрергә һуң? Уны бынауы сауҙагәргә алмаштырып булһа икән», – тип уйлап ҡуйҙы.

Бында тик уйланырға ғына мөмкин. Ҡулдарынан килһә, уны ла тыйырҙар, сикләрҙәр ине. Иртән, кис бирелә торған сейле-бешле икмәк киҫәген, көрөшкә һыу һәм төш аласаҡ өс-дүрт ҡашыҡ боламыҡҡа оҡшатып бешерелгән тәғәмде көтәһең. Көн ваҡытын шуға ҡарап ҡына самалайһың. Бығаулы ҡулдарың иһә һауыт тоторға ғына кәрәк. Ҡырҡ йәше лә тулмаған ир һуғыш йә иһә эш ҡоралын уйнатып торорға тейеш тә бит...

Көндәрҙең береһендә, ашау ваҡыты булмаһа ла, ишектәге тишек асылды. Теге капрал ине.

– Һин мосолманмы? – тип һораны Ҡәнзәфәрҙән.

– Ниңә кәрәк?

– Әйт.

– Эйе, мосолман.

– Сыҡ.

Ҡәнзәфәр аяҡтарын саҡ һөйрәп ярым ҡараңғы коридорға сыҡты ла һалдатҡа һораулы ҡарап туҡталды.

– Атла теге башҡа. Бер мосолман үлә.

Ҡәнзәфәрҙең йөрәге жыу итеп ҡалды: «Салауат!?»

Ситтәге казематтың ҡаҡ урындығында кемдер ята ине. Киң битенә тартылған һары тиреһе туңған кеүек хәрәкәтһеҙ. Һирәк кенә ҡалған керпекле күҙҙәрен саҡ асып йомдо.

– Һин кем? – Ҡәнзәфәр сырхауға эйелә бирҙе. – Ҡайҙан? – Сирле ирендәрен ҡымтып-ҡымтып нимәлер әйтергә булашты, ләкин һүҙен сығара алманы. – Ишетәһеңме? – Сирленең күҙ ҡабағы тертләгәндәй тойолдо.

– Үләм-м ин-де. Һүҙ әй-йт..

Ҡәнзәфәр үлем менән тартышып ятҡан әҙәм балаһын уңғараҡ бороп ятҡырҙы. Әллә бығауы уға ҡағылып тәнен ауырттырҙы, теге ыңғырашты. Бәлки, ясинды ишеттерерлек итеп уҡыу ярҙам иткәндер – бисараҡай йоҡоға талғандай тойолдо.

Капрал тиҙ үк Ҡәнзәфәрҙең арҡаһына төрттө.

– Әйҙә!

– Кемлеген беләйем.

– Ниңә кәрәк? Үлә бит.

Һөйләшеүҙе ишетеп булһа кәрәк, сирле күҙҙәрен аса төштө.

– Иш-шмыр-рат. Урал... – Тыны бөттө.

– Әйҙә! – Капрал тағын төрттө.

Ҡәнзәфәр коридор буйлап үҙ камераһына атланы. «Исеме шулайҙыр. Тимәк, Уралдан. Кем ғәзизе? Батырша абыҙҙың һуңғы һалдатылыр. Беҙ үлгәндә лә тыуған төйәктән яңы тотҡондар килтерерҙәрме? – тип уйланып керҙе Ҡәнзәфәр ауыр ишектән. – Көрәште дауам итергә малайҙар ҡалды бит әле. Улар иһә еңелмәҫ, беҙ ебәргән хаталарҙы ҡабатламаҫ. Аҡыллыраҡ булырҙар...»

Әлбиттә, үлем урындығында ятҡан каторжандың хәле хөртәйгәс, Ҡәнзәфәрҙе саҡырырға капрал үҙ белдеге менән килмәгәндер, бөтә эш тә комендант күҙәтеүе аҫтында алып барылалыр. Эшкә яраҡлы булһа, был әҙәм балаһын да иптәштәре менән бергә Себергә ебәрерҙәр, тиҫтәләгән йылдар дауамында йәһәннәми ғазап сикмәҫ ине. Себер ебәреү менән янаһалар ҙа, ул тыуған төйәккә генә түгел, күңелгә лә яҡын бит әле. Һәр хәлдә, баҫҡан ереңдә үлән, ағас үҫә, һулар һауаң да тоҙло еүеш түгел, айҙарға һуҙылған ҡыҫҡа көндәр, айҙарға һуҙылған ялыҡтырғыс аҡ төндәр ҙә юҡ унда.Үлем алдынан булһа ла, их, бер генә тапҡыр урамдағы йәшел сиҙәмдә аунайһы ине…

Ниһайәт, Салауат менән осрашыу көнө тыуҙы. Был 1777 йылдың август башы ине. Ҡәнзәфәрҙең ҡулға алыныуына өс йыл, ә Салауаттың бында килтерелеүенә ике йылға яҡын ваҡыт үткәс, пугачевсыларҙы ихатаға сығарып теҙеп баҫтырҙылар. Ҡәнзәфәрҙең һул яғына – Салауат, уң яғына Почиталин тура килде. Салауатҡа – егерме өс, Ҡәнзәфәргә теүәл ҡырҡ йәш.

Салауат каторжан кейемендә булһа ла, Ҡәнзәфәр уны шунда уҡ таныны. Ҡалын, теҙенән түбән ҡара күлдәкте унның киң яурыны тигеҙ итеп күтәреп тора. Бығауҙарын да ауыр һөйрәмәй. Тик мәсхәрәләнгән йөҙөн күргәс, Ҡәнзәфәр ҡысҡырыуынан саҡ тыйылып ҡалды, ыңғырашып ҡуйҙы. Маңлайына, яңаҡтарына тамға итеп утлы тимер менән «З» (злодей – яуыз), «Б» (бунтовщик – фетнәсе), «И» (изменник – хыянатсы) хәрефтәре баҫтырылыу ғына етмәгән, танау япраҡтары ла йолҡоп алынған. Килеп етмәҫтән бишенсе кеше булып уң яҡта торған берәүгә өндәште:

– Һаумы, атай!

– Хәлең нисек, улым?

– Һөйләшмәҫкә! – тип екерҙе капитан. Эргәһендәге йыуан кешегә боролдо: – Генерал-майор әфәнде, яуыз Пугачев эше буйынса ябылғандар һеҙҙең бойороҡ буйынса сығарып теҙелде. Ете кеше. Уңдан башлап фамилияларығыҙҙы әйтегеҙ! – Каторжандарға ҡысҡырҙы.

– Юлай Аҙналин. 55 йәш. Ырымбур губернаһы Өфө провинцияһы Тәкәй ауылы.

– Емельян Тюленев. 45 йәш. Тобол губернаһы Ялуторов дистрикты Курган биҫтәһе.

– Остафий Долгополов. 51 йәш. Ржев ҡалаһы.

– Илья Ульянов. 30 йәш. Яйыҡ казагы.

– Максим Горшков. 32 йәш. Илек казагы.

– Иван Почиталин. 27 йәш. Ырымбур губернаһы Яйыҡ ҡалаһы.

– Ҡәнзәфәр Усаев. 42 йәш. Ырымбур губернаһы Өфө өйәҙе Саҡмағош, Боҙаяҙ ауылы.

– Салауат Юлаев. 25 йәш. Ырымбур губернаһы Өфө провинцияһы Тәкәй ауылы.

Ҡәнзәфәр Салауаттың үҙ яғындағы уң усын ҡыҫып тотто. Теге лә ҡыҫты. Икеһенең дә бармаҡтары көс ташламағайны әле. Һөйләшергә рөхсәт юҡлыҡтан, улар ҡул йылыһы аша хәлдәрен белештеләр. Улар, әлбиттә, иң элек Кинйәнән

ҡылыс алыуҙарын, Ырымбурҙы, Көнгөрҙө штурмлауҙа ҡатнашыуҙарын, Әй буйында Пугачевтың икеһенә бер көндө бригадир дәрәжәһе, бүләккә кафтан биреүен хәтерләнеләр. Шул минутта Салауаттың һоро, Ҡәнзәфәрҙең зәңгәр күҙҙәренә шатлыҡ нурҙары ҡунды. Тик ни өсөн ихатаға сығарыуҙары аңлашылманы. Әллә өҫтәмә яуап алырға, нимәнелер соҡсонорға теләйҙәрме?

Порт коменданты генерал-майор Деморклевский эргәһендә баҫып торған күҙлекле ниндәйҙер кеше тегенең ҡолағына үрелә биреп нимәлер әйтте лә каторжандар янына килде. Һәр береһенең йөҙөнән бигерәк күҙҙәренә ҡараны, шунан беләктәрен ҡыҫты. Йөрөп сыҡҡандан һуң капитан эргәһенә килеп, уға ике-өс һүҙ әйтте. Теге аңлағанын белдереп башын һелкте лә, ҡаштарын төйөрөп, алдында баҫып торған ете кешегә баҡты.

– Өс тапҡыр сүгәләп күрһәтегеҙ!

Бойороҡ үтәлгәс, күҙлекле әҙәм комендант эргәһенә ашыҡты. Генерал капитанға иренеп кенә ҡулын һелтәне.

– Урындарына таралһындар, – тип канцелярияһына ҡарай китте. Теге бәндә лә уға эйәрҙе.

– Камераларығыҙға марш! – тине капитан. Ул, ауыр эш башҡарғандай, бирсәткәһе менән маңлайын һөрттө.

– Нисек булһа ла хәбәрләшергә, бер-беребеҙҙең иҫәнлекте белергә тырышайыҡ...

– Һөйләшеү! Карцер кәрәкме?! – тип капитан Ҡәнзәфәрҙең һүҙен бүлдерҙе.

Байтаҡ ваҡыт үткәс, шул мәғлүм булды, дөрөҫөрәге, капрал һөйләнде: Ревель вице-губернаторы пугачевсы каторжандарҙы эшкә мәжбүрләү өсөн Балтик портынан ҡалаға күсереүҙе һорап Сенатҡа рапорт яҙған икән.

Иоахим фон Сиверс 1777 йылдың 9 авгусында хәлде былай аңлатҡан: *«Сенат указы менән 1769 йылда Балтик портында яр емерелеүгә ҡаршы башҡарылған эштәрҙең туҡтатылыуы сәбәпле, каторжниктар башҡа ерҙәргә оҙатылды, бында тик ашатып ятҡырырға ҡарттар, һуҡырҙар һәм бәҫһеҙҙәр генә тороп ҡалды. Яуыз Пугачев эше буйынса портта аҫыралған биш кешегә Өфө өйәҙе Себер юлынан тағын икәү өҫтәлде: Юлай Аҙналин һәм башҡорттоң улы Салауат Юлаев, бер ниндәй эшһеҙ, бөтәһе ете кеше. Шул ҡалып һалынған етәүҙе ҡалалағы эштәрҙә файҙаланыу өсөн Ревелгә күсереүҙе Сенаттан үтенеп һорайым».* Тейешле ҡарауыл буласағын да әйтергә онотмаған.

Әммә Сенат 1778 йылдың 18 ғинуарында, пугачевсыларҙы күсереп йөрөткәндә ҡасыу ҡурҡынысы тыуҙырмаҫ өсөн, тик бер портта тоторға кәрәклеге хаҡында указ сығарған.

Шулай итеп был мәсьәлә башҡаса бер ваҡытта ла ҡуҙғалтылманы. Эш ябылды.

Ҡәнзәфәр теләһә ниндәй ауыр эшкә лә ризалашыр ине, тик асыҡ һауа, хәрәкәт, файҙалы эш булһа икән. Ул һәр көндө биш ваҡыт: иртәнге, өйлә, икенде, ахшам, йәстеү намаҙҙарын башҡарҙы. Ҡалған сәғәттәрен Ҡөрьәнде баштан-аяҡ күңеленән уҡыуға бағышланы. Йөҙ ҙә ун дүрт сүрәнән торған изге китапты яттан белә ине. Яҡындарына атап айырым-айырым аят сүрәләрен уҡырға ҡарар ҡылды. «Һәр мосолман Ҡөрьән-Кәримде уҡый белһә, донъя тағын да нурлыраҡ, яҡтыраҡ булыр ине», – ти торғайны Батырша абыҙы. Юҡ бит, мөмкин булһа, теләһә ниндәй китаптарҙы, яҙмаларҙы ла уҡыр ине. Ғәзиз ғүмер бушҡа, заяға үтә.

Үҙе белепме, әллә берәйһе һорауы менәнме, төшкөлөккә боламыҡ, һыу килтергән һалдат саҡ ишетерлек итеп кенә: «Ошо көндәрҙә Аҙналы малайы Юлай вафат», – тине.

Шунда уҡ ишектәге тишек ябылды.

Ҡәнзәфәр һауыттарын иҙәнгә ҡуйҙы. Теҙләнде. Күңелен бушлыҡ биләне. «Салауат ҡайҙа? Атаһының кәүҙәһен күрергә рөхсәт итерҙәрме? Сирек быуат

зинданда яфаланды. Ғүмерен аямай, Рәсәй намыҫы өсөн алыҫтарҙа һуғышып йөрөгән атамандың башына ирен үлтереп тәхеткә ултырған, немецтан тыуған бисә етте...»

Ул күңеленә килеп тыуған уйҙарын ҡыуып, күҙ алдына теге саҡта ихатаға сығарғас, иң беренсе кеше булараҡ, Салауат атаһының: «Юлай Аҙналин. Ырымбур губернаһы Өфө провинцияһы Тәкәй ауылы», – тигән һүҙҙәрен хәтерләне. Уҙған йыл батыр, зирәк кешенең ҡаты ауырыуы, урынынан да тора алмауы хаҡында ишетеп ҡалғайны. Ауыр тупрағы еңел, гүре яҡты, йәне йәннәттә булһын. Юлай мәрхүм рухына бағышлап Ҡөрьәндең иң мәшһүр сүрәләренең береһен «Йәә сииин» де уҡыны. Аяныс: данлыҡлы Салауаттың атаһын һуңғы юлына оҙатыуҙан ғажиз.

Дон казагы Емельян Иванович Пугачев эше буйынса Рогервикта тотолған каторжандар араһында Юлай Аҙналин иң өлкәндәренән һаналһа ла, ул Караваев, Горшков, Долгополов, Ульянов, Тюленев, Почиталиндан һуң баҡый донъяға күсте. Хәҙер инде ҡәһәрле портта һигеҙҙән тик икәү генә: Ҡәнзәфәр менән Салауат ҡына тороп ҡалды.

1800 йылдың сентябрь башы ине. Ҡәнзәфәр икенсе намаҙын уҡығанда, камера ишеге асылды. Ҡибла яғына ҡарап теҙләнгән Ҡәнзәфәр кемдәрҙер инеүен тойһа ла, артына боролманы. Амин тотоп, мыйыҡ, һаҡалын һыпырғас ҡына, ҙур ҡыйынлыҡ менән тороп баҫты. Һуңғы ваҡытта тубыҡ быуындары йонсота ине.

Камераға ике кеше ингән икән, берәүһе майор, икенсеһе капитан.

– Мин, – тине алдараҡ торғаны, – премьер-майор Дитмар. Май айынан башлап Балтик порты коменданты.

Ҡәнзәфәр өндәшмәй генә сағыштырмаса ҡарт, һары мыйыҡлы, бакенбардлы хәрбигә ҡарап торҙо. Ул хатта Экбаум тигән комендаттың алмашыныуын ишетмәгәйне.

– Эш шунан тора, каторжан Усаев: яуыз пугачевсыларҙан икәү генә ҡалдығыҙ: Салауат Юлаев һәм һин. Юлай малайының хәле хөрт. Оҙаҡҡа тартмаҫтыр. Аяғына баҫа алмай, тинеләр. Һине уның камераһына күсерәбеҙ. Быны минең изгелегем итеп аңлағыҙ. – Капитанға боролдо. – Бойороҡто үтәгеҙ. – Майор сығып китте.

Ҡәнзәфәр Салауат эргәһенә күсерелеүенә ихлас ҡыуанды, уның ауыр хәлдә икәнлеген ишетеп, сикһеҙ борсолдо. Ишетелгән һүҙҙәрҙең кире ҡайтарылыуынан ҡурҡып, капитанға өндәште:

– Хәҙер үкме?

Капитан яуап урынына башы менән генә үҙе артынан эйәрергә ишара итте.

Таш иҙәнле коридорҙан хәрәкәтләнгәндә Ҡәнзәфәр быҒауҙарының еңеләйеүен тойҙо. Табандарын шыуытманы, ә аяҡтарын саҡ ҡына булһа ла күтәрә алды. Стена ситендәге бер нисә ишек эргәһенән уҙырға ғына булһа ла, йөрәге шул араны тиҙерәк үтергә ашҡынды. Ул хатта Салауатты тере килеш күрә алмай, һүҙҙәрен ишетмәй ҡалыуҙан ҡурҡты.

Тере ине Салауат. Ул: «Был мин, Ҡәнзәфәр», – һүҙҙәрен ишеткәс, яугир башын күтәрергә, урын бирергә ынтылыпмы, стенағараҡ шыуышырға булашты.

Ажарлы яугирҙы сир йыҡҡан. Һары, ябыҡ, тамғалы битенә бихисап йыйырсыҡтар ҡунһа ла, төпкәрәк бата төшкән күҙҙәре элеккесә яғымлы, рәхимле булһа, әле килеп уларға һағыш, моңһоулыҡ яғылған. Урындыҡта ятҡан хәлһеҙ ҡулын ҡуҙғатырға булашты. Ҡәнзәфәр уның усын тотҡас, Салауаттың ауыҙы ситендәге йыйырсыҡ тартыла, тәрәнәйә төшөп, эйәгенә йылмайыу ҡунды. Ләкин әлеге йылмайыу тиҙ юғалды. Ауыртыналыр, һыҙланалыр, күрәһең, ҡаштары төйөлдө. Байтаҡ ваҡыт уҙғас, Салауат Ҡәнзәфәр усына һалған бармаҡтарын ҡыбырлатты. Саҡ ишетерлек итеп:

– Ҡасып булмаймы? – тине.

Ҡәнзәфәр үлем түшәгендә ятҡандарҙы күп күргәне, хәлдәрен еңеләйтергә теләп сүрәләр, аяттар уҡығаны бар. Ундай саҡта тик сирле яҡлы ғына булырға кәрәк. Мулла шулай уйлай.

– Тырышып ҡарарбыҙ, Салауат.

–Ҡал-л-тыр-рата... Йө-өҙөм Сок-ко-олов-Хлопушаныҡы кеүекме? Йәмһеҙме?..

– Нимә эшләп улай булһын, һиндәге тамғалар вағыраҡ.

Кискә иҫәпләнгән икмәк киҫәген, һыу килтерҙеләр. Ҡәнзәфәр юҡ тештәре менән икмәкте сәйнәп, Салауатҡа ҡаптырырға тырышты, тик ауыҙын астыра алманы. Ризаһыҙлыҡ белдереп, Салауат ҡаштарын емерҙе. Һыуҙы ҡапты. Бер арала әкрен генә:

– Һин аша. Һин йәшә, – тип бышылданы. – Мин – юҡ. Һин ҡас... шунан – мин... – Йоҡлап алдымы, һелкенмәне. Һулышы саҡ һиҙелә.

Сентябрҙең егерме алтынсы көнө ине. Болотһоҙ, ямғырһыҙҙыр, күрәһең: камераның бейектәге тәҙрәһенән һуҙылып ҡояш нуры һибелә.

Салауат күҙҙәрен асты, башын күтәрергә итте. Ләкин муйынын тота алманы. Ҡәнзәфәр хатта, уның хәле һәйбәтләнә икән, тип эргәһенә ашыҡты. Елкәһе аҫтына ҡулын тыҡты.

– Һе, – тип йылмая бирҙе Салауат, – тереләм. Ҡәнзәфәр, беҙгә – Тәкәйгә килерһең, йәме?

– Ярай, ярай, шунан Саҡмағошҡа, Боҙаяҙға барырбыҙ...

Салауат ҡапыл хырлап ҡуйҙы. Башы Ҡәнзәфәр ҡулына төштө. Йөрәге тибеүҙән туҡтаны. Хоҙайҙың рәхмәте, әллә күкте болот ҡапланымы, шунда уҡ ҡояш нуры ла юҡҡа сыҡты. Боҙаяҙ муллаһы ҡысҡырып ясин уҡый башланы...

Эстлянд губернаһы идаралығына түбәндәге рапорт юлланды:

*«Ошо айҙың 26-сы көнөндә каторжан тотҡон Салауат Юлаев үлде. Шул хаҡта хәбәр итәм.*

*Майор Дитмар.*

*28 сентябрь, 1800 йыл.*

*Балтик порты.»*

Эйе, ҡурҡыныс тотҡондарҙан берәүһе – Ҡәнзәфәр генә ҡалды. Шуныһы ҡыуандыра: 1802 йылда Дитмарҙы алмаштырған капитан Пегелов, әгәр йөрөй алһа, Усаевҡа ихатаға сығырға рөхсәт, тип шәфҡәтлелек күрһәтте. Рәхмәт үҙенә.

Пугачев бригадиры үҙенә шөғөл тапты: саҡ ҡуҙғатып йөрөтә алған суйыр ташҡа тимер киҫәге ярҙамында соҡоп ҡузыр, семәр төшөрә башланы. Шул тимеренә хәле бөткәнсе бәләкәй суйыр таш менән шаҡ та шоҡ һуғып булаша. Әлеге эше айҙарға, йылға һуҙылды. Ихатала үтеп-һүтеп йөрөүселәр был бисара әҙәмде тилегә иҫәпләп йәлләйҙәр. Хатта ҡайһы берәүһе туҡталып, ҡыҙыҡһынып ҡарап тора. Тимер шикелле ҡаты ташты әллә тишергә, ватырға аҙаплана – аңлашылмай. Кемдәр генә булманы тотҡондар араһында. Элек ярҙы нығытыу өсөн эшкә йөрөткәндә диңгеҙгә йөҙөп китергә ынтылып, батып үлеүселәр ҙә булды. Йәнәһе, ҡасалар, ҡайтып китәләр. Бөгөнгө быҡаулы бәндә ташты үҙ иткән. Йә уны берәй нәмә итеп күрәлер, аңлайҙыр...

Бөгөн бисара хәленә төшөрөлгән, ә ихтилал йылдарында ярты башҡорт ерҙәрен генә түгел, Көңгөр тарафтарындағы батша сатраптарын да ҡалтыратҡан «ялған» батша Пугачевтың иң яҡын полководецтарының береһенә әйләнгән Ҡәнзәфәр Усаев Дүртөйлө тәңгәлендә Ағиҙелде сыҡҡас та тупраҡтың төҫө ҡапыл үҙгәреүенә аптырағайны. Борай – Балтас – Аҫҡын тарафтарындағы ерҙәрҙе тупраҡ тип атау дөрөҫ түгелдер – унда һарғылт балсыҡ. Урман араларындағы уйҙыҡтарҙа ниндәй иген үҫһен, ти. Ул яҡтарҙа яҙ һуңлап, көҙ ашығып килә икән. Новгород, Псков, Эстландия тарафтары ла нәҡ шундай. Күлдәре, һаҙлыҡтарынан тыш, һуйырташтар, һарыҡташтар тулып ята. Сәрмәсән буйындағы

кеүек ваҡ түгелдәр. Бындағыларҙы аттарҙан һөйрәтеп ҡуҙғатырмын тимә. Уларҙы диңгеҙ тулҡындары этеп килтергәнме, әллә күктән төшкәндәрме – белеүсе юҡ. Һәр хәлдә, тыумыштары һыуға бәйлелер.

Ҡәлғә ихатаһында ла ике кеше күтәрерлектәре лә, унан вағыраҡтары ла бар. Бында килтереп япҡанда уҡ Ҡәнзәфәр, битен ҡаплаған ҡатып бөткән сеперәкте аса биреп, ниңәлер шул йәнһеҙ һәм кәрәкһеҙ таштарға иғтибар итте. Әгәр ҙә ҙур таштар Боҙаяҙҙа булһа, моғайын, бураһының дүрт мөйөшө аҫтына һалып, мәңге серемәҫ нигеҙ ҡорор ине.

Ихатаға сығырға рөхсәт ителгәс, хәл алырға ул шундай таштарҙың береһенә ултырғайны. Шунан ергә һуҙылып ятып, башын ташҡа терәне. Ғәжәп, хәле еңеләйеүен, тәненә көс өҫтәлеүен тойҙо. Әгәр ҙә хәтфәле үҙ ихатаһында зәңгәр күккә ҡарап ятһа, ғәйәт көслә егеткә әйләнер ине. Шулай ҙа, зиндандағы ҡаты таҡта менән сағыштырғанда, асыҡ һауалағы суйыр таш та күпкә йомшағыраҡ икән. «Зәхмәтле, Аллаһ ҡарғаған нидәй ер һуң был? Ҡышы оҙон, туңдырмаҫ та, йәйе ямғырлы, һулышты быуырлыҡ тынсыу, бер генә эҫе көнө булһасы. Тыуған яҡта донъя бөтөнләй башҡа икән шул. Ҡышҡы селләләрҙә ағас олоно шартлап ярылһа, йәйен eләктәр ҡыҙарып бешә, тештәрҙе ҡамаштырырлыҡ шишмә һыуы сылтырауына һандуғастар йыр менән ҡушыла. Пугачевтың хыялы байҙарҙан тартып алынған ерҙәрҙе, күл-йылғаларҙы, урмандарҙы ябай халыҡҡа өләшеп биреү ине бит. Ниңә һуң беҙ еңелдек? Һатлыҡ йәндәр ғәйеплеме? Әллә һуғыша белмәгәнбеҙме?» Ҡәнзәфәр был хаҡта туҡтауһыҙ баш ватты. Ләкин йөрәген тынысландырырлыҡ, күңелен йыуатырлыҡ яуап таба алманы. «Хоҙай ҡушыуылыр. Аллаһтан уҙып булмай. Иң дөрөҫө шулдыр». Уйҙары һәр саҡ ошонда килеп төртөлә.

Юҡ, Ағиҙелдең һул яғындағы ҡара тупраҡлы ерҙәрҙе Аурупа илдәрендә лә күрмәне. Шул уҡ Пруссияның Кунерсдорф ауылы тирәһендәге һоро балсыҡ ҡот оҫҡос һуғыштан һуң ҡыҙғылт төҫкә инде. Ҡан яман ҡойолдо шул. Немец ауылы Одер йылғаһы буйындағы Франкфурттан алыҫ түгел ине. Прус короле Фридрих II-нең ғәскәрен тар-мар иткәндән һуң яралы беләген ҡайыш менән муйынына аҫҡан рус офицеры:

– Беҙгә Одер  буйлап ағып төшөргә һәм Балтик буйлап карапҡа тейәлешеп, Польшала, Литовста, Латвияста, Эстландияла туҡталып тормай, Фин ҡултығынан Санкт-Петербургтың үҙенә керергә мөмкин. Нева Яр буйында Екатерина II үҙе ҙур еңеүебеҙ менән ҡотлар, – тигәйне.

– Эстландия тигәне ошо Эстландия була торғандыр. Тимәк, бынан караптар Пруссияға ла, Петербургҡа ла бара ала. Туҡта-туҡта, прус ерендә лә ошондай уҡ таштарҙы күргәйне бит. Тимәк, күп илдәрҙең ярҙарын диңгеҙ  үҙ-ара тоташтыра. Диңгеҙ икән, тимәк уның ҡаршы яғында ла яры бар. Диңгеҙ тип атала икән, яры ла икәү булырға тейеш. Әгәр ҙә диңгеҙ килтергән таштарҙы күп, бик күп йыйғанда, ҡаршы ярға һуҡмаҡ һалырға булыр ине. Был уйҙың Салауаттар тере саҡта башҡа килмәүе йәл...

Көндәрҙең береһендә оҙонсараҡ ташты баҫтырып ҡуйғайны, теге ҡәһәрең ауҙы ла Ҡәнзәфәрҙең һул аяғын аҫта ҡалдырҙы. Һынғандыр, моғайын, сөнки күҙенән уттар күренде. Ҡаҡ ерҙә оҙаҡ ятты. Сөнки ихатала йөрөүсе юҡ, ә инде ташты ҡуҙғатыу хаҡында уйларлыҡ та түгел. Имгәнелһә, зинданда тере мәйет рәүешендә ятыу тигән һүҙ...

Байтаҡ ваҡыттан һуң Ҡәнзәфәр аяғын һөйрәп ихатаға сыҡты. Таштарҙың үҙ урындарында ятыуҙарын күреп, балалар кеүек ҡыуанды. Саҡ ҡына хәл инеүгә, ул тағын шул таштары менән булышасаҡ. Үлем көткән кешегә бынан да ҙурыраҡ бәхеттең булыуы мөмкинме һуң!

Күргәндә үҙен һәр саҡ тәкәббер тотҡан комендатҡа тап булды. Майор подполковникка әйләнгән икән. Әллә шуғамы, был юлы өндәшмәй уҙманы.

– Нимәгә тарының, Усаев?

– Бер яңғыҙым өсөн ҡарауыл тотаһығыҙ, һеҙгә лә күңелһеҙҙер?
– Рәсәйҙә ҙур енәйәттәр эшләнеп кенә тора. Әйт әле, Усаев, бығауҙарыңды һалдырып алһаҡ, ҡасыр инеңме?
– Һе, ҡыҙыҡ һорау, – көләмһөрәне Ҡәнзәфәр, битлеген аса төшөп. – Ҡайҙа ҡасырға?
– Диңгеҙгә.
– Ҡартайылды, комендант. Ә шулай ҙа әмәлен эҙләргә булыр ине. Хоҙай миңә ошонда ерләнергә ҡушҡан. Баҡыйлыҡта ла көрәштәштәрем Аҙналин, Юлаев менән буласаҡмын. Һуңғы үтенесем шул: Юлай, Салауат эргәһенә ерләһәгеҙ икән. Һеҙ ҙә ҡартая төшкәнһегеҙ, подполковник әфәнде.
Комендант бирсәткә кейгән бармаҡтары менән итектәренең оҙон ҡуныстарын өҫкәрәк тартты, ерән мыйыҡтарының остарына ҡағылды.
– Ҡәлғәлә үлгәндәрҙең ҡәберҙәре билдәһеҙ булырға тейеш.
– Ә мин уларҙыҡын хәтерләйем.
Комендант китергә ҡуҙғалды.
– Һуңғы үтенесем: аяҡтарым һыҙлай, диңгеҙ һыуына тығып ултырһам ине.
– Тәрәнлеген үлсәмәксеһеңме?
– Тоҙло һыуҙың файҙаһы тейер кеүек. Ихатаға сығырға рөхсәт иткәнегеҙ өсөн рәхмәт. Һеҙгә ғибәҙәт ҡылдым.
– Һин христиан түгел дә.
– Аллаһ бирәү генә, комендант әфәнде.
Ҡәлғә хужаһы Ҡәнзәфәргә баштан-аяҡ күҙ һалды ла үҙ юлы менән китеп барҙы.
Икенсе көндө ике һалдат ағас биҙрәгә тултырылған диңгеҙ һыуын саҡ күтәреп ишек эргәһенә килтереп ултырттылар. Ҡәнзәфәр, ташҡа ултырып, ике аяғын да һалҡын һыуға тыҡты. Өмөтө таш ҡуҙғатырлыҡ көстән яҙмау һәм шаҡ-шоҡ һуғып таштарына ҡуҙыр төшөрөүен тамалап өлгөрөү ине.
Ике йылда ике суйырташты семәрләне ул. Икеһен дә, саҡ тәгәрләтеп, казарма стенаһы эргәһенә илтеп ҡуйҙы.
Шуны ғына көткәндәй, ҡайҙандыр бер төркөм һалдат килтерҙеләр. Улар ихатағы таштарҙы йыя башланы. Ҡәнзәфәрҙекеләргә лә сират етте.
– Ҡайҙа илтәһегеҙ? – тип һораны Ҡәнзәфәр һалдаттан.
– Тулҡынға ҡаршы өйҙөрәләр, стена кеүек.
– Ә һеҙ бынауы ике ташты өҫкәрәк, биҙәге менән диңгеҙгә ҡаратып ҡуйығыҙсы? Үтенеп һорайым.
– Ярай, бабай, беҙгә ни барыбер.
– Өҫкәрәк. Биҙәге менән диңгеҙгә ҡаратып.
Тағын өс-дүрт һалдат килде. Тәүгеһе Ҡәнзәфәрҙең үтенесен әйткәйне, тегеләр, көлөшә-көлөшә, уны үтәйәсәктәрен белдерҙе.
– Бүтән үтенесең юҡмы, олатай? Үҙең кем һуң? Битеңде ниңә ҡаплайһың?
– Тиҙерәк китегеҙ. Минең менән һөйләшергә ярамай. Язаға тарттырыла күрмәгеҙ. Һуғыштар булмаһын…
Һалдаттар стена ситендә ятҡан ике ташты күтәреп диңгеҙ яғына китте. Ысынлап та, улар серле ҡарт әсирҙең үтенесен еренә еткереп башҡарҙы.
Оҙаҡламай, ни сәбәптәндер, ниндәй йомош менәндер, Балтик портына яҡын уҡ килеп, төрөк карабы туҡтаны. Шлюпкала ярға яҡынайғас, штурман ҡоймастена рәүешендә өйөлгән таштар араһындағы йәнәш ҡуйылған семәрле ике ташҡа иғтибар итте һәм ғәрәпсә яҙылған ике һүҙҙе уҡыны: «Салауат», «Ҡәнзәфәр».
...1775 йылдың 17 мартында батшабикә Екатерина Икенсенең Пугачев болаһына ҡарата манифесы иғлан ителә: *«Мәңгегә оноторға һәм тәрән тынлыҡ һаҡларға».*



**Рәйсә**
**КӘРИМОВА**

# ЕТЕМ

## хикәйә

*Атайһыҙ бала – ярты етем,*
*әсәйһеҙ бала – үкһеҙ етем.*

Ниңә шулай икән: яман хәбәр ҡоштай осоп тарала. Уны йәшереп тә, кешенең ҡыҙыҡһындырыуын һүндереп тә булмай.

Ауыл туҙҙырылған умарта кеүек геүләне.

– Оятһыҙ! Ҡара, бәләкәй балаһын ташлап, ят ир менән сығып ҡас әле! Ҡыҙ бала бит әле, етмәһә! Ҡәбәхәт...

Ғиндулла бабайҙың төҫө ҡарайҙы. Ул уҡытыусы, коммунист, ә ҡыҙы шундай ғорур исемдәргә тап төшөрҙө. Нисек хәҙер ауылдаштарының йөҙөнә ҡарар? Нисек балаларҙы намыҫлы булырға өйрәтер? Хурлыҡ! Ғәрлек!

Ҡара мәрйендәй күҙҙәрен олатаһына төбәп, ябыҡ ҡына, бәләкәс кенә Әминә өҫтәл янында тора. Ни булғанын һорарға ҡурҡып, өндәшмәй бер аҙ торҙо ла өйҙән сығып китте.

Ихата эшен бөтөрөп, өйгә инәм тигәндә, Фатима әбей баҫҡыста ултырған кескәй Әминәне күрҙе.

– Бәй, ҡыҙым, ниңә ҡараңғыла бер үҙең ултыраһың әле? Ваҡыт һуң, әйҙә, инәбеҙ, һиңә йоҡларға ваҡыт, – тине ул, ҡыҙыҡайҙың ҡулынан алып. Әминә, ололарса тәрән уфтанып, өләсәһе менән өйгә инеп китте.

Ғиндулла бабай һаман ҡуҙғалмайса өҫтәл янында ултыра биргән икән.

– Ярай инде, ҡарт, тыныслан, булған эште үҙгәртеп булмай. Үҙебеҙ ғәйепле, аҡыл бирә алмағанбыҙ ҡыҙыбыҙға!

– Тайт! Минең ҡыҙым юҡ! Ишетәһеңме? Юҡ! Әҙәм страмы-ы-ы... – Ғиндулла,

*Рәйсә Кәримова-Хәйруллина (1953) Өфө ҡалаһында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын тамамлағандан алып М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның филология факультетында уҡыта. Филология фәндәре докторы, профессор.*

*Авторыбыҙҙы күркәм юбилейы менән ҡотлайбыҙ.*

башын ике ҡуллап тотоп, бер яҡтан икенсе яҡҡа һелкетә башланы. – Әминәнең атаһы Ҡыҙыл Армия сафынан ҡайтҡас, кем уға әсәһенең хыянаты тураһында һөйләп бирер? Һинме, ә?

Фатима әбей өндәшмәйенсә генә баланы етәкләп шаршау артына кереп китте. Киң карауатта теҙелеп киткән мендәрҙәрҙе һыпырып алды ла юрған өҫтөнә Әминәне ултыртып ҡуйҙы.

– Әйҙә, балам, сисен, ятабыҙ.

– Өләсәй, ниңә олатам шундай асыулы? Мин бит бөгөн ныҡ аҙып шаярманым.

– Йә, йә, бәпкәм, тынысլан, ҡайғырма, һинең ғәйебең юҡ.

– Әсәйем ҡасан эштән ҡайта? Ул миңә, йоҡларға ятҡанда «Әлли-бәлли» йырлайым, тип иртәнсәк һүҙ бирҙе...

Фатима әбей йәшертен генә күҙ йәшен һөртөп ҡуйҙы.

– Эше күптер, ят, үҙем йырлайым, – тип ҡарсыҡ ҡапыл башына килгән таҡмаҡты шыбырлай башланы:

*Минең ҡыҙым ҡыҙ кеше,*
*Уъа килер йөҙ кеше.*
*Йөҙ кешенең араһынан*
*Алып китер бер кеше...*

– Ҡайҙа алып китер, өләсәй? Минең бер ҡайҙа ла киткем килмәй... – тине Әминә йоҡо аралаш һәм бер аҙҙан йоҡлап та китте. Фатима әбейҙең ҡолағына баланың тыныс, тигеҙ һулышы ишетелде.

Ҡыҙ кеше... Һине кемдәр алып китер икән? Ҡайһы яҡтарға? Әсәңде тағы ла күрергә насип булырмы, етем бәпкәм?!

***

Йәй таңдар иртә ата... Июнь аҙағында бәрәңге баҡсалары алһыу сәскәләргә күмелгән, йәм-йәшел үлән ауыл урамдарын келәм һымаҡ ҡаплаған. Әтәс тауыштары ишетелә, малды аҡландарға сығарырға тип ҡатын-ҡыҙ аҙбарҙарҙа биҙрәләрен шылтырата торған ваҡыт.

Ғиндулла уянып, күҙен асҡанда ғына, кемдер ныҡ итеп тәҙрә быялаһын ҡаға башланы:

– Ғиндулла, ас, ас, тим! Хәтәр, хәтәр! Хәтәр хәбәр!!!

Бабай тәҙрәгә ташланды, үҙе әсе уйҙарынан бушамай: «Әллә кире ҡайтҡанмы?» – тигән уй йүгерҙе башына.

– Сәйфи, ни булды? Ниңә таң һарыһынан тамаҡ яраһың? – тине Ғиндулла, күршеһен күргәс, асыуы килеп.

– Һуғыш башланған, Ғиндулла!

Сәйфи күҙҙәрен шар асып, тәҙрә яңағына тотоноп тора ине.

Һуғыш... Ғиндулла Герман һуғышының әсеһен-сөсөһөн татыған кеше булһа ла, йөрәге дарҫлай башланы...

– Фатима, ғәйепләп ҡалма инде, бәлки, бүтән күрешә лә алмаҫбыҙ... Һуғыш хәлен белеп булмай. – Ғиндулла һалдат тоҡон арҡаһына элеп алды. – Әминә ҡыҙыбыҙҙы күҙ ҡараһы кеүек һаҡла... Башҡа балабыҙ ҙа юҡ. – Унын тауышы ҡалтыранды.

Фатима ҡарсыҡ, Әминәне ҡосаҡлаған килеш, күҙ йәшен күлдәк итәге менән һөрткөләп:

– Ҡуй, ҡуй әле, фронтҡа барып етмәйенсә үҙеңде үҙең гүргә яҡҡырма. Алла бирһә, Әминәкәйҙең туйында ла бейербеҙ әле, шулаймы, ҡыҙым? – тип һөйләнде.

Ауылдың һәр өйөндә – хушлашыу; бөтә ирҙәр – йәше лә, олоғайып барғаны ла – доброволец булып фронтҡа китергә ҡағыҙ яҙғандар. Һәр ғаиләнән өс-дүрт ир-егет илебеҙҙең азатлығы өсөн йән аямай көрәшергә ант бирҙе.

Кемдәргә генә яуҙан иҫән-һау ҡайтырға насип булыр икән?

Их, һуғыш йылдары... Бер айы бер йыл оҙонлоғона тиң. Фронтта һуғышҡан яҡындарынан хат алған көндәр менән иҫәпләндә, гүйә, ваҡыт.

Ғиндулланан хаттар бик һирәк килде (ут эсендә хат яҙып ултырырлыҡмы ни инде?), әммә һәр «өсмөйөш» түҙемлек өҫтәй, Еңеүгә ышаныс уята ине.

– Өләсәй, олатай нимәләр яҙа? Орден алғанмы? – Әминә туҡтауһыҙ ләпелдәй, өләсәһе янына килеп ултыра.

– Мә, ҡыҙым, үҙең ҡара әле, күҙем ниңәлер күрмәй башланы...

Әминә тулҡынланғанлыҡтан ҡалтырап торған ҡулына фронттан килгән бәләкәй генә ҡағыҙ киҫәген алды. Бына бит, күпме аралар үтеп, был хат Мәскәү ерҙәренән уларҙың ауылына килеп еткән! Ҡыҙыҡай, яңы ғына уҡырға өйрәнгән булғас, һүҙҙәрҙе бүлә-бүлә ашыҡмайынса уҡый башланы.

«Минең ҡәҙерлеләрем! Һеҙгә ҡайнар фронт сәләмен Ғиндулла Зөбәй улы ебәрә. Дошман утты туҡтатып торған минуттарҙа хат яҙырға булдым. Һағынып бөттөм һеҙҙе, матурҙарым! Үҙем иҫән-һаумын, үҙегеҙҙе һаҡлағыҙсы, зинһар! Ҡулымда – ҡорал, йөрәгемдә – нәфрәт, дошмандарҙы ҡыуып барабыҙ! Мәскәүҙән уларҙы алып ташлағас, күңелемдә ышаныс арта бара: халҡыбыҙҙы еңеп булмаҫ, һуңғы ҡан тамсыһына тиклем илебеҙҙе яҡлаясаҡбыҙ! Көтөгөҙ беҙҙе! Хуш, һеҙҙе яратып – Ғиндулла».

Әминә хатты Фатимаға кире бирҙе. Ул хатты ҡалтыраған ҡулдары менән алып, йөрәк түренә һалып ҡуйҙы. Икеһе лә бер аҙ өндәшмәйенсә ултырҙылар.

Кинәт Фатима ҡарсыҡтың күҙ алдына йылмайып торған, ап-аҡ күлдәк кейгән Ғиндуллаһы килеп баҫты. Ҡулында тальян гармун, күҙҙәре уттай шаян ялтырап тора.

*Герман һуғышында булдым,*
*Дошманды ҡыуа барҙым.*
*Ауылыма ҡайтҡан инем,*
*Үҙем дә дошман булдым!*

Ҡолаҡ төбөндә таҡмаҡ яңғырап та бөтмәне, Фатима ултырғыстан әкрен генә йығыла башланы. Әминә уны тотоп ҡалырға тырышты.

– Өләсәй, өләсәй, тим, улайтма әле, ә? – тип, көсө етмәйенсә, иҙәнгә ауып төшкән ҡарсыҡты ике ҡуллап ҡосаҡлап алды ул. – Тор, тор, күҙеңде ас!

Фатима көскә күҙен асып, йылмайырға тырышып ҡараны.

– Ҡурҡма, балам, хәҙер, хәҙер рәтләнермен, бер аҙ хәл йыйып алайым, ниңәлер башым әйләнеп киттесе... – Таштай ҡатҡан ирендәрен көскә ҡуҙғата алды Фатима.

– Һин бит ас, иртәнсәк үҙеңә тейеш әпәйҙе миңә ашаттың, ахырыһы... Мин бүтән һинһеҙ бер киҫәк тә ҡапмайы-ы-ым... – тип Әминә ҡысҡырып иларға керешә.

Шул саҡ кемдер ишекте шаҡыны. Өҫтөнә сапан, һырма салбар, аяғына оло быйма кейгән берәү килеп инде – әллә ир, әллә ҡатын-ҡыҙ, этем белһен. Башына шәл бөркәнгән – бәй, Мәрфуға апай ҙаһа!

Иҙәндә ятҡан Фатиманы күреп, ул ҡарсыҡты тиҙ генә карауатҡа күтәреп ятҡырҙы.

– Илама, ҡыҙым, аслыҡтан иҫтән яҙған. Ҡоро һөйәккә ҡалып бөткән, меҫкенем. Эй, һуғыш, һуғыш, уның ауырлығы ир-атҡа ғына түгел, ҡатын-ҡыҙҙың да

иңенә ята шул! – тип уфтанды. – Хәҙер бер нисә картуф алып керермен, бешереп ашатырһың да, аяҡҡа баҫыр, Алла бирһә! Ирһеҙ биҙа шул, минең ҡартым, ана, ҡулһыҙ булһа ла, тере ҡайтты, ихатала эшләп йөрөгән була. Ғиндулла ла ҡайтыр һуғыш бөткәс, шулай бит, ҡыҙым? – Мәрфуға Әминәнең сәсенән һыйпап алды. – Әйҙә, картуф алып керерһең, ятһын өләсәйең, уға хәҙер пакуй кәрәк. Унан бер аҙ тамаҡ ялғап алыр...

Мәрфуға менән Әминә сығып киткәндә, Фатима һаман һаташыуын дауам итте.

– Ғиндулла, иҫән генә ҡал, зинһар, көс-хәлем бөтөп бара, һуғыш бөтөр көндәрҙе көтөп алып буламы әле, юҡмы?.. Әминәкәйҙе кем аяҡҡа баҫтырыр? – тип Фатима иренә бәғер хистәрен асты. – Ауылда ике генә ир... Береһе – Мәрфуғаның ҡарты, фронттан ҡулһыҙ ҡайтҡан Әкрәм, икенсеһе – туҡһанды ҡыуып барған Хисмәтулла бабай... Бөтә колхоз эше ҡатын-ҡыҙ ҡулында. Аттарҙы һуғышҡа оҙатып, һыйырҙарҙы һуйып бөтөрҙөк. Картуф, арыш икмәге лә үлсәп кенә эләгә... Балалар йәл, ас йөрөйҙәр...

Ғиндулла, ниңәлер, бер һүҙ ҙә өндәшмәй, моңһоу ғына ҡарап тора. Башына әллә ниндәй аҡ салма кейгән... Уф, Аллаҡайым! Был бит бинт, башы яраланған түгелме? Ғиндулла, Ғиндулла, бөркөтөм!

Күҙ йәштәре Фатима апайҙың мендәрен сылатты. Әллә яраланған, әллә һәләк булған?! Ташлап китмәсе беҙҙе, Ғиндулла бәғерем...

***

1943 йыл. Һуғыштың ике йылы Әминәгә мәңгелек оҙон күренде. Бына тағы ла яҙ етте, көн йылыта башланы, тик Ғиндулланың йөртон ҡояш нурҙары түгел, ә ҡайғы һөрөмө ҡаплап алған һымаҡ. III Беларус фронтының хәрби часынан ҡара ҡағыҙ алдылар: «Ғиндулла Зубаевич Абдуллин геройски погиб в ходе жестоких боев в Смоленской области, защищая Советскую Родину».

...Иртәнсәк Әминә ҡойонан һыу алып ҡайтып бара ине. Ауыр силәктәр аҫҡан көйәнтәһе иңбашын иҙеп барамы ни – шундай һыҙлай. Ярай инде, түҙ, өләсәйемде ҡыуандырырмын, үәт үҫкән ҡыҙ, тиер, донъя терәге булып үҫеп килә, тип маҡтар... Ҡыҙыҡай үҙ-үҙен дәртләндереп ауыр көйәнтәһе аҫтында бөгөлөп атлап барғанда, кинәт кенә кемдер уға өндәште. Почтальон апай икән! Әминә шунда уҡ силәктәрен ергә ҡуйып, көйәнтәһен ситкә ташланы ла бының ҡаршыһына йүгерҙе.

– Әллә олатайҙан хат бармы? Күптән хәбәр килмәне шул! Бына өләсәй ҡыуаныр, хаттарын көтә-көтә бороslоп бөттө! – Бер туҡтауһыҙ һөйләнеп, Әминә почтальонға ҡулын һуҙҙы. Тик ҡатын, күҙен йәшереп, уны яуапһыҙ ҡалдырҙы.

– Апай, бирсе хатты, – тип тегенең муҡса ҡайышына йәбеште.

– Шундай хаттар килмәһен ине, балаҡайым... Фатима ҡарсыҡтың ошо хәбәргә йөрәге түҙерме? – тип моңһоу тауыш менән яуап бирҙе ул ахырҙа һәм, Әминәгә бәләкәй генә конверт тотторғас: – Ҡайғығыҙҙы уртаҡлашам, балам, – тип ашығып китеп барҙы.

Әминә урам уртаһында фронт хатын ҡулына тотоп тороп ҡалды. «Ҡайғығыҙҙы уртаҡлашам?..» Нисек инде улай? Ниндәй ҡайғы? Кем һәләк булған һуң?» Ҡапыл уның күҙ алды ҡараңғыланып китте, ҡойолоп төштө Әминә. Юҡ, булмаҫ, ышанмайым... Олатай? Олата-а-ай!

Әминә үкһеп илай башланы, хатты ике ҡуллап күкрәгенә ҡыҫып, өйҙәре яғына йүгерҙе.

...Таң ата ла, төн була, ғүмер ағышын һис туҡтатып булмай. Ирен юғалтҡас, Фатима өсөн донъя, гүйә, ҡатып ҡалды. Кистәрен мейес янында утҡа ҡарап тормош иптәше менән бергә үткәргән көндәрен иҫләп ултырыр ине. Шулай инде, ғүмеренең ахырында кеше тормоштоң тик матур һәм ҡыуаныслы мәлдәрен генә иҫендә ҡалдыра икән. Ауырлыҡтары ла, юғалтыуҙары ла – бөтәһе лә алыҫтарҙа юғалып бөтә. Тик яҡындарыңды юғалтыу йөрәкте бер туҡтауһыҙ яндыра ла әрнетә. Һағышың күңелеңә һыймай...

Әминә ишекте киң итеп асып ебәрҙе лә шатлығынан хатта һикереп, тулҡынланып өләсәһенә ҡысҡырҙы:

– Өләсәй! Ура! Еңеү, еңеү! Ишетәһеңме? Һуғыш бөттө! – тип Әминә тәҙрә янында шәлгә бөркәнеп ултырған өләсәһе ҡырына килеп баҫты.

Фатима Ғиндулланың йәш саҡта төшкән һарғайып бөткән карточкаһын тотоп ҡуҙғалмайса ултыра бирҙе һәм... асыҡ күҙҙәрен мәңгелеккә төбәгән килеш йән бирҙе.

***

Күктә әле йондоҙҙар ялтырай. Ҡояштың беренсе нурҙары саҡ-саҡ ағас баштарына төшә башланы. Иртәнге һыуыҡ гимнастерка аша үтә. Ғиндулланың йөрәге күкрәгенән сығып китә тиерһең. Ул үҙ йортоноң ҡапҡаһы төбөнә килеп баҫты. Баҡсаны үлән баҫҡан, бер мал тауышы ла ишетелмәй. Иртә әле, Фатима менән Әминәкәй йоҡлап яталарҙыр, моғайын. Яҡташ сержант Орловтың: «Әйҙә, беҙҙә генә ҡунып, иртәнсәк юлға сығырһың», – тигәненә: «Мин төн буйы арымай-талмай атларға әҙер, ҡәҙерлеләремде күрмәй түҙә алмайым!» – тип Ғиндулла, төн ҡараңғылығына ҡарамаҫтан, ауылына ҡайтырға булды.

Район үҙәгенән ауылына тиклем бер егерме саҡрым ғына барҙыр. Ләкин фронттар үткән һалдат өсөн был юлдың ауырлығы бер ҙә һиҙелмәне. Һәр аҙым һайын «оҙаҡламай һөйгәндәремде ҡосаҡлап алырмын» тигән уй көс биреп торҙо уға.

Йә, улар ҙа һағынып көткәндәрҙер! Ғиндулла ҡапҡаны асты ла ихатаға инде. Уны йәшен һуҡҡандай итте: ишектә оло тимер йоҙаҡ эленеп тора ине. Тешен ҡыҫып, Ғиндулла, ауыр ҡапсыҡтай, болдорға ауып төштө. Бер нисә минут үткәс, үҙен ҡулға алды. Туҡта, без паники, һалдат! Тынычлан! Әллә күсеп киткәндәрме? Ауылда тыл ыҙаларын үткәреүе еңел булмағандыр! Силәбелә Фатиманың бер туған апаһы йәшәй ине, әллә шуға киткәндәрме?

Шулай була күрһен, тик иҫән-һау ғына йөрөһөндәр! Ғиндулла, һаран күҙ йәшен һөртөп алып, коммунист булыуына ҡарамаҫтан, әйтеп ташланы: «Аллаҡайым, һөйгәндәремдән айырма!»

– Мәрфуға апай, һин борсолма, бар, бар, мин өйҙө йыйыштырып алырмын, һыуын ташып ҡуйырмын, сәйен дә ҡайнатырмын. – Мөләйем ҡыҙҙың нескә тауышы Ғиндулланы иҫенә ҡайтарҙы.

– Әминәм? Әминәкәйем! – Ғиндулла ҡапҡа артына йүгереп сыҡты.

Ҡаршы йорт янында буй еткергән Әминә Мәрфуға күршеһен оҙатып тора ине.

– Ҡыҙым... Иҫән, иҫәндәр, бына шатлыҡ! – Рюкзагын ташлап, Ғиндулла ҡыҙҙың ҡаршыһына йүгерҙе.

Әминә кинәт уны күреп ҡалды, үҙ күҙенә үҙе ышанмай, уның янына елдәй осоп килде лә олатаһының муйынына аҫылынды.

– Олатай! Олатайым ҡайтты! – Әминә ҡысҡырып ебәрҙе. – Ишетәһегеҙме, мин етем түгел хәҙер – олатайым фронттан ҡайтты!

Ғиндулланың сал сәстәрен һыйпай ҡыҙ, йә гимнастеркаһының төймәләрен тотоп, йә беләген ҡыҫып ҡуя.

– Әминә, балам, өләсәйең ҡайҙа? Ниңә Мәрфуға апайҙарыңа күскәнһегеҙ әле? Фатима сирләп китмәгәндер бит, ә?

Әминә башын эйеп, өндәшмәй тора бирҙе. Битенән күҙ йәше ағып төштө. Ниҙер әйткеһе килһә лә, ирендәрен генә ҡыймылдатып ҡуя алды.

– Әминә, ниңә илайһың? Үҙәгемде өҙәһең бит! – тине Ғиндулла, барыһын да аңлап...

– Похоронка алғас, йөрәге сыҙаманы... Илай-илай һүнә барҙы, сәләмәтлеге лә шәптән түгел ине бит...

– Ниндәй похоронка? Һин нимә һөйләйһең? Мин бит госпиталдә ике ай һушһыҙ яттым! Бер аҙ көйләнгәс, иптәштәрем аша хат ебәргәйнем! Алманығыҙмы ни?! – Ғиндулла көскә илауын тыя алды. – Нисек шулай булып сыҡты һуң? Ниндәй ҡәбәхәт похоронка ебәргән? Бәреп үлтерер инем мин уны!

Урам уртаһында торған һалдат менән ҡыҙ янына ауылдаштары йыйыла башланы.

– Ғиндулла, тыныслан, һин бит фронтовик! Һуғыш ул кешеләрҙе фронтта ғына түгел, тылда ла алып китә... – Ҡулһыҙ Әкрәм ине был. – Үҙеңде һаҡла, бер ҙә яраһыҙ ҡайтмағанһыңдыр... Әминәне аяҡҡа баҫтыраһың бар әле... Фатиманы теге донъянан ҡайтарып булмай шул, бик теләһәң дә. Ауыр тупрағы еңел булһын, шәп ҡарсыҡ ине...

Ғиндулла, Әминәне етәкләп, өндәшмәйенсә генә үҙ йортона табан йүнәлде...

***

Кеше ғүмере тәрән йылға кеүек – һайыраҡ урындарҙа сығып торған таштарға эләгеп тәгәрәргә лә мөмкин. Үҙе матур, үҙе хәтәр...

Әминә ҡайҙалыр алыҫтарға ҡарашын төбәп ҡатып ҡалды. Әйтерһең дә, ул иң ҡәҙерле ғүмер ваҡиғаларын барлай ине.

– Бына шулай ул ғүмерҙәр, матурым! – тип ҡуйҙы Әминә һәм ошо көнгә тиклем берәүгә лә асмаған серен сисә башланы. – Атайым, хыянатты ғәфү итә алмай, армиянан тура фронтҡа китте лә юғалды. Олатайым мине бер үҙе аяҡҡа баҫтырҙы. Мин уға сикһеҙ рәхмәтлемен. Уйлап ҡара: ир кешегә ҡыҙ баланы үҫтереү еңел булмағандыр! – Әминә Ғиндулловна йылмайып әхирәтенә ҡарап ҡуйҙы. – Бер ситса күлдәк кейеп үҫтем, ләкин белем алырға ынтылдым – педучилищенан һуң университетҡа ла уҡырға инергә мөмкинлек булды.

Әминә Ғиндулловна оло посылка йәшнигенә тағы ла ике ҙур сәй ҡаптарын һалып ҡуйҙы.

– Ә ниңә һуң әсәйегеҙ һеҙҙе бала саҡтан ташлап ҡасҡас, уға хәҙер тырышып посылкалар ебәреп ятаһығыҙ, ә? Мин ебәрмәҫ инем. – Резеда аптырап ҡуйҙы.

– Их, йәшһең әле, шуға шулай ҡаты итеп әйтәһең. Үҙе ниндәй булһа ла, әсәй бит ул һәр кеше өсөн әсәй булып ҡала. Ауылда туғандарында һуңғы йылдары уҙа, күп ҡалғанмы инде...

– Юҡ инде, мәҡәлдә лә «Баланы донъяға тапҡан әсәй түгел, баланы аяҡҡа баҫтырған әсәй» тип юҡҡа ғына әйтелмәй. Ысын әсәй алдында ғына бала бурыслы!

– Үәт, тел биҫтәһе! Мәҡәл тормоштағы хәлдәргә гел генә тура килмәй шул! – Әминә Ғиндулловна, моңһоуланып, посылка ҡумтаһын ҡалын еп менән бәйләп ҡуйҙы. – Йәшлегемде хәтерләй башлаһам, кинолағы кадрҙар кеүек, бер-бер артлы төрлө күренештәр ағыла... Кисә генә ауыл буйлап йүгереп йөрөгән кеүек инем, бөгөн иһә малайым мәктәпте тамамлап килә.

– Бик матур малай Эрнест! Ҡайҙа уҡырға инергә теләй? – тип ҡыҙыҡһынды Резеда.

– Әллә инде, уҡыуы бик шәптән түгел. Кино, урам, тансы-мансы, – күрәһең, йәштәргә ошо ҡыҙығыраҡ. Беҙ шундай ауырлыҡтар күреп үҫһәк тә, белем алырға тырышып яттыҡ, ә уларға бөтә шарттар бар,тик теләктәре генә юҡ. Аңлап етмәйем мин быны! Атаһы ла, исмаһам, аҡылға ултыртмай, гел эштә! – Әминә Ғиндулловна башын сайҡап ҡуйҙы.

Резеда, ризалашып, баш ҡаҡты.

Әминә Ғиндулловнаның тормош юлын һәм ғаилә хәлен Резеда кафедралаштары һөйләгәндән белә ине. Университетты тамамлағандан һуң, ул Мәскәүҙә аспирантурала уҡып, диссертация яҡлаған, аҙаҡ Бөрө педагогия институтына эшкә ебәрелгән. Тап шунда үҙенең тормош иптәшен осратҡан да инде.

Әминә унан һигеҙ йәшкә олораҡ булһа ла, ғаилә ҡорорға булғандар. Иренең фатирын алыштырып, Өфөгә күсеп йәшәй башлайҙар. Бына инде ун йыл самаһы Әминә Ғиндулловна пединститутта уҡытып йөрөй. Галина исемле кафедралашы, Әминәнең тормош иптәше бик насар холоҡло, тип һөйләгәне бар. Ире менән талашып алған саҡта миңә ятаҡҡа ҡуна килгәне лә булды, тигәйне бер ваҡыт Галина. Шундай ҡыҙғаныс, Әминә Ғиндулловнанан да йомарт һәм кешелекле зат юҡтыр донъяла.

– Малайға атай тәрбиәһе бик кәрәк! Үҙем атайһыҙ үҫкәс, улым атай янында үҫһен тип түҙеп торам. Мин бит уны бер күргәс тә хыялый булдым да ҡуйҙым! – Әминә Ғиндулловна ниңәлер нығыраҡ сиселде. – Ышанаһыңмы, миңә ул ваҡытта 35 йәш ине! – эштән ҡайтып килгәнен ятаҡ тәҙрәһенән күҙәтеп ултыра торғайным! – Әминә шуларҙы хәтерләп, хатта оялғандай итте. – Тик шул хистәр арабыҙҙа мәңгелеккә ҡалманы шул...

Резеда шундай эскерһеҙлектән бер аҙ уңайһыҙланып китте. Әминә Ғиндулловна, әхирәтенең хәлен һиҙеп, һүҙҙе икенсегә борҙо.

– Уф, Аллаҡайым, юҡ-бар хәтирәләрем менән башыңды ҡатырып бөтөрҙөм инде, ғәфү итсе, әйҙә, сәй яһайым, һыуынып бөткәндер! – Әминә Ғиндулловна сәйнүккә тотонда.

– Юҡсы, рәхмәт. Ун ике тула бит, кафедра ултырышына һуңлап ҡуймайыҡ! – тип Резеда сынаяҡтарҙы йыя башланы.

– Хәҙер, хәҙер, матурым! Иренемдә генә буяп алайым! Өләсәй әйтмешләй, биҙәнгән бит – бит кеүек, биҙәнмәгән .... үҙең аңла нимә кеүек, – тип Әминә Ғиндулловна помадаһын сумкаһына һалып ҡуйҙы.

– Шулай инде! – тип көләмһөрәне Резеда. – Минең өләсәйем дә телгә зәһәр ине...

Йорттан сыҡҡас, ике ғалимә ашығып Ленин урамы буйлап китте. Йәм-йәшел ағастарға һәм сәскәләргә күмелгән яҙғы Өфө уларҙы ҡосағына алды.

***

Университет гөрләп тора. Тиҙҙән беренсе сентябрь – студенттар һәм уҡытыусылар яңы уҡыу йылына әҙерләнә. Кемдер расписание ҡарай, кемдер китапханаға ашыға.

Их, йәйҙәр тиҙ үтә шул! Ял аҙағы ла яҡынлашты, тағы ла – эшкә! Резеда уҡыу йылы башын һәр ваҡыт шатланып көтөп ала ине. Йәш саҡта бит эше лә рәхәт кенә кеүек. Эштәге иптәштәрен, студенттарын, хатта институт кабинеттарын һағынып, август аҙағында гел генә кафедраһына инеп сыға ине.

Беренсе кафедра ултырышына килгәс үк, иптәштәренән нисек ял итеүҙәрен һораштыра башланы.

– Әминә Ғиндулловна һаман отпускыламы, әллә йәй имтихандарҙа ҡатнаштымы? – Быны Резеда доцент Галинанан белеште.

– Юҡ. Ә һин уны йәй бер ҙә күргәнең булманымы? Йәнәшә генә йәшәйһегеҙ ҙәһә!

– Осрашып булманы, эҫелә ҡалала ултыраһыңмы ни? Тәүҙә ауылға ҡайтып ял иттем. Аҙаҡ әсәйҙәрем менән ҡунаҡҡа – Ҡазанға барып килдек! Ә нимә булды һуң? Һуҙма, һөйләп бир!

Галина ауыр көрһөнөп, күңелһеҙ генә яуап бирҙе:

– Ныҡ сирләп китте, башында шеш тапҡандар, ти. Иҫеңдәме, гел башына зарлана ине? Их, шундай ир менән башың ғына түгел, әллә нимәләрең ауырта башлар... Улы ла атаһы юлынан киткән, ахырыһы... Эсеп ҡайтҡылай, әсәһенә тупаҫ һүҙ әйтеп ташлай...

– Әле өйҙәме, әллә больницаламы?

– Өйҙә ята, тормай... Йәл, уға нишләп шундай яҙмыш насип иткән икәндер...

Резеда менән Галина өлкән уртаҡ әхирәттәрен ҡыҙғанып телгә алдылар. Кафедраға килгән һәр йәш уҡытыусыға Әминә Ғиндулловна шул тиклем ихлас ярҙамлашыр, дәрестәренә инеп, кәңәштәр биреп, ваҡытын йәлләмәйенсә, оҫталыҡҡа өйрәтер ине...

Кафедра ултырышы уҙғас та, Резеда Әминә янына ҡабаланды. Ишекте Эрнест асты. Иҫке футболкала, ҡырынмаған.

– Әйҙәгеҙ, уҙығыҙ, Резеда апай, – тип ул Резеда апаһын әсәһе ятҡан бүлмәгә оҙатып ҡуйҙы. – Ярай, мать, ҡунаҡ килгәс, яңғыҙ ҡалмайһың, йөрөп ҡайтайым әле, – тип ҡысҡырҙы егет ишек төбөнән, һәм йоҙаҡ шыҡылдауы ишетелде.

– Бына бит, Резедаҡай, ниңәлер сирләп, хәлем бөтөп ятам. Сентябрь башланды, лекцияларым әрәм була, дәрестәр юғала!

– Ҡайғырмағыҙ әле, Әминә Ғиндулловна! Тиҙерәк шәбәйегеҙ, аяҡҡа баҫығыҙ! Лекциялар ҡасмаҫ! Бына мин һеҙгә витамин алып килдем. Ҡояш төҫлө әфлисундар!

Әминә тәрән итеп тын алды.

– Ҡояш тиһеңме? Витаминдар аяҡҡа баҫтыра алырмы икән?.. Ышанмайым мин, үлермен, ахырыһы...

– Ҡуй, апаҡайым, ҡуй! – Кинәт Резеда «һин»гә күсте. – Үҙең мине нисек өйрәтә инең? Сабыр бул, үҙ-үҙеңә ышан, тип, бөтәһе лә рәтләнер, тип, ә? Ниңә әле шундай ауыр һүҙҙәр һөйләйһең? Ярамай! Төҙәлерһең, ишетәһеңме? – тине Резеда тулҡынланып һәм кухняға сынаяҡ йыуам тип сығып китте. Тик шунда ғына ул күҙ йәштәренә ирек бирҙе, Әминә ишетеп ҡалмаһын тип, ауыҙын ҡулы менән ҡаплай һалды. Бер аҙ тынысланып, күҙ йәштәремде һиҙһә, тағы ла ҡайғырыр, хәлдәр насар тигәнде иҫбатлау булыр тип, үҙ-үҙен ҡулға алды.

Әминә Ғиндулловна күҙҙәрен йомоп ята ине. Резеда тауышһыҙ ғына сынаяҡты өҫтәлгә ҡуйҙы.

– Рәхмәт һиңә, Резеда, яҡшы һүҙҙәрең өсөн, – тине сырхау, күҙен асып. – Тик үҙемдә бер ҙә ышаныс юҡ төҙәлеү тигәнгә... Башым шаулап тора, ауыҙым кибә...

Резеда әкрен генә уның янындағы ултырғысҡа ултырҙы.

– Мин генә түгел, бөтәһе лә ышанмай... Теге аҙнала ауылдан ҡәйнәм килеп ҡайтты. Һауыт-һабаны хлор менән йыуҙы, сиреү беҙгә күсмәһен, тип... Баш осонда уҡынып ултырҙы... Нимә уҡыйһың, тип һорағаныма, кеше үлгәс уҡый торған доғаны өйрәнәм, тип яуап бирҙе... Бына нисек...

Әминә Ғиндулловна үҙе хаҡында түгел, сит кешенең үлеме тураһында һөйләп ятҡан кеүек ине – шул хәтлем тыныс һәм бошмаҫ булып ишетелде Резедаға.

– Һин бар, ҡайт, көтәләрҙер. – Ауырыу стенаға боролоп ятты.

... Әминә оҙаҡ сирләп ятманы. Бер-ике ай эсендә һүнде. Резеда һуңғы көндәрҙә уға көн дә килеп уколдар яһап, унын менән бер аҙ аралашып алғайны. Әминәнең ҡап-ҡара, бала саҡтағы кеүек (Резеданың ул фотоларҙы күргәне бар) мәрйендәй күҙҙәре мәңгелеккә йомолғансы был донъяға сабыр ҡараны.

***

Лекциялар тамам. Резеда кафедраһына китеп барғанда институттың киң баҫҡыстарынан Эрнест менеп килә ине.

– Эрнест, сәләм! Һине беҙгә ниндәй елдәр ташланы? Хәлдәрең нисек? Атайың ни хәлдә? – Резеда, ҡыҙыҡһынып, Эрнестың хәл-әхүәлдәрен һорашты. – Эшләп йөрөйһөңмө? Беҙгә уҡырға инергә теләгең тыуманымы әле?

– Эй, Резеда апай, хәлдәр... насар, тип тә әйтеп була. Атай өйләнеп, йәш бисә менән йәшәп ята. Үҙем оҡшаған ғына эш таба алмайым. Оҡшаған эш буламы инде ул, – тип көлөп ҡуйҙы Эрнест. – Ярай, һеҙгә ҡамасауламайым, дәрестәрегеҙ күптер. Бер үтенес бар ине... – Егет кеше, бер аҙ уңайһыҙланып ҡуйған һымаҡ, тымып ҡалды. – Бурысҡа аҡса биреп тормаҫһығыҙмы? Мин ҡайтарып бирермен, честное пионерское! – Егет шаяртып ҡуйҙы.

– Әлбиттә бирәм. Нисә һум кәрәк?

– Ике мең. – Ҡәнәғәт яуап бирҙе Эрнест, аҡсаны ауыҙ йәйеп алды. – Рәхмәт, Резеда апай! Күрешкәнгә тиклем, пока!

Эрнест тиҙ генә күҙҙән юғалды. Резеда уның артынан ҡарап ҡалды. Их, әсәйһеҙ тормош еңел түгел шул!

Кафедрала Галина һүҙлектәрҙе бер тирәгә йыйып маташа ине. Резеда уға өндәште:

– Ҡара әле, яңы ғына Эрнест килеп, бер аҙ аҡса һорап торҙо. Бирҙем инде.

– Мин дә бирә инем. Ләкин, көн аша килә башлағас, бирмәй башланым. Эшкә урынлашһын! Хәҙер һинән һорай башлаған икән. Ул бит эшләмәй, әсәһенең таныштарынан һәм туғандарынан теләнселәп йөрөй. – тине Галина. – Бурыстарын ҡайтармай... Етмәһә, фатирында насар компаниялар йыйыла, тиҙәр, «үлән» тарталар, наркотиктар ҙа булыуы ихтимал, тип һөйләнеләр. Ул йортта минең таныштарым да йәшәй бит. Шундай йәл, Әминә үҙе етем булып үҫте, хәҙер улы ла, тере атаһы булып та, тәрбиәһеҙ, иғтибарһыҙ йөрөй!

Резеда аптырауынан ҡатып ҡалды: бына нисек икән хәлдәр! Атаһы Эрнесты эшкә урынлаштырып, үҙе йәш бисә алып, икенсе фатирҙа йәшәүе, улына ундаһанда аҡса биргеләүе Резедаға мәғлүм ине инде. Тимәк, хәҙер атаһы ла улына ҡул һелтәп ҡуйған булып сыға түгелме?

***

...Эрнест гуманитар корпустан бик ҡәнәғәт сыҡты. Ништәк, тағы ла бер аҙ аҡса табып булһа, марафетҡа точно етә! Тик кемдән һорарға икән? Кинәт уның күҙе административ корпусҡа төштө. Әллә тура ректорға инеп сығырғамы? Әсәйҙе хәтерләйҙер әле! Уның аҡсаһы күптер, ректор ҙа кеше лә баһа! Эрнест ҡыйыуһыҙ ғына ректор кабинетына юлланды, сәркәтибе юҡ саҡ ине.

– Хәйерле көн, ректор ағай! Юҡ, юҡ, мин студент түгел. Минең йомошом бар ине... Әсәйем институтта уҡытты... Әминә Ғиндулловна! Хәтерегеҙҙәме?

– Әлбиттә. Бик маҡтаулы доцент ине. Йәл, ваҡытһыҙ вафат булды... Ә йомошоғоҙ ниҙә, йәш дуҫым?

Егет бер аҙ ҡаушап ҡалды. Асыуланып ҡыуып сығарһа? Кеҫәһендәге ике мең аҡсаны йомарлап, әйтеп ҡуйҙы:

– Аҡсаһыҙ ҡалдым бит... Бурысҡа биреп тормаҫһығыҙмы? Силәбегә барып ҡайтаһы ине. Унда әсәйҙең ҡәйенһеңлеһе йәшәй. Кил, Эрик, кейем-һалым, бер аҙ аҡса биреп ебәрермен, тигәйне телефон аша... Бүтән туғандарым ярҙам итмәй. – Егет «хәле бик ауыр» икәнен күрһәтеп мутлашты, хатта ыңғырашты.

– Күпме кәрәк һуң!

Эрик бер аҙ өндәшмәй торҙо. «Их, может, прокатит!» – тип уйланы ла әйтеп тә ташланы:

– Ике мең!

Ректор уға тура ҡарап ҡуйҙы ла, пинжәгенең эске кеҫәһенән күн янсығын сығарып, ике шығырҙап торған банкнотты Эрнестҡа һуҙҙы.

– Уф, вот рәхмәт һеҙгә! Ысынлап әйткәндә, шундай йомартлыҡты көтмәгәйнем! Мәңге онотмам! Юҡ, шикләнмәгеҙ, бурысты ҡайтарып бирермен... Силәбенән ҡайтҡас та. – Егет, үҙ күҙенә үҙе ышанмай, аҡсаны һаман ҡулында тотоп, арты менән атлай-атлай сығып юғалды.

Ҡабул итеү бүлмәһенән сыҡҡас, шатланып уйлап ҡуйҙы: «Бына бит, донъяла бер ҡатлы кешеләр бөтмәгән! Ҡурҡып тораһы булмаған! – Институттан сығып еткәс, Эрнест үҙ-үҙен әрләй башланы: – Алйот! Шундай «бабка»ларҙы еңел генә итеп һорап алдың, башың юҡ бит тағы ла күберәк һорап алырға! Хайуан, лох!»

Бер аҙ икеләнгәндән һуң, ул кире корпусҡа инеп китте. Баҫҡыстан ректор төшөп килгәнен күреп, уға ташланды:

– Ғәфү итегеҙсе, тағы ла борсойом! Һанап ҡараным: билетҡа йәнә бер мең етмәй икән шул!

Ректор уға күҙлек аша моңһоу ғына ҡарап ҡуйҙы.

– Их, егет кеше, мине бер генә алдап була. Икенсегә – юҡ. Һау булығыҙ!

Эрнест уның артынан ҡарап ҡалды.

***

Иҫке гәзит менән ҡапланған тәҙрә аша ҡояш нурҙары хатта күренмәй ҙә. Ауыр еҫ тын алырға бирмәй. Иҫкереп бөткән бысраҡ диванда Эрик ята. Тәне уттай яна, ауыҙын аса ла алмай, тамағы шундай кипкән... Күҙ алдында әллә ниндәй уттар һикерешкән кеүек. Эрик аяғын һуҙып ҡараны. Тәненә меңәрләгән энәләр ҡаҙалғандай булды, ул саҡ иҫтән яҙманы.

– Уф, ниңә ҡараңғы бында? Ниңә утты бер кем дә ҡабыҙмай... – Ҡалтыранып торған бармаҡтары менән ирененән кипкән ҡан тамсыларын көскә һөртөп алды. – Әсәй, кил әле,.. ҡотҡар мине... Мин бит һинең улың, берҙән-бер улың... Ниңә тәнем шул хәтлем сәнсә... Әсәй, бир ҡулыңды! Мин... ҡараңғыла юғалам бит,.. әсәй... Әсә-ә-әй...

***

Кеше ғүмеренең хаҡы ниндәй икән? Ә маҡсаты? Һәр кешенең был һорауға үҙ яуабы барҙыр. Тик шуны аңлаһаңсы һин, әҙәм балаһы: ҡояш нурҙары ҡараңғылыҡты һис шикһеҙ еңеп сыға. Тәҙрәңде генә киң итеп асып ҡуй... Астыңмы?!.

## ТӘҮГЕ РОМАН АВТОРЫ

*(Ғәйнан Хәйриҙең тыуыуына – 110 йыл)*



Ғәйнан Хәйри (Ғәйнан Бәҙретдин улы Хәйретдинов) 1903 йылдың 15 июнендә Башҡортостандың хәҙерге Нуриман районы Иҫке Күл ауылында тыуған. Башланғыс белемде үҙҙәренең ауылындағы мәҙрәсәлә ала. Күрше ауылда бер аҙ ваҡыт китапхана мөдире булып эшләгәндән һуң, Ырымбурҙа асылған Башҡорт педагогия техникумына уҡырға китә һәм 1924 йылда уны уңышлы тамамлап сыға. Шул уҡ йылда Өфөгә ҡайта. Уны Арғаяш кантонындағы Ҡолой волкомына комсомол секретары итеп ебәрәләр. 1926 йылда «Яңы ауыл» гәзите редакцияһында эшләй башлай. Артабан егетте «Башҡортостан йәштәре» гәзитенең яуаплы редакторы итеп билдәләйҙәр. 1928–1933 йылдарҙа «Сәсән» журналында һәм «Трактор» тип аталмыш журналда яуаплы сәркәтип вазифаһын башҡара, бер үк ваҡытта педагогия институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультетында уҡый.

Ғәйнан Хәйри яҙыусылыҡ эшен әүҙем журналистлыҡ һәм ойоштороу-йәмәғәт мәшәҡәттәре менән бергә алып бара. Пролетар яҙыусыларҙың Башҡортостан ассоциацияһын ойоштора, байтаҡ гәзит-журналдарҙың редколлегия ағзаһы була. 1938 йылдың 16 декабрендә үпкә ауырыуынан үлеп ҡала.

Тәүге шиғырҙары 1922-1923 йылдарҙа, йәғни Ғәйнан Хәйри педтехникумында уҡыған саҡта, баҫыла башлай. Артабан уның ижады ныҡ баҙыҡлана, һәм ул башҡорт әҙәбиәтенең төп көстәренең береһенә әйләнә. Комсомол хеҙмәткәре булараҡ, автор шиғырҙарында һәм хикәйәләрендә яңы тормош төҙөүсе ауыл йәштәре тормошон сағылдыра, синфи көрәш картинаһын аса.

Ғәйнан Хәйри айырыуса проза жанрында уңышлы ижад итә. Уның «Ҡатын», «Кооператорҙар» кеүек повестарында шул осор тормошо характерлы образдар аша, оҫта һүрәтләүҙәр ярҙамында яҡтыртыла. Яҙыусы очерк жанрын үҫтереүгә лә үҙ өлөшөн индерә.

Шулай ҙа Ғәйнан Хәйри әҙәбиәтебеҙ тарихына тәүге башҡорт романы авторы булараҡ инеп ҡалды. Көнүҙәк мәсьәләләрҙе, халыҡ тормошондағы киҫкен үҙгәрештәрҙе сағылдырған «Боролош» романы беҙгә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында үҙ ваҡытында баҫылмай ҡалып, бары 1967 йылда ғына донъя күрҙе.

**Әхмәт МӘХМҮТОВ.**

# ТЫУҒАН ЕРГӘ ТОҒРОЛОҠ

*(Ғаян Лоҡмановтың тыуыуына – 90 йыл)*



***Яугилде яугиры. 1943 йылда...***

Башҡорт әҙәбиәте тарихында тәрән эҙ ҡалдырған яҙыусыларҙың күбеһе Өфөлә йәшәп ижад иткән. Ләкин баш ҡаланан ситтә тороп та ярайһы уҡ ижад емештәре менән һөйөндөргәндәр ҙә бар. Улар бер аҙ иғтибарҙан ситтә булһалар ҙа, үҙенсәлекле һәм бай тематикалы әҫәрҙәре менән – уҡыусылар күңелендә. Шундайҙарҙың береһе – Ғаян Лоҡманов.

Үҙе иҫән саҡта ете китабы донъя күрә: “Аҡҡош күле”, “Ағым һыу”, “Әсә йөрәге”, “Аҡ тирәк шаулай,”, “Сәскәләр һибелә”, “Кояш сығыр алдынан” һәм “Бесән еҫе” тигән китаптары менән ул киң ҡатлам уҡыусыларының күңеленә үтеп ингәйне.

Ғаян Лоҡманов 1923 йылдың 20 июнендә Ҡариҙел районы Яугилде ауылында тыуған. Ғүмер буйы тыуған ауылына, төйәгенә тоғро ҡала. Ләкин яҙмыш ул тарафтарҙан айырған осраҡтар ҙа була. Бөрө педагогия училищеһын тамамлағас, 1942 йылда, тыуған илен һаҡларға фронтҡа китә. Артиллерия училищеһынан һуң 19 йәшлек Ғаян, лейтенант погондары тағып, фронт юлдарына аяҡ баҫа. Тыуған илебеҙҙең һәр аҙымын кеше ғүмере менән иҫәпләгәндә, иңде-иңгә терәп алышырға тура килә. Ҡаты ҡышҡы көндәр, Курск дуғаһы, ҡаты бәрелештәр – барыһы ла йәш һуғышсының күңелендә еңеүгә тигән уй, ауыр хәтирәләр менән теркәлгән. 1944 йылдың ҡышҡы ҡаты һалҡынында лейтенант Лоҡманов һыуыҡ тейҙереп, аяҡтан йығыла. 21 йәшлек Ғаянды һуғыш яланынан демобилизациялап, ҡайтарып ебәрәләр.

Яугилделә йәш егетте ҡайнап торған тормош ҡаршылай. Бер аҙ дауаланып алғас, мәктәпкә эшкә сыға. Ауылындағы ете йыллыҡ мәктәптә уҡытыу бүлеге мөдире булып эшләй. Ситтән тороп Бөрө дәүләт педагогия институтын тамамлай.

Бала саҡтан матурлыҡҡа, әҙәбиәткә ғашиҡ Ғаян мәктәптә эшләгән йылдарында ижадҡа тартыла. Тәүҙә район гәзитендә, артабан республика ваҡытлы матбуғаты биттәрендә төрлө әҫәрҙәрен баҫтыра. Тәүге әҫәрҙәренә яҙыусыларҙан хуплау алғас, күңеле үҫеп, ул ижад эшенә илһамланып тотона. 1962 йылда “Аҡҡош күле”тигән йыйынтығының донъя күреүе авторҙың ҡараш даирәләрен киңәйтә, ижади маһирлығын һәм дәртен арттыра. Шулай китап артынан китап донъя күрә. Яҙыусының бихисап уҡыусылары әҫәрҙәрен көтөп ала. “Кояш сығыр алдынан” – ҡоласлы әҫәр, 1983 йылда нәшер ителде. Романдың поэтикаһы ярайһы уҡ ҡатмарлы һәм бай. Автор XX быуат башындағы илебеҙҙең фажиғәле



*Яугилделә әҙәби осрашыуҙан һуң. Уңдан һулъа: Суфиян Сафуанов, Ғаян Лоҡманов, Вәзих Исхаҡов, Рәйес Низамов, Фәнис Лоҡмановтың ҡатыны Ғәлимә ханым, йәш шағир Мөхәммәт Закиров.* **1977 йыл.**

лә, аяныслы ла типологик ваҡиғаларын бер төбәк ерлегендә яҡтырта. Әҫәрҙең төп геройҙары Әнүәр менән Өммөгөлсөм киҫкен социаль көрәштең уртаһында ҡайнай.

Ауылда яңы тормош ҡороу, иҫкелек менән яңылыҡ көрәше, аҡтар менән ҡыҙылдар алышы, дин өсөн көрәш – былар барыһы ла роман сюжетының төрлө йүнәлештәге ваҡиғаларын күҙ алдына баҫтыра. Яҙыусы полифоник сюжетты төҙөгәндә лә шәхес һәм йәмғиәт конфликтын үҙәктә тота, барлыҡ сюжет һыҙыҡтарын шунда килтереп бәйләй. Шулай уҡ әҫәрҙә сюжеттың динамик үҫеүе роман геройҙарының характерын да төплөрәк, анығыраҡ асырға мөмкинлек бирә. Автор бай композицион саралар аша роман фекерен тулайым күҙаллауға өлгәшкән. Әҫәрҙәге ретроспектив алым, персонаждарҙың уй ағымы, төштәр – барыһы ла уҡыусы аңында тулы бер картина тыуҙырырға ярҙам итә. Шуға ла Ғаян Лоҡмановтың “Ҡояш сығыр алдынан” романы осоро өсөн жанрҙың бай мөмкинселектәрен файҙаланып, реалистик һүҙ әйтеүгә өлгәште.

Ғаян Лоҡмановтың “Үр менгәндә”, “Ағым һыу” повестары үҙенең тематикаһы, заман проблемаларын үткер күтәреүе менән дә яҙыусының алдынғы ҡарашын күрһәтте.

**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

Ғаян
ЛОҠМАНОВ

# Шатлык

## хикәйә

Иртәнән бирле дошман яғынан да, беҙҙең яҡтан да атыш көслө булғанға, күк күкрәүгә оҡшаған тауыш туҡтауһыҙ яңғырап торҙо. Кискә табан барыһы ла тынды. Көн байыуға күк сите ҡыҙарған һәм ҡалын болот киҫәге, был тынлыҡта тәмле йоҡоға талған төҫлө, ҡуҙғалмайынса, аҫылынып торағандай ине.

Ерән сәсле, ҡуйы ҡашлы егерме дүрт йәштәрҙәге өлкән сержант Мәүлитов землянкаға инеп, өҫтәл янына ултырғас, фуражкаһын аҙ ғына ҡырын ҡуйып, көндәлек дәфтәренә түбәндәге һүҙҙәрҙе яҙып ҡуйҙы: «Минең орудие расчеты бөгөн дошмандың бер танкын һәм егермеләп һалдатын юҡ итте».

Ул дәфтәрен ябып та өлгөрмәне, ишек асылды, һәм, ғәҙәттәгесә йылмая биреп, хат ташыусы килеп инде. Уны күргәс, землянкалағылар барыһы ла тороп баҫты:

– Алексеев! Хуш киләһең! Хат килтерҙеңме?

Хат ташыусы, бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә, «бына шулай, мине ҡайҙа ла аяғүрә тороп ҡаршылайҙар» тип әйтергә теләгәндәй, һаман көләмһерәп, бер аҙ баҫып торғандан һуң ғына сумкаһына һуҙылды. Ә биш пар күҙ уның һәр хәрәкәтен йотлоғоп күҙәтә ине.

– Шәйех Мәүлетов, һеҙгә – ике хат. Кондратов, һеҙгә – берәү генә. Купершмидт, Иванов... Рәхим итегеҙ, – тип ул сумкаһын ябып ҡуйҙы. Барыһы ла ашыға-ашыға хаттар уҡый башланы.

Тик йәш егет Юлдашбаев ҡына күҙҙәрен сумканан алмайынса, бошоноп һаман бер урында баҫып тора бирҙе. Хат ташыусы уға бары тик ҡулдарын ғына йәйеп күрһәтте:

– Һиңә хат юҡ, Рәйсәң онотто, ахыры, – егеттең хәленә ингәндәй, тәрән итеп көрһөнөп тә ҡуйҙы.

Юлдашбаев, күңелһеҙләнеп, тәпәш ултырғысҡа барып ултырҙы. «Ысынлап та оноттомо икән ни? Их, Рәйсә...» – тип үпкәләне ул эстән. Ә хат ташыусы, тештәрен ялтыратып, көлөп тора.

– Бейе! – тине ул. Юлдашбаев һикереп торҙо:

– Ысынлапмы? Була ул!

Күҙ асып йомғансы, йәш егет, аяҡтарын төрлөсә ҡыландырып, хат ташыусы алдында тыпырлатып та китте. Ул, взвод командиры лейтенант Сидоркиндың инеп килеүен күргәс кенә, бейеүенән туҡтап ҡалды. Хат ташыусы лейтенантҡа ла ике хат бирҙе. Командир, теҙен-теҙгә ҡуйып, йайлап ултырҙы ла алыҫ юлдар үтеп ситтәре таушала башлаған өс мөйөшлө конвертты әле бер, әле икенсе яғын әйләндереп ҡарағас, асып, уҡый башланы.

Ҡайҙалыр йыраҡтараҡ ярылған снарядтың, тоноҡ гөрһөлдәүе лә, өҙөк-өҙөк

ҡабатланған пулемет тыҡылдауы ла тынып ҡалған землянка эсендә асыҡ булып ишетелә ине.

Тынлыҡты боҙоп, Мәүлитов һикереп торҙо:

– Иптәштәр! Иптәштәр! Иптәш лейтенант!

Барыһының да күҙҙәре уға төбәлде. Ниндәйҙер көслө шатлыҡ өлкән сержанттың йөҙөнә бәреп сыҡҡан, ғәҙәттә, ҡабарып, тулышып торған ирендәре йырыла төшкән. Тулҡынланыуҙан йөҙө яҡтырып, ҡолаҡ япраҡтарына тиклем алһыуланып киткән.

Барыһы ла тороп баҫты. Хатта Иванов та яҡын уҡ килде. Ғәҙәттә, ул бик үк ашығып бармай. Һәр эште уйлап, еренә еткереп башҡара. Ул батареяла төҙәп атыусы. Иванов төҙәһә, боттан артыҡ ауырлыҡтағы ҡорос «күстәнәс» дошманды ҡыйратып ташлай. Әммә был юлы бик тиҙ ҡуҙғалды. Оло йөҙөндә киҫкен бер үҙгәреш тыуҙы. Ләкин бер кем дә бер ни тип өндәшергә батырсылыҡ итмәне.

«Ҡәҙерле Шәйех... Һине улыбыҙ тыуыу менән ҡотлайым. Беҙ уға Сәйет тип исем ҡуштыҡ. Һиңә бик оҡшаған, тиҙәр...» – ул, ҡайҙа барырға белмәгәндәй, арлы-бирле йөрөндө.

Барыһының да йөҙө яҡтырып, балҡып китте.

– Юлдашбаев, – тине взвод командиры.

– Тыңлайым, иптәш лейтенант.

– Малайҙы йыуырға кәрәк.

– Есть.

Юлдашбаев – осҡон менән бер ул! Ниндәй бойороҡ булһа ла, тиҙ үтәй. Йыраҡтағы һөйгән ҡыҙының ҡайнар сәләмдәрен, мөхәббәт ялҡыны менән һуғарылған йылы, татлы һүҙҙәрен уҡығанғамы, әле бигерәк тә етеҙ.

– Һеҙҙең приказығыҙ үтәлде!

Стенаға терәтеп яһалған ике аяҡлы өҫтәл янына барыһы ла теҙелеп ултырҙы.

Ҡупшы кәүҙәле взвод командиры, Мәүлитовҡа яғымлы ҡараш ташлап алғас, шаҡтай ауырайған көрөшкәне һуҙып:

– Улығыҙ тыуыуы менән ҡотлайым, – тине.

Башҡалар менән үҙе лә аяҡ күтәреп:

– Беҙҙең еңеү өсөн! Балаларҙың шат, күңелле тормошо өсөн! – тине.

Мәүлитовты ҡат-ҡат ҡотланылар, ҡабат-ҡабат ҡулын ҡыҫтылар.

– Ә хәҙер ял итегеҙ, постар ҡуйылған, – тип лейтенант сығып китте.

Оҙон көн буйына һуҙылған ауыр һуғыштан һуң бик тиҙ йоҡоға талдылар.

Мәүлитов ҡына йоҡламаны. Күҙҙәрен йомғас та әле уяу ятты: улын уйланы, күҙ алдына килтерергә тырыша ине.

Ләкин землянканан яҡын ғына төшөп ярылған снаряд тауышы уның был тәмле уйҙарын бүлде. Күп тә үтмәне:

– К бою! – тигән бойороҡҡа һикереп торҙолар һәм орудие янына йүгерҙеләр.

– Дошман пехотаһына – огонь!

...Мәүлитов шул ҡәҙәр шат. Уға улы Сәйет тә фашистарға ҡаршы көрәшә кеүек. Ул үҙен уның менән бергә итеп һиҙҙе.

Көнсығыштан Беренсе май таңының алһыу нурҙары һыҙылып бөркөлгән саҡ ине.

# БЕРГӘ ЙӘШӘЛГӘН ЙЫЛДАР...

*(Ғилемдар Рамазановтың тыуыуына – 90 йыл)*

Ғилемдар Рамазанов менән беҙҙе 1945 йылдың сентябрь айы осраштырҙы.

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға өс ай ғына үткәйне. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт исемендәге педагогия институтына уҡырға инеү беҙҙең тиҫтерҙәребеҙҙең иң бәхетле көндәре булғандыр. Ауылдан килгән оҙон толомло ҡыҙҙар араһында бер нисә ир-егет тә бар. Улар ҡанлы һуғыш ҡырҙарынан ҡайтҡан Хәким Ғиләжев, Ғилемдар Рамазанов, йәшерәктәрҙән Фәрит Иҫәнғолов, Агиш Ғирфанов, Хәләф Ҡорбатов. Йылдар үткәс, был егеттәр бөтәһе лә башҡорт әҙәбиәтендә билдәле яҙыусылар булып танылды.

Әҙәбиәт факультетының башҡорт бүлегендә беҙ дүрт йыл буйына бергә уҡыныҡ.

...Икенсе сменала уҡыйбыҙ, дүрт пар булһа, ҡайтырға төнгә үк ҡалына. Шундай кистәрҙең береһендә ҡайтырға сыҡҡас, Ғилемдар, миңә иғтибар итеп:

– Был ҡыҙҙы әсәһе нисек ҡурҡмайынса ебәргән, бигерәк бәләкәй бит, – тине.

Мин был һүҙҙәрҙе кәмһетеү тип ҡабул иттем һәм яуапһыҙ ҡалдым.

– Ҡайҙа тораһың? – тип һорағас, дөйөм ятаҡта урын етмәгәнлектән, мосолман зыяраты эргәһендәге Степан Разин урамында йәшәүемде әйттем.

Фронтовик егеттәргә беҙ ололап, хөрмәт менән ҡарай инек. Улар беҙгә һәр яҡлап өлгө булды. Үҙҙәре ойошторған әҙәби түңәрәккә ылыҡтырҙылар. Төркөмөбөҙ ҙур түгел, бик татыу һәм бер-беребеҙгә ярҙамлашып йәшәнек. Карточка менән бирелә торған дүрт йөҙ грамм икмәк менән туҡланып, тырышып уҡыныҡ. Тыныс көндәр килеүенә шатланып, ҡыйынлыҡтарҙы бергәләп күтәрә инек.

Бер генә миҫал: миңә ауылдан аҙыҡ килде, аш бешереп, икенсе ҡатта йәшәүсе һабаҡташым Фәүзиәне ҡунаҡҡа саҡырмаҡсы булдым. Уларҙың бүлмәһе Ғилемдар менән Камал Хәбибуллин бүлмәһенә йәнәш ине.

Фәүзиәгә теләгемде әйткәс:

– Мин инермен дә ул, бына Рамазановтар ас бит, икмәк карточкаларын юғалтҡандар, – тине. – Уларҙы ла саҡырайыҡ, тик ашың етерме? Миндә бешкән бутҡа бар...

Асҡыс уйымынан егеттәрҙең бүлмәһенә күҙ һалабыҙ. Ғилемдар, һалҡындан бөрөшөп, шинелен ябынған, уҡып ултыра. Ишекте шаҡып инәбеҙ ҙә теләгебеҙҙе белдерәбеҙ.

Ғилемдар, Фәүзиәнең һүҙҙәрен ҡабатлағандай:

– Мин инермен дә ул, бына Камал да ас бит әле, бурысҡа аҡса эҙләп сыҡҡайны, – ти.

Уны ла саҡырығыҙ...

Шулай итеп, беҙ дүртәүләп аш ашайбыҙ, һөйләшеп ултырабыҙ.

– Ҡыҙҙар, һеҙҙең эргәлә бик рәхәт булды, хатта йылынып  киттек, сығаһы ла килмәй, – тиҙәр егеттәребеҙ.

Һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа уҡыу, тән  һәм йән яралары менән ҡайтҡан егеттәр менән аралашыу, тормоштоң әсе-сөсөһөн бергәләп татыуҙар беҙҙе туғандарса яҡынлаштырҙы. Яҡынлашыу, тигәндән… Бер саҡ шәмбе көндө институтта үткәрелә торған кисәлә Ғилемдарҙың һуғышҡа тиклем үк Дәүләкән педагогия училищеһында бергә уҡыған дуҫтары Хәким Ғиләжев менән Шәриф Бикҡол  эргәмә килделәр ҙә:

– Беҙҙең һиңә үтенесебеҙ бар, бөгөн һин Ғилемдарҙы һөйгән ҡыҙ булып уйнаһаң ине. Сөнки уның яратып йөрөгән ҡыҙы танауын бик юғары тота. Әҙерәк һабаҡ бирергә булдыҡ, – тиҙәр. Мин мәсьәләнең айышына төшөндөм дә ризалығымды белдерҙем.

Эйе, Ғилемдарҙың яратып йөрөгән ҡыҙы бар, мин дә уның менән бер  бүлмәлә йәшәүсе егет менән осраша инем…

Фронт юлдары үтеп ҡайтҡан егеттәр Хәким Ғиләжев, Шәриф Бикҡол, Ғилемдар Рамазанов һәр ерҙә бергә булырҙар, серҙәре лә уртаҡ, шуға  күрә, уларҙы шаяртып, «Три танкиста» тип атайҙар ине.

Мин кис буйы егеттәрҙең  үтенесен «еренә еткереп» үтәнем. Ғилемдар менән әлеге ҡыҙҙың араһы «йылына» төштө. Ошо ваҡиғанан һуң беҙҙең аралар туғандарса яҡынайҙы. Ғилемдар үҙенең уй-хыялдары менән уртаҡлашыр булып китте.

Уның иңдәрендә бик ауыр  йөк ятҡанын да белә инем.

...Дәүләкән педагогия училищеһының икенсе курсында уҡығанда армия сафына алына ул. Тәүҙә Саҡмағош районы Иҫке Балаҡ ауылында йәшәүсе әсәһе менән хушлашырға, унан һуң Ҡандра районының Үрмәкәй ауылында фронтҡа ебәреүҙәрен көтөп ятыусы атаһы менән осрашыу өсөн командирынан рөхсәт ала. Ҡырҡ ике йәшлек һалдат Йыһандар Рамазановтың улы менән һуңғы осрашыуы булып сыға. Улар төн буйына, йоҡламайынса, һөйләшәләр, таң атҡас, улын Ҡандра станцияһына оҙатырға килгән атаһының хушлашҡанда әйткән һүҙҙәре васыят булып ҡала.

– Улым, – ти ул, – был мәхшәрҙән икебеҙҙең дә иҫән ҡалыуыбыҙ икеле. Ҡайһыбыҙ ғына ҡайтһаҡ та ғаиләне тарҡатмаҫҡа кәрәк.

Мәскәү өсөн барған ҡанлы һуғыштарҙа 1942 йылдың апрелендә ятып ҡалған атаһының был һүҙҙәренә Ғилемдар ғүмере буйы тоғро булды. Ике туғанына: һеңлеһе Йәүһәргә лә, ҡустыһы Фәнүнгә лә юғары белем алырға ярҙам итте. Өс кешенең өҫ-башын ҡарау, матди яҡтан тәъмин итеү өсөн ара-тирә баҫылып торған шиғырҙар өсөн түләнгән гонорар һәм стипендия ғына етмәгәс (ул Сталин стипендияһы ала ине), «Ҡыҙыл таң» гәзите редакцияһына эшкә урынлашты. Уҡыуҙа һәр саҡ алдынғы булыу, эш һәм донъя мәшәҡәттәре уға бер ҙә еңел булмағандыр. Лекцияларҙың бөтәһенә лә йөрөй алмай, ике-өс сәғәткә генә килә лә, редакцияға йүгерә торғайны. Минең эргәмә ултырып, алдағы дәрестәрҙе һораша.

Бер көндө курсташ егеттәребеҙҙең береһе миңә аптырарлыҡ хәбәр һалды:

– Мин һине бик оҡшатам, бөгөндән өйләнер инем, тик Ғилемдар ҡаршы төшә.

Мин ғәжәпләнеп:

– Нисек? – тип һораным. Был сәйер, көтөлмәгән хәл ине.

– Ғилемдәр  миңә: «Һин уға был хаҡта белдермәнеңме, әле? Әгәр әйтмәгән булһаң, һөйләнмә, мин уға үҙем өйләнәм», – ти.

Был минең өсөн көтөлмәгән яңылыҡ ине, тик тиҙҙән икенсе бер ваҡиға быға

асыҡлыҡ индерҙе. Беҙ төркөмөбөҙ менән театрға барҙыҡ. Ниндәй спектакль ҡарағаныбыҙ онотолған, ә бына икенсе көндө булған хәл иҫемдә.

Театрға инеп барғанда, бер егеттең күҙ һалыуын һиҙеп ҡалдым. Ҡайтырға сыҡҡас, ул беҙҙең ҡыҙҙар төркөмөнә эйәреп сыҡты һәм дөйөм ятаҡҡа тиклем оҙата килде лә миңә былай тине:

– Һеҙ бер нисә минутҡа ҡалһағыҙ ине... Мин һеҙҙең менән артабан да осрашырға теләйем...

Мин артыҡ яуап бирмәйенсә, хушлашып инеп киттем. Был хаҡта Ғилемдар ҡайҙан белгәндер, иртән иртүк беҙҙең ишекте шаҡый, хатта асыулы кеүек:

– Кисә егеттәр менән оҙаҡ йөрөнөңмө ни? Имтихандар килеп еткәнен оноттоңмо әллә, хәҙер үк кейенеп сыҡ, мин һине тышта көтәм.

– Сыҡмаһам?..

Ул юғалып ҡалды.

Әлеге егет тә ҡыйыу булып сыҡты. Икенсе көндө мине яҡташы Ҡәрип аша саҡырып сығарҙы ла киноға барырға тәҡдим итте. Мин ризалаштым. Сөнки Ғилемдарҙың ҡылығы асыуға тейҙе. Үҙе башҡа ҡыҙҙар менән осраша, үҙе минең яҙмышыма ҡыҫыла, йәнәһе...

Беҙ әлеге егет менән һөйләшә-һөйләшә Ленин урамы буйлап китеп барғанда, ҡаршыбыҙға Ғилемдар, уның яҡын дуҫы Нәжибәк Хафизов, Муса Ғәли килеп сыҡтылар. Улар «йылынып» алғайны шикелле, Ғилемдар егеттең алдына уҡ килеп баҫты ла:

– Кто такой?.. – ти. Егет тә юғалып ҡалмай:

– В чем дело, молодой человек? – ти.

Шул саҡта Нәжибәк мине ҡултыҡлап ала:

– Дело в том, мы своих чужим не отдаем! – ти.

Ошо ваҡиғанан һуң Ғилемдар миңә серен систе:

– Минең һинең менән һәр көн осрашып һөйләшекем килә, башҡа кеше менән күрһәм, йәнемә урын таба алмайым...

Бик үк ҡыҙыл булмаған мөхәббәтебеҙ шунан башланды шикелле.

Институтты тамамлағас, уны – Бөрө пединститутына, мине Ҡыйғы районы Абзай урта мәктәбенә ебәрҙеләр. Икебеҙ ҙә бер йыл эшләнек, арала хаттар йөрөнө.

Йәйге каникулда тыуған ауылыма ҡайтҡас, Ғилемдарҙан телеграмма килеп төштө. Унда ике генә һүҙ: «Көт, киләм!»

Шулай итеп, 1950 йылдың июль айында беҙҙең ауыл Советында яҙылышып, никахҡа керҙек. Ғаилә ҡороу ул йылдарҙа бик ябай хәл ителһә лә, егеттәр бер һүҙле, ҡыҙҙар инсафлы ине.

– Минең быйыл тормошҡа ашыра торған ике хыялым бар, – тине ул. – Тәүгеһе – ғаилә ҡороу, икенсеһе – Мәскәүгә аспирантураға уҡырға китеү.

Күп уйланыуҙар аша бер ҡарарға килдем. Ул уҡырға китәсәк, мин – эшләгән урыныма. Өфөлә кеше фатирында бер аҙ йәшәнек. Мәскәүҙән ҡышҡы каникулы ваҡытында Абзайға ҡайтты ул. Көндәребеҙҙе бик матур үткәрҙек: уҡытыусылар менән ҡунаҡҡа йөрөшөүҙәр, ауылдың эргә-тирәһендә ял итеүҙәр татлы төш кеүек. Тормоштоң һәр төрлө ҡыйынлыҡтарын бергәләп күтәрҙек, тип әйтә алам. Икенсе йылды тәүге балабыҙ менән мине үҙе эргәһенә алып китте. Мәскәүҙең Ярославль юлындағы Кузьма тигән платформала яңғыҙ ҡарсыҡта фатирҙа йәшәнек. Әле уйлаһам, уның түҙемлегенә, тырышлығына хайран ҡалам. Һәр көндө Ленин исемендәге китапханаға электропоезда китә, кис менән аҙыҡ-түлек алып ҡайта. Улай ғына ла түгел, ул миңә Мәскәү театрҙарының күпселеген

күрһәтеүгә лә өлгәшә ине. Баланы, аҡса түләп, хужа ҡарсыҡҡа ҡалдырабыҙ. Йүгерә-йүгерә электричкала барып ҡайтыуҙар… Был йәшлектең генә хәленән килгәндер. Ошо бер ҡыш эсендә хәтерҙә мәңге һаҡлана торған матур мәлдәр бар.

Яҙға сыҡҡас, мин, Ғилемдарҙы ғаилә мәшәҡәттәренән ҡотҡарыр өсөн, ауылыма ҡайтып, бала менән туғандарыма һыйындым. 1953 йылдың октябрь айында кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлап ҡайтыуы оло шатлыҡ булды. Тик фатир мәсьәләһе өйләнешеп алты йыл йәшәгәс кенә хәл ителде. Ике бала менән бер уңайлығы ла булмаған кеше мөйөштәрендә йәшәүҙең шаҡтай ауыр булғаны мәғлүмдер. Кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлап ҡайтҡас, Тарих, тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтына эшкә урынлашты. Ғүмеренең һуңынаса (1956 – 58 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» гәзите мөхәррире булып эшләп алғандан тыш) ошо вазифаны башҡарҙы. Институттағы төп эше менән бергә әҙәбиәт, шиғриәт менән дә шөғөлләнде. Рецензиялар, мәҡәләләр, ижади портреттар яҙҙы. Мин уның хатта ял ваҡыттарында ла эшһеҙ сағын хәтерләмәйем. Ҡырҡ өс йыл буйына тормош юлында бергә атлаған кеше булараҡ, үтә тырыш, тынғыһыҙлығын күреп, борсола инем. Ләкин ул барыбер үҙенең булмышына тоғро ҡалды. Иллеләп китап сығарҙы. Шиғырҙар, поэмалар ижад итте.

Әйткәнемсә, быларҙан башҡа ла бик күп эштәр башҡарҙы. Байтаҡ баҫмаларҙың редколлегия ағзаһы, Башҡортостанда журналистар берлеге ойоштороп, уның тәүге рәйесе булды. Әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә лә байтаҡ эштәр башҡарҙы. Әйтәйек, башҡорт әҙәбиәте буйынса диссертация яҡлаусыларға оппонент булараҡ Рәйеф Әмировҡа Ташкентта, Абрар Кәримуллинға Ҡазанда, һ.б. бик күптәргә ярҙам ҡулын һуҙҙы.

1962 йылда СССР Юғары Советына депутат итеп һайланды. Ил буйынса һәр төрлө әҙәби сараларҙа ҡатнашып, күп сәйәхәт итте. Мөмкинлек булғанда мине лә үҙе менән йөрөтөр ине. Һәр төрлө ижад йорттарында булыуҙар яҡты иҫтәлектәр уята. Әйтәйек, 1961 йылда Әхнәф Харисов ағай менән Ленинградта бер ай командировкала булды, ҡайтырына бер аҙна ҡалғас, мине эргәһенә саҡырҙы.

1966 йылда Мәскәүҙә Көнсығыш әҙәбиәттәре институтында докторлыҡ диссертацияһын яҡланы.

1975 йылда Запорожьела «Шиғри май» байрамында, Еңеү көнө тантанаһында ҡатнашыуыбыҙ, Болгарияла Варна ҡалаһындағы халыҡ-ара журналистар йортонда, Ҡаҙағстанда башҡорт әҙәбиәте көндәрендә ҡатнашыу, билдәле яҙыусылар менән осрашыуҙар – яҡты хәтирәләр. Ҡырым ерен, Аджимушҡай ҡыуышын күреү һ.б. ваҡиғалар иҫтә.

1992 йылда Ҡазанда Туҡай музейын ҡарауыбыҙ һуңғы сәфәребеҙ булып сыҡты… Хеҙмәтенә күрә хөрмәте лә ситләп үтмәне уны. Башҡарған эштәренә юғары баһа бирелде.

1957 йылда «Почет Билдәһе», 1973 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән бүләкләнде. 1983 йылда Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре» тигән исемгә лайыҡ булды. Ватан һуғышы ҡырҙарынан да ике Ҡыҙыл Байраҡ ордены, бер нисә миҙал алып ҡайтыуын да иҫәпләһәң, Ғилемдар Рамазанов иленең ысын патриоты, ватансыл шәхес ине.

Ғаиләлә ҡайғыртыусан атай, мәрхәмәтле ир, сит кешеләргә лә ярҙамсыл булды. Бергәләп өс бала тәрбиәләп үҫтерҙек. Балаларҙың уй-маҡсаттары менән ҡыҙыҡһыныусан булды. Уҡыуҙағы хәлдәрен белешер, иғтибарлап тыңлар ине.

Китапханаларға йөрөттө. Улыбыҙ Илдар мәктәпкә барғансы уҡ хәрефтәрҙе танып уҡый башлауын күреп, шатланып, ғорурлана торғайны.

Бәлки, шуғалыр ҙа ҡыҙҙарыбыҙ икеһе лә аталарының юлын һайланы. Өлкәнебеҙ Гөлшат институт тамамлағандан һуң, бар булмышын журналистикаға арнаны. Улыбыҙ Илдар Мәскәүҙә технология институтын тамамланы. Кинйә ҡыҙыбыҙ Гөлназ атаһы иҫән ваҡытта уҡ әҙәбиәт фәне буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлағайны. Быйыл инде Мәскәүҙә докторлыҡ диссертацияһы яҡланы. Аталары иҫән булһа, нисек шатланыр ине лә бит...

Алда әйтеп үткәнемсә, Ғилемдар бер ҙә үҙен аяманы. Ҡайһы саҡтарҙа күтәрә алмаҫлыҡ йөктәрҙе лә өҫтөнә алды. Һуғыш ҡырында ике тапҡыр контузия алған, ғәриплэнеп ҡайтҡан инвалид булыуына ҡарамаҫтан, эш менән йәшәне. Артыҡ оҙон булмаған ғүмерен янып-ярһып үткәрҙе. Уның артығы менән активлығы, эшсәнлеге мине һәр саҡ борсоуға һала торғайны. Үҙенә йыш ҡына был хаҡта иҫкәртә инем, ләкин... һәр кем донъяла үҙе булып ҡалалыр...

Минең борсолоп:

– Ниңә шул тиклем үҙеңде һаҡламайһың? – тигән һорауыма ҡаршы биргән яуабы әлегәсә ҡолағымда яңғырай кеүек:

– Оҙаҡ йәшәлде, шөкөр итерлек. Минең тиҫтерҙәрем ун һигеҙ йәштә ятып ҡалды. Ә мин, имгәнеберәк булһа ла, иҫән ҡайттым... Алдыма ҡуйған маҡсаттарыма ла ирештем. Балаларымдың да тормоштарында үҙ юлын тапҡанын күрҙем. Был бәхет түгелме ни? – тигән яуабына шуныһын да өҫтәй: – Мин тиҙ генә китеп барырмын, тип өмөтләнәм... Йөрәк сирен үҙең беләһең...

Тап шулай булды. Ун өс йыл элек үткәргән инфарктың сираттағы өйәнәген ул аяҡ өҫтөндә ҡаршыланы һәм ике-өс секунд эсендә донъя менән хушлашты. Был яҙмамды уға арналған байтаҡ шиғырҙарымдың береһе менән тамамлайым.

* * *

*Теләй инең: атлаһаҡсы бергә*
*Ғүмер юлдарыңа еткәнсе.*
*Һуңғы сәфәремә генә, тимен,*
*Һинән алданыраҡ китһәмсе.*

*Фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күстең*
*Йәйҙең иң сәскәле миҙгелендә.*
*Эштә янып үтте ғүмерең дә,*
*Теләгәнсә килде үлемең дә.*

*Минең хәлдәр бына башҡасараҡ...*
*Эҙләһәм дә, юҡтыр башҡа сара,*
*Көндәремә төндәр ялғана ла,*
*Яҙмыш яҙған эҙе менән бара.*

*Яҙмыш яҙған эҙе менән бара,*
*Дәүә итеп булмай артығына.*
*Ҡайғыларым икеләтә ауыр,*
*Шатлыҡтарым ярым-ярты ғына.*

*Һары һағыш һарып күҙем үтте,*
*Ҡара көнлө аҡ ҡышым да артта.*
*Күңелем һаман икәү бергә саҡтың*
*Аҡ сәскәле йәйҙәренә ҡайта.*

*Бына ҡайтыр, тип һис көтәһе юҡ,*
*Бергә-бергә юлдар үтәһе юҡ,*
*Килгән хәсрәттәрҙең кәртәһе юҡ,*
*Яңғыҙлыҡтың кисе, иртәһе юҡ.*

*Һыңар ҡанат ғүмер итәһем бар,*
*Һуңғы һулышыма етәһем бар,*
*Һин ҡалдырған ҡайғы-һағыштарҙы*
*Үҙем менән алып китәһем бар....*

**Фәниә ЧАНЫШЕВА.**

# «Ағизел» архивынан



Ҡырмыҫҡалы районынан сыҡҡан яҙыусылар: Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ, Роберт БАЙЫМОВ, Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ, Рәсих ХАННАНОВ.



Марат КӘРИМОВ менән Рәмил ЙӘНБӘК.



*Әнисә ТАҺИРОВА*



*Гөлфиә* ЮНЫСОВА



*Зөһрә* ҠОТЛОҒИЛДИНА



*Таңсулпан* ҒАРИПОВА



*Кәүсәриә* ШАФИКОВА



Абдулхаҡ ИГЕБАЕВ



Тимергәле КИЛМӨХӘМӘТОВ



Рим ӘХМӘТОВ



Салауат ӘСФӘТУЛЛИН



Драматургтар Нәжиб АСАНБАЕВ, Фәрит БОГДАНОВ, Кәбир АҠБАШЕВ
режиссер Рифҡәт ИСРАФИЛОВ менән.



*Рәйес ТҮЛӘК*



*Рәмил ҠОЛ-ДӘҮЛӘТ*



*Ғилман ИШКИНИН*



*Ғәбиҙулла ЗАРИПОВ*

# *Яҙмыш – һикәлтәле юл*

*(Хәтер осҡондарынан тоҡанған фәлсәфәүи уй-фекерҙәр)*

*Әгәр ат һөрөнһә,*
*Атты гәйепләмә.*
*Юлды гәйеплә...*
Рәсүл Ғамзатов

## Инеш

Кешенең ғүмер юлы һис тә һыҙыҡтарға бүлгеләнеп, юл билдәләре, светофорҙар ҡуйылған шыма асфальт юлға һис тә оҡшамаған. Киреһенсә, ул йә һикәлтәле, ҡараңғы урмандар аша үтеүсе, тау-ташлы һәм боролмалы һуҡмаҡтарға, йә бер көнө ҡояшлы, икенсеһе ел-ямғырлы, ҡайһы саҡ туңдырып хафаландырған, икенсе осор йылытып, ҡыуандырған һауа торошона тиң. Тормош – шатландырып та, ҡайғыртып та, йылындырып та, өшөтөп тә ала торған сәйер ысынбарлыҡ. Йәш сағында кеше алдағы көндәрҙең ҡайһыһы ел-ямғырлы, ҡайһыһы аяҙ булырын күҙ алдына ла килтерә алмай ҙа, кәрәк тип тә тапмай. Был хәлде ҡалаға машинала инә башлағандар менән сағыштырып була: таныш булмағандар бараһы еренә аҙаша-һораша, тегеләй ҙә былай интегеп йөрөп, ә таныш булғандар бер ниндәй көсөргәнешһеҙ, тиҙ һәм енел генә барып етә. Кеше, олоғая килә тәжрибә туплап, донъя хәлдәрен самалап, иртәгәһе көндә һәм киләсәктә ни буласағын һиҙемләү һәләтенә эйә була бара. Тормош тәжрибәһен ололар йәштәр менән күберәк уртаҡлашһа, йәштәр уларҙың кәңәшенә иғтибарлы булһа, юлын күптәр көтөлмәгән хаталарҙан азат булып үтер ине.

Ҡайһы саҡ кеше хаталанмаҫҡа тырышып, хәҡиҡәтте белеп йөрөһә лә, уны тормошҡа ашыра алмай. Күптәр хәҡиҡәтте аңламай, ә уны үтә күргәндәр күпселекте ышандыра алмай, тауышланып йә эстән ғазапланып йәшәй. Тормошонда ниндәй һикәлтәләр булырын алдан белмәгән кеше абынып та ҡуя. Рәсүл Ғамзатовтың эпиграфтағы

---

*Хәлил Барлыбаев Баймаҡ районының Йомаш ауылында 1944 йылда донъяға килә. Стәрлетамаҡ совхоз-техникумын тамамлағандан һуң армияла хеҙмәт итә. Мәскәү дәүләт университетында иҡтисад буйынса юғары белем ала. Иҡтисад фәндәре докторы, философия фәндәре докторы, ике саҡырылыш Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты.*

*Бөгөн Рәсәй Фәндәр академияһының философия институтында эшләй.*

образлы һүҙҙәре ысынбарлыҡҡа тап килә. Хәтеремдә, миңә 11 – 13 йәштәр тирәһе булғандыр, Һаҡмар буйындағы футбол яланы кеүек киң һәм тап-таҡыр Тартай туғайы буйлап Полковник ҡушаматлы атта йәнтәслим сабып киләм. Күҙ асып йомған арала ат өҫтөнән уҡ кеүек атылып киттем дә бер нисә метр алға осоп барып төштөм. Бер ерем дә ауыртмаған кеүек. Атым да һөрөнөп киткән дә, тороп һелкенеп алғас, яйлап ҡына яныма килде. Уны етәкләп, абынған еребеҙҙе барып ҡараным. Сапҡан саҡта аттың бер тояғы йомран ояһына эләккән икән.

Ҡайһы бер күренекле кешеләр, үҙҙәрен дөрөҫ, хатаһыҙ йәшәүсе, гонаһһыҙ шәхес итеп күрһәтергә теләпмелер: «Тормош юлымды яңынан үтергә тура килһә, бер нәмәһен дә үҙгәртмәй, шул уҡ юлды яңынан үтер инем», – тип маҡтанырға ярата. Минеңсә, был ысынбарлыҡҡа тап килмәй, сөнки үткәненә әйләнеп һәм хаталар, яңылышыуҙар, алданыуҙар кисергәнен күреп, күптәр уны яңы тормошонда төҙәтергә теләр ине. Был ябай кешегә лә, тарихи шәхестәргә лә ҡағыла. Әйтәйек, И. Сталин яңынан тыуһа, бәлки, Гитлерҙан алданмаҫ, ҡаты һуғышта күп юғалтыуҙарға юл ҡуйылмаҫ ине. М. Горбачевтың бөгөнгө һүҙҙәренә ҡолаҡ һалһаң, ул СССР-ҙың тарҡалыуын булдырмаҫ ине кеүек. Б. Ельциндың раҫлауынса, әгәр ул Чечнялағы хәрби кампанияның һөҙөмтәләрен алдан белһә, уны башламаҫ ине һ.б.

Былар миңә лә ҡағыла. Аллаһы Тәғәлә тормошомдо янынан башлау форсаты бирһә, күптәргә һәйкәл ҡуйыр, ҡайһы берәүҙәрҙе урап үтеп, хаталанмаҫҡа тырышыр инем. Шуны ла әйтергә кәрәк: тормошомдоң оҙонораҡ юлы иҫ киткес яҡшы кешеләр менән үтте, насарҙары бер ҡул бармаҡтары менән һанарлыҡ. Шартлы рәүештә әйткәндә, яҡшы кешеләр донъяла 99 процент, насарҙары 1 процент ҡына тәшкил итә. Насарҙарҙан һаҡланыу өсөн кешелеккә оло көс түгергә тура килә. Күптәр «яҡшы»ларҙы «насар»ҙар менән бутап хаталана. Хаталарҙы алдан күреү, алда яңылышыуҙар ихтималлығын белеп йәшәү тормошто төптәнерәк уйлап, хаталарҙы аҙыраҡ ебәреүгә булышлыҡ итә.

Түбәндәге яҙмалар ниндәйҙер эҙмә-эҙлекле сюжетҡа ҡоролмаған, әммә бөтәһе бергә бөтөн йөкмәткеле система тәшкил иткән хәтер ярсыҡтарынан һәм фәлсәфәүи уй-фекерҙәрҙән тора. Кемгә ҡыҙыҡ, кемгә фәһемле – теләгән кеше үҙенә кәрәген табыр. Өҫтәп шуны әйтергә кәрәк: яҙмалар ысынбарлыҡҡа таянып, һис бер уйҙырмаһыҙ тормошомдағы хәлдәр тураһында бәйән итә. Дөрөҫ, ҡайһы берҙәре маҡтаныуға, үҙ-үҙенде рекламалауға оҡшаған кеүек. Ант итеп әйтәм: яҙылғандар ситтән күҙәтеүсе, объектив кеше күҙлегенән тупланған. Ышаныуы ҡыйын булған урындарҙа билдәле бер мәҙәкте хәтерләү урынлы булыр. Бер күренекле, оло кешенең юбилейында, ғәҙәттә, уны ҡояшҡа тиңләп маҡтайҙар. Йомғаҡлау һүҙендә ағай: «Әлбиттә, һеҙ мине артыҡ ныҡ шапыртып маҡтанығыҙ. Әйткәндәрегеҙ дөрөҫ булғас, нишләйһең, хәҡиҡәткә ҡаршы барып булмай!» – тип уңайһыҙыраҡ хәлдән шаярыу аша оҫта сыҡҡан.

# Юл башында

Бала тыуып, бер нисә йәшкә тиклем уның хәтерләү һәләте шыта башлаған орлоҡ һымаҡ ҡына була. Ә хәтерләү – иң ҡиммәтле һәм файҙалы һәләттәрҙең береһе. Хәтер – әхлаҡ ҡанундары, белем һәм төрлө тойғолар үҫтереү баҡсаһы, аҙаҡ ул баҡсаның емештәрен һаҡлау урыны. Хәтере юғалған кеше – кеше булыуҙан туҡтай. Тарихи хәтер халыҡты халыҡ итә. Тарихһыҙ халыҡ – халыҡ түгел. Быуындан быуынға күсеп килгән хәтер китабы булмаһа, «Урал батыр» эпосы ла, күп кенә риүәйәттәр ҙә, әкиәттәр ҙә, мәҡәл-әйтемдәр ҙә булмаҫ ине.

Кеше үҫә барған һайын, хәтер һәләте балаларҙа төрлөсә үҫешә. Уны яҡшылап үҫтерә белеү – ата-әсәләр бурысы. Ҡайһылар игелекте онотоп, мәрхәмәтһеҙгә әүерелә, икенселәр яуыз хәтерле, кешене яратмаусан булып китә. Үҙемдең кем икәнлегемде белә башлауым шулай хәтерҙә ҡалған: өҫтәл янына киләм дә, уның өҫтөндә нимә ятҡанын күрергә була, аяҡ ослап, ынтылып ҡарайым. Әммә миңә кәрәкле нәмә күренмәй, күренһә лә, алып булмай, шуға үкенеп, ҡайҙырып йөрөйөм. Хәҙер ике-өс йәшлек ейәндәремдең өҫтәл тиңлек икәненә ҡарап фаразлайым: үҙемде белә башлауым шул йәш самаһына тура килә. Кешене кеше иткән белемдең 90 проценты уның мейеһендә биш йәшкә, йәғни тулы хәтере тыуғанға тиклем барлыҡҡа килеүе билдәле. Бала тәрбиәләгән ата-әсәләргә был мәғлүмәтте белеү файҙалы, сөнки кеше булмышының күпселек өлөшө биш йәшкә тиклем формалаша.

Миңә өс-дүрт йәш булғандыр, атай менән әсәй араһында ыҙғыш сыҡҡан кеүек тойолдо. Йәштәр араһында була торған хәл. Көтмәгәндә атай, ҡыҙып китеп, яман ниәт менән әсәйгә ынтыла башланы. Һикереп тороп, әсәй алдына баҫтым да бар көсөмә: «Теймә!» – тип ҡысҡырып ебәрҙем. Бындай хәлде көтмәгән атай миңә ҡарап аптырап ҡалды һәм ҡапыл һыуынды. Әсәйҙе яратыу, уны ҡурсалау, яҡлау тойғоһо кешелә тыумыштан, генетик кимәлдә һалынған булалыр, моғайын.

Атайыбыҙ ғүмер буйы әсәйгә лә, туғыҙ балаһына ла бер ауыр һүҙ әйтмәне, йоҙроғо менән ҡағылманы, хатта асыуланған мәлдәрен дә иҫләмәйем. Уның әйткәндәрен Аллаһы Тәғәлә һүҙе кеүек тыңлап йәшәгәнгә шулай булғандыр. Үҙебеҙ ҙә шундай йәшәү рәүешен дауам итергә тырыштыҡ.

***

Ауыл – үҙенә айырым мөхит. Йөҙәрләгән, менәрләгән кеше һәр береһе тураһында бөтәһен дә энәһенән ебенә тиклем белеп, күреп, бер-береһе менән ҡатнашып йәшәү ауылдан башҡа бер ерҙә лә осрамай. Әйтәйек, ҡалала йәшәүсенең бергә уҡыған, эшләгән һәм бер нисә күршеһенән башҡа таныш кешеләре булмай. Улары ла бер-береһен ярты-йорто, билдәле кимәлдә генә беләләр. Ҡала кешеһе артынан социаль контроль, уның үҙендә йәмғиәт алдында яуаплылыҡ тойғоһо юҡ кимәлендә. Ысын коллективтың нимә икәнен ул яҡшылап белмәй ҙә. Бында һүҙ йәмғиәттең бик аҙ өлөшөн тәшкил иткән күренекле шәхестәр хаҡында түгел, ә күпселеккә ингән ябай кешеләр тураһында бара.

Әйтелгәндән айырмалы, ауылда үҫкән һәр кем сабый сағынан ғүмеренең аҙағына тиклем, бер урында ғына йәшәһә йә ситкә сығып китһә лә, ауылдаштарының күҙәтеүе аҫтында була һәм яуаплылыҡ тойғоһо менән йәшәй. Шуға күрә ауыл кешеһе әхлаҡи яҡтан сафыраҡ, йәмғиәт алдында яуаплы шәхес булып өлгөрә. Был – дөйөм ҡағиҙә, әлбиттә, унан тайпылыуҙар ҙа осрай. Әммә ауылдан, ҡайһы бер спекулятив фекерҙән айырмалы («аульные»), түбән интеллектлы түгел, киреһенсә, тәбиғи зирәклеккә, ижтимағи яуаплылыҡҡа, йәмғиәт мәнфәғәте

өсөн көрәшкә ынтылышлы кешеләр сыға. Быны бик күп дәлилдәр менән иҫбатларға мөмкин. Дөйөм характерҙағы береһен генә атап үтәм: йәмғиәттә тарала килгән социаль сирҙәрҙең күбеһе ҡала ерлегендә ярала. Ә ауыл борон-борондан оло шәхестәр, талантлы хәрбиҙәр, Ер-әсәне һәм уның тәбиғәтен һаҡлау өсөн үҙен йәлләмәгән ҡаһарман кешеләр тәрбиәләй.

Ҡала һәм ауыл тормошо кешелек донъяһы үҫешенең ике йүнәлешен тасуирлай. Тәүгеһе менән барған йәмғиәттәр аноним йәшәүсе кешеләр цивилизацияһын хасил итә. Улар халыҡсанлыҡты юғалтып, традициялар, ғөрөф-ғәҙәттәр, туған телде, мәҙәниәтте онотоп, төҫһөҙ, мәғәнәһеҙ һәм йөкмәткеһеҙ йәшәйеш барлыҡҡа килтерә. Ауыл цивилизацияһы, киреһенсә, йәшәйешкә, традицияларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә яңынан-яңы төҫ, йәм һәм нур өҫтәп, телдәр, мәҙәниәттәр гөлләмәһендә өр-яңы сәскәләр үҫтереп йәшәүгә ынтыла. Быndай күренеш ауылда ғына түгел, хәҙерге заманса йәшәүсе ҡала шарттарында ла булыуы мөмкин. Хәҙерге тормош рәүеше 40-50 йыл элек булғанға ҡарағандан бөтөнләй айырыла. Шуныһы мөһим: бындай түңкәрелештәр бер быуын ғүмеренә һыйҙы.

Ауыр Бөйөк Ватан һуғышында енеүҙән һуң күп ваҡыт та үтмәгән булғанғалыр, 40-сы йылдарҙың аҙағы – 50-се йылдарҙа халыҡ ҡыйын йәшәһә лә, рухи күтәренкелекте, киләсәккә оптимистик ҡарашты юғалтманы. Ауылда электр уты, телевизор, автомобиль, мотоцикл юҡ, игенде үгеҙҙәр һөйрәгән «Сталинец» комбайны менән йыялар, һирәк кешелә генә радио һәм велосипед бар. Шул уҡ ваҡытта йырлашып, ҡул менән бесән сабалар, ырҙында иген киптерәләр, кистәрен клубҡа йыйылып йырлайҙар ҙа бейейҙәр, кино ҡарайҙар, бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөшәләр. Әммә иҫеректәр күренмәй, үндайҙарҙы кеше йоғошло ауырыуға тарыған әҙәм кеүек күрә ине. Ул замандағы колхоз тормошо халыҡтың менталитетына, мәнфәғәтенә тура килде. Дөйөм алғанда, Совет власы халҡыбыҙға ыңғай үҫеш килтерҙе, дәүләтселек биреп, милләт булып ойошоуға ярҙам итте. Әммә кире йоғонтолар ҙа етерлек ине.

Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы тәүге йылдар ныҡ ауыр булды. Ярым ас йөрөгән, ныҡлап асыҡҡан ваҡыттар ҙа булғыланы. Бигерәк тә аталары һуғышта үлеп ҡалған балалар ыҙаланды. Беҙҙең атай имен ҡайтҡас, ғаиләбеҙгә аслыҡ, ҡыйынлыҡ әллә ни теймәне. Өйҙәрҙә иң тәмле, иң ҡәҙерле аҙыҡ – мейестә бешкән сөсө икмәк була торғайны. Урамға икмәк тотоп сыҡһаң, дуҫ-ҡәрҙәштәр бүлеп бирергә һорап аптырата ине. Бөтәһенә лә еткереп булмай, иң яҡын дуҫтарға бирәһең дә шуның менән дуҫлыҡты тағы ла ныҒытаһың.

Ир-егеттәрҙең күбеһе һуғыштан ҡайтмағанға, иҫән ҡайтҡан йәки һуғышҡа бармай ҡалғандарҙың күбеһе тол ҡатындарҙың ҡайһы берҙәрен йә һөйәркә итеп, йә ҡатынлыҡҡа алалар ине. Хәләл ефеттәрҙең күбеһе был хәлде күреп-белеп йөрөп, әсенгәндәрҙер, әммә донъя михнәттәрен аңлапмылыр, бик үк ғауға ҡуптарып барманылар, риза булып йәшәнеләр. Тол ҡатындарҙан да балалар тыуҙы, уларҙы ҡайһы бер яуыз уйлы кешеләр, аңы теүәл булмаған үҫмерҙәр «тыума» тип үсекләй торғайны.

***

Атайыбыҙ Аллаһыға ышанғанмылыр, белмәйем, әммә ул йәш сағында комсомолға ла, партияға ла инмәгән. Беҙгә шулай аңлатты: «Беҙ йәш саҡта комсомолды тәүҙә КИМ (коммунистический интернационал молодежи – **Х.Б.**) тип атанылар. Беҙ уның ағзаларын «коммунист илаҡ малай» тип үсекләнек. Һуғыш ваҡытында комсомолец һәм коммунистарҙы, һарыҡ көтөүе кеүек ҡыуалап, пушка ите яһай торғайнылар. Мин шуға күрә ул юлдан барманым».

Беҙ иһә – уларҙың балалары – комсомолец та, коммунист та булдыҡ, Аллаһыҙ тәрбиәләндек. Хәҙер аңлайым: Аллаһыға ышаныу йә ышанмау мөһим түгел. Беҙ динде иң элек мәҙәни күренешкә тиңләп, халыҡты берләштереүсе, уны әхлаҡ юлына өндәүсе институт тип ҡабул итәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта һәр халыҡ динде үҙенсә үҙләштерә, уның ҡанундарын үҙенең холоҡ-фиғеленә, тарихына һәм традицияларына яраҡлаштырып, үҙ динен ҡабул итә. Был күренеш күп кенә мосолман илдәрендә лә, христиан дәүләттәрендә лә күҙәтелә. Башҡорттар ҙа шул уҡ юлдан күптән бара һәм артабан да шулай барыр, моғайын. Хәҙерге информацион глобалләшеү осоронда сит илдәрҙә үҙләштерелгән дини ҡанундарҙы тиҙ генә Исламдың төп принциптары ҡабул ҡылып һәм һуҡыр рәүештә ҡабатларға ынтылып, халыҡтың аңын томаларға ярамай. Ул ҡанундарҙы ҡабул итә башлаһаҡ, халҡыбыҙҙың, ул ҡанундарға килешмәгән ҡайһы бер йолаларын, эпос, риүәйәттәрен һәм башҡа күп матур ижад емештәрен инҡар итергә мәжбүр булаcаҡбыҙ. Әйтәйек, Салауат Юлаев һәйкәленән, классик рәссамыбыҙ Әхмәт ағай Лотфуллиндың һәм башҡа шәхестәребеҙҙең ижадынан баш тартырға тура киләсәк, сөнки Ислам ҡанундары буйынса кеше һынын, йәнлектәрҙе кәүҙәләндереү тыйыла.

Ғәрәпсә уҡый белгән атайыбыҙ, олоғайғас, Ҡөрьәнде иң яҡшы белгән кешеләрҙең береһенә әүерелде. Уның яҡлап ҡартатайыбыҙ ҙа мәзин, йәғни Ҡөрьән уҡыусы булған. Атайым әсәйебеҙҙе лә, оло улы Зөбәйерҙе, минән бәләкәй Ғәлимде лә үҙе йыназа сығып, фани донъянан оҙатты. Үҙе 87 йәшкә етеп донъя ҡуйҙы. Ғәрәп илдәрендә белем алып ҡайтҡан муллалар «үҙешмәкәр» мулла араһында Ҡөрьәнде дөрөҫ һәм матур уҡыусыларҙың береһе итеп беҙҙең атайҙы ҡуялар ине. Шул уҡ ваҡытта төрлө дини сараларҙы ашыҡ-бошоҡ, тиҙ генә атҡарырға яратыусылар аят-сүрәләрҙе дөрөҫ, еренә еткереп һәм шуға күрә оҙаҡ итеп уҡыған атайыбыҙҙы оҡшатып та бөтөрмәне.

***

Кеше яратыу – тәрән мәғәнәле төшөнсә. Атай-әсәйҙе, кесе туғандарыңды, балалар-ейәндәреңде яратыуҙы аңлатыу кәрәкмәйҙер. Улар үҙ тәнеңдең һәм йәнеңдең айырылғыһыҙ өлөшө булып тойола: үҙең – атай-әсәй дауамы, ә балалар һәм ейәндәр – һинең дауамың. Үҙ тәнеңде нисек яратҡан, ҡәҙерләгән, ҡурсалаған, йәнеңдең тыныслығын һаҡлаған кеүек, уларҙы ла шулай, яратыу-яратмау тураһында тәрән уйланмайынса ғына ҡайғыртаһың. Уларҙың сифаттарын донъяла иң юғары күренеш кеүек ҡабул итәһең, етешһеҙлектәрен күрһәң дә, күрмәмеш булаһың. Хәҙер ниндәйҙер дәрәжәлә аңлатып була торған иң тәүге ысын ихтирам Зөбәйер ағайыма булған икән. Мин уны үҙенә ылыҡтырып торған яҡтылыҡ, йылылыҡ, яғымлылыҡ сығанағы итеп тойоп, уның менән һәр саҡ бергә булырға теләп, шул саҡта үҙемде бәхетле һиҙеп, айырылған ваҡытта гел һағынып йәшәнем. Ул донъя ҡуйғас, әле лә уны сикһеҙ юҡһынам, шуға яҡын ныҡлы ихтирам аҙаҡ башҡа туғандарыма, дуҫтарыма ҡарата ла булды. Тик был тойғоларҙың ҡайһыларылыр тора-бара һүнде, ваҡытлыса булып сыҡты. Ә ҡайһылары төңгө күктәге тормошто яҡтыртмай ҙа, йылытмай ҙа торған бәләкәй генә йондоҙсоҡтар һымаҡ тороп ҡалды.

## Тормош мәктәптәре

Шәхес булып өлгөрөүебеҙҙә совет осоро мәктәбе мөһим роль уйнап, уның тәрбиәүи көсө бик ҙур ине. Хәҙерге мәғариф, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул көскә эйә түгел, хатта аҙмы-күпме белем биреүҙе лә еренә еткереп үтәмәй. Юғары уҡыу

йортонда профессор булып йөрөһәм дә, беҙ педагогик яҡтан 50-се йылдарҙа Баймаҡ районының Йомаш ете йыллыҡ мәктәбендә эшләгән уҡытыусылар кимәленә лә етмәгәнбеҙ кеүек тойола. Ҡайһы саҡ шундай сәйер уй ҙа тыуып ҡуя: тормошомда иң кәрәкле һәм файҙалы белем Йомаш мәктәбендә алынған, ә аҙаҡ техникумда, университетта һәм башҡа уҡыу йорттарында үҙләштерелгәндәре тик өҫтәмә белем генә булған. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән дәрес биргән Рауза Булат ҡыҙы Ильясова апай телебеҙгә һүнмәҫ һөйөү тыуҙырҙы. Математиканан – Миңләхмәт ағай Алсынбаев, физика, рәсем һәм хеҙмәт дәрестәренән – Әмир ағай Яналин, ботаниканан – Вәлиәхмәт ағай Биктимеров, биологиянан – Фатима апай Барлыбаева, тарихтан – Зәйнулла ағай Ҡәйепов, химия һәм йырҙан уҡытҡан Маһира апай Баймырҙина һ.б. дәрестәре йотлоғоп, спектакль ҡараған кеүек үтә ине. Уларҙың һын-ҡиәфәте һәм сығыштары әле лә күҙ алдымда, һөйләгәндәре ҡолаҡта сыңлай. Улар беҙгә белем генә түгел, аралашҡан ваҡытта күңелебеҙгә әхлаҡ, патриотизм тойғолары, фәнгә ынтылыш, тормош юлыбыҙға йүнәлеш биреп тә өлгөрәләр ине. 90-сы йылдарҙың башында шул хайран ҡалдырҙы: мәктәбебеҙҙең ҡайһы бер уҡыусылары менән осрашҡанда, Рауза апай Ильясованың 50-се йылдарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса яҙма эштәрҙе уҡып ишеттереүе хаҡында белдем. 30 – 40 йыл буйы уҡыусыларыңдың яҙма эштәрен һаҡлау өсөн үҙ һөнәреңде, балаларҙы нисек яратырға кәрәк!

***

Заманында Иосиф Сталинды күптәр Аллаһыға тиңләп табынһа ла, атай-әсәйебеҙҙең улар рәтенә инмәгәнен хәтерләп беләм. Беренсе класта уҡығанда стенала торған «Сталин – светоч коммунизма!» тигән һүрәткә ҡарап һәм уны данлауҙарҙы ишетеп һәм уҡып, бала күңеле менән шуларға ышанып, юлбашсыны Аллаһылай күреү хәленә еткәйнем. Бер көн Сталиндың бәләкәй генә портретын табып, үҙем дәрес әҙерләгән өҫтәлгә ҡаршы стенаға элеп ҡуйҙым. Быны күреп, әсәйем шелтәләне: «Кит, нишләп ул кафырҙың һүрәтен алып ҡайттың?» Аптырауымдың сиге юҡ: «Ниңә ул кафыр булһын! Ул бит – Сталин!!!» Әсәйем аҙ ғына уйланып торҙо ла, көрһөнә биреп: «Ярай, ул тиклем табынғас, торһон», – тип ризалашты. Ләкин аҙаҡ ул портрет ҡайҙалыр юҡ булды. Сталин иҫән ине әле, әгәр берәйһе беҙ һөйләшкәнде тыңлап тороп, тейешле урындарға еткерһә, артабан беҙгә ни буласағы билдәле инде. Хәйер, беҙҙең яҡ халҡы бер-берәһе өҫтөнән ошаҡ йөрөтмәгән, шуғалыр ҙа беҙҙең тирәлә золом да артыҡ күп булмаған.

Сталиндың вафаты бөгөнгөләй хәтеремдә. Ул саҡта миңә туғыҙ йәш ине. Ғаиләбеҙ менән иртәнге сәй эсеп ултырғанда, колхоз идараһы һарайында ат ҡараусы Илһам ағай Алсынбаев килеп инде: «Әүбәкер ағай, Сталин үлгән!» Атайыбыҙ шунда уҡ яуап бирмәне, ахырҙа тынис тауыш менән һүҙгә килде: «Да-а-а... Донъяла күп нәмә атҡарҙы, бахыр. Уның да үлер көнө килгән икән...» Атай даһи кешенең үлеменә бер ниндәй хис-тойғоһоҙ «бахыр» тигәс, мин дә бик аптыраманым, аҙаҡ урамда, клубта, мәктәптә күҙ йәше сығарып илағандарҙы ҡыҙыҡһынып күҙәтеп йөрөнөм.

Сталиндың шәхесенә күптәр хәҙер ҙә битараф түгел. Уларҙың бер өлөшө уны бөйөк тип белә, икенселәр – ҡәһәрләй. Ғәмәлдә, һәр кемдең ыңғай һәм кире сифаттары булған кеүек, XX быуаттың тәүге яртыһындағы ҡатмарлы тарихи ваҡиғаларҙың ҡап уртаһында ҡайнап, унда төп ролдәрҙең береһен башҡарған Иосиф Сталин, бик ныҡ теләһә лә, бер яҡлы ғына дәүләт эшмәкәре була алмаҫ ине. Хатта полководецтарҙан Македонский менән Наполеон да күп кеше үлтереп «бөйөк» данын ҡаҙанған. Шуға күрә Сталин ҡайһы яҡлап бөйөк, ниндәй кимәлдә

енәйәтсе икәнлеген бөгөнгө сәйәси көрәш мәлендә ғәҙел билдәләү мөмкин түгел. Бәлки, йөҙәр йылдар үткәс кенә был эштең бер ни тиклем тормошҡа ашырылыуы ихтимал.

***

Уҙған быуаттың 80-се йылдары аҙағында Өфө ҡалаһының 21-се дауаханаһындағы ике кешелек палатала оло йәштәге ағай менән бергә ятырға тура килде. Фамилияһы Вольф ине, ә исеме иҫтә ҡалмаған. Донъяны күп күргән, төрлө күренештәргә айыҡ ҡараған, асыҡ хәтерле, матур һәм йөкмәткеле итеп һөйләй белеүсе кеше булып сыҡты. Германияла тыуып, 30-сы йылдарҙа Коммунистар партияһына инеп, Эрнст Тельман менән бергә фашизмға ҡаршы көрәшкән. Тельманды төрмәгә ултыртып, коммунистарға ҡаршы «һунар» башланғас, иптәштәре уны Мәскәүгә оҙата. Вольф «Ҡыҙыл профессура» академияһында бик шәп белем алып сыға. Һуғыштан алда Харьков, Киев ҡалаларында юғары партия органдарында эшләй.

Һуғыш башланған осорҙа ул Киев ҡалаһында, СССР-ҙағы иң ҙур хәрби заводтарҙың береһе «Арсенал»да партия комитеты секретары була. Бер көн Вольфтарҙың фатирына ике чекист килеп инә лә, өҫкө кейеменән башҡа бер ни алдырмай, «Һеҙҙе әңгәмәгә саҡыралар» тип алып сығып китә. Туп-тура тимер юл вокзалына килтереп, бер төркөм кешене тауар вагонына тейәп, ҡайҙалыр оҙаталар. Ҡайҙа алып барғандары ярты ай самаһы үткәс билдәле була: вагондан төшһәләр, алдарында Охот диңгеҙе йәйелеп ята. Шулай итеп, Вольф ун биш йылдан ашыу ғүмерен, 50-се йылдарҙың уртаһына тиклем, ҡот осҡос Колыма лагерҙарында һөргөндә үткәрә. Унан ишеткән мажараларҙы һөйләп килештерерлек түгел, быны өсөн ул тормошто үҙеңә кисереү кәрәктер.

Иң ғәжәбе: ағай мөкиббән сталинист булып сыҡты. Ул осорҙа нығ тарала башлаған сталинизмды фашлау күренештәрен асыуланып, кире ҡағып маташты. Мин: «Үҙегеҙ ҙә шул режимдан күп нужа күргәнһегеҙ түгелме?» – тигән һорауға: «Ул эштәргә Сталиндың бер ҡыҫылышы ла юҡ», – тип яуапланы.

***

Тарих ағышында халыҡтың һәм бөйөк шәхестәрҙең роле бер-береһенә нығ бәйләнгәнлеген хәҙер аңлайым. Әлбиттә, тарихты халыҡ тормошҡа ашыра, әммә быны өсөн халыҡты үҙ артынан эйәртергә, уны ойошторорға, хатта уны үҙенә буйһондорорға һәләтле бөйөк шәхес булыуы зарур. Уның халыҡтың ихтирамын ҡаҙанған батша, хан, генеральный секретарь, президент һ.б. дәрәжәле булыуы, дәрәжәһе вариҫлыҡҡа, дин ҡанундарына, һайлау системаһына, башҡа сараға бәйле булыуы ихтимал. Тарих ағышында халыҡ иң элек үҙенең матди мәнфәғәттәренән сығып эш итә: аҙыҡ-түлек, йорт-ҡура, кейем-һалым һ.б. кәрәк-яраҡ етештереп, балалар үҫтереп донъя көтә. Шул уҡ ваҡытта был йәмғәтселек үҙенең донъяға ҡарашынан, әхлаҡ нормаларынан сығып эш итә. Йәмғиәткә етәкселек итеүсе әхлаҡи традициялар араһында иң үҙәк, көслө, башҡа нормаларҙы ла үҙ эсенә алған хәҡиҡәт һәм ғәҙеллек тойғоларына таянырға бурыслы. Тап ошо нормалар һәр кешенең көндәлек тормошона, халыҡ массаларының эшмәкәрлегенә етәкселек итә, төрлө ихтилалдар, инҡилаптар, забастовкалар, демонстрациялар барлыҡҡа килеүгә сәбәп була.

Бөйөк шәхес халыҡтың матди мәнфәғәттәрен, донъяуи ҡараштарын, әхлаҡ нормаларын ҡәнәғәтләндереп, эшмәкәрлек итеүенең кимәленә, ысынбарлыҡҡа тап килеүенә ҡарап тарих хасил итә, үҙе лә тарихҡа инә йә унан төшөп ҡала.

Эшмәкәрлеген халыҡ мәнфәғәттәренә тура килтереп, хатта мөмкин булғандан арттырып үтәһә, дан ҡаҙана, халыҡ хәтеренә һеңә. Киреһенсә, үҙ байлығы, шәхси мәнфәғәттәре өсөн генә тырышһа, халыҡтың донъяуи ҡарашын, әхлаҡты инҡар итһә, тарих төпкөлөндә юғалып ҡала йә киләсәк быуындарҙың ҡарғышына дусар ителә.

Ғәҙеллек ҡанундарының тормошҡа ашмай, күп ваҡыт тапалып ҡалыуының төп сәбәбе – донъя йөҙөндә аҡса һәм аҡса капиталының хөкөм һөрөүенең көсәйә барыуында. Күп саҡта кеше туранан үҙ-ара аралашмай, аҡса йә банк карточкаһы аша бәйләнеш булдырып, үҙ-ара мөнәсәбәткә инә. Ә аҡса кешеләрҙе бер-береһенән айыра, ситләштерә, хатта дошманлаштыра, индивидуалистик күренештәрҙе көсәйтә. Кешеләр үҙҙәре түгел, ә банктарҙа, финанс учреждениеларында, һалым итеп йыйылған дәүләт ҡаҙналарында, олигархтарҙың байлыҡтары булып һаҡланған аҡса бөгөн бөтә донъялағы хәлдәргә идара итә. Яҡын кешеләр үҙ-ара мөнәсәбәттәрен аҡса аша ойоштороу системаһын еңеп, туранан-тура ойошторолған йәшәү рәүеше булдырмаһа, кешелек донъяһының киләсәге ҡараңғылыҡҡа сумыуы ихтимал.

## Тормош трамплины

Етенсе класты тамамлағас, атайымдың тәҡдиме менән Стәрлетамаҡ зоотехния һәм ветеринария техникумының ветеринария бүлегенә документтар тапшырҙым. Башҡортса уҡып, урыҫсаны насар белгәнгә, имтихандарға әҙерлек фәндәрҙең терминологияһын тәржемә итеп ятлауҙан ғына торҙо. Математиканан әҙерләгәндә, мәҫәлән, «ҡушыу – сложение», «алыу – вычитание», «ҡабатлау – умножение», «бүлеү – деление» тип ятлап йөрөргә тура килде. Башҡортса уҡыһам да, белем кимәленең юғарылығы шунда асыҡланды: күп формулаларҙы таҡтаны тултырып яҙып сыға инем. Предметтарҙы яҡшы үҙләштереүем күренгәндер – бөтә фәндәрҙән дә “дүртле“ ҡуйҙылар. Һуңынан урыҫ телен өйрәнеп алыу ҡыйын булманы, хатта аҙаҡ ул телдә күп кенә фәнни китаптар авторы булдым. Шуныһы мөһим икән: бала мәктәптә туған телендә уҡыһа, белемде ул еңелерәк һәм мулыраҡ үҙләштерә. Киреһенсә, аңлап еткермәгән урыҫ телендә уҡытыу уның белеменең дә ҡойтолоғона килтерә.

Саҡырыу ҡағыҙы килгәс, атай мине район үҙәгенә һөт ташыусы машинаға ултыртып ебәрергә килде. Кабинаға ултырыр алдынан мине туҡтатты ла: «Улым, һиңә зоотехния бүлегенә күсергә кәрәк, – тине. – Киләсәктә ойоштороусы булып, етәкселек эшендә йөрөргә мөмкин булыр». Был һүҙҙәрҙең асылына төшөнмәһәм дә, техникум директорына ғариза яҙып, ризалыҡ алыу өсөн ике аҙна буйы ҡабул итеү бүлмәһендә ултыра торғас, завуч Мария Ивановна Гончар ярҙамында зоотехния бүлегенә күсеүгә ирештем.

Һығымта: кешенең һөнәр һайлауында ата-әсә хәл иткес роль уйнай.

Техникумда уҡыу тормоштоң оло юлына сығыуымда ярайһы ҙур роль уйнаны. Тәүге көндәрҙә простыняны одеялдың өҫтөнән ябынып олораҡтарҙы көлдөргән үҫмер дүрт йылдан етәксе белгес булып уҡып сыҡты. Үҫмер саҡтан билдәле һөнәр алып, үҙенде тәғәйен хеҙмәткә арнау кешелә айырым менталитет булдыра. Мәктәп дәреслектәрен генә түгел, ә етди эшмәкәрлеккә тәғәйенләнгән фәндәрҙе өйрәнеү ҙә әһәмиәткә эйә.

Бер саҡ шулай Өфөнән Стәрлетамаҡҡа плацкарт купелы поезда ике матур ҡыҙ менән бергә барырға тура килде. Яңы һатып алған китапты мауығып уҡып килгәнгәмелер, ҡыҙҙар: «Ниндәй китап уҡыйһығыҙ?» – тип ҡыҙыҡһынды. Өндәшмәй генә китаптың тышҡы битен күрһәттем. Ҡыҙҙар, кәмит ҡарағандай,

көләп ебәрҙе, сөнки китаптың тышында «Крупный рогатый скот. Учебник» тип яҙылғайны. Техникумда йәмәғәт эштәрендә ҡатнашыу, үҙешмәкәр түңәрәктәргә йөрөү, тәжрибә хужалығында ғәмәли эшкә өйрәнеү, уңыш йыйыуҙа колхоз-совхоздарға ярҙам итеү кеүек тәжрибә тупларға мөмкинлек биргән эштәрҙә ҡатнашырға тура килә ине. Ҡаланың үҙендә спорт менән мауығыу, республика ҡалалары араһындағы коньки ярыштарында уҙышыу, ҡала беренселегенә шахмат турнирында уйнау форсаты тейҙе. Техникумда интернационалистик тәрбиә алдыҡ, милләттәр араһындағы айырма беҙҙең өсөн күҙ һәм сәс төҫтәрендәге айырма һымаҡ ҡына ҡабул ителә ине.

Шул йылдарҙағы бер нисә ваҡиға хәтерҙә ҡалған. Береһе 1961 йылдың яҙында булды. Стәрлетамаҡтың Ырымбур яғына һуҙылған Трактовая урамында техникумдың барак кеүек ятағында йәшәйбеҙ. Иртәнсәк ишек алдында зарядка эшләп йөрөһәм, ятаҡ коменданты тетя Лиза тупһаға йүгереп килеп сыҡты ла сая тауыш менән: «Человек в космосе! Наш человек!! Гагарин!!!» – тип һөрән һалды. Беҙ йүгереп инеп, радиоалғысты һырып алдыҡ. Унан һуң нисә йылдар үтте, ә 12 апрель һис онотолмай, һәм шул көндә кисерелгән рух күтәренкелеге башҡаса ҡабатланманы. Ул ваҡиғаның мөһимлеге йылдар үткән һайын тәрәнерәк аңлашыла барҙы.

Икенсе ваҡиға шул уҡ йылдың көҙөндә булды. Шишмә районының «Смычка» совхозында практика үтеп йөрөйөм. Шөнгәккүл ауылы урамынан китеп барғанда, совхоз идараһы башындағы радио, бөтә ауылды яңғыратып, Н. С. Хрущевтың КПСС-тың XXII съезында һөйләгән докладын тапшыра башланы. Туҡтап, оҙаҡ ҡына тыңлап торҙом. Никита Сергевичтың аҙаҡ «ҡанатлы» булып киткән һүҙҙәре яңғыраны: «Нынешнее поколение советских людей будет жить при коммунизме!», «К 1980 году каждая советская семья будет иметь отдельную квартиру!», «Наши цели ясны, задачи определены, за работу, товарищи!»

Башҡорт теле уҡытыусыһы Рауза апай Ильясова Хрущевты тыңлаған саҡта: «Бигерәк тә ҡуштан инде ошо кеше!» – тип көлә торғайны. Ә атайыбыҙ был шәхесте, колхозсыларҙы иҙелеүҙән, хоҡуҡһыҙлыҡтан ҡотҡарҙы, тип ихтирам итте, уның тураһындағы «Лицом к лицу с Америкой» тигән китапты оҙаҡ ҡына мендәре аҫтында тотоп, өйрәнеп йөрөнө. Күрәһең, скульптор Эрнст Неизвестныйҙың Мәскәүҙәге Новодевичье зыяратындағы ап-аҡ һәм ҡап-ҡара мәрмәр таштарҙы ике яҡлап ҡушып эшләгән Н. С. Хрущев һәйкәле уның тарихтағы ролен төрөҫ тасуирлайҙыр. Шулай ҙа, уның тарихтағы «аҡ» эшмәкәрлеге «ҡара»-ларынан күберәк булғандыр, тип уйлайым. Юлбашсының тантаналы телмәрен тыңлап, аҙаҡ, ышанырғамы-юҡмы, тип икеләнеп йөрөнөм. Мин икеләнгән хәлдәр аҙаҡ тормошҡа ашмай торғайны, мәҫәлән, Чубайстың приватизацияһына һәр саҡ икеләнеп ҡараным, һәм уның аҙағы хафалы булды. Коммунизм төҙөргә тырышҡан Советтар Союзы ла аҙаҡ тарҡалып ҡуйҙы. Рәсәй халҡының күбеһе һаман да фатирһыҙ интегә.

***

Техникумды тамамлап, бер аҙ колхозда зоотехник булып эшләгәндән һуң, йәш белгес тәжрибә йыйһын типмелер, армияға саҡлы күрше колхозыбыҙҙың бригадаһы булған, Мирхәйҙәр Фәйзиҙең тыуған ауылы Юлыҡта һөтсөлөк фермаһы мөдире итеп тәғәйенләнеләр. 19 йәшлек егет өсөн был юғары дәрәжәле вазифа ине. Шул осорҙа кешеләр менән аралашыу, эшкә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе хәл итеү, ҡайһы саҡ ауыр хәлдәрҙән сығыу дәрестәре үтелде. Ғәмәли шарттарҙа малсылыҡты фәнни юлдан үҫтереү ысулдарын эҙләп, селекция эшен, малдарҙы ашатыу рационын яйға һалыу буйынса тырышлыҡ күрһәтергә тура

килде. Был проблемалар тураһында ул ваҡыттағы ауыл хужалығы белгестәре уйлап та бирмәй ине әле. Ауыл хеҙмәтсәндәре асыҡ күңелле, эскерһеҙ, тура һүҙле, ифрат эшсән булыуҙары менән билдәле. Улар менән эшләүе бер үк ваҡытта еңел дә, ауыр ҙа ине.

60-сы йылдарҙа ауыл хужалығы ярайһы алға китте: техника күбәйҙе, колхозсылар автомашина, мотоцикл, йорт йыһаздары һатып ала башланы. Йомаш, Юлыҡ ауылдары Баймаҡ районында мөһим мәҙәни үҙәктәр һаналды. Колхоз үҙ көсө менән Йомашта районда иң ҙур мәҙәниәт һарайы, идара йорто, эре-эре малсылыҡ ҡуралары төҙөп ебәрҙе. Шул йылдарҙан башлап ауылдан оло шәхестәр, бер нисә фән докторы, тиҫтәләгән фән кандидаттары, яҙыусылар, шағирҙар, артистар, хеҙмәт батырҙары үҫеп сыҡты. Хәҙерге көндә шул йылдарҙа һәм унан һуңыраҡ тыуған ике йөҙләп Йомаш балалары Өфөлә айырым ауылдаштар яҡташлығы ойоштороп, ҡыҙыҡ һәм йөкмәткеле итеп йәшәй.

## Сынығыу мәктәбе

1963 йылдың сентябрендә мин армияға алындым. Бер ай Ырымбур өлкәһенең Тоцк хәрби лагерында әҙерлек үтеп, ант бирҙек. Әле партияға инмәгән булһам да, миңә «коммунист» тигән ҡушамат тағып өлгөрҙөләр. Эш шунда: бер көн беҙҙе сафҡа теҙеп, штаб начальнигы вазифаһын үтәүсе майор телмәр тотто: «Бөгөн кис һеҙ, автомат тотоп, хәрби объекттарҙы һаҡларға барасаҡһығыҙ. Кемдәр барасағын айырым әйтербеҙ. Урыҫ булмағандар унда бармаясаҡ». Мин шул уҡ кисте СССР Оборона министрлығына «Майор Фәләнов (фамилияһын хәтерләмәйем, Карпенко ине шикелле) милләттәрҙе бүлеп ҡарай, беҙ иһә, милләтебеҙҙе айырмай, Тыуған илебеҙгә хеҙмәт итергә теләйбеҙ» һ.б. тигән йөкмәткеле хат яҙып ебәрҙем. Бер нисә көндән теге майор ҡайҙалыр оҙатылды, ә миңә ҡушамат йәбеште, сөнки башҡа төрлө ғәҙеллек өсөн дә, әйтәйек, «ҡарт»тарға май һәм шәкәрҙе өҫтәмә бүлеүгә ҡаршы көрәшеп йөрөнөм. Хәҙер, бәлки, мин ундай хат яҙып, ғәҙеллек өсөн көрәшеп йөрөмәҫ инем, ул саҡтағы тәртибемә йәшлек максимализмы йоғонто яһағандар.

Бер айҙан һуң беҙҙе, йәш һалдаттарҙы, плацкарт вагондарға тейәп, көнбайышҡа алып киттеләр. Украинаның Львов ҡалаһын үтеп, Венгрия сигендә урынлашҡан Ужгород ҡалаһына килеп төштөк. Артабан Венгрияла хеҙмәт итәсәкбеҙ икән. Миңә Совет Армияһының Будапешт ҡалаһында торған Көньяҡ ғәскәр төркөмө штабы янындағы юл-комендант ротаһында хеҙмәт итергә тура килде. Рота штабтың, ракета частарының һәм башҡа хәрби берләшмәләрҙең Венгрия буйлап хәрби уҡыуҙар үткәргәндә хәрәкәтен тәьмин итә ине. Өс йылдан ашыу хеҙмәт осоронда ҙур булмаған илде күп тапҡырҙар бер сигенән икенсеһенә тиклем гиҙергә, төрлө урындарҙа регулировщик булып торорға тура килде. Ярты йылда мадъяр телен өйрәнеп, комсомол секретары итеп һайланғас, Будапештта урындағы халыҡ, йәштәр ойошмалары менән аралашыуҙар ойоштороу форсатына ла ирештем. Халыҡтың күпселеге беҙгә бик яҡшы мөнәсәбәттә икәне, һирәкләп ризаһыҙлыҡ белдереү осраҡтары ла күренә ине.

Шундай бер мажараны үҙемә лә кисерергә тура килде. Һуғыштан һуңғы Венгрия бик ярлы, сәнәғәт тармаҡтары үҫешмәгән, көнкүреш тауарҙарына ҡытлыҡ кисергән ил ине. Тыуған илгә отпускыға ҡайтһалар, һалдаттарыбыҙ транзистор радио, магнитофон, электр бритваһы, фотоаппарат кеүек тауарҙар алып килә лә, урындағы халыҡҡа һатып, аҙмы-күпме аҡса эшләй торғайны. Шулай бер учение алдынан унда ҡатнашмай, часта ҡалырға тейешле хеҙмәттәшем Николай Перетрухин отпускынан алып килгән электр бритваһын минән берәй ерҙә һатып ебәреүҙе һораны. Балатон күленән алыҫ түгел ауыл янында ялда торғанда,

мин бритваны оло йәштәге бер ағайға тәҡдим иттем. Ул: «Әйҙә, бритваң менән ҡырынып ҡарайыҡ», – тип яҡындағы йортона алып килде лә, мине верандала мәжлес ҡороп ултырған өс егет янында ҡалдырып, өйөнә инеп китте. Егеттәр миңә тәүҙә шикләнеберәк ҡарап ултырҙылар ҙа яйлап ҡына һүҙ ҡуштылар: йәнәһе, «нишләп йөрөйһөң?», «нимә һатаһың?», «спекуляция менән шөғөлләнәһеңме?» һ.б. Береһе, ҡыҙып китеп, урынынан торҙо ла, яурынымдағы автоматҡа, билдәге штык-бысаҡҡа төртөп күрһәтеп: “Һин, советский оккупант!! Коммунист!!! Мине атырға уйлайһыңмы?! Сәнсергә теләйһеңме?!” – тип ҡысҡыра башланы. Мин ҡаушап артҡа сигендем дә телгә килдем: “Юҡ, егеттәр, мин коммунист түгел, мин башҡорт. Әгәр атырға бойороҡ булһа ла, һеҙгә түгел, һауаға атасаҡмын!” Бер аҙ тын торғандан һуң егеттәр бөтәһе бер юлы тауыш күтәрҙе: “Ә-ә-ә! Башҡортмо? Башҡортостанданмы? Беҙҙең ата-бабалар еренәнме?” Мине ҡосаҡлап өҫтәл артына ултырттылар ҙа һыйларға тотоноп киттеләр. Хеҙмәттә булғас, градуслы эсемлектәрҙән баш тартып, тәмле емеш-еләктәр, милли ашамлыҡтар менән һыйланғандан һуң, бритва өсөн аҡсаны алып, яңы дуҫтар менән ҡосаҡлашып хушлаштым.

Күптән түгел, 1956 йылда ғына, Венгрияла булып үткән ихтилалдан һуң беҙҙең һалдаттар төрлө хәүефле, хатта үлемесле мажараларға йыш осраны. Әлеге осраҡта мине башҡорт булыуым һәм мадъяр телендә аралаша алыуым ғына шундай бәхетһеҙлектән ҡотҡарҙы булһа кәрәк.

***

Беҙ хеҙмәт иткән осорҙа Совет Армияһы – ир-егеттәр өсөн оло тормош, тәнде һәм рухты сыныҡтырыу мәктәбе, ирмен тигән кеше мотлаҡ үтергә тейешле һынау ине. Артабанғы тормошомда ул мәктәптең ярҙамы ҙур булды. Сит илдә, Европаның иң матур ҡалаһы Будапештта хеҙмәт итеү үҙе ни тора! Спорт менән етди шөғөлләнеү ҙә армияла башланды. «Военное троеборье» тигән спорт төрөндә (автоматта атыу, граната ташлау, ҡаршылыҡтар аша йүгереү) һәм шахматта беренсе разрядлы булғас, Көньяҡ ғәскәр төркөмө беренселегенә төрлө ярыштарҙа призлы урындар алыу бәхетенә ирештем.

КПСС ағзаһы булып китеү ҙә күптәр, бигерәк тә офицерҙар өсөн хыял иткән оло маҡсат була торғайны. Яҡшы хеҙмәт иткән һалдаттарҙы ла һайлап алып, партияға ҡабул итәләр ине. Беҙҙең частан хәрби һәм сәйәси әҙерлек отличниктары тип ике кешене – мине һәм Силәбе өлкәһе Троицк ҡалаһынан Володя Барцевты 1965 йылда партияға алдылар. Партия ул заманда – бик етди, күп осорҙа кеше яҙмышын ҡырҡа үҙгәртеп ебәрә торған ойошма. Хәтерләйем, бер отчет-һайлау йыйылышында Володя менән һалдаттарға тупаҫлыҡ күрһәткән партком секретары капитан А. Некрасовҡа ҡаршы сығыш яһап, уны етәкселектән төшөрөп, икенсе кешене һайлауға ирештек.

1964 йылда Америка Ҡушма Штаттары Вьетнамға баҫып инде. Беҙҙең илдә быға ҡаршы көслө пропаганда ойоштоnecessary ойошторолоп, митингылар, йыйылыштар үтте. Беҙ хеҙмәт иткән хәрби ҡаласыҡта бер нисә хәрби частың ҡатнашлығында ҙур митинг үткәрелде. Миңә лә һүҙ бирҙеләр. Америка империалистарын фашлап, уларға ҡаршы добровoлецтар йәлеп итеүләме-юҡмы икәнен белмәһәм дә, һүҙемде: «Считаю, что нужно объявить набор добровольцев для борьбы против американских агрессоров и прошу записать меня добровольцем № 1 от нашей части!» – тип тамамланым. Аҙаҡ ирекле яҙылғандарҙың исемлеген уҡынылар. Унда «Доброволец №1 – младший сержант Х.Барлыбаев, №2 – командир части полковник В.Михайлов, № 3 – замполит майор В.Виноградов» тип яҙылғайны.

# Рух мәккәһе

1966 йылдың ноябрендә армиянан ҡайтышлай Мәскәүҙә туҡтап, МДУ-ла уҡыған ауылдашым Мәжит Мәхмүтовта ҡунаҡ булғандан һуң, киләһе йыл мотлаҡ ошо университетҡа уҡырға инергә ниәтләнеп, тыуған ауылыма ҡайттым. Ноябрь аҙағында Баймаҡ районы беренселегенә шахматта ярышып, район чемпионы исемен алдым. Яуланған приз – ҙур суйын айыуҙы әле лә үҙем менән йөрөтәм. Шул уҡ көндәрҙә шашка буйынса үткән район беренселегендә ҡустым Ғәлим, һеңлем Сәкинә менән бер төркөмдә «Һаҡмар» колхозы өсөн уйнап, күп кенә хужалыҡтарҙың командаларын еңеп, район чемпионы исемен алдыҡ.

КПСС-тың Баймаҡ район комитетынан пропагандистарҙың республика семинарында ҡатнашып, «Һаҡмар» колхозынан Башҡортостан ауыл хужалығы институтының иҡтисад факультетына уҡырға инеү имтихандары биреп йөрөнөм. Институтҡа Стәрлетамаҡ зооветтехникумын тамамлаған дипломды тапшырып, уҡырға ҡабул ителһәм дә, Мәскәү дәүләт университетына уҡырға инеү теләге тынғыһыҙлап торҙо. Шул уҡ йылдың май-июнендә Баймаҡ районы мәғариф бүлегенән урта мәктәпте тамамлау тураһында таныҡлыҡ алыу өсөн экстерн имтихандар бирергә рөхсәт алып, Беренсе Этҡол мәктәбендә уларҙы уңышлы тапшырғас, өлгөргәнлек аттестаты алдым да июль аҙағында Мәскәүгә юл тоттом. Ҡабул итеү имтихандарын уңышлы биреүем шунан билдәле булды: ҡабул итеү комиссияһы рәйесе А. Протопоповҡа инеп, ауылға ҡайтып атай-әсәйгә бесән сабышырға кәрәк ине, уҡырға инеү мәсъәләһе нисек хәл ителәсәк, тип белештем. Ул имтихан һөҙөмтәләрен ҡараны ла: «Халиль, езжай косить сено, считай, что ты уже принят на учебу. У тебя, стажника, столько же баллов, сколько у школьников», – тип тынысландырҙы. Ул осорҙа абитуриенттарҙы «стажлы»арға һәм мәктәпте яңы тамамлағандарға бүлеп, уҡырға инеү өсөн имтихандарҙа айырым кимәлдә балдар йыйырға кәрәк ине.

***

VI класта биологияны өйрәнә башлағас, тәбиғәттә органик матдәләр әйләнеше барыуын анланым. Милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың ҡаһарманлыҡтарына хайран ҡалып йөрөгән ваҡытта: «Ҡасандыр йәшәгән Салауаттың берике генә булһа ла молекулаһы миңә лә килеп эләгеүе мөмкин бит әле», – тигән уйға килеп, бер ни тиклем ғәжәпләнеп йөрөнөм.

МДУ-ның иҡтисад факультетында уҡый башлағас, бер саҡ төнгө 12-нән һуңға ҡалып, метрола киләм. Вагонда минән башҡа бер кем дә юҡ. Бер станцияла урта буйлы, ҡаҡса кәүҙәле, һары сәсле бер егет килеп инде лә, ҡаршыма урынлашып, миңә теклəп ҡарай башланы. Уға яуап рәүешендә үҙем дә текләй башлағас, егет һүҙгә килеп: «Һеҙ башҡортмо?» – тигән һорау бирҙе. 10 миллионлы Мәскәүҙә минең ниндәй милләт кешеһе булыуымды анлаған егет, бәлки, күрәҙәселер, тип уйлап: «Эйе, ә ҡайҙан белдегеҙ?» – тип яуаплайым. Уның: «Һеҙ Салауат Юлаевҡа оҡшағанһығыҙ», – тигәне мине һуштан яҙҙырғандай булды. Уның хикәйәһенән шул асыҡланды. Мәскәү университетының тарих факультеты студенты, поляк егете Яцек Салауат Юлаев ихтилалы тураһында курс эше әҙерләп йөрөй икән. Батша режимы менән оҙаҡ көрәшеп йәшәгән поляктар башҡорт ихтилалдары менән ныҡ ҡыҙыҡһына. Яцек: «Күҙ алдыма килтереүемсә, Салауат Юлаев нәҡ һеҙгә оҡшаған булырға тейеш ине, шуға мин, һеҙҙе күргәс тә, ҡайһы милләттән икәнегеҙҙе асыҡлаған кеүек булдым», – тигәс, түбәм күккә тейгәндәй булды. Аҙаҡ Яцек менән аралашып йөрөнөк.

***

Мәскәү дәүләт университеты – үҙе бер айырым мөхит. Унда белем алмағандар өсөн ул – билдәһеҙ, ә уҡып сыҡҡандар өсөн Ер шарының башҡа бер өлөшөндә лә осрамаған үҙенсәлекле урын булып күҙ алдына баҫа. Йылдар буйы урамға сыҡмай көн итергә мөмкин булған йәшәү, туҡланыу, һаулыҡ һаҡлау, почта, телеграф, хатта кейем-һалым ремонтлау урындары, мәҙәниәт һарайы, кино залы, музейы һәм башҡа уңайлыҡтары үҙендә булған ер ул. Бында уҡырға заман йәштәренең иң юғары интеллектлы вәкилдәре йыйыла, һәм был айырым рухи һәм интеллектуаль мөхит тыуҙыра. Әлбиттә, быға донъяла иң алдынғы рәттә барған профессура һәм уҡытыусыларҙың айырым роле лә өҫтәлә.

1967 йылда ошо университеттың иҡтисад факультетына уҡырға инеп, бер нисә көн үткәс, беренсе курс студенттары араһында шау-шыу башланды. Ҡырҡлап студентты «Сит илдәр иҡтисады» кафедраһында уҡытыу төркөмөнә һайлап алалар икән. Курстың яртыһы тиерлек, һөрләгөшөп, шул кафедраға эләгергә тырышып ғариза яҙҙы. Ул ваҡытта сит илгә сығып әйләнеү, бигерәк тә эшләп йөрөү айға осоуға тиң ине. Башҡаларҙан ҡалышмайым тип, мин дә ғариза бирҙем. Бер нисә көн үтеп, һөҙөмтә билдәле булғас, күптәр хайран ҡалды: СССР һәм Мәскәү түрәләренең балаларынан торған исемлектә провинциянан килгән колхозсы улы, урыҫ булмаған мин дә бар инем. Аҙаҡ мин быға шундай аңлатма бирҙем: шул исемлекте интернациональ итеп күрһәтеү өсөн мине лә өҫтәгәндәрҙер, моғайын. Һәр хәлдә төркөмдән бер үҙем биш йыл шулар араһында уҡып сыҡтым.

Уҡыу, әлбиттә, еңел булманы. Һиндостан иҡтисадын өйрәнеүсе төркөмгә тәғәйенләнгәс, бер юлы ике тел – инглиз һәм һинд телдәрен өйрәнергә тура килде. Һиндостанға командировкаға барып ҡайтҡас, диплом яҙҙым. Аҙаҡ аспирантураға тәҡдим ителеп, ошо уҡ ил иҡтисадында дәүләт идараһы темаһына кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланым.

***

Үткән быуаттың 60 – 70-се йылдарында Мәскәүҙә уҡыған студенттар, аспиранттар яҡташтар ойошмаһы төҙөп, төрлө мәҙәни саралар уҙғарып, Мәскәү янындағы тәбиғәт төбәктәренә һабантуйҙарға сығып йөрөй торғайныҡ. Мин бер нисә йыл яҡташтар ойошмаһы рәйесе итеп һайландым. 1971 йылдың йәйге бер шәмбе көнөндә 40-50-ләп йәштәр Мәскәүҙән алыҫ түгел Десна йылғаһы буйында һыу инеп, футбол һәм башҡа төрлө уйындар уйнап, төндә усаҡ янында күңел асып, иртәгәһен кискә табан ғына ҡайтырға сыҡтыҡ. Автобус туҡталышына саҡлы урман аша 4-5 саҡрым юл үтергә кәрәк. Дөйә каруаны һымаҡ һуҙылып, вайымһыҙ ғына йырлай-һөйләшә ҡайтып киләбеҙ. Юлдың яртыһын үткәс, мажараға осраныҡ. Иң һылыу ҡыҙыбыҙ Светлана һәм уның әхирәте (исемен хәтерләмәйем) хәрби частан «самоволка»ға сығып, «төшөрөп» алған ефрейтор һәм һалдат менән әңгәмә ҡороп ебәргәндәр. Оҙаҡ та үтмәй, тегеләр беҙҙең ҡыҙҙарҙы урманға һөйрәргә тотонған. Хәбәр миңә килеп еткәс, йүгереп барып, иҫеректәр менән һөйләшкән ҡыҙҙарҙы шелтәләп, һалдаттарға: «Ефрейтор и рядовой! Слушай команду старшего сержанта: шагом марш в свою часть!» – тип бойорҙом да, ҡыҙҙарҙы көскә ҡурсалап алып, үҙемә эйәрттем. Ҡалған юлда мин артҡа әйләнеп ҡарай-ҡарай, иптәштәремде шәберәк атларға өгөтләһәм дә, йәштәрҙе тыңлата алманым, улар әүәлгесә һуҙылып килә бирҙе. Автобус туҡталышы булған ауылға инеп килгәндә, артыбыҙҙан, йылҡы өйөрө сапҡандай тубырлашып, 20-25-ләп һалдат ҡыуып етте лә уратып алды. Беҙ биш егет: мин, Рәшит Шәкүр, Рафаэль Агишев, Рәфис исемле боксер егет, бишенсебеҙ кем икәне

хәтерҙән сыҡҡан – яҡындағы ҡоймаларҙан таҡта һурып алып, һуғышырға әҙерләндек. Минең арттан ҡыуып килгән һалдат бил ҡайышының бляшкаһы менән һуғып, битемде ҡанатты. Ҡулыма эләккән ҡорал – метр ярым йыуанлыҡ тимер торба менән һелтәнеп, һалдаттарҙың үҙҙәрен ҡыуғылай башлағайным, улар күмәкләп тиҙ генә мине уратып алды. Шулай, өйөрөлөп һелтәнә-һелтәнә, ҡәтғи, шул уҡ ваҡытта өгөт-нәсихәтле итеп ара-тирә: «Ребята, не подходи, плохо будет!» – тип екеренәм. Шәкүр, алпамыша кеүек ғәйрәтләнеп, йүгерекләп йөрөп, үҙенән бәләкәйерәк һалдаттарҙы йыға һуға ла ара-тирә көслө тауыш менән: “На помощь! На помощь!!!” – тип һөрәнләй. Тәбәнәгерәк, тулы, әммә етеҙ кәүҙәле Рафаэль Агишев, ҡулына күҫәк тотоп, яҡынлаған һалдаттарҙы киҙәнеп-төрткөләп ҡыуа. Рәфис тә, юғары бокс техникаһы ҡулланып, һөжүм итеүселәрҙе кире ҡағып йөрөй. Һуғышырға ынтылған, әммә күҙлеге осоп китеп, шуны эҙләп ваҡыт уҙғарған Фәүкәт Ҡыҙрасов менән Миҙхәт Мәмбәтов ҡыҙҙарҙы бер урынға йыйнап, ҡарауыллап йөрөгән. Урал Ураҡсин, дипломат булараҡ, һалдаттар менән һөйләшеп килешергә маташҡан.

Һалдаттар мине аманатҡа алырға маташып 15-20 минут тирәһе айҡашып йөрөгәндән һуң, ҡапыл бөтәһе бер юлы кире йүгерҙе. Ни өсөн икәнен, төрлө фараздар ҡороп ҡараһаҡ та, аңлай алманым. Артыҡ еңеү тантанаһы кисермәһәк тә, оло эште уңышлы атҡарған кешеләр һымаҡ, йыйылышып автобус туҡталышына йүнәлдек. Фекер туплау һәм асылыбыҙға ҡайтыу автобусҡа инеп ултырғас ҡына башланды. Битемдәге яраны һөртә-һөртә, ғәфү үтенеп, Светлана башын минең күкрәккә һалды ла илап ебәрҙе. Автобустағы халыҡты ла, беҙҙе лә хайран ҡалдырып, Фәйзрахман Ярышев иҫ китмәле тауыш менән яңғыратып йырлап ебәрҙе: «Вы слыхали, как поют дрозды?.. Певчие избранники России…» Рәшит Шәкүр уйсан ҡиәфәт менән миңә өндәште: “Хәлил, һиңә рәхмәт! Һин булмаһаң, хурлыҡҡа ҡала инек...” Форсаты булһа, ул миңә орден уҡ булмаһа ла, берәй миҙал биреп ҡуйыр ине. Ышанмаһағыҙ, Шәкүрҙең үҙенән һорағыҙ, ул алдаша белмәй.

Хәҙер шул саҡтағы дуҫтар менән осрашҡанда көлөшөп алабыҙ: «Хәтерләйһегеҙме, беҙ нисек Мәскәү янында Совет Армияһы менән һуғыштыҡ?!»

## Халҡыбыҙҙың рухи төйәгендә

1976 йылдың февралендә Мәскәүҙән баш ҡалабыҙ Өфөгә ҡайтып, Башҡорт дәүләт университетының политик экономия кафедраһында иҡтисад фәндәре кандидаты вазифаһында яңы тормошомдо башланым. Шул кафедрала 15 йыл – марксизм-ленинизм политик экономияһын, 10 йылдан ашыу дөйөм иҡтисад теорияһын уҡыттым. Студенттарым араһында башҡорт теле һәм урыҫ теле, тарих, иҡтисад, хоҡуҡ факультеттарында белем алыусылар булды. Араларында ғорурланып телгә алырҙай күренеклеләре Марат Әбүзәров, Йомабикә Ильясова (Аҡъюлова), Гөлсирә Ғайсарова (Ғиззәтуллина), Риф Әхмәҙиев, Миңлеғәле Нәҙерғолов, Гүзәл Ғәлиева, Рәйсә Күзбәкова, Фәнил Сафин, Булат Йомаҙилов, Фәрит Бикбулатов, Айҙар Ғәлимов һ. б. күптәр булды.

Элекке студенттарымдың ҡайһы берҙәренең донъянан ваҡытһыҙ киткәненә ҡайғырам. Улар араһында иң ҡәҙерлеләрҙең береһе – Марат Әбүзәров. Бик зирәк аҡыллы, яғымлы һәм кешелекле егет ине. Тәүҙә «Ленинсы» гәзитендә мөхәррир булып, эшенә мөкиббән бирелеп эшләне. Мин уға: «Ҡустым, кандидатлыҡ диссертацияһы яҙырға кәрәк һиңә», – тиһәм дә, «Ағай, ваҡыт юҡ, көн һайын бер гәзит сығарһам – шул миңә диссертация», – тип яуаплар булды. Аҙаҡ БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай аппаратында уңышлы эшләне. Уның тормоштан иртә китеүе беҙҙең өсөн ҙур юғалтыу булды.

Минеңсә ул саҡтағы политик экономия фәне бөгөнгө дөйөм иҡтисад теорияһына ҡарағанда төплөрәк белем бирҙе, сөнки ул фәндең нигеҙендә К. Маркстың «Капитал»ы булды, ә ижтимағи фәндәр донъяһында уға тиң хеҙмәт әлегә тиклем яҙылмаған. Шуға күрә «Капитал»ды яҡшы белгән кеше фәнде иң тәрән һәм методологик яҡтан эҙмә-эҙлекле өйрәнә һәм үҙләштерә ала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө иҡтисад теорияһы ундай сифаттарға эйә түгел, тырым-тырағай, эклектик рәүештә, эҙмә-эҙлекһеҙ ғәмәлгә индерелгән баҙар иҡтисадының ҡанундарын өйрәнеүгә генә ҡоролған. Уларҙы ла белеү кәрәк, тик ундай белем һайыраҡ, тарҡауыраҡ була һәм иҡтисад ысынбарлығының иң тәрән ҡанундарын аса алмай.

***

Совет осоронда илебеҙ менән Германия Демократик Республикаһындағы төрлө ойошмалар, уҡыу йорттары, ижад коллективтары һ. б. араһында үҙ-ара аралашыу традицияһы йәшәне. Башҡорт дәүләт университеты Галле ҡалаһындағы университет менән бәйләнеш тотто. 1987 йылдың сентябрендә БДУ-нан өс доцент: мин, тарихсы Рим Йәнғужин, юрист Лариса Самсонова, шул программаға ярашлы, ГДР-ға сәфәр сыҡтыҡ. Мин марксизм-ленинизм кафедраһында лекциялар, семинарҙар үткәреп, «түңәрәк өҫтәл»дәрҙә ҡатнашып йөрөнөм. Ул ваҡытта был ил Европала социализм өлгөһө булғанға, ундағы халыҡ бик яҡшы көн итте. Кафедра мөдире Йозеф Бернард беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырып, ҡатыны менән икәүләп кенә йәшәгән биш бүлмәле фатирын күрһәтеп, мине хайран ҡалдырҙы. Киске аш ваҡытында, төрлө ризыҡтар тураһында һүҙ сығып, Йозеф шуны еткерҙе: «Мин бик күп илдәрҙә булып, ниндәй генә аҙыҡ тәмләп ҡараманым: Кубала – тәлмәрйендән, Африкала – сиңерткәнән, Вьетнамда – селәүсендән, Ҡытайҙа төрлө диңгеҙ йәнлектәренән ауыҙ иттем. Әммә ғүмеремдә татыған иң тәмлеһе – Башҡортостандағы Ҡандракүл буйында ашаған бишбармаҡ һәм уның һурпаһы булды».

Мин велосипедта Галле ҡалаһының бөтә мөйөштәрен гиҙеп сыҡтым. Иң ныҡ ғәжәпләндергәне шул булды: һуғыштан һуң 40 йылдан ашыу ваҡыт уҙһа ла, ҡаланың ҙур ғына бер кварталы инглиз хәрби авиацияһы тарафынан бомбаға тотолоп, стеналары һерәйеп ҡалған емерек йорттарҙан тора ине. Ҡала аша аҡҡан Заале йылғаһының утрауында ял итеү урыны табып алып, саунаға Рим Зәйниевичты саҡырҙым. Ул тәүҙә, немецтар сөннәтле кешеләрҙе яратмай, беҙгә унда барыуы хәүефле, тип баш тартҡайны. Аҙаҡ, көлә-шаяра әйткән ныҡышмалы өгөт-нәсихәтемә күнеп, ризалашты. Немецтар беҙгә әйләнеп тә ҡараманы.

Командировканың аҙағына табан Лариса Семеновна, Башҡортостанды һағындым, тип ныҡ зарланды. Бигерәк тә көндөҙгө сәғәт бер яҡынлай башлаһа, республика радиоһы көн һайын тапшырған ярты сәғәтлек башҡортса концертты тыңлағыһы килә ине уның.

БДУ-ла эшләү миңә һәр саҡ оло ҡәнәғәтләнеү, күңел күтәренкелеге килтерҙе. Бигерәк тә ул замандағы ректорыбыҙ Рәғиб Ғимаев менән эшләүе үҙе ҙур кинәнес ине. Бөтә яҡлап та иҫ китмәле изге кеше! Уның янында хатта һөйләшеп ултырыу ҙа күңелдә ләззәт хистәре уята. Мин университеттың проректоры вазифаһын үтәгән 1995 – 1999 йылдар ярайһы ҡатмарлы булды. Федераль органдар баҫымы аҫтында юғары белем алыу системаһына үҙгәрештәр индереү, уны коммерция нигеҙҙәренә күсереү башланды. Иҡтисад буйынса проректор эшен башҡарғанға күрә, ул үҙгәрештәргә ҡаршы булһам да, теште ҡыҫып, күрһәтмәләрҙе бойомға ашырырға мәжбүр булдым. Иң элек айырым коммерция нигеҙендә

ҡабул итеү бүлеген ойошторҙоҡ. Университетта уҡырға теләүселәрҙең мәнфәғәте ҡыйырһытылмаһын өсөн, уның эшен тырышып яйға һалырға тура килде.

***

Үҙгәртеп ҡороуҙың һуңғы 1989 йылы республикабыҙҙың мөстәҡиллеге өсөн көрәштең иң көсөргәнешле йылдарынан булды. Унан һуңғы ике-өс йыл эсендәге үҙгәрештәр 1917 йылдан һуңғы Рәсәйҙәге түңкәрелештәргә тиң, тип әйтергә мөмкин. КПСС-тың монополияһы бөтә барып, халыҡтың активлығы һәм азатлығы көнләп түгел, сәғәтләп көсәйә башлағайны. Коммунистар партияһы ҡаты ауырыуҙан үлергә йыйынған йәнлек кеүек ҡалтыраныу кисерә ине. Башҡортостанда күп йылдар уңышлы эшләгән күренекле дәүләт эшмәкәре, КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары М. Шакиров М. Горбачев тарафынан мәсхәрәле алып ташланып, уның урынын биләгән Р. Хәбибуллин, өс йыл да эшләй алмай, отставкаға китергә мәжбүр булды. Унан һуң, был ойошманың башында кем булһа ла ярай, тигән һымаҡ, ул вазифаны И. Горбуновҡа тапшырҙылар. Беҙ, башҡорт милли хәрәкәте активистары, КПСС Үҙәк Комитетынан бер-бер артлы килгән эмиссарҙар, партияның урындағы түрәләре менән осрашыуҙарҙа, Башҡортостанға союздаш республика статусы кәрәк, тигән талаптар ҡуя башланыҡ. Мин ошо саҡта Мөрәжәғәт яҙып, 1989 йылдың яҙ көндәрендә Мәскәүгә килеп, СССР-ҙың Юғары Советы сессияһы эшендә ҡатнашҡан Әбйәлил районы вәкиле Мәүҙиғә апай Ғәбитова менән йөрөп, Башҡортостандың 11 депутатынан Мөрәжәғәткә ҡул ҡуйҙырҙыҡ. Сессия барышында депутатыбыҙ Юрий Шәрипов документты сессия ултырышын алып барыусы М. Горбачевҡа тотторҙо. Мөрәжәғәт республика гәзиттәрендә лә баҫылып сыҡты, шул осорҙа төҙөлгән Союз Килешеүе буйынса Башҡортостан менән Татарстан союздаш республикалар тип танылырға тейеш ине. 1990 йылдың 11 октябрендә ҡабул ителгән Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларацияла ла Башҡорт АССР-ы Башҡорт ССР-ы тип иғлан ителде һәм СССР тарҡалғанға тиклем шул исем менән йөрөтөлдө.

1989 йылдың йәй һәм көҙөндә беҙ көн һайын тигәндәй «Нефтсе» мәҙәниәт һарайында, Яҙыусылар союзында, Матбуғат йортоноң ултырыш залында, БДУ-ла һ.б. урындарҙа йыйылып, фекер алышып, ойоштороу эштәре алып барҙыҡ. Һөҙөмтәлә «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге барлыҡҡа килде. Хәтерләйем, үҙәккә «Урал» атамаһын биреү тураһында беҙ Р. Шәкүр менән Октябрь проспекты буйлап ҡайтып килгәндә һөйләшеп килештек, һәм был тәҡдим ноябрҙә үткән ойоштороу конференцияһында ҡабул ителде. Конференция «Нефтсе» мәҙәниәт һарайының ҙур залында шығрым тулы халыҡ ҡатнашлығында үтте. Алдан һөйләшеү буйынса, сәйәси докладты Р. Шәкүр, иҡтисад проблемалары буйынса мин яһаным. Сығышым «Башҡортостан» гәзитендә лә баҫылып сыҡты. Декабрҙә Башҡорт ССР-ы Министрҙар Советы Рәйесе М. Мирғәзәмов мине саҡырып: «Бына, Һеҙ республиканың иҡтисады ниндәй булырға тейеш, тигән доклад яһағанһығыҙ, – тип гәзиткә төртөп күрһәтте лә, – шул идеяларығыҙҙы тормошҡа ашырырға, Министрҙар Советында иҡтисад бүлеге булдырып, шуға етәкселек итергә тәҡдим итәм», – тине. Шулай итеп, миңә республиканың мөстәҡиллеге өсөн көрәште, халыҡ хәрәкәтенән күсеп, рәсми органдарҙа эшләү юлы менән алып барыу форсаты эләкте.

*(Аҙағы бар).*

# КИТАПҠА БАҒЫШЛАНҒАН ҒҮМЕР

1977 йылдың 19 сентябрендә Мәрйәм Йыһангироваға бүләк иткән «Яҡты таңдар» исемле китабында шағир Яҡуп Ҡолмой уны «Һин бер беҙгә тыуған ерҙең...» тип атаған. Һөйләйәсәк һүҙем башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының иң аҫыл сифаттарын туплаған, Башҡортостан китапханасылары араһында беренселәрҙән булып Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән ошо шәхес тураһында. Уның менән бала саҡтан таныш булһам да, 1974 йылдан яҡындан аралаштыҡ. Матур кеше Мәрйәм апай! Ихлас. Көләкәс. Иҫ киткес сабыр холоҡло, инсафлы, егәрле, кеше йәнле. Теремек, өлгөрмәгән ере юҡ! Туғандар араһында кемдең проблемаһы бар – уға бара торғайны. Мәрйәм апай һәр кемеһенә ярҙам итергә тырышты, һис тә булмаһа, һүҙ ярҙамы күрһәтте. Матур ҡартайҙы ла. Үҙенең тормошо ауыр булһа ла кеше хәлен еңеләйтергә тырыша торғайны. Тормошон гел изгелеккә арнаны, эшен үлеп китеп яратты, үҙ-үҙен бер ваҡытта ла аяманы. Сәбәбе булһа ла, зарланманы, яҙмышым ауыр, тип кемделер һүгеп, ғәйепләп ултырманы. Ғүмеренең һуңғы биш-алты йылын апай, ауырып, түшәктә үткәрҙе. Кеше көнлө булып, һыҙланып ултырыуҙарҙы ирҙәрсә кисерҙе, быға оптимистлығы ярҙам иткәндер, тим. Телевизор ҡарап, радио тыңлап, гәзит-журналдарҙан бөгөнгө хәлдәрҙе уҡып, ишетеп барҙы, рухи ҡиммәттәрҙе аҡса, байлыҡ артынан ҡыуыу алмаштырыуына ифрат борсола торғайны.

Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы китапҡа мәңге тоғролоҡ һаҡланы, уны балаһылай яратты, ҡәҙерләне. Уның кеүек китап һөйгән, ҡәҙерләгән башҡа кешене белмәйем, өйө тулы китап ине! «Әгәр кеше үҙен ысын интеллигент һанай икән, өйөндә китаптары булырға тейеш! – тигәнен хәтерҙән сығармайым. – Китапһыҙ өй – йәнһеҙ өй ул! Һин миңә ниндәй китап уҡыуыңды әйт, мин һинең ниндәй кеше икәнлегеңде әйтәм, тигән мәҡәл бик дөрөҫ ул, туғаным! Мәғлүмәтле, тәрбиәле кеше менән һөйләшеүе лә күңелле!» М. Йыһангированың мәғлүмәтлелеге, юғары мәҙәниәт – барыһы ла китаптан ине. «Китап – иң яҡшы уҡытыусы, иң яҡшы тәрбиәсе ул, унһыҙ йәшәү мөмкин түгел. Китап уҡығыҙ, яратығыҙ, унан айырылмағыҙ!» – тигән һүҙҙәре әле лә ҡолаҡта сыңлап торғандай. Башҡаларҙы китап уҡырға өйрәтеүсе етәксе булараҡ, яңы китап баҫылып сығыу менән, иң башта үҙе уҡып сыға торғайны. Әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙы үҙ йөрәге аша үткәргәндән һуң ғына китап уҡыусылар конференцияһы уҙғарыу хаҡында һүҙ йөрөтә ине. Халыҡты яңы китап менән таныштырыуҙы ул үҙенең бурысы һананы, уның китапхана эшмәкәрлеген әүҙемләштереүгә булышлыҡ итеүен бик яҡшы аңланы. Шунлыҡтан башҡорт һәм урыҫ әҙәбиәте буйынса күргәҙмәләр, яҙыусылар, шағирҙар менән осрашыуҙар ойоштороуға ҙур әһәмиәт бирҙе.

***

Шуныһы ла мәғлүм булһын: Мәрйәм апай менән беҙ өс туғандарбыҙ. Тик үҙ туғаның хаҡында яҙыуы икеләтә ауыр, сөнки үҙеңдә икеләтә яуаплылыҡ




тояһың. Ике йыл элек – еңгәмде, бер йылдан – әсәйемде, ә инде тағы ла ярты йылдан Мәрйәм апайҙы бер-бер артлы юғалтыуҙар яралы күңелдәге уйҙар йомғағын алыҫтарға алып китә...

Ғәтифә инәй менән Хисмәтулла бабай Ҡолмөхәмәтовтар һәр йәй тыуған яҡтарына – Ишембай районының Ҡанаҡай ауылына ҡунаҡҡа ҡайта торғайны. Улар балаларын ошондағы туғандары менән аралашырға, тамырҙарын онотмаҫҡа өйрәтте. Бер ҡайтыуҙарында Хәйрулла Ҡолмөхәмәтовтың (атайым Мотиғулла Фәтҡулла улы менән Мәрйәм апайҙың олаталары) Бәкән йылғаһы буйындағы баҡсаһына табынға йыйылдылар. Уларҙың ҡайтыуына Ҡанаҡайҙағы барлыҡ туғандар, ауылдаштар шатланды. Табынға «Коммунизм» колхозының рәйесе, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары кавалеры Минлегәрәй Хәсәнов та килгәйне. Ғәҙәттә, Хисмәтулла бабайҙың ауылға ҡайтып төшөүе була, ауылдаштар уны һырып та ала, сөнки барыһының да күрешкеһе, һөйләшкеһе килә. Хәйрулла бабай ауыл уртаһынан аҡҡан көмөш һыулы Бәкән буйындағы баҡсаһына ейәнсәрҙәре ҡайтҡан һайын һәр береһенә атап ағас ултырта торғайны, улар бөгөн дә ауылды йәмләп, урман кеүек үҫеп ултыра. Шуға халыҡ был баҡсаға «Хәйрулла баҡсаһы» тигән исем ҡушҡан да инде. Әйткәндәй, Хәйрулла Ҡолмөхәмәтов – Ишембай районында беренселәрҙән булып «Иң яҡшы һунарсы» миҙалы менән бүләкләнгән кеше. Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов һәм Яҡуп Ҡолмой Хәйрулла олатайҙың иң яратҡан улдары булды. Уҡымышлылыҡтары, уйлап һөйләй белеү, аралашыу мәҙәниәттәре сифаттарына эйә булған уландары менән ҡарт бик ғорурлана торғайны, хәйер, улар менән райондаштар ҙа ғорурлана! Хәйрулла бабайымдың бар балалары ла уҡымышлы, эшсән, ғәҙел һәм кеше араһында абруйлы булды.

Мин башланғыс класта уҡый инем әле, «Өфөнән Яҡуп Ҡолмой ҡайтҡан» тигән хәбәр таралды. Уның менән ағаһы Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов та ҡайтҡан, имеш. Минең дә уларҙы бик-бик күргем, тауыштарын ишеткем килде. Яҡуп Ҡолмойҙоң – шағир, ә Хисмәтулла бабайҙың журналист икәнлеген ишетеп белә инем.

Кисен көтөү ҡайтып, әсәйҙәр һыйыр һауып, ғаиләне туйындырғас, башҡалар рәтендә мин дә, тере шағир менән журналисты күрәм тип, клубҡа киттем. Клуб алды мыжғып тора, әллә күпме халыҡ йыйылған! Ололар Яҡуп Ҡолмой менән Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтовты һырып алған, күрешәләр, көлөшәләр. Кисә башланғас, бала-сағаның, ҡайһылары эскә үтеп, иҙәнгә теҙелешеп ултырыштыҡ, икенселәре тәҙрә төбөнә ҡунаҡланы. Ҡарға балалары кеүек, ауыҙҙарыбыҙҙы асып, ололарҙы тыңлайбыҙ. Яҡуп Ҡолмойға һүҙ биргәс, ул ҡулдарын болғап, илһамланып шиғырҙарын уҡыны, «Ҡапҡаңды ас, атай!» тигән шиғырын әле лә хәтерләйем, ә Хисмәтулла бабай ауылдаштарына ил-йорт хәлдәрен аңлатты, һорауҙарға яуап бирҙе. Тик күбеһе аңлашылмағандыр инде: нимә һөйләгәндәре хәтерҙә ҡалмаған.

Клубта, ғәҙәттәгесә, алғы урындарҙы ҡунаҡтарға ҡалдыралар, был юлы ла шулай булды: алғы рәттә Хисмәтулла бабайҙың ҡыҙҙары ултыра ине. Мин иһә уның ғаиләлә иң өлкәне, иң сибәр ҡыҙы Мәрйәм апайҙан күҙемде алмайым. Уның оҙон ҡара толомдары, муйылдай күҙҙәре, оҙон керпектәре, һөйкөмлөлөгө, еңел, ыҡсым кәүҙәһе, бәләкәй генә ҡулдарына ҡарап, ябай кеше түгелдер был, фәрештәлер, тип уйлайым. Кеше шул тиклем дә матур, һөйкөмлө булыр икән! Теге саҡта баҡсалағы табында ултырғанда ул бала-сағаға лампасый тараҡҡайны. Унан лампасый алғанда бәләкәй генә, матур ҡулдарына, оҙон керпекле ҡара күҙҙәренә ҡарап телһеҙ ҡалғайным.

– Исемең кем? – тип һорай алсаҡлап Мәрйәм апай. – Беҙҙекеләрме әллә? – Яуап ҡайтара алмай тик торам. Ике туған Нәзирә апайым ярҙамға килде:

– Үҙебеҙҙекеләр, Мотиғулла абзыйҙың ҡыҙы Миләүшә лә инде!

– Ҙур үҫ йәме, аҡыллым! – Мәрйәм апай арҡамдан һөйгәс, бер ҡарыш үҫеп киткәндәй булдым! Телемде саҡ ҡыбырлатып, «ярай» тип әйттем шикелле... Ипләп кенә күҙем Мәрйәм апайҙың бәләкәй генә аяҡтарындағы матур туфлийҙарына төшә. Апай хур ҡыҙы кеүек тойола, их, үҫкәс уның кеүек күстәнәстәр менән ҡайтһам ине ауылға, тип хыялланам. Ауылда ҡала ҡунаҡтарын туғандары өйҙән-өйгә йөрөтөп ҡунаҡ итәләр. Ҡаланыҡылар иһә ихлас ҡунаҡ була, туғандары менән күрешә. Уларға барыһы ла танһыҡ шул! Йылына бер ҡайтҡас ни! Ғәтифә инәй Мәрйәм апай, Хисмәтулла бабайҙар беҙгә күрше генә йәшәгән Бибисара инәйҙәргә, килгәнендә, ата-әсәйем менән күрешеп, сәй эсеп сыҡтылар.

Мәрйәм апай менән икенсе осрашыуыбыҙ студент сағымда, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡығанда, булды.

«Ағас тамыры менән көслө», – ти халыҡ. Ҡайһы ғына халыҡты алма, һәр нәҫел-ырыу аҡыллы, белемле шәхестәре менән көслө. Борон-борондан башҡаларҙан яуаплылығы, намыҫлылығы, тырышлығы менән айырылып торған бер баш кешеһе була. Боронғо замандарҙа уларҙы башлыҡ, бей, аҡһаҡал тип йөрөткәндәр. Улар ырыуҙаштарына, нәҫелдәштәренә йәшәү өлгөһө, башҡаларға төплө кәңәштәре менән ярҙам итеүсе булған, ырыу хәлдәрен дә даими күҙ уңында тотҡан, бер ваҡиғаны ла күҙ уңынан ысҡындырмаған. Ҡолмөхәмәтов – Баймөхәмәтовтарҙың нәҫел-ырыуында, йәғни «көртләктәр»ҙә был бурысты үткән быуатта Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов үтәһә, ул яҡты донъяны ҡуйғас, был бурысты ҡустыһы шағир Яҡуп Ҡолмой, унан һуң ҡыҙы Мәрйәм, ул үлгәндән һуң, был матур традицияны Яҡуп Ҡолмойҙоң уландары Булат менән Марат Ҡолмөхәмәтовтар дауам итә... Әйткәндәй, «көртләк» ҡушаматының ниңә ҡушылғанын да аңлатып китәйем. Көртләк – ҡор кеүек, урман тауығының бер төрө, иртә тороу менән ҡорҡолдап аҙыҡ эҙләй, сепсенә башлай, тырыш, матур ҡош, уның ошо сифаты өсөн беҙҙең ырыуҙы «көртләк» тип атағандар ҙа инде. Ҡанаҡайҙа ҡуяндар,

айыуҙар, турғайҙар, тумыртҡалар, ҡырғыҙҙар һәм башҡа аралар бар, быһың өсөн берәү ҙә үпкәләмәй, сөнки был исемдәр бик борондан килә. Ауыл зыяратында ла көртлөктәрҙең үҙ урыны бар, әүәлдән килгән йола һаман да һаҡлана: һәр ырыуҙың үҙ урыны һәм уны берәү ҙә боҙмай.

Кинйәбикә инәй менән Хәйрулла бабай Ҡолмөхәмәтовтарҙың һигеҙ балалан торған ишле ғаиләһендә олатайым Фәтҡулла, Хисмәтулла, Хәйбулла, Хөрмәбикә, Мәрфуға, Яҡуп була, һәм, инәй үлгәндән һуң, Сәйҙә исемле икенсе ҡатынынан Раиил менән Хөсәйен исемле тағы ла ике малай тыуа. 1897 йылда тыуған Фәтҡулла олатайым Беренсе донъя, Граждандар һәм Икенсе донъя һуғыштарында ҡатнашып, 1944 йылда Днепрҙы кискәндә батырҙарса һәләк була. Үҙенең белем ала алмауына әсенеп, ҡустылары Хәйбулла менән Мәрйәмдең атаһы Хисмәтулланы Стәрлетамаҡтағы «Иҫке таш» һәм «Бейек таш» мәҙрәсәләренә уҡырға урынлаштыра. Ҡустыларын матди яҡтан тәьмин итеүҙе ул тулыһынса үҙ елкәһенә ала. Хәйбулла – 1902, Хисмәтулла – 1905 йылғы, Октябрь инҡилабын улар Ҡанаҡай ауылынан сыҡҡан тәүге белемле кешеләр булып ҡаршылай. Совет власы еңгәс, белемгә һыуһаған халыҡ өсөн төрлө курстар асыла: Хисмәтулла менән Хәйбулла Ҡолмөхәмәтовтарҙы өйәҙ советында етәкселек итеү буйынса курстарға уҡырға ебәрәләр. Уны тамамлағас, Хәйбулла Ҡолмөхәмәтов Әхмәр ауыл Советының тәүге рәйесе була. 1939 йылдың 5 ноябрендә кулактар ҡулынан үлтерелгәс, ағаһы урынына Хисмәтулла баҫа. Эшен һөйөп, тырышып башҡара, ауылдаштарын уҡытыу, балаларҙы уҡыуға өйрәтеү, колхоз эшен ойоштороу, мәктәптә уҡытыусы эшен яҡшыртыу буйынса күп тырышлыҡ күрһәтә, ауылдаштарының уңыштары хаҡында «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитенә хәбәрҙәр яҙа. Колхозлашыу йылдарында ул Маҡар (хәҙер Ишембай) районының иң әүҙем хәбәрсеһе булып танылa. Журналислыҡ һәләттәре, йәмәғәт эштәренең башында тороуы һәм оҫта ойоштороусы булараҡ билдәлелек яулауы арҡаһында, уны Маҡар районында гәзит редакцияһын ойоштороу өсөн саҡыртып алалар. Күп тә үтмәй, ВКП (б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты Х. Ҡолмөхәмәтовты район гәзитенең мөхәррире итеп тәғәйенләй. Гәзиттә район игенселәре, уҡыу, мәктәп тормошо, мәҙәниәт яңылыҡтары, агитаторҙар эшмәкәрлеге, эскеселәргә, ялҡауҙарға ҡаршы көрәш, уңған ауыл эшсәндәре хаҡында мәҡәләләр урын алған. Бер номерында Маҡар районынан сыҡҡан билдәле шәхестәр: Ғәлимйән Ҡарамышев, Таңһылыу Рәшитова тураһында материалдар, Маҡар урта мәктәбе уҡытыусыһы Йәғәфәр Ғәлиевтың сатирик мәҡәләләре, Сәйет Макарский тигән шағирҙың шиғырҙары баҫылғайны.

1930 йылда Х. Ҡолмөхәмәтовты Комвузға гәзит хеҙмәткәрҙәре әҙерләү бүлегенә уҡырға ебәрәләр. 1935 йылда оло яҙыусы, шәхес культы ҡорбаны Төхвәт Йәнәби (Калимуллин) тәҡдиме буйынса ВКП(б) өлкә комитеты Хисмәтулла Хәйрулла улын «Ҡыҙыл Башҡортостан» (хәҙерге «Башҡортостан») гәзитенә эшкә күсереү тураһында ҡарар ҡабул итә. Бында ул ауыл хужалығы һәм сәнәғәт бүлеге мөдире булып эшләй. Тура һүҙлелеге, намыҫлылығы, белемле һәм принциптары менән айырылып тора яңы мөдир. Шакир Насиров, Баязит Бикбай менән бер бүлмәлә ултырып эшләй, ғаиләләре менән дә аралаша. Ярҙамсыл, сабыр холоҡло журналисты барыһы ла ихтирам итә, кәңәшләшә. Х. Ҡолмөхәмәтов ауырлыҡтарҙан ҡурҡмай, Башҡортостандың иң төпкөл райондарына сығып, мәҡәләләр яҙа. Бер ижади командировкала йөрөп ҡайтҡас, ул аслыҡтан интеккән балалар тураһында мәҡәлә яҙып, бер данаһын Мәскәүгә ебәрә. Ул хат яуыз уйлы әҙәмдәр ҡулына эләгеп, 1937 йылда журналисты ҡулға алалар. Ул алыҫ Воркутаға шахтаға ебәрелгәс, Ҡолмөхәмәтовтар ырыуы өсөн «ҡара көндәр» башлана, уҫал ел шағир Я.Ҡолмойға ла ҡағыла. Көн дә тиерлек уны именлек

органдарына саҡыртып, ағаһынан баш тартыуын талап итәләр. Был хаҡта шағирҙың «Ғүмер һуҡмағы» тигән иҫтәлектәрендә ошолай яҙыла: «...Хәҙер күргән бер кеше минән ситләшә, мин уларға ниндәйҙер ҡурҡыныс ҡараҫҡылай күренәм һымаҡ. Үткән һәр бер көн йүнле хәбәр алып килмәй. Аппаратта эш бирмәйҙәр. Ғәйепһеҙгә ғәйепле булып, башынды эй инде?.. Аптырғас, именлек комитетына киттем. Ҡабул иттеләр. Ниҙә ғәйепләнә ағайым? Ниңә беҙ белмәнек? Ләкин мине борсоған бер һорауға ла йүнле яуап бирмәнеләр. Киреһенсә, халыҡ дошманы булған ағайымдан баш тартыуымды талап иттеләр. Ләкин мин был кәмселеккә барманым. Бик күндерә алмағас, идараға хужа булған оло шағирҙың бер туған ағаһынан баш тартыуы хаҡында яҙған белдереүен күрһәттеләр. Мин аптырауҙан телһеҙ ҡалдым. «Әгәр беҙҙең талапты үтәмәһәң, – тиҙәр былар, – һиңә матбуғатта ла, әҙәбиәттә лә урын булмаясаҡ!» Был ҡурҡытыу минең ихтыярҙы еңә алманы, әлбиттә, миндә ҡылыслы ир һәм коммунист намыҫы көслө ине шул. Ә именлек чиновниктары һүҙҙәрендә торҙолар. Иртәгәһенә үк эштән ҡыуҙылар, «Китап» нәшриәтендә нәшергә төшөрөлгән «Беҙҙең ҡала егете» исемле поэмамды кире ҡайтарҙылар. Миңә хәҙер, ҡайҙа эш эҙләп барһам да, ишекябыҡ ине. Әммә мин шиғыр яҙыуҙан туҡтаманым. Аслы-туҡлы көндәремдә лә шиғри илһам менән туҡландым кеүек. Ике яурынымды ауырлыҡтар баҫҡанда, баш осомда ҡояш балҡыр, тип өмөтләндем. Тик ул бик оҙаҡ, ун йылдан артыҡ балҡыманы. Бер ғәйепһеҙгә биш йылдан артыҡ ҡараңғы шахтала күмер соҡоп, ярым инвалид булып аҡланып ҡайтҡан ағайым да миңә тыныс йәшәү яҙын бүләк итә алманы. Эҙәрләүҙәр, ғәйепләүҙәр дауам итте, хатта «әҙәбиәттән ситләште, китаптары баҫылмай» тип Союз ағзалығынан сығарырға маташтылар. Һуғыш тамамланыу алдынан сыҡҡан китабымдан һуң үткән тиҫтәнән ашыу йыл миңә нәшриәт ишеге бикле булды. Яҙмаған ғаризам, һөйләшмәгән кешем ҡалманы, шиғырҙарымды ике-өс тапҡыр поэзия секцияһында ла тикшерҙеләр, ләкин бөтәһе лә бушты-бушҡа ауҙарыу ғына булып ҡалды. Бөйөк Ватан һуғышында Мәскәү өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа ҡатнашҡан, 1942 йылда «Аҙым», 1944 йылда «Фронтовик уйҙары» тигән китаптар үҙенән башҡа донъя күргән шағирҙың, ниһайәт, илленсе йылдар ахырында ҙур булмаған «Берҙәмлек» тигән китабым донъя күрҙе. Элек баҫылған өс китабым да минһеҙ донъя күргәйне, был йыйынтығымды инде ғүмеремдә тәү тапҡыр үҙем ҡулыма алдым. Күҙҙәремдән йәштәр сыҡмаһа ла, йөрәгемдә нәни бала шатлығы урғый ине! Тик был ҡыуанысым да оҙаҡҡа барманы, гәзиттә китабымды тәнҡитләп, ҙур ғына мәҡәлә сыҡҡан, исмаһам, күнелде баҫырлыҡ бер генә ыңғай һөйләм дә юҡ...»

Бәлки, Яҡуп Ҡолмой үҙе лә шәхес культы ҡорбаны булыр ине, уны шағир Рәшит Камал ҡотҡара. Юллыҡ аҡса биреп, дуҫын Татарстанға оҙата, унан һуң инде шағир Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә, артабан Бөйөк Ватан һуғышы башлана... Һуғышҡа тиклем үк танылыу яулаған шағир Яҡуп Ҡолмойҙы һуғыштан һуң да бер ҡайҙа ла эшкә алмайҙар, егерме йылға яҡын шиғырҙары, үҙе хаҡында ла бер нәмә лә баҫылмай. Шул сәбәпле, башҡорт әҙәбиәтендә нәшер ителгән әҙәбитәнҡит йыйынтыҡтарында Я. Ҡолмой ижады хаҡында бөтөнләй һүҙ юҡ. Ләкин ҡыйырһытылған мәлдәрендә лә шағир ижад итеүҙән туҡталмай: ғүмеренең иң аяныслы мәлдәрендә лә яҙышыуын дауам итә, урам һепереп, тимер юлында вагон бушатып булһа ла ғаиләһен ҡарай, өмөт йәшәтә уны. Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов аҡланғандан һуң Я.Ҡолмойға Ғәйнан Әмири, Ғилемдар Рамазанов, Марат Минһажетдинов терәк була, 80-се йылдарҙа бер төркөм әҙәбиәтселәр һәм яҙыусылар Мирас Иҙелбаев, Нур Зарипов,Ноғман Мусин, Абдулхаҡ Игебаевтар кәмһетелгән фронтовик-шағир ижады хаҡында яҙып, Яҡуп Ҡолмойҙоң яраларын бөтәштерергә тырыша. Ә бит шағирҙы Башҡортостаныбыҙҙың гимны булырлыҡ «Тыуған илем», үҙәк өҙгөс моңло «Былбылым» йырҙары өсөн генә лә күтәреп йөрөтөрлөк!

Сталин үлгәндән һуң ғына аҡланған Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов, Өфөгә ҡайтҡас, намыҫын һатмаған ҡустыһы Я. Ҡолмойға рәхмәтен белдерә. Үкенескә ҡаршы, Х. Ҡолмөхәмәтов шахтала һаулығын юғалтып, умыртҡа туберкулезы эләктереп ҡайта. Шул көйөнсә лә ул үҙен илде дошмандарҙан һаҡларлыҡ батыр итеп тоя: һуғышҡа ебәреүҙәрен үтенеп, Сталин исеменә ғариза артынан ғариза яҙа. Үтенесе ҡәнәғәтләндерелә: Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов Бәләбәй ҡалаһында ойошторолған алты айлыҡ политруктар курсында уҡый, унан «Алға, дошманға ут ас!»тигән көндәлек гәзиттә хәрби хәбәрсе һәм тәржемәсе булып эшләй. Бер йылға яҡын ут һыҙығында татар яҙыусылары Шәйхи Маннур, Афзал Шамов, М. Мәсғүттәр менән бергә иңгә-иң терәшеп ижад итә, ләкин шахтала алған ауырыуы йонсота. Төрлөсә дауаланып та шәбәйә алмағас, яугир-журналисты 1943 йылда, икенсе группа инвалидлығы танытмаһы биреп, ҡайтарып ебәрәләр. Башҡортостанға ҡайтҡас, Хисмәтулланы эшкә «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһына саҡырып алалар. Был баҫмала ул хаҡлы ялға сыҡҡансы сәнәғәт һәм транспорт бүлеген етәкләй, сәләмәтлеге борсомағанда, ижад менән дә шөғөлләнә. Һуғышта күргән-кисергәндәре, Советтар Союзы Геройҙары хаҡында очерктар, портреттар яҙа. Улар араһында «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1946 йылғы 27 ғинуарында донъя күргән, ике тапҡыр Алтын Йондоҙ кавалеры, ҡаһарман осоусы Муса Гәрәев хаҡындағыһы, моғайын да, иң сағыуылыр. Х.Ҡолмөхәмәтовтың Башҡортостандың Советтар Союзы Геройҙары хаҡында йылы итеп яҙылған очерктары «Башҡортостан батырҙары» исемле китапта ла урын алған. Улар араһында Башҡорт атлы дивизияһының сержанты Ғәбит Әхмәров, артиллерист Ғимай Шәйәхмәтов, капитан Ғәли Бирҙин, һалдат Григорий Пулькин, фашист пуляһынан һәләк булған талантлы журналист Мәжит Буранғолов, Мөтиҡ Мәхмүтов, Мостафа Садиҡов, яҙыусы Низам Ҡәрипов тураһындағылары ла бар.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов ғаиләһе һәм туғандары өсөн генә түгел, барлыҡ Ишембай районы кешеләре – ауылдаштары өсөн дә терәк булып йәшәй. Ҡанаҡайға йыш ҡайта, яҡташтары менән бәйләнеште өҙмәй. Өфөгә эшкә килгән фатирһыҙҙар уның ярҙамында баш ҡалала фатирлы була. Оло ауылдаштың ярҙамы кешене кеше итеүгә йүнәлтелгән булғанлыҡтан, барыһы ла быны анлай һәм тап төшөрмәҫкә тырыша. Үҙҙәре аслы-туҡлы ғүмер иткән ғаиләлә яҡташтар һыйыныр урын, яҡты йөҙ, йылы һүҙ, анлау таба, Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтовтарҙың Цюрупа урамындағы ағас өйөнән кеше өҙөлмәй. Кем килһә лә, Ғәтифә инәй бәлеш-ҡоймаҡтары менән йылмайып ҡаршы алды.

1980 йылдың 21 мартында Х.Ҡолмөхәмәтов яҡты донъя менән хушлашҡас, барыбыҙҙың да ҡояшыбыҙ һүнгән кеүек булды. Ул көндө Мәрйәм апай командировкала ине, шулай ҙа ҡайтып өлгөрҙө. Атаһының Совет Армияһы сафындағы ейәне Рәмилде көтөп йән бирмәй ятҡанын ул яҡшы анлай ине. Рәмил ҡайтып күрешкәс, телдән ҡалған Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов, Хоҙайҙың ҡөҙрәте менән, йыйылған туғандарына, ҡыҙҙарына, айырыуса иң оло ҡыҙы Мәрйәмгә: «Бер-берегеҙҙе ташламағыҙ, ярҙамлашығыҙ, туғандар менән аралашығыҙ, татыу ғүмер итегеҙ!» – тигән васыятын еткерә. Әйткәндәй, Мәрйәм Йыһангирова атаһының васыятын ғүмер буйына тотто: барыһына ла ҡулынан килгәнсә ярҙам итте. Хәҙер инде ағаһы урынына ҡалған Яҡуп Ҡолмой өсөн уның менән мәңгелеккә хушлашыуы айырыуса ауыр ине: ул ҡасандыр үҙен һыйындырған ағаһы рухына арнап «Яралы һалдат» тигән шиғыр яҙҙы:

*Һалдат ауҙы яуҙа алъан яраһынан.*
*Ҡаны аҡты пуля үткән аяъынан.*

*Күҙен йомдо – ҡотолдо сир ғазабынан,*
*Айырылды ҡырҡ йыл тотҡан таяғынан...*
*Ауҙы һалдат үҙе тыуып үҫкән ергә,*
*Енеү яулап ҡайтҡайны ул Тыуған илгә.*
*Ауыр аҡһап, һыҙланһа ла хәлһеҙ көйгә,*
*Йәшәне ул ғашиҡ булып тыуған ергә.*

***

... Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов әле ауыл Советы рәйесе булып эшләгәндә үк Ҡанаҡайҙың иң сибәр ҡыҙы Ғәтифәгә өйләнеп, тормош ҡора. Береһенән-береһе сибәр, унған биш ҡыҙ: Мәрйәм, Гөлсөм, Нурия, Рәйсә, Рәмзиәләре тыуа.

Уларҙың ғаиләһе бер урында – Өфөнөң Цюрупа урамындағы 63-сө йортта ғүмер кисерә. Аталары ҡулға алынғандан һуң, күрше-тирә Ҡолмөхәмәтовтар менән аралашмай, һүҙ ҡушмай, ярҙамлашмай, барыһы ла яҡлауһыҙ ғаиләне рәнйетергә тырыша. Ҡайҙа ғына барһалар ҙа, ҡыҙҙарҙы «халыҡ дошманы балаһы» тип әрләп, битәрләп ҡалалар. Хатта төкөрөп, таш бәреп ҡалыусылар ҙа була, элек аралашҡан кешеләр йөҙҙәрен йәшереп, ситкә ҡарап уҙа.Ҡыҙҙарҙы мәктәптә лә рәнйетеп кенә торалар, минут һайын «халыҡ дошманы балаһы» икәнлектәрен иҫтәренә төшөрәләр, башҡаларға мөмкин булған әйберҙәр уларға ярамай. Ә кейәүгә сығыр ваҡыты еткәс, егеттәр ҙә ҡаса, элек инәлеп йөрөгәндәренең дә эҙе һыуына. «Яныма килергә ҡурҡа торғайнылар, – тип һөйләгәйне ул аяуһыҙ йылдар тураһында һүҙ сыҡҡанда Мәрйәм апай, – элек ғашиҡ булып йөрөгән егеттәр баш тартты. 1954 йылда мин, «халыҡ дошманы балаһы» булыуыма ҡарамаҫтан, Зәки Йыһангировҡа кейәүгә сыҡтым». Зәки Йыһангиров – геолог, ғүмер буйы Көнбайыш геология экспедицияһында эшләй, ләкин иртә вафат була. Ҡыҙҙары Наилә 1955 йылда донъяға килә. Мәктәпте тамамлағас, ул да атаһы юлынан китә. Х. Ҡолмөхәмәтов һуғышҡа алынғас, атайһыҙ, яҡлаусыһыҙ ҡалған биш ҡыҙға айырыуса ҡыйынға тура килә. 1942 йылда 14 йәшлек Мәрйәм 680-се Өфө заводына пресслаусы булып эшкә урынлаша һәм 1947 йылдың сентябренә тиклем эшләй. Баш балаға таяҡтың мул башы төшә, ләкин был йылдар уның өсөн ысын тормош мәктәбе, ныҡлыҡ өсөн һынау йылдары була.

Бер саҡ Мәрйәмгә лә ҡояш йылмая: атаһының бер дуҫы уға Стәрлетамаҡта яңы ғына асылған культура-ағартыу училищеһына уҡырға барырға тәҡдим итә. Тырыш ҡыҙ имтихандарын яҡшы билдәләренә генә тапшырып, уҡырға инә. Училищены тамамлағас, артабан да уҡыуын килә, үксәһенә баҫып үҫеп килеүсе һеңлеләренә ярҙам итергә лә кәрәк бит әле?! Стәрлеләге культура-ағартыу училищеһында һеңлеһе Гөлсөм дә белем ала. Артабан кейемһеҙ, аслы-туҡлы көйөнә икәүләп Ленинградҡа юл тоталар, һәм Гөлсөм – Н.К.Крупская исемендәге Ленинград дәүләт мәҙәниәт институтына, ә Мәрйәм профсоюздар Юғары мәктәбенең китапханалар менән эшләү факультетының ситтән тороп уҡыу бүлегенә документтарын тапшыра. Ҡолмөхәмәтоваларҙың ҡалғандары ла тырыша: Нурия – Губкин исемендәге Мәскәү дәүләт нефть институтын, Рәйсә менән Рәмзиә С. Орджоникидзе исемендәге Өфө авиация университетын тамамлай. Мәрйәм менән Гөлсөм, уҡыуҙы тамамлағандан һуң, ең һыҙғанып культура-ағартыу өлкәһендә эш башлай. Гөлсөм, апай хаҡлы ялға сыҡҡансы – Башҡорт дәүләт университеты китапханаһында, ә Мәрйәм апай 1956 йылдан башлап Өфө Мәғариф хеҙмәткәрҙәре өлкә йорто китапханаһы директоры булып эшләй, әҙәбиәтте, шиғриәтте, китаптар донъяһын яратҡан кеше буларак, өлкән Ҡолмөхәмәтова башкөллөй китапханалар эшен ойоштороу эшенә сума, һеңлеләренә лә ярҙамлаша.

***

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Өфөлә йәмғеһе ике ҙур китапхана була: береһе – ғилми китапхана, икенсеһе мәғариф хеҙмәткәре китапханаһы тип йөрөтөлә. 50-се йылдар башында улар бергә ҡушылып, Коммунистик һәм Ленин урамдары ҡушылған ерҙә Мәғариф хеҙмәткәрҙәре өлкә йорто барлыҡҡа килә. 1921 йылда асылған был китапханала 1927 йылда уҡ 13 226 дана китап иҫәпләнә. М. Йыһангирова ошо китапханаға 30 йыл ғүмерен бағышлай. Ул эш башлағанда был китапхана башҡаларҙан бер яғы менән дә айырылмаған: китаптар ҙа, уҡыусылар ҙа аҙ, коллективта ни бары дүрт кеше! Мәрйәм апайыбыҙ эшен һөйөп башҡара, эшкә ҡыуанып бара. Ленинград мәктәбен үткән белгес өлкә китапханаһын республикала алдынғылар рәтенә сығарыу, китаптарҙы арттырыу, уҡыусылар йәлеп итеү өсөн көндө төнгә ялғап эшләй. Эшенә баш ҡаланың юғары уҡыу йорттары уҡытыусыларын һәм студенттарҙы, вуз профессорҙарын, фән кандидаттарын, республиканың билдәле фән һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәрен йәлеп итә. 35 кешенән торған китапхана советы ойоштороп, улар аша китап уҡыусылар менән бәйләнеш булдырғас, китапхананың эше байтаҡҡа алға китә. Китапхана хеҙмәткәрҙәренә китаптар хаҡында уҡыусылар фекерен хуплау, китап уҡыусылар конференциялары ойоштороу ҙа еңеләшә. Тырышлығы бушҡа китмәй: 1969 йылда Мәғариф йорто китапханаһы республика профсоюздары китапханалары араһында «Иң яҡшы китапхана» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була. Утыҙ йыл бер коллективта эшләү дәүерендә Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы «Һәр китап үҙ уҡыусыһын табырға тейеш!» тигән девиз аҫтында халыҡ араһында ҙур эштәр башҡара, быны өсөн ул ваҡытын да, һаулығын да йәлләмәй, етәксе булараҡ үҙенең баш ҡала тормошонда ғына түгел, ә республика кимәлендә ҙур мәҙәни-ағартыу эше алып барғанын яҡшы аңлай.

М. Йыһангирова республиканың алыҫ ҡалалары һәм китапҡа мохтаж төпкөл ауылдары халҡы өсөн дә тырыша: улар өсөн 120 күсмә китапхана асып, улар 3 меңдән ашыу кешене хеҙмәтләндерә. Төрлө методик әсбаптар, фотомонтаж, китап күргәҙмәләре булған күсмә китапханалар ауыл хеҙмәткәрҙәрен китапҡа яҡынайтыуҙа баһалап бөткөһөҙ роль уйнай, улар айырыуса ситтән тороп уҡыусы студенттарға, ауыл уҡытыусыларына ярҙам итә. Төпкөл ауылдарҙа ла киң күләм уҡыусылар өсөн күңелле һәм файҙалы тематик кисәләр, китап конференциялары, яҙыусылар, сәнғәт, мәҙәниәт һәм дәүләт эшмәкәрҙәре менән осрашыуҙар уҙғарыла, «түңәрәк өҫтәл»дәрҙә яҙыусылар һәм партия хеҙмәткәре менән халыҡҡа ил ҡаршыһындағы бурыстар анлатылған осрашыуҙар, төрлө лекциялар ойоштороla. Бындай саралар йәмәғәтселеккә шул тиклем оҡшай – Мәрйәм Йыһангирова етәкләгән коллектив исеменә йөҙәрләгән рәхмәт хаттары яуа. Мәҫәлән, бер студент хатынан өҙөк килтерәйек: «Китапханала үҙемә ысын дуҫтар таптым, биш йыл Башҡорт дәүләт университетында уҡыу дәүерендә улар миңә китап биреп кенә ҡалманы, ә ысын кәңәшсе, яҡын дуҫ һәм ярҙамсыма әйләнде. Рәхмәт һеҙгә!»

Был хаттың авторы – хаҡлы ялдағы элекке уҡытыусы: «Мәғариф йорто китапханаһының ауыр йөгөн егелеп тартыусы Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы шул тиклем ҙур эштәр башҡара, барыһына ла нисек өлгөрөүенә һоҡланабыҙ ҙа, аптырайбыҙ ҙа. Ул үҙе артынан башҡаларҙы эйәртә, үҙ ялҡыны менән башҡаларҙы ҡабындыра белә. Китапханаға өйөбөҙгә ҡайтҡан кеүек киләбеҙ, рәхмәттәр яуһын һеҙгә!»

Һуғыш осоро михнәттәрен үҙ елкәһендә татыған кеше булараҡ, Мәрйәм Йыһангирова тыныслыҡты юғары баһалап китапхана эшендә быға ҙур иғтибар бирҙе. Ғәҙәттә, һуғыш алыҫайған һайын, ул турала 9 май йәки 22 июндә генә хәтергә

төшөрөргә өйрәнеп киттек. Еңеү көнөн иҫтәлекле датала ғына түгел, көндәлек тормошта ла хәтерҙән сығарырға ярамай. Мәрйәм апай шәхсән «һуғыш» һәм «тыныслыҡ» төшөнсәләренә үтә лә етди ҡараған етәксе булды: китап уҡыусыларға, айырыуса йәштәргә патриотик тәрбиә биреүҙе бурысы һананы. Бының өсөн яугир яҙыусылар менән осрашыуҙар, викториналар, китап уҡыу конференциялары ойоштора ине. Ҡәләм оҫталары ул етәкләгән китапхананың иң ҡәҙерле ҡунаҡтары булды. Улар араһында Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим, Ғилемдар Рамазанов, Ғабдулла Байбурин, Яҡуп Ҡолмой, Әнүәр Бикчәнтәев, Тимер Арыҫлан, әҙәби кисәләрҙе йыр-моң менән биҙәүсе Илфаҡ Смаҡов, Зәки Мәхмүтов, композиторҙар Зәбих Мамалимов, Хөсәйен Әхмәтов, артистар Хөсәйен Ҡудашев, Арыҫлан Мөбәрәков, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев һ.б. бар. Фронт йыльяҙмаларын тереләргә еткереү маҡсатында китапханала Константин Симоновтың «Тереләр һәм үлеләр» китабы буйынса конференция ойошторола. Башҡорт дәүләт университеты һәм Башҡорт дәүләт педагогия институты уҡытыусылары һәм студенттары ҡатнашҡан был сара китап уҡыусылар араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уята.

Үҙенең сығышында Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы үҙ ғаиләһенән дә миҫал килтерә. Ҡолмөхәмәтовтар ғаиләһенән генә Бөйөк Ватан һуғышында биш кеше ҡатнаша: Фәтҡулла менән Хисмәтулла, Рәхмәтулла, Ғәйфулла, Мотиғулла. Фәтҡулланан башҡалары, яраланып булһа ла, имен-аман әйләнеп ҡайта, ә Фәтҡулла Ҡолмөхәмәтов алыҫ Украинала Днепрҙы кискәндә батырҙарса һәләк була. Башта ул хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә йөрөй, ләкин һуғыш тамамланғас, Рәхмәтулла менән Яҡуп Ҡолмөхәмәтовтар уның ҡәберен эҙләп таба. Туғандарының ҡәберенә «Немец фашистарына ҡаршы барған аяуһыҙ һуғышта Башҡортостан егете батырҙарса алышты» тигән яҙыуҙы уҡығас, шатлыҡтарының сиге булмай! Улар туғандарына бер ус Украина тупрағы алып ҡайтып тарата, Башҡортостан тупрағын иһә Фәтҡулланың ҡәберенә алып барып һала.

Мәрйәм апай китапханала фронтовиктар менән генә түгел, еңеү хаҡына завод-фабрикаларҙа көндө төнгә ялғап, аслы-туҡлы эшләгән ябай эшселәр, иген иккән ауыл хеҙмәтсәндәре, йәғни еңеүгә үҙ өлөшөн индергән тыл батырҙары менән дә осрашыуҙар ойоштора. Шундайҙарҙың береһе – Өфө ҡалаһының элекке 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһының хеҙмәт алдынғыһы, «Почетлы тегенсе» Гөлйөҙөм Мостаева. Фашист яуы хаҡындағы иҫтәлектәргә бирелгәндә, уның күҙҙәренән йәш эркелә:

– Ул ҡәһәрле һуғышты кем генә онотор икән? Һуғыш башланғандың икенсе көнөнә үк атайымды фронтҡа алдылар, әсәйем көнө-төнө эштә, ә мин донъя көтөп өйҙә ҡалам... Донъя көтөп тигәндән, ололарҙың ҡайтыуына ашарға бешереү, иҙән-кер йыуыу, өй таҙартыу, тегеү-ямау, бәйләү-иләү һәм башҡа эштәр – барыһы ла минең өҫтә, – тип һөйләй хеҙмәт ветераны. – Уҡырға һигеҙ йәш тулғас ҡына төштөм. Мәктәпте хәрби госпиталгә әйләндергәйнеләр, шуға уҡыу өсөн махсус мәктәп булманы. Ул йылдарҙа кешеләр бер-береһенә мәрхәмәтле, ярҙамсыл була белде: бер апай, исемен хәтерләмәйем дә инде, өйөндәге бер бүлмәһендә класс ойошторорға ризалашты, мин шунда уҡыным. Һуңынан мәктәп ҡала психиатрия дауаханаһы бинаһына күсте. Яралы һалдаттарға концерттар әҙерләп күрһәттек. Аслы-туҡлы уҡыһаҡ та, шулай һалдаттарҙың нисек тә күңелен күтәрергә тырышҡан булабыҙ. Ә бит беҙ ул ваҡытта уйнап ҡына туймаҫлыҡ бала инек! Беҙ, һуғыш быуыны балалары, иртә өлкәнәйҙек шул, бала ғына көйөбөҙгә үлем сигендә ятҡан яралыларҙың һауығыуына шатланыуыбыҙ – үҙе үк иртә өлкәнәйеүебеҙҙең билдәһе булған. Концерт номерҙары яралыларға оҡшап, ҡул сапһалар, эй, ҡыуанған булабыҙ! Ә инде һауығып аяҡҡа баҫһа, беҙҙең

менән ҡосаҡлашып хушлашып, ҡабаттан фронтҡа китһә, шатлыҡтың сиге булмай. Эй, сабыйлыҡ, шул ваҡытта шатланғандарҙы ғүмерҙә онотаһым юҡ! Мин бик иртә кеше ҡыуандырыуҙан, кешегә игелек эшләп шатландырыуҙан да яҡшыраҡ нәмә юҡлығын аңлап үҫтем. Бер-береңә мәрхәмәтле, ярҙамсыл булыуға, башҡаларҙың хәленә инә белеү, мохтаждарға ярҙам итә белеү кеүек кешелеклелек сифаттарына һуғыш өйрәтте.

Уҡыусы йәштәр менән осрашыуҙарҙа М. Йыһангирова үҙе лә һуғыш йылдары иҫтәлектәре менән уртаҡлаша. 1942 йылда ул етенсе класты тамамлап, эшкә сыға.

– Бәхеткә күрә, барыбыҙ ҙа комсомол-йәштәр бригадаһына эләктек. Исеме хәтерҙә ҡалмаған инде, бригадирыбыҙ Курбатова ине. Уға ни бары 25 йәш булыуға ҡарамаҫтан, беҙ уны өлкән күрә торғайныҡ, – тип хәтерләй ине Мәрйәм апай. – Аҙаҡ бик тиҙ яҡынайып киттек, йәш айырмаһы ла юғалды. Эй, күп эшләй торғайныҡ. Ул тиклем көс-энергияны ҡайҙан алдыҡ икән? Күрәһең, йәшлек менән һиҙмәгәнбеҙҙер инде, көндөҙ эшләп арып ҡайтһаҡ та, аҙыраҡ ял итеп алабыҙ ҙа төнгө сменаға йүгерәбеҙ. Ләкин төнгөлә ифрат арыта, йоҡо баҫа. Ундай ваҡыттарҙа өлкәндәр ярҙамға килә, үҙҙәре эшләп, беҙҙе аҙыраҡ йоҡлатып ала. Заводта эшләгәндә бер генә мәртәбә лә ял иткәнде хәтерләмәйем, йә цехты тәртипкә килтерәбеҙ, йә станцияға йөк бушатырға йөрөйбөҙ. Эшһеҙ тороу оят һынала ине, ял итеүҙе аҙаҡҡа ҡалдырып килдек, уға ваҡыт та булманы.

...Бер ваҡыт иртән заводҡа килһәм, митинг бара. Сығыш яһаусы партия вәкиле Ленинградтың блокаданан азат ителеүе хаҡында һөйләне. Быны ишетеп халыҡ шул тиклем шатланды, беҙ ҙә үҙебеҙҙе шул тиклем бәхетле тойҙоҡ. Бер-беребеҙҙе ҡосаҡлап илашабыҙ, ҡотлашабыҙ! Совет ғәскәрҙәренең еңеүен ишетеү барыбыҙға ла көслө тәьҫир итте: митингынан һуң комсомолға алыуҙы һорап ғаризалар тапшырҙыҡ. Барыбыҙ ҙа әле һуғыш дауам итеүен, һуғыштан һуң да илдәге емереклектәрҙе төҙәтеү, ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыу, завод-фабрикалар төҙөүгә эшсе ҡулдар кәрәк буласағын анлай инек. Тимәк, һынауҙар дауам итә, ауырлыҡтарҙы еңеп сығаһы бар, ә Тыуған ил йәне-тәне менән бирелгән, тырыш егеттәр һәм ҡыҙҙарға мохтаж, ҡыҫҡаһы, файҙалы кешеләр булғыбыҙ килде беҙҙең...

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы фиҙакәр хеҙмәте өсөн Мәрйәм апай «За доблестный труд в 1941–1945 годы», Бөйөк Еңеүҙең 30, 50, 60, 65 йыллыҡ юбилейҙарына арналған миҙалдарына лайыҡ була, «Ветеран Великой Отечественной войны» тигән танытма ала. Тыныс тормоштағы фиҙакәр хеҙмәтен дә онотмай Тыуған ил: намыҫлы эше өсөн Хеҙмәт ветераны исеме бирелә, совет һәм профсоюз юғары ойошмаларының ун биштән ашыу Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнә.

***

Совет кешеһенең әхлаҡи ҡиммәттәре кеүек темалар менән бергә, китапханала ата-әсәләр өсөн бала тәрбиәләүгә бәйле төрлө саралар ойошторолоп, был йорт ата-әсәләрҙең дә икенсе тыуған йортона әүерелә. Бындай сараларҙы ойошторғанда Мәрйәм Йыһангирова башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәренә таяна: ата-әсәләр өсөн яҙыусылар Рафаэль Сафин, Яҡуп Ҡолмой, Зәйнәб Биишева, Назар Нәжми, Ҡадир Даян, Әнүәр Бикчәнтәев, Шәриф Биҡкол, Ибраһим Абдуллин, Ғилемдар Рамазановтарҙың китаптары буйынса әҙәби кисәләр, осрашыуҙар үтә. Яҙыусыларҙың әҫәрҙәре аша бирелгән тәрбиә дәрестәренең отошло килеп сығыуына ата-әсәләрҙең тере яҙыусы менән күҙгә-күҙ осрашып һөйләшеп, әңгәмәләшеүе лә йоғонто яһай. Шағир һүҙе йөрәгенә барып еткән ата-әсәләр, Мәрйәм

апай әйтеүенсә, ата-әсәләрҙе китап уҡырға өйрәтеүҙә ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә: осрашыу артынса улар башҡорт әҙиптәренең әҫәрҙәре менән танышырға ашыға. Һөҙөмтәлә китапхана уҡыусылары ла арта.

Яҙыусылар, композиторҙар, артистар, дәүләт һәм партия эшмәкәрҙәре менән осрашыуҙарҙан тыш, М. Йыһангирова Мәскәү, күрше өлкәләр һәм туғандаш республикаларҙан да ҡунаҡтар саҡыра. Китапхананың лекторий залында Башҡортостан хөкүмәте хеҙмәткәрҙәре, ҡала Советы депутаттары һәм делегаттар, баш ҡала һәм Өфө ҡала етәкселәре сығыш яһай. Улар ил алдындағы бурыстар, киләсәккә маҡсаттар хаҡында еткерә. Тыуған илебеҙҙең халыҡ-ара эшмәкәрлеге хаҡында һөйләй. Бындай саралар күпләп Луначарский паркында, ҡаланың мәҙәниәт һарайҙары һәм кинотетарҙарында йыш үткәрелә һәм байрамса төҫ ала.

Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы эшләгән йылдарҙа Мәғариф хеҙмәткәрҙәре китапханаһында лекциялар, йәш быуынды патриотик рухта тәрбиәләүҙә күп эштәр башҡарылып, төрлө мәҙәни саралар үткәрелде. Мәғариф йортоноң ишеге китап һөйөүсе уҡытыусылар, студенттар, юғары уҡыу йорттары, техникум, училище педагогтары, ситтән тороп белем алыусылар, мәктәп уҡыусылары, пенсионерҙар өсөн һәр саҡ асыҡ булды. Ниндәй генә темаға материал һорап килмәһендәр, уларҙың үтенесе тиҙ арала ҡәнәғәтләндерелде, йәшенә һәм дәрәжәһенә ҡарамай, китапханасылар һәр уҡыусыны яҡты йөҙ, йылы һүҙ менән ҡаршы алды. 70-80-се йылдарҙа Мәғариф йорто китапханаһында 100 меңдән ашыу китап иҫәпләнә, ә китап уҡыусылар 10 меңдән ашып китә. М. Йыһангированың тырышлығы менән, ҙур булмаған коллектив – Мәғариф хеҙмәткәрҙәре китапханаһы республикала иң алдынғылар рәтенә сыға. Уның тырыш хеҙмәтен Башҡортостан хөкүмәте лайыҡлы баһалай: Мәрйәм Йыһангирова республика китапханасылары араһында беренсе булып Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Быларҙан тыш, Мәрйәм апай йәмәғәтселек эштәренең дә башында тора, коллективтың партия ойошмаһын етәкләй, Профсоюздар өлкә комитеты ағзаһы була. Ул йылдарҙа Мәғариф йорто китапханаһы Өфө һәм республиканың барлыҡ уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй: мәҫәлән, Башҡорт дәүләт университетының педагогика кафедраһы менән элемтәлә була, вуз уҡытыусылары менән даими рәүештә осрашып торалар, уҡытыусылар өсөн нәшер ителгән яңы китаптарға бергәләп анализ яһайҙар.

***

Ата-әсәләрҙең бала тәрбиәләүҙәге белемдәрен арттырыу маҡсатында ла китапханала күп эштәр башҡарыла: «Уҡытыусы образы нәфис әҙәбиәттә», «Йәш быуынды тәрбиәләүҙә уҡытыусының урыны», «Уҡытыусы – киләсәк тәрбиәсеһе», «Уҡытыусының хәҙерге роле», «Ата-әсәнең бала тәрбиәләүҙәге яуаплылығы» кеүек темаларға вуз уҡытыусылары, республиканың билдәле шәхестәре менән китап уҡыусылар конференциялары ойошторола.

Мәғариф йортонда үткән иҫтәлекле осрашыуҙарға Мәрйәм апай күп тапҡырҙар ике туған ҡустыһы, Мәскәү Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институты студенты Азамат Ҡолмөхәмәтовты ла саҡырҙы. Студенттар менән осрашыуҙарға йәштәр күп килә, улар Мәскәүҙең абруйлы уҡыу йортонда белем алыусы Өфө егетенә күп һорауҙар бирә, фекер алыша, тормошо менән ҡыҙыҡһына.

...Мәктәп йәшенә тиклем үк Азамат зирәклеге менән айырылып тора, атаәсәһе уға ҙур яҙмыш юрай. 60-сы йылдарҙа атаһы Рәхмәтулла Ҡолмөхәмәтов (атайымдың бер туған ағаһы) уны Өфөнөң Ленин районындағы 91-се мәктәбенә инглиз класына уҡырға бирә. 1936 йылда уҡ асылған был мәктәптең үҙ

традициялары була, ҡалала «иң яҡшы мәктәп» исемен йөрөтә. Меңгә яҡын бала белем алған был мәктәптә бөгөн дә элекке традициялар дауам итә, уға гимназия статусы бирелгән. Заманында уны Башҡортостандың бик ҙур шәхестәре тамамлай, араларында билдәле яҙыусылар, табип, уҡытыусы, ғалим, бейеүсе, артист, журналист, дәүләт етәкселәре бар. Гимназияла уларҙың тормошо һәм эшмәкәрлегенә арналған музей эшләй: унда Азамат Ҡолмөхәмәтов хаҡында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар. 91-се мәктәпте Азамат алтын миҙалға тамамлап, Мәскәүҙең Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр дәүләт институтына уҡырға инә һәм 1976 йылда уны ла ҡыҙыл дипломға тамамлай. Егетте Сит ил эштәре министрлығына эшкә алалар. Бөгөн Азамат Рәхмәтулла улы ғәрәп илдәре буйынса ҙур тәжрибә туплаған, донъя кимәлендә билдәле илсе-дипломат, I класлы кәңәшсе. Күп йылдар Сауд Ғәрәбстаны, Египет, Иордания, Кувейт илдәрендә Рәсәй Федерацияһының ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе, Рәсәй федерацияһы Сит ил эштәре министрлығының Яҡын Көнсығыш һәм Төньяҡ Африка илдәре буйынса Департамент начальнигы урынбаҫары булып эшләне, бөгөн иһә Ер шарының иң ҡыҙыу нөктәһенә әүерелгән Сирияла РФ-ның ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе вазифаһын башҡара. Француз, инглиз, ғәрәп теле һәм уның бөтә диалекттарында яҡшы һөйләшә, сит илдә йәшәһә лә, туған телен онотмай. Сәләмәт тормош алып бара, спорт менән шөғөлләнә, башҡорт йырҙарын, ҡурай ярата. Мәғариф йортонда үткәрелгән осрашыуҙарҙа ул үҙе хаҡында байтаҡ ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирә, өлгөлө ғаилә башлығы булараҡ, бала тәрбиәләү серҙәре менән дә уртаҡлаша. Бөгөн Светлана һәм Азамат Ҡолмөхәмәтовтар ғаиләһендә ике ҡыҙ тәрбиәләнә: өлкәне атаһы юлын һайланы: МГИМО-ла белем ала, икенсеһе әле мәктәптә уҡый, икеһе лә спорт ярата, бер нисә сит телдә һөйләшәләр, йыл да теләп Башҡортостанға ҡунаҡҡа ҡайталар.

Ҡырҡ йыллап китап уҡыусылар менән эшләү дәүерендә Мәрйәм апайыбыҙ китапхана эшен уҡыусыны мөмкин тиклем яҡшыраҡ хеҙмәтләндереүгә йүнәлтә, берҙәм, эшһөйәр коллектив туплай, уның менән үҙ эшен яратып башҡарған, китап ятраҡан кешеләр эшләй. Барыһы ла – китапхана эшен мөкиббән китеп яратҡан, китаптан башҡа тормошон күҙ алдына килтерә алмаған кешеләр. «Китап – мәңгелек, – ти Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы, – әлләниндәй фәнни-техник прогресс, компьютерҙар уйлап тапмаһындар, китап барыбер түрҙән төшмәйәсәк!» Уның үҙенең дә ҡулынан мәңге китабы төшмәне, Башҡортостан яҙыусыларының яңы нәшер ителгән әҫәрҙәрен уҡып-танышып барҙы.

Эшкә байрамға барған кеүек йыйынам! – тип яуаплағайны бер әңгәмәлә Мәрйәм апай «Эшегеҙҙе ятратаһығыҙмы? тигән һорауыма.

– Китапханаға барып инеүем була, арыу-талыуҙарым онотола. Эшемде шул тиклем яратам, яратҡан һөнәремде һайлауым менән бик бәхетлемен. Үҙ һөнәрең буйынса эшләү – ҙур бәхет ул!»

Мәғариф йортона кемдер яңы китап эҙләп, кемдер яҙыусылар менән осрашыуға өмөт итеп, кемдер былай ғына һөйләшер-кәңәшләшер өсөн килә. Мәрйәм Йыһангирова барыһына ла йылы һүҙен йәлләмәй, үтенес-һорауҙарын ҡәнәғәтләндерергә тырыша. Намыҫлы, егәрле, саф күңелле булғаны өсөн өфөләр, хеҙмәттәштәре, яҙыусылар, журналистар араһында хөрмәт ҡаҙана. «Иң яҡшы китапхана» исеме өсөн ҡала, республика, ил кимәлендәге смотр-конкурстарҙа ҡатнаша. Шулай ҙа уның иң яратып башҡарған эше, моғайын да, яңы китабы сыҡҡан яҙыусылар һәм шағирҙар менән осрашыу ойоштороу булғандыр. Элекке ваҡытта әҙиптәрҙең һәр һүҙе, әҫәре халыҡҡа бик тиҙ барып етә торғайны. Улар менән осрашыуҙы йәмәғәтселек көтөп алды, ҡәҙерен белделәр.

Сираттағы бер осрашыуҙа ҡыҙыҡлы ваҡиға була. Яҙыусы Әнүәр Бикчәнтәевтың «Нисә йәш һинә, комиссар?» исемле китабы һатыуға сығарылғас, Мәрйәм апай автор менән осрашыу ойоштора. Һуңынан яҙыусыға һүҙ бирелгәс, залда бер ир азаматы тороп баҫа ла, ҡулдарын йәйеп, яҙыусыға табан ыңғайлай. Әнүәр Бикчәнтәев юғалып ҡала: «Был ни хәл? Кем ул? Нинә килә?» Һуңынан асыҡланыуынса, был ир яҙыусы менән бергә иңгә-иң терәп һуғышҡан яҡташ яугир булып сыға. Сирек быуат күрешмәгән ике һалдатты, китап осраштыра!

***

Хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң да М. Йыһангирова китапханаһынан айырылмай, Благоев урамындағы ҡала китапханаһында эшләүен дауам итә. Бында ла ул элек нисек эшләһә, шулай дауам итә. 1975 йылда илдә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 30 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек бара ине. Был ҙур ваҡиғаға Благоев урамындағы ҡала китапханаһы ла үҙ өлөшөн индерҙе. Тарихи ваҡиғаны билдәләүгә әҙерлек барған көндәрҙә бер килгәнемдә Мәрйәм апай ярҙам һораны:

– Был бит оло байрам, туғаным, шуны матур итеп ойошторорға ине! Йәштәрҙең сығыш яһауы кәрәк булыр. Бәлки, йәштәр исеменән үҙең сығыш яһарһың? – ти. Ризалаштым. – Иптәштәреңде лә алып кил, оло яҙыусылар килә, Яҡуп бабайың да килә. Яҙыусыларҙың китаптарын һатырбыҙ, килеүселәр автографтар алыр, – тип тә өҫтәне. Бер аҙна тигәндә үҙемдең «Башҡортостандың фронтовик-яҙыусылары» тигән сығышымды алып килеп күрһәттем. Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы яҙмамды бик оҡшатты. Тағы ла бер тема өҫтәп биреп оҙатты, «Әҙәбиәтте ятраҡан берәй иптәшеңә бирерһең», – тине. Ул сығышты филология факультетының өсөнсө курсында уҡыған Күгәрсен районы ҡыҙы Ғәлиә Мырҙабаеваға тапшырҙым. Ул шатланып риза булды.

Бына, ниһайәт, көткән көн дә етте. Осрашыуға Ғилемдар Рамазанов, Тимер Арыҫлан, Хәким Ғиләжев, Яҡуп Ҡолмой, Ибраһим Абдуллин, Ғабдулла Байбуриндар килгәйне. Хатта КПСС Өлкә комитетынан да вәкил бар. Студенттар араһында кемдәр генә юҡ: университет, авиация, ауыл хужалығы, медицина, педагогия институттарынан да килгәндәр! Әҙәбиәтте яраҡан, шағир һүҙен һулаған, шиғриәткә сарсаған йәштәр йыйылғайны китапханаға. Осрашыуға әҙерлек барышында БДУ-ның сит телдәр, физика, химия, математика, биология, география факультеттары студенттарын да саҡырып иғландар яҙып элгәйнем, баҫып торорлоҡ та урын булманы! Мәрйәм апай баянсы һәм композитор Зәбих Мамалимов, Илфаҡ Смаҡовты ла саҡырған икән, йырҙары менән улар кисәгә йәм өҫтәне. Илфаҡ Смаҡов яугир яҙыусыларҙың йырҙарын йырлап ишеттергәс, кисә ысын байрам төҫөн алды. Шәп килеп сыҡты яҙыусылар менән осрашыу! Яҙыусыларға сәскәләр тотторҙоҡ, фотоға төштөк, автографтар алдыҡ. Хәким Ғиләжев, Ғилемдар Рамазанов, Яҡуп Ҡолмой, Тимер Арыҫлан яҙған автографлы китаптар әле лә архивымда ҡәҙерләп һаҡлана. Кисә үтеп киткәс тә, 1-се ятаҡтың подвалындағы уҡыу залына төшөп ултырып мәҡәлә яҙҙым, ул «Ленинсы» (хәҙерге «Йәшлек») гәзитендә фотолар менән баҫылып сыҡты. Был фотоларҙы вафаты алдынан Мәрйәм апай күрергә теләне, фотоательела эшләтеп алып барып биргәс ҡыуанғаны әле лә күҙ алдымда. Бәлки, элек эшләп-эшләп тә фотолар аҙ булғанға күрергә теләгәндер? Баҫалҡылығы арҡаһында ул һүрәткә төшөргә яратмай ине.

Ҡала китапханаһында ла Мәрйәм Йыһангирова яҙыусылар менән генә түгел, дәүләт эшмәкәрҙәре, геологтар, артистар, композиторҙар, йырсылар, ғалимдар менән дә ҡыҙыҡлы осрашыуҙар, әңгәмәләр, шиғыр кисәләре, зирәктәр ярыштары ойошторҙо. Китапхана ҡайнап тора торғайны! Нимәгә генә тотонмаһын,

ул үҙен яҡшы ойоштороусы итеп танытты. Апайҙың юғары аңы, тәрбиәлелеге, сит ил, урыҫ, башҡорт һәм туғандаш халыҡтар әҙәбиәтен яҡшы белеүе әҙәби кисәләрҙе йөкмәткеле, ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс ойоштора ине. Шунда ҡатнашып йөрөгән кеше булараҡ, башҡорт яҙыусыһының яңы китабы сығыу менән М. Йыһангироваға алып барып бирә торғайным. Башҡорт әҙиптәренең китабы сауҙаға сығып, элекке «Знание» магазинына ҡуйылыу менән, Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы автор менән таныша, әңгәмәләшә, артабан уның менән «Яңы китап сыҡты» тигән осрашыуға әҙерләнә. Ярҙамсыһы булараҡ, мин студенттар менән эшләйем, хатта Башҡортостан телевидениеһының балалар редакцияһына йәки башҡа бүлеккә 15-20 минутлыҡ тапшырыуҙар ҙа әҙерләйем. Ундай тапшырыуҙар ҙа «Яңы китап сыҡты» тип исемләнә торғайны.

– Бынан тыш, юбилей көндәрендә, байрамдарҙа, айырым яҙыусылар ижадына арнап, махсус мөйөштәр булдырыуҙа ла ярҙамлаштым. Олоһо һәм кесеһе менән уртаҡ тел таба, йылмайып һөйләшә, әңгәмәсеһенә ихтирамлы булған китапханасыларҙан эшкә, улар кеүек матур кеше булырға өйрәндем. Минеңсә, Мәрйәм апай етәкләгән коллективта эшләгән был кешеләрҙең ошо матур сифаттары, кешелеклелеге өсөн кеше өҙөлмәгәндер, тим. Юғиһә ҡайһы бер китапханалар бөтөнләй буш, ә хеҙмәткәрҙәре эшһеҙ интегә. Мәрйәм Хисмәтовна, директор булыуына ҡарамаҫтан, барыһына ла ваҡыт таба, тыңлай, үтенестәрен ҡәнәғәтләндерә, уны хатта берәү ҙә китапхана мөдире тип күҙ алдына баҫтырмай.

Мәрйәм апайҙың архивында яҙыусылар бүләк иткән байтаҡ китап бар ине. Ҡайһы берҙәрен ул миңә бүләк итте, күбеһен үҙе иҫән сағында уҡ Ҡанаҡай урта мәктәбенә тапшырҙы. Әйткәндәй, был матур традиция шағир Яҡуп Ҡолмойҙан килә. Хәҙер уны шағирҙың уландары – Өфө авиация университеты доценты, физика-математика фәндәре кандидаты, Марат һәм уның хаҡлы ялдағы ҡустыһы Булат Ҡолмөхәмәтовтар дауам итә, ауыл менән бәйләнеште өҙмәй, китаптар ғына түгел, компьютер ҙа бүләк иттеләр. Мәрйәм апайҙың ҡыҙы Наилә лә мәктәпкә компьютер тапшырҙы. Был изге традицияны хәҙер мин дә дауам итәм, автографлы китаптарымды Өфө ҡала мәктәптәренең башҡорт теле уҡытыусыларына, башҡорт теле уҡытылған мәктәп китапханаларына тапшырҙым.

М. Йыһангирова етәкләгән китапханала төрлө йылдарҙа башҡорт композиторҙары: Тәлғәт Шәрипов, Заһир Исмәғилев, Рәүеф Мортазин, Хөсәйен Әхмәтовтар, йырсылар: Мәғәфүр Хисмәтуллин, Зәки Мәхмүтов, Баныу Вәлиева, Хәбир Ғәлимов, рәссам – Ғәлиә Имашева, актер Арыҫлан Мөбәрәков кеүек мәшһүр талант эйәләре, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актерҙары, телевидение һәм радио хеҙмәткәрҙәре менән осрашыуҙар ойоштоform. Рухи аҙыҡ биргән осрашыуҙарҙан халыҡ ҡәнәғәт таралыша, матурлыҡ донъяһына тартыла. Бындай осрашыуҙарҙан яҙыусылар, шағирҙар, сәнғәт һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре лә йәненә йәм-тәм алып китә. Был турала уларҙың М. Йыһангирова исеменә яҙған автографтары һөйләй. Бына шуларҙың бер нисәһе: «Хөрмәтле Мәрйәм һенлем! Мең йәшә, ҙурланығыҙ, ижадым менән ҡыҙыҡһыныуығыҙ, халыҡ менән күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшеү ойоштороуығыҙ өсөн ҙур рәхмәт! Әнүәр Бикчәнтәев, 1967 йыл, 14 апрель». «Мәрйәм туғаным, телебеҙҙе ҙурлауың өсөн ҙур рәхмәт! Башҡорт әҙәбиәтен яратыуығыҙ, иң мөһиме – китап яратыуығыҙ өсөн ихтирамымды белдерәм! Осрашыуҙан рухи аҙыҡ алып китәм һәм ижади уныштар теләйем! Хөрмәт менән Мостай Кәрим. 1975 йыл, 5 май».

Яҡуп Ҡолмойҙоң да һеңлеһенә бүләк иткән китаптары байтаҡ. Сәсән телле шағир йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәрен шиғыр аша белдергән. «Тәбиғәт ҡыҙы Мәрйәмгә» тип аталған был шиғыр Я. Ҡолмойҙоң «Яҡты таңдар» исемле йыйынтығына ингән:

*Күк ер өҫтөн нурға урап,*
*Көнө буйы балҡып тормай.*
*Кеше лә бит, шул күк һымаҡ,*
*Берсә көлә, берсә илай.*
*Тик һин күккә оҡшаш түгел,*
*Һәр саҡ яна саф күҙ нурың.*
*Өшөгәндә керһеҙ күнел,*
*Йылы бирә һинең ҡулың.*
*Кескәй ҡош та, һөйөнгәндәй,*
*Әсәһенең йырын көйләй.*
*Һинең телең, әсәйеңдәй,*
*Йөрәгеңдең серен һөйләй.*
*Тандар ҙа бит бер төҫ атмай,*
*Ҡайһы саҡта болот ҡаплай.*
*Тик һинең йөҙ, аяҙ таңдай,*
*Тик үҙеңдә бәхет һаҡлай.*
*Ташты тишеп сыҡҡан инеш*
*Тамсы һыуҙан тулҡын була.*
*Һинең йөрәк хас шул инеш,*
*Ауырлыҡтың көсөн тоя.*
*Һиндә тәбиғәттең үҙен,*
*Тәбиғәттә Һине күрҙем.*
*Йөҙөң, телең, күҙең, үҙең, –*
*Бер биҙәге тыуған ерҙең.*

***

Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы яҡшы тәрбиәсе, яҡшы әсәй ҙә булды, ҡыҙы Наиләне кешелекле, тырыш итеп тәрбиәләне. Уны «күҙ нурым», «ҡояшым» тип иркәләй ине. Ҡыҙы иһә әсәһенең ысын терәге булды. Наиләнең әсәһен матур итеп тәрбиәләүенә беҙ, бар туғандары, һоҡландыҡ! Ҡыҙы ярҙамынан башҡа Мәрйәм апай оҙаҡ йәшәй алыр инеме икән? Ул әсәһенә дуҫ та, терәк тә, әхирәт тә булды, уға оҡшап эшкә бөтмөр, маҡсатына ирешер егәрле булып үҫте. Наилә, атаһының һөнәрен дауам итеү маҡсатында, БДУ-ның география факультетына уҡырға инә. Ләкин үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, ҙур тырышлыҡ менән Өфөлә туристик фирма асырға керешә. Уның туризм өлкәһендә эшләүе лә атаһы кеүек илйорт, донъя күрергә ынтылыуынан килеп сыҡҡандыр, моғайын. Бөгөн Наилә Зәки ҡыҙы – «Телекомтур» туристик фирма директоры, эшлекле эшҡыуар, сит илдәргә командировкаларға йөрөй. Бөтөн Ер шарының бер мөйөшөнә осһа, иртәгә икенсе мөйөшөнә сығып китә, ҡайҙа барһа ла, таныш-дуҫтары күп. Былтыр мәҫәлән, Сауд Ғәрәбстанына яҡшы эшләгәне өсөн дәүләт кимәлендәге ҡунаҡҡа саҡырғайнылар. Барҙы, бүләктәр менән ҡайтты. Ул сығып киткәндә Мәрйәм апайҙы һеңлеләре Рәйсә, Рәмзиә ҡарап торҙо, улар бер ваҡытта ла апайҙарын яңғыҙ ҡалдырманы.

Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙына яҙмыш ҙур һынауҙар ҡуйҙы. Ләкин, ҡаты ауырыуына ҡармаҫтан, ул күңел матурлығын, кешеләргә йылы мөнәсәбәтен юғалтманы, ауырыуҙы сабыр кисерҙе. Һуңғы биш-алты йылда бөтөнләй аяҡҡа баҫа алмаһа ла, йәшәүҙән төңөлмәне, тормошто яратты, бәләкәй генә йылы һүҙгә лә, кескәй генә иғтибарға ла балаларса ҡыуана торған булды. Донъя хәлдәре менән телевизор аша хәбәрҙар булһа, туғандары, дуҫтары менән телефон аша бәйләнеш тотто. Үҙе ҡаты ауырыуына ҡарамаҫтан, ҡыҙы Наиләгә, яҡындарына, туғандарына кәңәштәр биреп, йылы һүҙгә мохтаждарға терәк булып йәшәне.

Барыбыҙға ла терәк, ғәҙеллек сығанағы һәм кәңәшсе булған, ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем тормошто яратҡан Мәрйәм апайыбыҙҙың үлгән хәбәрен ишетеүе барыбыҙға ла ифрат ауыр тәьҫир итте. Ауырыуҙың хәлен белешеп торҙом, «Башҡортостан», «Тамаша», «Башҡортостан панорамаһы», «Кызыл таң», «Ағиҙел» «Торатау», «Йәшлек» баҫмаларын алып килә торғайным. Һуңғы өс йылда «Башҡортостан» гәзитенә яҙҙырҙым. Ауырыуына ҡарамаҫтан, апайыбыҙ гәзит-журналдан айырылмаған, телевизор ҡарап, донъя яңылыҡтары менән танышып барған. Гәзиттә берәй мәҡәләм баҫылһа, шунда уҡ шылтыратып, һөйөнсөләй торғайны... Шул мәлдәрҙе һағынам.

***

Мәрйәм Йыһангированың башҡа һеңлеләре лә тормошта үҙ урынын тапты: Нурия Ҡазан дәүләт университетының медицина факультетын тамамлай, ҡыҙы ла ошо уҡыу йортонда белем ала, ейәнсәре Айгөл дә, ошо университеттың сит телдәр факультетын тамамлағандан һуң, АҠШ-та йәшәй. Рәйсә һеңлеһе, Өфө авиация институтын тамамлағандан һуң, «Гидравлика» ла эшләп, хаҡлы ялға сыҡты. Иң төпсөктәре Рәмзиә лә авиация институтын тамамлап, инженер булып эшләй. Өфөләге Ҡолмөхәмәтовтарҙың барыһы ла 39-сы гимназияла уҡый, авиация институтында юғары белем алып сыға. Шағир Яҡуп Ҡолмойҙоң ике ейәнсәре лә ошо уҡыу йортонда белем алды: өлкәне Айгөл бөгөн Германияла университетта уҡыта, техник фәндәр докторы, Айһылыу Вена (Австрия) университетында докторантурала уҡый.

Мәрйәм апай арабыҙҙан 86 йәшендә китеп барҙы. 1967 йылдың 22 февралендә СССР-ҙың Юғары Советы Президиумы ҡарары менән уға Башҡортостан китапханасылары араһында тәүге Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены, хаҡлы ялға киткәндә матур һүҙҙәр яҙылған «Рәхмәт хаты» тапшырылған.

«Уважаемая Марьям Хисматулловна! Руководство Башкирского областного совета профсоюзов и библиотечная общественность республики выражает Вам свою искреннюю благодарность за Ваш долголетний труд в должности заведующей библиотекой областного Дома работников просвещения. За годы Вашей работы библиотека преобразилась в подлинный информационно-библиографический центр для работников народного образования республики.

Уходя на заслуженный отдых Вы оставили о себе добрую память у благодарных читателей. Ваша преданность книге читателю, ваша увлеченность работой служат хорошим примером для работников профсоюзных библиотек республики. Желаем Вам счастья и здоровья!»

Мәҡәләм һуңында Башҡорт Республикаһы Мәҙәниәт министрлығына, Ишембай район-ҡала Советына һорауым бар. Халыҡ өсөн түккән көсөн баһалап, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, ябай китапханасы Йыһангирова Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы йәшәгән Өфөләге Зәки Вәлиди урамына, шундай шәхес биргән Ишембай районы Ҡанаҡай ауылындағы тыуған йортона иҫтәлекле таҡташтар ҡуйылһа, Мәрйәм апайҙың изге эшен мәңгеләштереү булыр ине. Шәхестәребеҙҙе беҙ, иҫәндәр ҡәҙерләмәһәк, киләсәктә үҙебеҙҙе ҡәҙерләрҙәрме? Йәш быуынды тәрбиәләүгә үҙ өлөшөн индергән гүзәл шәхес – Йыһангирова Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙының исеме онотолмаһын ине!

**Миләүшә ҠОЛМӨХӘМӘТОВА,**
**РФ һәм БР Журналистар берлеге ағзаһы.**

### X төрки халыҡтар шиғриәте фестивале

Төркиә һәм Ҡырғыҙстан яҙыусылар берлектәре, Ҡырғыҙстан – Төркиә Манас университеты тарафынан Ҡырғыҙстандың баш ҡалаһы Бишкәктә X төрки илдәре шиғриәте фестивале үткәрелде. Быға тиклем был саралар төрки халыҡтар йәшәгән Бурса, Конья, Анатолия, Ашхабад, Страсбург, Баҡы ҡалаларында, Ҡырымда уҙғарылған. Беҙҙең башҡорт яҙыусылары ла былдай сараларҙа элек-электән әүҙем ҡатнаша килгән. Был юлы Башҡортостандан шағирәләр Гөлназ Ҡотоева менән Гөлнара Хәлфетдинова әлеге шиғриәт фестивалендә ҡатнашыу бәхетенә ирешkте.

Шиғриәт фестивале Ҡырғыҙстан дәүләт филармонияһында тантаналы рәүештә асылды. Төрки илдәрҙән килгән шағирҙарҙы Төркиә Яҙыусылар берлеге рәйесе Ибраһим Яуыз, Ҡырғыҙстан Яҙыусылар берлеге рәйесе Чолпанбек Абыкеев һәм башҡа етәкселәр ҡотланы. Гөлназ Ҡотоева Ҡырғыҙстан яҙыусыларына Башҡортостандағы ҡәләмдәштәренән күп сәләмдәр еткереп, «Башҡорт шиғриәте антологияһы»н бүләк итте.

Икенсе көндө шиғри фестиваль Ҡырғыҙстан – Төркиә Манас университетының ултырыштар залында дауам итте. Был уҡыу йортонда Төркиә һәм Ҡырғыҙстан ғалимдары дәрес бирә. Университет 17 йыл элек булдырылған. Әлеге көндә унда 4600 студент белем ала. 4 тел: рус, ҡырғыҙ, инглиз, төрөк телдәре ентекле өйрәнелә.

Шиғри сығыштар Манасҡа, Намик Кемалға һәм Юныс Эмренға арналды. Ататөрк университеты докторы Ридван Чанымдың «Төрки шиғриәтенең үткәне һәм бөгөнгөһө» докладлы ла фестивалдә ҡатнашыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

Гөлназ Ҡотоева менән Гөлнара Хәлфетдинова башҡорт телендә шиғри күстәнәстәрен уҡып ишеттерҙе. Уларҙың сығыштары аша төрки илдәре шағирҙары башҡорт теленең аһәңле, яғымлы, шул уҡ ваҡытта аңлайышлы булыуын билдәләне.

Өсөнсө көндө фестивалдә ҡатнашыусылар таңдан тороп Ысыҡкүл буйына сәйәхәткә юлланды. Бөтә донъяға билдәле бөйөк яҙыусы Сыңғыҙ Айытматовтың һуңғы төйәген барып күреү ҙә программаға ингәйне.

Сталин репрессияһы арҡаһында бик күп билдәле кешеләр һәләк ителеп, ошо ергә алып килеп бер соҡорға күмелгән ерҙә, 1991 йылда, иҫтәлекле стелла ҡуйыла. Улар араһында Сыңғыҙ Айытматовтың да атаһы була. «Мине, үлгәс, атайым янына күмерһегеҙ», – тигән васятын тотоп, яҙыусыны ла ошо урынға ерләйҙәр. Сыңғыҙ Айытматовтың ҡәбере үрҙә, тау башында. Уның рухына бағышлап аят уҡылды.

Ысыҡкүл буйында асыҡ һауала төҙөлгән, әллә нисәмә гектарҙы

биләп торған, донъя мәҙәниәтен сағылдырған музей ҙа ҡунаҡтарҙың күңеленә хуш килде. Күл буйындағы ҡунаҡханала туҡталып шиғырҙар уҡыу, аралашыуҙар мәңгелек бер иҫтәлек булып хәтергә уйылды.

Фестивалде ябыу тантанаһында 60-тан ашыу ҡатнашыусының һәр ҡайһыһына исемдәре яҙылып, рәхмәт әйтелгән матур папкалар бүләк ителде. Шулай уҡ өс шағирға Намыҡ Кемал исемендәге бүләк тапшырылды.

Сәфәрҙән ҡунаҡсыл Ҡырғыҙстанға, ошондай матур байрамды үткәреүгә шарттар булдырғаны һәм ҡунаҡтарҙы йылы ҡабул иткәндәре өсөн ҡырғыҙ дуҫтарға сикһеҙ рәхмәт тойғоһо менән, йылы тәьҫораттар алып таралышты шағирҙар.

**Сыуашстанда**
**– Башҡортостан көндәре**

29 – 31 майҙа Сыуаш Республикаһында Башҡортостан мәҙәниәте көндәре уҙҙы. Сара 2012 йылда Башҡортостанда үткән Сыуаш көндәре сиктәрендә ике республика араһында дуҫлыҡ һәм теләктәшлек Килешеүенә ярашлы башланды. Тантананы Сыуашстан Республикаһының дәүләт опера һәм балет театрында тантаналы рәүештә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов һәм Сыуаш Республикаһы башлығы Михаил Игнатьев асты.

Кисен Башҡортостандың сәнғәт оҫталарының сағыу Гала-концерты булды. Уны Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, Сыуашстандың мәҙәниәт, милли һәм архив эштәре министры Вадим Ефимов асты. Концертта Өфөнән «Мираҫ» йыр һәм бейеү фольклор ансамбле, «Арғымаҡ» этно-рок төркөмө , Стәрлетамаҡ дәүләт филармонияһынан «Сәрби» сыуаш йыр ансамбле, Күмертауҙан «Контраст» бейеү ансамбле, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Йәмил Әбделмәнов, йырсылар Дилара Иҙрисова, Венера Юлгилдина, Салауат Мөхәмәтйәров, ҡурайсы Марсель Сәйетов һ.б. сығыш яһаны һәм уларҙың барыһы ла ҙур алҡыштарға күмелде.

Көндәр сиктәрендә Башҡортостан яҙыусылар делегацияһы Сыуашстандың милли китапханаһында урындағы әҙиптәр менән осрашты. Осрашыуға байтаҡ сыуаш әҙиптәре, китапхана хеҙмәткәрҙәре, уҡыусылар килгәйне. Ике яҡ өсөн дә файҙалы һәм эшлекле барған һөйләшеүҙә-аралашыуҙа БР Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Риф Тойғонов, яҙыусылар Әнисә Таһирова, Ғәлим Хисамов, Зәйтүнә Шәрипова, Әмир Әминев, Юрий Горюхин, Фәниә Ғәбиҙуллина ҡатнашһа, сыуаш әҙиптәре яғынан Сергей Павлов (идара рәйесе), халыҡ шағирҙары Порфирий Афанасьев, Юрий Семендер, Валерий Турғай һ.б. сығыш яһаны.

Был саралар ҙан тыш опера һәм балет театрында Башҡортостан рәссамдарының ижадынан торған художестволы, «Башҡорт халҡының материаль мәҙәниәте» тип аталған, Ә.-Зәки Вәлиди исемендәге милли китапхана, З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтенең китап, альбомдары, башҡа әсбәптәре күргәҙмәләре, «Башҡортостан – Евразия ынйыһы» тип исемләнгән фотокүргәҙмә эшләне. Константин Иванов исемендәге Сыуаш дәүләт (батшалыҡ) академия драма театры Мостай Кәримдең «Беҙҙең өйҙөң йәме» исемле повесы буйынса ҡуйылған драмаһын күрһәтте.

Башҡортостан мәҙәниәте көндәренә арналған тантаналар Сыуаш Республикаһының башҡа ҡалаларында һәм райондарында ла үтте.

### Өмөтлө ҡәләмдәр үҫә

Ғафури районында 13 йыл һуҙымында «Өмөтлө ҡәләм» бәйгеһе уҙғарыла килә, унда әҙәби ижад менән мауыҡҡан балалар ҡатнаша. Быйыл бәйгегә йомғаҡ яһау сараһы Яңғыҙҡайын урта мәктәбендә тантаналы шарттарҙа үтте, районды барлыҡ мәктәптәренән, һәләтле уҡыусыларын эйәртеп, уҡытыусылар йыйылды.

24 бала төрлө номинацияларҙа еңеп бүләкләнде. Уларға иҫтәлекле сувенирҙарҙы район ойошмалары һәм предприятиелары, шулай уҡ эшҡыуарҙары әҙерләгән.

Шиғырҙары иң юғары баһа алған өс өмөтлө ҡәләм эйәһе ошо бәйгене ойошторо ебәргән шағирә Гөлнур Яҡупованың аҡсалата премияларына һәм автографлы китаптарына лайыҡ булды.

Ижад бәйгеһендә 300-ҙән ашыу бала ҡатнашты.

Сараға даими иғтибар бүлеүсе «Йәншишмә» гәзите менән «Шоңҡар» журналының баш мөхәррирҙәре Мирсәйет Юнысов һәм Мөнир Ҡунафин килде, призадр тапшырҙы. «Ҡыҙыл таң», «Өмөт» гәзиттәренән дә журналистар булыуы байрамға мәртәбә өҫтәне.

### Зыңланы һуңғы ҡыңғырау

Быйылғы урта мәктәпте тамамлау алдынан булған һуңғы ҡыңғырауҙарҙа яҙыусылар ҙа әүҙем ҡатнашты. Өфөнөң Совет районына ҡараған 15-се мәктәбендә уҙған һуңғы ҡыңғырау айырыуса тулҡынландырғыс булды. Бында беренсе синыфтан башлап ун беренсе синыфты тамамлағансы һәйбәт уҡып сыҡҡан, Мәскәүҙә Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр академияһын яҡшы тамамлап, Йемен Республикаһында Рәсәй илселегенең III сәркәтибе булып эшләгәндә һәләк булған йәш дипломат Айҙар Тойғоновҡа мәктәп фойеһында таҡтаташ асыу тантанаһы уҙғарылды.

Унда БР мәғариф министры, Яҙыусылар берлеге ағзаһы Әлфис Ғаязов, Айҙарҙың атаһы, Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Риф Тойғонов, шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, Айҙарҙың элекке синыф етәксеһе Инга Шкупан, мәктәп директоры Ольга Чащинская һәм башҡа ҡунаҡтар сығыш яһаны.

Таҡтаташты асҡандан һуң Айҙар исеменә Тойғоновтар ғаиләһе булдырған премия 11-се «Б» синыфының алдынғы уҡыусыһы Әҙилә Хөсәйеноваға тапшырылды. Был премия артабан йыл да биреләсәк.

### Шиғриәт секцияһында

Башҡортостан Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияһында Дыуан районы Мәсәғүт ауылынан Рәйсә Бәҙретдинова, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Рәйлә Назарғолова һәм Стәрлебаш районы Ҡуғанаҡбаш ауылынан Фәрит Әхмәтовтың шиғри йыйынтыҡтары тикшерелде. Секция эшендә ҡатнашҡан әҙиптәр Тамара Искәндәриә, Әнисә Таһирова, Гөлназ Ҡотоева, Рәмил Йәнбәк һ.б. башлап яҙыусыларға теләктәрен, кәңәштәрен еткерҙе.

Рәйсә Бәҙретдинова менән Рәйлә Назарғолованың ҡулъяҙмалары, ҡабаттан әҙерләп тулыландырылғандан һуң, йәнә секция тикшереүенә ҡуйыласаҡ. Фәрит Әхмәтовтың «Берләм юл» исемле йыйынтығы иһә «Китап» нәшриәтенә тәҡдим ителде.

### Әҙипте хәтерләп

Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Бәпес ауыл мәҙәниәт йортонда ошо ауыл биләмәһенә ҡараған Ҡарлыманбаш ауылында тыуған күренекле башҡорт яҙыусыһы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәрит Иҫәнғоловтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе булды.

Кисәгә Өфөнән халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай, С. Юлаев исемендәге премия лауреаты, шағир Ирек Кинйәбулатов, БДУ профессоры, яҙыусы Тимерғәле Килмөхәмәтов, әҙиптең улы, тарих фәндәре кандидаты Таһир

Иҫәнғолов килгәйне. Уларҙың һәр береһе кисәлә әҙип хаҡында иҫтәлектәр менән сығыш яһаны.

Иҫке Бәпес ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Нурия Иштуғанова Ҡарлыманбашта буш торған элекке башланғыс мәктәп бинаһын Фәрит Иҫәнғолов музейы итеп ҡороу тәҡдиме менән сығыш яһаны. Фекер бер тауыштан хупланды.

Кисәне китапханасылар Гөлнур Хәсәнова менән Әлфиә Байдәүләтова бик йәнле алып барҙы. Урындағы артистар матур концерт күрһәтте.

### Атлы Яҡупҡа һәйкәл

Яҡуп Хәйрулла улы Ҡолмөхәмәтов (1918 – 1994) – Яҡуп Ҡолмойҙоң заманында егерме биш китабы донъя күрҙе, шағирға БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт, атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән маҡтаулы исемдәр бирелде. Уның күп йырҙары бөгөн дә популяр: «Былбылым», «Көтөүсе йыры», «Томбойоҡ бүләк итмә...», «Өфө вальсы», «Тыуған илем»...

Бөйөк Еңеүҙең 68 йыллығы алдынан Ишембай районының Ҡанаҡай ауылында яугир әҙипкә бюст асылды, уға алтынһыу хәрефтәр менән «Шағир Яҡуп Ҡолмойға, кавалерисҡа» тип яҙылған. Түшенә китап ҡыҫҡан мөләйем Шағир, гүйә, илгә имenлек, ғилемлек теләп, зәңгәр офоҡтарға баҡҡан...

Тантанала район хакимиәте башлығы Марат Ғайсин, шағирҙың улы Марат Ҡолмөхәмәтов, БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев, Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Риф Тойғонов, ауыл биләмәһе башлығы Гөлнара Кәримова, мәктәп директоры Әлфинур Латипова сығыш яһаны. Скверға йәшел үҫентеләр сәскәндән һуң, халыҡ Яҡуп Ҡолмойҙоң музейы менән танышты, артабан атаҡлы Хәйрулла баҡсаһына йүнәлде. Баҡтиһәң, һалдат Яҡуптың атаһы Хәйрулла уҙаман, ауыл ситендәге ҡалҡыуҙа кескәй яуға киткән ауылдаштарының һәр кеменә исемләп, өйәңкеләр ултыртҡан, хәҙер шулар олпат урмандай шаулап ултыра, имеш.

Осрашыуҙарҙа республикабыҙҙың халыҡ артисткаһы Суфия Ҡорбанғәлиева, прозаиктар Рәшит Низамов, Сабир Шәрипов, Яҡуп Ҡолмойҙоң ҡыҙы Зәйтүнә, улы Булат яҡты иҫтәлектәре менән уртаҡлашһа, күренекле шағирә Әнисә Таһирова иһә мәшһүр яҡташына арналған сонеттарын уҡып ишеттерҙе.

### Диңгеҙ гиҙгән ер улы

Әмир Сәлимгәрәй улы Гәрәев (1928 – 2008) башҡорт әҙәбиәтен үҙ темаһы – хәрби моряктар хаҡындағы китаптар менән байытҡан яҙыусы ине. Уның ябай ер кешеләре тормошон һүрәтләгән әҫәрҙәре лә байтаҡ, әүҙем журналист һәм тәржемәсе булғаны ла мәғлүм.

Түбәнге Әрметтә әҙиптең тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған күркәм саралар ойошторолдо. Йәмәғәтселек вәкилдәре яҙыусының ҡәберенә зыярат ҡылғас, уның тыуған йорто, ҡәрҙәштәре менән танышты.

Ауыл мәҙәниәт йортонда уҙған ҡәҙер һәм хәтер кисәһен Ишембай район хакимиәте башлығы урынбаҫары Гүзәл Шаһиева йөкмәткеле һүҙ менән асты, яҡташтары үҙенең данлы улын онотмай, тине. «Почет Билдәһе» ордены кавалеры, ғүмеренең ете йылын флотҡа, ун етеһен «Ағиҙел» журналына арнаған күренекле йәмәғәт эшмәкәре беҙҙең дә хәтерҙә, тип һөйләне «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Әмир Әминев. Әҙип хаҡындағы йылы иҫтәлектәре менән уның хәләл ефете, матбуғат ветераны Фәниә Гәрәева, ҡәләмдәштәре: шағирҙар Риф Мифтахов, Радик Хәкимйән, Зөфәр Вәлит, яҙыусы Сабир Шәрипов уртаҡлашты, ауыл ветерандары сығыш яһаны, нәфис һүҙ сағыу концерт номерҙары менән үрелеп барҙы.